К.Я. ЯЙЫҠБАЕВ

# МӘҒРИФӘТСЕ МӨҒӘЛЛИМДӘР, КҮРЕНЕКЛЕ УҠЫТЫУСЫЛАР ҺӘМ МӘҒАРИФ ЭШМӘКӘРҘӘРЕ

К.Я. ЯЙЫКБАЕВ

# МӘҒРИФӘТСЕ МӨҒӘЛЛИМДӘР, КҮРЕНЕКЛЕ УҠЫТЫУСЫЛАР ҺӘМ МӘҒАРИФ ЭШМӘКӘРҘӘРЕ

Тарихи-педагогик очерктар
һәм һүрәтләмәләр

**Беренсе китап**

*Башҡортостан Республикаһы*
*Мәғариф министрлығы тарафынан*
*тәкдим ителде*

КИТАП

Өфө – 2003

УДК 74.04 (2 Рәс-Баш)
ББК 371-512.141
Я 11

**Яйыҡбаев К.Я.**

Я11 Мәғрифәтсе мөғәллимдәр, күренекле уҡытыусылар һәм мәғариф эшмәкәрҙәре (тарихи-педагогик очерктар һәм һүрәтләмәләр). Беренсе китап. – Өфө: Китап, 2003. – 256 бит.

ISBN 5-295-03223-X

Был китаптағы тарихи-педагогик очерк, һүрәтләмәләрҙә Башҡортостан Республикаһы мәғарифын үҫтереүгә, камиллаштырыуға ҙур өлөш индергән урыҫ мәғрифәтселәре, мосолман мөғәллимдәре, күренекле уҡытыусылар, етәксе эшмәкәрҙәр тураһында бәйән ителә. Бында фәҡәт мәғрифәтсе мөғәллимдәр, мәҙрәсә йәки мәктәптәрҙә эшләгән ябай уҡытыусылар, етәксе педагогтар, хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы, шулай уҡ уға ҡараған мәғариф учреждениелары, район һәм ҡала мәғариф идаралыҡтары хеҙмәткәрҙәре генә инеп, уларҙың тормош юлы, фиҙакәр хеҙмәте – йәш быуынға белем һәм тәрбиә биреү, мәктәптәрҙе, махсус уҡыу йорттарын, балалар ойошмаларын үҫтереүгә булышлыҡ иткән алдынғы эш өлгөләре, бай тәжрибәһе һүрәтләнә.

Китап уҡытыусыларға, тәрбиәселәргә, студенттарға тәғәйенләнә.

**СИ — 003/03**

**УДК 74.04 (2 Рәс-Баш)**
**ББК 371-512.141**

**ISBN 5-295-03298-1**

© К.Я.Яйыҡбаев, 2003

## БАШ ҺҮҘ УРЫНЫНА

Рәсәйҙә батша хөкүмәте хакимлыҡ иткән ваҡытта барлыҡ губерналарҙа ла халыҡ мәғарифы аяныс хәлдә ине. 1908 йылда, мәҫәлән, Рәсәйҙә 1000 кешегә 50-нән дә аҙыраҡ уҡыусы тура килә. Милли губерналар айырыуса ауыр шарттарҙа йәшәне. Өфө губернаһы мәктәптәрендә 1897 йылда башҡорт балаларының – 18,5%-ы, татар балаларының – 19,1, урыҫ балаларының 16,2%-ы башланғыс белем алыуға йәлеп ителде. Фән нигеҙҙәре уҡытыла торған донъяуи мәктәптәрҙең аҙ булыуы ата-әсәләрҙе үҙ балаларын күбеһенсә дини-схоластик мәктәптәргә һәм мәҙрәсәләргә уҡырға бирергә мәжбүр итте. Был иһә балаларҙың башын томалап, рухи ғәрипләндереүгә алып барған шәхси, дини мәктәптәрҙең һәм схоластик мәҙрәсәләрҙең үҫеп китеүенә юл асты. Өфө земствоһының 1912 йылда муллаларға яҙған мөрәжәғәтендә дини мәктәптәр һәм унда уҡытыу эше тураһында түбәндәгеләр әйтелгән: «Дини уҡыу йорттарынан ғына ғибәрәт булған мосолман мәктәптәрендә дин, уның йолалары ғына уҡытыла, уларҙа дөйөм белем бирелмәй...»[1]

Оҙаҡ йылдар Ырымбур уҡыу округы инспекторы булып эшләгән Ибраһим Бикчәнтәев мосолман мәктәптәре тураһында түбәндәгеләрҙе яҙып ҡалдырған: «... алынған мәғлүмәт мосолман мәктәптәренең донъяуи мәктәптәргә ҡарағанда бик күпкә артта икәнен күрһәтә. Унда хисап, география, тарих кеүек дәрестәр уҡытылғаны әйтелһә лә, уларҙың да бик аҙ, бик сатхи[2] икәне аңлашыла. Сөнки мәктәптәрҙең күбеһендә дәреслек тә, уҡытыу әсбаптары ла юҡ. Шуның өсөн ысул йәдит тип һаналған мәктәптәрҙең дә 100-ҙән 10-ы йәки 15-е генә донъяуи мәктәптәргә яҡын булғаны күренә.

---

[1] «Өфө губерна земствоһының имамдарға мөрәжәғәтенән», Өфө губернаһы нәшере, 1912.

[2] с а т х и – һай, өҫтән генә

Мөғәллимдәрҙән, урыҫтарҙағы кеүек, билдәле белем талап ителмәй. Уҡырға, яҙырға белгән һәм «дин тәғлимәтен» яҡшы белеүсе кеше үҙен халыҡҡа мөғәллим итеп тәҡдим итә ала»[3].

Ә донъяуи мәктәптәр, ҡайһы бер мәҙрәсәләр, айырым шәхси уҡыу йорттары халыҡты ағартыуға, йәш быуынға белем һәм тәрбиә биреүгә яуаплы ҡараған. Шундай мәктәп һәм мәҙрәсәләрҙә белем алған йәштәр артабан Ырымбур, Өфө, Казан кеүек ҡалаларҙың уҡыу йорттарында белемен күтәргән йәки халыҡ араһына эшкә киткән.

Батша хөкүмәтенең тотош илде тома ҡараңғылыҡта тотоу, халыҡтарҙың милли дәүләт төҙөргә һәр төрлө ынтылышын бөтөрөү, уларҙың мәҙәниәтен ғәриплә, милли телде ҡыҫырыҡлау – быларҙың барыһы ла рәсми сәйәсәткә буйһондороу маҡсатында эшләнде. Был сәйәсәттең һуңғы маҡсаты бөтә милләт халыҡтарын да урыҫ шовинизмына буйһондороу һәм наҙан тотоу ине.

Шундай шарттарҙа ла ябай хеҙмәт кешеләре араһында белем алыуға, ғилемгә ынтылыу көслө булды. Халыҡтың яҡтыға, мәғрифәткә һәм мәҙәниәткә ынтылышын уятыуҙа урыҫ демократтары ҙур урын алып тора. Уларҙың мәҙәниәт һәм мәғрифәтте үҫтереү өсөн белем алыу, уҡымышлы булыу кәрәклеге тураһындағы идеялары менән рухланып, урыҫ мәғрифәтселәре – Ырымбур уҡыу округының беренсе инспекторы В.В.Катаринский, халыҡ училищелары инспекторы А.Г.Бессонов башҡорт балаларын туған телдә уҡытыу һәм бының өсөн башҡорт халҡының яҙмаһын булдырыу мәсьәләһен күтәрә. Ошо маҡсатта улар башҡорт телендә әлифба һәм уҡыу китаптары, шулай уҡ урыҫса-башҡортса, башҡортса-урыҫса һүҙлектәр баҫтырып сығара, һәләтле йәштәрҙе уҡыуға йәлеп итә, уҡып сыҡҡан мөғәллимдәрҙе мәктәптәргә эшкә ебәрә.

Башҡорт халҡының мәғрифәткә, мәҙәниәткә ынтылышын уның үҙ араһынан үҫеп сыҡҡан зыялылары – Ырымбурҙың И.И.Неплюев исемендәге кадет корпусы уҡытыусылары Мирсәлих Биксурин, Сәлихйән Күкләшев, дәүләт эшмәкәре, ғалим Мөхәмәтхан Ҡулаев, күренекле мәғрифәтсе мөғәллимдәр Шәмсетдин Зәки, Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, II Дәүләт думаһы депутаты, Борай башланғыс мәктәбе мөғәллиме Кәлимулла Хәсәнов асыҡ кәүҙәләндерә. Улар халыҡҡа хеҙмәт итеүҙә ҙур эштәр башҡара.

Шундай ҙур һәм арҙаҡлы шәхестәр менән бер рәттән, халыҡҡа арымай-талмай хеҙмәт иткән ябай мөғәллимдәрҙең дә исемдәре тарихҡа билдәле. Беренсе Эткол мәктәбе уҡытыусыһы Батыргәрәй Юлыев, Аҡкөсөк (Сермән) мәктәбенән Мөхәмәтғәли Ҡыуатов, Өфө өйәҙе Сәфәр урыҫ-башҡорт училищеһынан Исламетдин Ураев, Сәфәр олоҫо Һарайлы

---

[3] *Бикчәнтәев И.* Оренбург вилаятендәге мәктәптәр, Ырымбур, 1916, 10-сы бит.

мəҙрəсəһенəн Абдулла Байбурин, Маҡар училищеһынан Әбделхаҡ Сəғитов менəн Хəсəн Тереғолов, Боҙаяҙ училищеһынан Хəйерзаман Собханғолов, Бүздəк мəктəбенəн Ғəҙелгəрəй Ҡудашев, Үрге Ҡыйғы училищеһынан Ғиззəтулла Ғибаҙуллин, Яңы Ҡарғалы училищеһынан Һибəтулла Еникеев, Ҡараяҡуп училищеһынан Лоҡман Бирҙеғолов, Сəйетҡол урыҫ-башҡорт мəктəбенəн Имаметдин Мəжитов, Үҫəргəн кантоны Байыш мəктəбенəн Харис Уразов, Әбүлəис мəктəбенəн Ғəлим Ҡыуатов, Темəс олоҫо Билал мəктəбенəн Шаһивəли Ибраһимов, Стəрлетамаҡ өйəҙе Иҫке Яуыш мəктəбенəн Хəйҙəрғəли Солтанғəлиев кеүек мөғəллим, муллалар үҙҙəренең фиҙакəр хеҙмəте менəн халыҡтың оло абруйын ҡаҙана. Уларҙың һəр береһен халҡыбыҙ хөрмəт йөҙөнəн «учитель» йə «мөғəллим» тип йөрөттө. Өлкəндəр ҙə, йəштəр ҙə мөғəллим алдында тəртипһеҙлек күрһəтеүҙəн, насар һүҙ һөйлəүҙəн тартынды, йəмһеҙ ғəҙəттəре өсөн уңайһыҙланып оялды. Халыҡ араһында мөғəллимдең өлгөһө һəм абруйы юғары булды. Ул айырым культҡа эйə ине.

Октябрь революцияһына тиклем һəм унан һуңғы тəүге йылдарҙа уҡытыусы заманына күрə киң мəғлүмəтле булған. Ул уҡыу йортонан йəштəрҙе уҡытыу һəм тəрбиəлəү буйынса төплө белем алып сыҡҡан, бер үк ваҡытта медицина хеҙмəте күрһəтеү күнекмəлəрен үҙлəштергəн. Мөғəллимдəрҙең күбеһе баҡсасылыҡ, умартасылыҡ белеме нигеҙҙəренə эйə булған, ауылға эшкə барғас, уҡытыу-тəрбиə эшенəн тыш, урында йəшəгəн халыҡ вəкилдəренə тəүге медицина ярҙамы күрһəткəн, үҙе үҙлəштергəн төрлө һөнəр серҙəрен өйрəткəн. Бында телгə алынған мөғəллимдəрҙең күбеһе хеҙмəт кешелəрен тəрəн ихтирам итеүе, ауыл хеҙмəтен яҡшы белеүе, йəнə лə яҙыу-һыҙыу эштəренə оҫта булыуы, əйтəйек, үҙенə күрə шиғыр, бəйеттəр ижад итеүе, яҡшы һүрəт төшөрөүе, халыҡтың ауыҙ-тел ижады өлгөлəрен яҙып алыуы менəн дə айырылып торған. Ҡыҫҡаһы, үҙ эшенең ысын оҫтаһы булыуы менəн бергə, мөғəллим ауылда кəрəкле һөнəрҙəрҙең барыһына ла эйə булған. Шуға күрə уны ауыл халҡы, үҙен күреп белгəн кешелəр хөрмəт иткəн, яратҡан.

Эшкə һəлəтле һəм ауыл хеҙмəтен яратҡан шундай мөғəллимдəр урыҫ-башҡорт, урыҫ-татар һəм башҡа мəктəптəрҙə, халыҡ училищеларында һəм донъяуи белем биргəн мəҙрəсəлəрҙə күп яҡлы белем алған. Һуңғыларынан ул йылдарҙа Өфө ҡалаһының «Ғосмания», «Хакимиə», Һуңғараҡ «Ғəлиə», Ырымбурҙың «Хөсəйениə», Троицк ҡалаһының «Рəсүлиə», Ҡазандың «Мөхəммəҙиə», Стəрлебаш, Ашҡаҙар-Балыҡлы мəҙрəсəлəре шəкерттəрҙе тормошҡа əҙерлəүе, киң ҡарашлы белемле мөғəллимдəр итеп сығарыуы менəн айырылып торған.

Шулай ҙа Октябрь революцияһына хəтлем йəштəргə донъяуи белем биргəн һəм үҙ аллы хеҙмəткə əҙерлəгəн шундай уҡыу йорттары, унда уҡып сыҡҡан һəлəтле, ысын мөғəллимдəр аҙ булған. Лəкин мəғрифəт һəм мəҙəниəт өлкəлəрендə күрһəткəн хеҙмəттəре менəн уҡыу йорттары, айырыуса уҡытыусылар халыҡ күңелендə мəңге онотолмаҫ урын алды.

Октябрь революцияһының еңеүе халыҡтың белем алыуға ынтылышын тулыраҡ ҡәнәғәтләндерергә мөмкинлек бирҙе, мәғариф һәм мәҙәниәтте үҫтереү өсөн шарттар тыуҙырҙы. Бөтә балаларҙы ла туған телдәрендә уҡытыу, уларға донъяуи белем биреү, уҡытыу-тәрбиә эшен йәмғиәткә файҙалы хеҙмәт менән бәйләп ойоштороу йәмғиәттең һәр яҡлап үҫешкән ағзаларын тәрбиәләргә булышлыҡ итте. Халыҡтың яңы йәмғиәт төҙөү өсөн көрәше халыҡ мәғарифы системаһын үҙгәртеп ҡороу, ауылда һәм ҡалала яңы мәктәптәр асыу, яңыса уҡытыу-тәрбиә эшенә нигеҙ һалыу, йәштәргә дөйөм мәжбүри башланғыс белем биреү, шунан һуң дөйөм ете йыллыҡ, дөйөм һигеҙ йыллыҡ белем биреү, артабан дөйөм урта белем биреүгә күсеү менән бергә барҙы. Был халыҡ мәғарифы хеҙмәткәрҙәренә яңы тормош өсөн көрәш ҡаҙаныштарын арттырыу, Тыуған илде нығытыу, йәштәрҙе Ватанға бирелгәнлек рухында, ысын ватансылар итеп тәрбиәләү өсөн бөтә көстәрен һәм белемен бирергә киң юл асты.

Тыуған илебеҙ үҫешенең барлыҡ этаптарында ла халыҡ мәғарифы хеҙмәткәрҙәре – уҡытыусылар, тәрбиәселәр, район, ҡала халыҡ мәғарифы бүлектәре, уларҙың урындағы ойошмалары вәкилдәре йәш быуынды уҡытыу һәм юғары әхлаҡ рухында тәрбиәләү менән бер рәттән, халыҡ һәм заман йөкмәткән бурыстарҙы үтәүҙә лә фиҙакәрлек өлгөләре күрһәтте. Улар наҙанлыҡты бөтөрөү, кешеләрҙең аң-белем даирәһен киңәйтеү, донъяла булып торған хәл-ваҡиғаларға дөрөҫ ҡараш тәрбиәләү, халыҡ араһында сәйәси-аңлатыу эшен алып барыу, мәҙәниәт усаҡтары асыу, уларҙың эшен йәнләндереү кеүек йәмәғәт эштәрендә лә ең һыҙғанып хеҙмәт итте.

Илгә ауыр афәт булып килгән Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында фашистар Германияһын тар-мар итеүгә һәм еңеүгә халыҡты туплау, уның сит илдәрҙе һәм халыҡтарҙы баҫып алыу сәйәсәтен фашлау, һуғыштан һуң халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуға һәммә матди, эшсе көстәрҙе йүнәлтеү, биш йыллыҡ, ете йыллыҡ һәм башҡа пландарҙы үтәү, илдең матди-техник базаһын нығытыу, халыҡтың көнкүрешен яҡшыртыу кеүек был бурыстар барыһы ла идеология эше хеҙмәткәрҙәре булған уҡытыусылар һәм башҡа мәғариф эшсәндәре тарафынан ғәмәлгә ашырылды. Хәҙер ҙә улар йәштәрҙе уҡытыу, тәрбиәләү, тормошҡа һәм хеҙмәткә әҙерләү бурыстарын үҙҙәренә хас әүҙемлек менән, юғары кимәлдә, йөрәк ҡайнарлығын биреп башҡара, йәмғиәт менән халыҡ ышанып тапшырған бүтән эштәрҙе лә бирелеп үтәй.

Барлыҡ был бурыстар Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссариаты, хәҙер Мәғариф министрлығы, уның урындағы органдары тарафынан билдәләнә, һәр осорҙоң үҙенең киҫкен һәм кисектергеһеҙ мәсьәләләре хәл ителә.

1917 йылдан 30-сы йылдар уртаһына ҡәҙәр илдең сәйәси һәм социаль-иҡтисади үҫеш үҙенсәлектәре бөтә илдә, шулай уҡ беҙҙең республикала халыҡ мәғарифы системаһының оҙаҡ формалашыуына

сәбәпсе булды. Киҫкен социаль ҡапма-ҡаршылыҡ иҫке һәм яңы идара структураларының һыйышып йәшәй алмауына килтерҙе. Элекке идара аппаратын бөтөрөү, педагогик кадрҙарҙың ҙур өлөшөн ҡыҫырыҡлап сығарыу, иҫке һәм яңы структураларҙа күсәгилешлелекте һанға һуҡмау уҡытыусыларҙың һәм етәксе кадрҙарҙың йыш алмашыныуына килтерҙе, халыҡ мәғарифын үҫтереүгә кире йоғонто яһаны. Шулай ҙа Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссариаты баштан уҡ төбәктә мәғариф эштәренә дөрөҫ йүнәлеш бирҙе. Бында мәғариф халыҡ комиссары, уның урынбаҫарҙары һәм барлыҡ аппараттың хеҙмәте айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә булды.

1917 йылдың декабрендә Темәс ауылында Башҡортостан хөкүмәте төҙөлә. Унда А.Н.Йәғәфәров халыҡ мәғарифын ойоштороусы итеп билдәләнә. Ул 1919 йылдың 21 февралендә ҙур ауырлыҡтар менән ойошторолған Башревком составына ла инә. А.Н.Йәғәфәров – шулай итеп, Башҡортостандың беренсе мәғариф халыҡ комиссары була.

Башҡортостан хөкүмәте Стәрлетамаҡҡа әйләнеп ҡайтҡандан һуң, 1919 йылдың август – октябрь айҙарында, мәғариф халыҡ комиссары вазифаһын ваҡытлыса Г.Г.Йосопов башҡара. Был осорҙа кантон башҡарма комитеттары һайлана, уның структураһында кантон мәғариф халыҡ бүлеге ойоштորола, уҡытыусылар съездары саҡырыла, алда торған бурыстар асыҡлана.

1919 йылдың октябренән мәғариф халыҡ комиссары вазифаһын Ә.Ә.Айҙаров башҡарырға тотона. Ул комиссариат аппараты эшен ойоштора, уның етәкселегендә күп кенә мәҙрәсәләр беренсе һәм икенсе баҫҡыс мәктәптәр итеп үҙгәртелә, хеҙмәт мәктәбе принциптары индерелә, дәреслектәр һәм уҡытыу әсбаптары төҙөү, туған тел орфографияһы мәсьәләләре тикшерелә, әҙәбиәт-нәшриәт бүлегенә яңы бурыстар йөкмәтелә.

Башҡорт милли хәрәкәтенең күренекле эшмәкәре М.Д.Халиҡов Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссариатын 1920 йылдың сентябренән 1921 йылдың апрель аҙағына ҡәҙәр етәкләй. Уның тәҡдиме буйынса Комиссариат һәм уның урындағы органдары «удар предприятиелар төркөмөнә индерелә һәм халыҡ мәғарифы эше һуғышсан эш, республика муллығының нигеҙе тип таныла, уны интенсив алып барырға»[4] ҡушыла.

1921 йылдың апрель – 1922 йылдың февраль айҙарында М.Н.Килдебәков республика мәғариф халыҡ комиссары була. Был ваҡытта тәжрибә-өлгө мәктәптәре эшләй башлай, әммә матди хәл насар булыу сәбәпле, эш яй бара. Аслыҡ һөҙөмтәһендә мәктәптәр кәмей, улар нигеҙендә балалар йорттары асыла.

---

[4] БР Үҙәк дәүләт тарих архивы, 11-се фонд. 1-се теркәү яҙыуы, 925-се эш, 16-сы, 55-се, 81-се, 84-се биттәр.

1922 йылдың февраль – март айҙарында Мәғариф Халыҡ Комиссариатына Х.К.Ҡушаев етәкселек итә. Ул яңы вазифаға күнегеп тә өлгөрмәй, Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты рәйесе итеп һайлана.

1922 йылдың март – сентябрь айҙарында Г.С.Сәғәҙиев мәғариф халыҡ комиссары булып эшләй, сентябрь – ноябрь айҙарында был вазифаны ваҡытлыса тағы Ә.Ә.Айҙаров башҡара. Уның етәкселегендә «Башҡортостан көнкүрешен, мәҙәниәтен һәм тарихын өйрәнеү тураһында» положение эшләнә, мәғариф аппаратының инспекторҙар институты индерелә.

1922 йылдың сентябренән 1923 йылдың аҙағынаса А.К.Әҙеһәмов мәғариф халыҡ комиссары эштәрен башҡара. Ул башҡорт телен уҡытыуҙы бойомға ашырыуға ҙур өлөш индерә. Беренсе баҫҡыс мәктәптәрҙә уҡытыу барлыҡ балаларҙың да туған телендә алып барыла һәм уҡытыусылар әҙерләүгә иғтибар арта, икенсе баҫҡыс һәм һөнәргә өйрәтеү мәктәптәрендә башҡорт теле предмет булараҡ өйрәнелә.

Милли хәрәкәттең күренекле эшмәкәре Ә.Ә.Биишев республикала халыҡ мәғарифын үҫтереүгә 1924 йылдың ғинуарынан сентябренә ҡәҙәр күп көс һала. Башҡортостанда халыҡ мәғарифы эшен башҡорттарҙың рухына һәм көнкүрешенә ярашлы алып барырға кәрәк тип иҫәпләй, республиканың автономияһын яҡлай, халыҡтың сәйәси һәм иҡтисади мәнфәғәттәре өсөн көрәшә. Уның башланғысында педагогия техникумдары һәм икенсе баҫҡыс мәктәптәр асыла, Башҡортостан тарихы уҡытыла, кадрҙар әҙерләүгә ҙур иғтибар бирелә.

1924 йылдың сентябренән 1926 йылдың апрель айына ҡәҙәр Мәғариф Халыҡ Комиссариатына Ғ.К.Ҡасимов етәкселек итә. Был ваҡытта аҡрынлап мәктәп биналары төҙөлә, башҡорт мәктәптәрен уҡытыусылар менән тәьмин итеү мәсьәләләренә етди иғтибар бирелә. Педагогия техникумдарына уҡыусылар ҡабул итеү арта, курстар ойоштorола, крәҫтиән йәштәре мәктәптәре асыла башлай.

1926 йылдың апреленән 1928 йылдың октябренә тиклем Башҡортостан Халыҡ Комиссариатына Ғ.Т.Ғисмәтуллин етәкселек итә. Айырым очерктарҙа уның эшенә һәм унан һуң мәғариф халыҡ комиссарҙары булып эшләгән ҡайһы бер шәхестәрҙең хеҙмәтенә, бурыстарына туҡталып тормайынса, исем-шәрифтәрен һәм ҡайһы дәүерҙә эшләүҙәрен күрһәтеү менән генә сикләнәбеҙ.

1928 йылдың октябренән 1930 йылға тиклем республика мәғариф халыҡ комиссары вазифаһын К.А.Иҙелғужин, 1930 йылдың июль – октябрь айҙарында Ә.Р.Иҫәнсурин, 1930 – 1935 йылдарҙа Р.В.Әбүбәкиров, 1935 – 1937 йылдарҙа Ғ.А.Дәүләтшин, 1937 йылдың июнь – октябрь айҙарында И.Х.Абыҙбаев, 1937 йылдан 1938 йылдың декабренәсә С.Р.Әлибаев, 1939 – 1941 йылдарҙа М.Ш.Хәсәнов, 1941 – 1944 йылдарҙа С.С.Зәйнәшев, 1944 – 1946 йылдарҙа К.Ғ.Ғүмәров башҡара, 1946 – 1954 йылдарҙа халыҡ мәғарифы министры булып С.Р.Әлибаев,

1955 – 1971 йылдарҙа Ф.Х.Мостафина, 1971 – 1985 йылдарҙа С.Ш.Йыһаншин, 1985 – 1988 йылдарҙа С.Ғ.Сөләймәнова, 1988 – 1995 йылдарҙа Р.Т.Ғарданов, 1995 – 1998 йылдарҙа Ф.Ғ.Хисамитдинова эшләй. 1998 йылдың февралендә мәғариф министры итеп Ғ.М.Мөхәмәтйәнова тәғәйенләнә.

Башҡортостан хөкүмәте Темәстә һәм Стәрлетамаҡ ҡалаһында эшләгән ваҡытта Мәғариф Халыҡ Комиссариатында М.Ыҫмаҡов, Ф.М.Сөләймәнов – Әбделҡадир Инан (башҡорт халҡының юлбашсыһы З.Вәлидиҙең арҡаҙашы – *К.Я.*), С.С.Атнағолов, 25 – 30-сы йылдарҙа мәғариф халыҡ комиссарҙары урынбаҫарҙары Ш.Х.Сүнчәләй, С.Я.Ямалиев, мәктәп инспекторҙары Ә.Ә.Еникеев, Т.Ғ.Байышев, Б.С.Давыдкин ҙур эш башҡара. Уларҙың ҡайһы берҙәре күренекле дәүләт эшмәкәрҙәре, ғалимдар булып үҫеп етте. 50 – 80-се йылдарҙа халыҡ мәғарифы министрҙары урынбаҫарҙары Х.М.Яфаева, Х.Х.Яубаҫаров, В.В.Дерягин, И.И.Ғөбәйҙуллин, Р.М.Арыҫланов, Е.М.Жижакин халыҡ мәғарифын үҫтереүгә һәм камиллаштырыуға лайыҡлы өлөш индерҙе. Артабан был эстафетаны М.И.Бирюков, М.Б.Юлмөхәмәтов, Н.Н.Голышева уңышлы дауам итә. Төрлө йылдарҙа бүлек мөдирҙәре һәм инспекторҙар булып эшләгән М.К.Ваһапова, Ғ.Д.Ирғәлин, Й.Ш.Саҡаева, Т.Ф.Ҡолдәүләтов, Ш.М.Сәйәхов, Ф.Ш.Лоҡманов, Б.И.Кәримова, Т.А.Жаркова, З.Ш.Яппарова, Р.А.Хафизова, Н.И.Сафронова, З.Ғ.Нафиҡова халыҡ мәғарифында билдәле урын алып тора. Намыҫлы хеҙмәте өсөн уларҙың күбеһе маҡтаулы исемдәргә лайыҡ.

Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институты (хәҙер Республика мәғарифын үҫтереү институты) хеҙмәткәрҙәре һәр ваҡыт халыҡ мәғарифы эштәренең уртаһында ҡайнаны. Китапта исем-фамилиялары күрһәтелгән методист, кабинет һәм кафедра мөдирҙәре, институт етәкселәренән тыш, йәнә Т.Х.Хөсәйенов, Ф.Х.Ҡыҙрасов, С.И.Ғәләүетдинова кеүек талантлы методистарҙы һәм етәкселәрҙе атамай мөмкин түгел. Улар мәктәптәргә ҙур методик ярҙам күрһәтә һәм педагогик коллективтарҙы илһамлы эштәргә рухландыра.

Рәсәй Федерацияһы Милли мәктәптәр ғилми-тикшеренеү институтының (хәҙер Белем биреүҙең милли проблемалары ғилми-тикшеренеү институты) Башҡортостан филиалы хеҙмәткәрҙәре республика мәктәптәре эшендә ҙур ярҙам күрһәтә. Уларҙың күбеһе айырым очерктарҙа тасуирлап үтелде.

Халыҡ Башҡортостанда мәғариф эштәрен ойоштороусы хеҙмәткәр, уҡытыусылар, тәрбиәселәр хеҙмәтен юғары баһалай. 1939 йылда ун педагог халыҡ мәғарифы тарихында тәүге тапҡыр илебеҙҙең ул ваҡыттағы иң юғары наградаһы – Ленин ордены менән бүләкләнде. Бына улар: Балтас районы Иҫке Балтас мәктәбе уҡытыусыһы П.А.Архипов, Краснокама районы Йәнйегет мәктәбе директоры Р.Ғ.Әхмәҙуллина, Салауат районы Малаяҙ мәктәбе директоры Т.Х.Вәлиев, Благовещен районы

Эманино мәктәбе уҡытыусыһы И.И.Иванов, Күгәрсен районы Йомағужа мәктәбе уҡытыусыһы С.Ә.Ҡорбанғәлиев, Кушнаренко районы Кушнаренко мәктәбе уҡытыусыһы Ф.Ә.Мортазин, Бөрө районы Михайловка мәктәбе директоры урынбаҫары Е.С.Мухакова, Благовар районы Өйҙөрәкбаш мәктәбе директоры М.Ә.Нәфиғов, Әлшәй районы Никифар мәктәбе директоры урынбаҫары Б.С.Солтанов, Миәкә районы Ҡырғыҙ-Миәкә мәктәбе директоры Х.С.Солтанов. Бынан тыш, халыҡ мәғарифы хеҙмәткәрҙәренән 22 кеше Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденына, 24 кеше «Почет Билдәһе» орденына лайыҡ була. Шул ваҡыттан бирле совет осоронда алты меңгә яҡын мәғариф хеҙмәткәре орден һәм миҙалдар менән бүләкләнгән.

1940 йылда Башҡортостан Юғары Советы Президиумы указы менән Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы юғары исем булдырылды. 1941 йылдың 21 февралендә бер төркөм халыҡ мәғарифы хеҙмәткәрҙәренә тәүге тапҡыр Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән ҙур исем бирелә. Бына улар: Х.Х.Әбсәләмов – Күгәрсен районы Бикес мәктәбе уҡытыусыһы, К.Б.Вәлиева – Стәрлебаш районы Айтуған мәктәбе директоры, Х.Г.Вәлиев – Ҡариҙел район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире, Д.К.Васильев – Белорет ҡалаһы Тирлән ҡасабаһы мәктәбе уҡытыусыһы, М.М.Вострецова – Ҡалтасы районы Барьяза мәктәбе директоры урынбаҫары, А.С.Воронина – Стәрлетамаҡ ҡалаһы 4-се мәктәбе уҡытыусыһы, Ғ.С.Ихсанов – Бөрйән районы Иҫке Собханғол мәктәбе директоры, Н.Е.Каштанова – Өфө ҡалаһы 19-сы мәктәп директоры урынбаҫары, Е.Г.Козлова – Белорет ҡалаһы 1-се мәктәп директоры урынбаҫары, З.А.Крюкова – Бүздәк 2-се мәктәп уҡытыусыһы, Н.К.Куренова – Белорет ҡалаһы 3-сө мәктәп директоры. С.Ә.Ҡорбанғәлиева – Күгәрсен районы Теләүембәт мәктәбе уҡытыусыһы, Н.А.Моратов – Илеш район халыҡ мәғарифы бүлегенең методика кабинеты мөдире, В.Н.Нотес – Белорет ҡалаһы 1-се мәктәп уҡытыусыһы, Н.Н.Петров – Ҡалтасы районы Кәлтәй мәктәбе директоры, А.А.Порошина – Күгәрсен районы Мораҡ мәктәбе уҡытыусыһы, С.В.Портнова – Белорет ҡалаһы 5-се мәктәп уҡытыусыһы, А.П.Проскурякова – Ҡариҙел район халыҡ мәғарифы бүлегенең методика кабинеты мөдире, Р.М.Сафина – Шишмә районы Сәфәр мәктәбе уҡытыусыһы, Е.П.Степанова – Ауырғазы районы Көйөҙбаш мәктәбе директоры, Ғ.М.Ханова – Кушнаренко районы Кушнаренко мәктәбе уҡытыусыһы, А.И.Шаткова – Белорет ҡалаһы 6-сы мәктәп директоры. Шул ваҡыттан һуң 2002 йылдың 1 ғинуарына тиклем 1500-гә яҡын кешегә Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре тигән маҡтаулы исемдәр бирелгән. 426 педагог Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исемгә лайыҡ булған.

Салауат районы Арҡауыл мәктәбе уҡытыусыһы, СССР-ҙың халыҡ уҡытыусыһы Хәнифә Сиражи ҡыҙы Искәндәроваға, Хәйбулла районы Бүребай мәктәбе директоры Лира Шәриф ҡыҙы Камаловаға Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән иң ҙур исем бирелде.

Республика халыҡ мәғарифы системаһында юғары исемдәргә һәм баһаларға лайыҡ булған педагогтар күп. Өфө ҡала халыҡ мәғарифы идаралығы, район идаралыҡтары хеҙмәткәрҙәре С.Б.Баязитов, Ф.Ш.Латипов, А.Г.Солтанова, В.В.Ломова, Н.Р.Исмәғилева, Н.С.Фәйзуллина, мәктәп директорҙары һәм уҡытыусылары М.Һ.Абдуллин, Б.Н.Сонькин, М.Л.Дубровкин, В.А.Штабель, В.П.Попов, Ә.Ш.Фәйзуллина, Ә.А.Хәсәнова, М.М.Нәбиуллина, Л.Х.Еникеева, Л.Т.Янборисова, Д.М.Исмәғилева, И.А.Хатунцев, Р.М.Солтанов баш ҡала мәктәптәрендә уҡытыу-тәрбиә эшен юғары кимәлгә күтәрҙе. Өфө ҡалаһының оҙаҡ йылдар буйы С.Г.Розенблюм етәкләгән 35-се урта мәктәп уҡытыусылар коллективы уңышлы хеҙмәт өлгөләре күрһәтә.

9-сы тулы булмаған урта мәктәп – 1-се урта мәктәп-интернат – Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика гимназия-интернаты – был уҡыу йортоноң тарихы ҙур. Уға төрлө йылдарҙа С.Х.Зайлалова, Ғ.Ғ.Ғафаров, Т.Х.Аслаев, Ф.Б.Санъяров кеүек талантлы педагогтар етәкселек итте, унда Р.Х.Ниғмәтуллина, З.В.Хисмәтуллина, Г.М.Еникеева, Ф.Ф.Абдуллина, Ф.Ә.Аҡманова, Г.С.Ҡужина, А.С.Ҡолдәүләтова һымаҡ абруйлы уҡытыусылар эшләне һәм ҡайһы берҙәре әле лә хеҙмәтен дауам итә. Уҡыу йортоноң һәйбәт традициялары быуындан быуынға тапшырыла.

Стәрлетамаҡ районы һәм ҡалаһы мәктәптәрендә Ж.Ә.Вахитова, Л.М.Куцанова, В.И.Криницын, М.К.Әбдрәхимова, С.Р.Огнивец, В.В.Костомаров, Ф.С.Сәғәҙиева һәм башҡа күптәр уҡытыу-тәрбиә эшен яҡшыртыуға ҙур өлөш индерә.

Күп йылдар элек һәм хәҙерге ваҡытта эшләгән күренекле мәғариф хеҙмәткәрҙәре – Баймаҡтан, китапта телгә алынғандарҙан тыш, К.С.Мусин, М.Р.Шәйҙуллина, Ф.Ғ.Бикбулатова, С.Ғ.Ишбирҙин, С.И.Антонов, Г.У.Лоҡманова, Р.Ф.Абдуллин, Бөрйәндән Ғ.С.Яубаҫаров, Л.А.Ҡаһарманов, Р.И.Баязитов, Ейәнсуранан беренсе булып Ленин орденына лайыҡ булған Н.Х.Ҡадиров менән Н.Ғ.Кәримов сафында Һ.В.Ғүмәров, А.Н.Абдуллин, Т.Г.Дәминев, А.М.Ваһапова, М.Ғ.Йосопова, З.У.Янбаев, Белорет ҡалаһы һәм районынан Г.И.Радионов, М.В.Дунаев, И.Ҡ.Шәрипов, Ш.Ә.Ғәйнуллина, М.В.Саранцева, И.Ф.Козяева, Л.Д.Шамовская, Б.Ф.Хисмәтуллин, А.А.Новиков, В.А.Йәнгирова, Г.Х.Садиҡова, Дүртөйләнән А.Ш.Ғүмәрова, М.П.Ксенофонтова, Ә.З.Зиннәтов, Ф.Б.Шакиров, Баҡалынан А.В.Коновалов, Й.С.Усманов, К.П.Юзикаева, Р.К.Хисамиева, М.Ғ.Еникеева, Шишмәнән Р.Ғ.Кирәева, Ф.Н.Ғәбиҙуллин, В.В.Зиннәтуллина, Балаҡатайҙан Е.В.Котова, Л.И.Ковин, А.Н.Михайлова, Кушнаренконан З.К.Биктимеров, М.Х.Сәфиуллин, В.Т.Яҡупова,

Дәүләкәндән В.С.Кизим, З.Ф.Тажиев, Ауырғазынан В.С.Сергеев, З.Ш.Нагаев, Ҡариҙелдән Ғ.Ғ.Ғәлин, С.И.Зәйнуллина, Асҡындан Ф.Ф.Карамов, Ғафуриҙан А.С.Зөбәйҙуллин, Н.Х.Ғарипова, З.Р.Әминев, Г.З.Ҡалмырҙин, Йәрмәкәйҙән В.Й.Дауытов, М.И.Козлова, Ф.Р.Сәләхова, Борайҙан Ф.Ф.Абазов, Р.Ғ.Искәндәров, Илештән М.З.Байгилдин, Р.Х.Ямалов, Бәләбәйҙән Е.Г.Гусева, Т.И.Әминев, И.Ғ.Сәлимгәрәев, Благоварҙан иң тәүҙә Ленин ордены алған М.Ә.Нәфиғов менән бергә Ғ.У.Усманов, А.Н.Дементьева, С.Ғ.Лоҡманов, Д.Ғ.Нағуманов, Әбйәлилдән Р.М.Юлдыбаева, Г.М.Измайлова, В.Ә.Зәйнуллин, Р.Ш.Ҡоҙаярова, Күгәрсендән С.Ҡ.Алсынбаев, Р.Х.Байгилдина, Ф.Ғ.Сөйәрғолова, В.И.Вәлитова, Йылайырҙан Ҡ.Х.Атанов, А.А.Миногина, Р.Р.Фәйзуллин, Бүздәктән Л.А.Бакиров, Р.Ю.Ғәҙелшина, Х.С.Саҡаев, Р.Х.Ғиләжев, Мәләүездән А.И.Алаторцев, Ғ.М.Ғүмәров, К.Ф.Комиссаров, С.Б.Сәғитова, Яңауылдан талантлы педагог Ш.С.Абзановтың данлы традицияларын дауам итеүселәр Я.Н.Зарипов, Р.Н.Ғилметдинов, З.А.Хузин, Октябрьский ҡалаһынан Л.А.Инфантьев, Ф.Х.Әхмәрова, Учалы ҡалаһынан Б.А.Зиннуров, Сибай ҡалаһынан Б.З.Ваһапова, Ғ.М.Ғиззәтуллина, һөнәрселек-техник училищеларҙан М.К.Әхмәҙуллин, В.В.Моратов, В.Н.Храмцов, К.С.Тляшева, В.А.Морин һәм башҡа күптәр Башҡортостан Республикаһы халыҡ мәғарифының алтын фондын тәшкил итә. Уларҙың хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ.

К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институты – 1957 йылдан Башҡорт дәүләт университеты, Башҡорт дәүләт педагогия институты – педагогия университеты, Стәрлетамаҡ һәм Бөрө дәүләт педагогия институттары мәктәптәр өсөн юғары белемле уҡытыусылар әҙерләй. Юғары уҡыу йорттарын тамамлаған байтаҡ белгестәр халыҡ хужалығының башҡа тармаҡтарында эшкә урынлаша, мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәләрендә шөһрәт ҡаҙана. Етәксе эштәрҙә үҙҙәрен күрһәткән белгестәр ҙә күп.

Башҡортостандың педагогия училищелары – колледждары башланғыс мәктәп уҡытыусылары әҙерләүгә лайыҡлы өлөш индерә.

2002 йылда Башҡортостан Республикаһында 3265 дөйөм белем биреү мәктәбе, шул иҫәптән 68 гимназия, 48 лицей, 7 шәхси урта мәктәп, 32 мәктәп-интернат, 112 һөнәрселек-техник училище һәм лицей, 2 кадет мәктәбе иҫәпләнә, мәктәптәрҙә 667550 уҡыусы, һөнәрселек-техник училищеларҙа, лицейҙарҙа 60 мең самаһы уҡыусы белем ала, техникумдарҙа 65 мең, юғары уҡыу йорттарында 50 мең студент уҡый. Шулай итеп, уҡыу йәшендәге барлыҡ балалар һәм йәштәр белем алыуға йәлеп ителгән. Бынан күренеүенсә, һуңғы йылдарҙа республикала инновацион уҡыу йорттары – гимназия, лицей, колледждар киң урын ала бара. Мәктәп-интернаттар, гимназия-интернаттар уҡытыу-тәрбиә эшенең мөһим мәсьәләләрен уңышлы хәл итергә булышлыҡ итә.

Республикала йәштәрҙең 92 проценты урта белем ала. Был – ҙур социаль-сәйәси күрһәткес. Һуңғы осорҙа мәғариф Башҡортостан Президенты һәм хөкүмәттең көндәлек хәстәрлеген тоя, уға һөҙөмтәле эш менән яуап бирә. Мәғариф хеҙмәткәрҙәре Президент көн тәртибенә ҡуйған Башҡортостандың яңы гражданын тәрбиәләү, «Башҡортостан Республикаһы балалары» программаһы һәм уның «Һәләтле балалар» маҡсатлы программаһы талаптарын үтәүгә барлыҡ көсөн һәм белемен бирә.

Уҡыу йорттарында белем һәм тәрбиә биреүҙең барлыҡ мәсьәләләрен уңышлы хәл итеү уҡытыусыға бәйле. Республика 156 мең мәғариф хеҙмәткәрен үҙ эсенә алған кадрҙар потенциалы менән ғорурлана ала.

Башҡортостанда мәктәпкәсә тәрбиә ойошмалары селтәрен үҫтереүгә, етем, ауырыу, сәләмәтлеге сикләнгән балалар учреждениелары һанын тормош талаптарына яуап бирерлек кимәлдә һаҡлауға ҙур иғтибар бирелә.

Һуңғы ваҡытта мәғариф хеҙмәткәрҙәре алдына мәктәпте модернизациялау мәсьәләһе килеп баҫты. Мәғлүмәт мөхите булдырыуға ҙур иғтибар бирелә. Район, ҡала мәктәптәрендә «Интернет – белем биреү» төбәк компьютерҙары әҙерләнә. Уҡыу йорттарын компьютерҙар менән йыһазландырыу, яңы мәғлүмәт технологияларын ҡулланыу белем биреүҙең йөкмәткеһен яңыртыуҙа айырыуса мөһим әһәмиәткә эйә.

Уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр алдына мәғариф системаһы структураһын һәм йөкмәткеһен яңыртыу бурысы килеп баҫа. Уны уңышлы ғәмәлгә ашырыу өсөн мәғариф хеҙмәткәрҙәрен юғары кимәлдә әҙерләү һәм яңынан әҙерләү мәсьәләһе көн тәртибендә тора. 2001 йылдың 1 сентябрендә барлыҡ I синыфтар дүрт йыллыҡ башланғыс мәктәп программаһына күсте. Урта һәм юғары синыфтарҙа уҡытыу предметтары йөкмәткеһенә ҙур үҙгәрештәр индерелә. Был юлы мәктәп реформаһы уҡыу йорттарын яңы баҫҡысҡа күтәрергә мөмкинлек бирәсәк.

Барыһы ла мәктәптән башлана, бөтәһе лә мәғариф хеҙмәткәрҙәренең ижади эшләүенә бәйләнгән. «Мәғрифәтсе мөғәллимдәр, күренекле уҡытыусылар һәм мәғариф эшмәкәрҙәре» тигән был тарихи-педагогик очерктар китабына мәғрифәтселек һәм мәғариф өлкәһендә ҙур хеҙмәт күрһәткән күренекле мөғәллимдәр, мәғрифәтселәр, уҡытыусылар һәм халыҡ мәғарифын ойоштороусылар тураһында мөмкин ҡәҙәр тулы мәғлүмәттәр бирелде. Беҙ үҙ алдыбыҙға Башҡортостанда халыҡты ағартыу, яңы мәктәпкә нигеҙ һалыу, уҡытыу-тәрбиә эшен яңыса ойоштороу, балаларҙы һәм йәштәрҙе уҡытыу һәм тәрбиәләү, халыҡ мәғарифына етәкселек итеү өлкәләрендә ҙур эш башҡарған арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең тормош юлын һәм эшмәкәрлеген өйрәнеүҙе, уларҙы тасуирлап күрһәтеүҙе маҡсат итеп ҡуйҙыҡ.

Тарихи-педагогик очерктар китабына мәғариф хеҙмәткәрҙәре һәр осорға ҡарата фамилиялары буйынса алфавит тәртибендә индерелде.

Китапҡа индереү өсөн мәғрифәтсе мөғәллимдәрҙе һәм мәғариф хеҙмәткәрҙәрен билдәләгәндә, иң тәүҙә уларҙың мәғарифты үҫтереүгә индергән хеҙмәттәре иҫәпкә алынды, китапта уларҙың иң күренеклеләре урын алды. Уларҙың һәр береһенең хеҙмәтенә баһа биргәндә, шәхсән тормош юлы һәм педагогик эшмәкәрлеге һүрәтләнде. Шул уҡ ваҡытта мәктәп етәкселәре һәм район, ҡала мәғариф идаралыҡтары башлыҡтарына тейешле иғтибар бирелде, уларҙың педагогик тәжрибәһен яҡтыртыуға ынтылыш яһалды. Мәғрифәтсе мөғәллимдәрҙең һәм мәғариф хеҙмәткәрҙәренең ҡасан, ҡайҙа тыуыуы, ҡайһы осорҙа ниндәй вазифалар башҡарыуы, бүләктәр алыуы һәм халыҡ ихтирамы менән файҙаланыуы һәр осраҡта асыҡ күрһәтелде. Был уларҙың хөрмәтенә юбилей тантанаһы уҙғарыу, иҫән-һау йәшәгән мәғариф хеҙмәткәрҙәренә хөрмәт күрһәтеү, вафат булғандарына бағышланған хәтер кисәләре үткәреү өсөн бик кәрәк.

Китапты яҙғанда Башҡортостан дәүләт архивы материалдары, Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге республика китапханаһы фонды, ваҡытлы матбуғат ҡулланылды, Башҡортостан Халыҡ мәғарифы архивы өйрәнелде, төрлө кешеләргә хаттар яҙып, яуаптар алынды. Мәғариф хеҙмәткәрҙәренә, уларҙың туғандарына, район, ҡала мәғариф идаралыҡтары хеҙмәткәрҙәренә автор ысын йөрәктән рәхмәт тойғоларын белдерә. Китап материалдары оҙаҡ йылдар буйы аҡрынлап тупланды. Теләктәшлек белдергән төрлө ойошмалар хеҙмәткәрҙәре, һуғыш һәм педагогик хеҙмәт ветерандары Ф.Һ.Баҡаев, Һ.В.Ғүмәров, Б.М.Мәмбәтҡолов, доценттар Ә.Ә.Еникеев, А.Ә.Ғәлләмов, Т.Х.Аслаев, Башҡорт дәүләт университеты уҡытыусылары – доцент К.Ә.Әхмәтйәнов, профессор М.В.Зәйнуллин, Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры Ә.М.Аҙнабаев менән автор тығыҙ бәйләнештә эшләне, үҙҙәре иҫән саҡта уларҙың барыһына ла ысын күңелдән рәхмәтен әйтеп өлгөрә алды, оло ихтирамын еткерҙе.

Был китап тураһындағы фекерҙәрегеҙҙе һәм тәҡдимдәрегеҙҙе түбәндәге адрес буйынса ебәреүегеҙҙе үтенәбеҙ:

*450008*
*Өфө ҡалаһы, Театр урамы, 5*
*Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы*

*АВТОР*

# ОКТЯБРЬ РЕВОЛЮЦИЯҺЫНА ТИКЛЕМГЕ ОСОР

Башҡорт халҡын белем һәм мәҙәниәт яҡтылығына сығарырға ынтылған мәғрифәтсе мөғәллимдәр Октябрь революцияһына тиклем ҡараңғылыҡ, дөйөм наҙанлыҡ шарттарында халыҡ өсөн файҙалы мәҙәни-ағартыу эштәре башҡарыуҙары менән айырылып тора. Улар араһында мәҙрәсә, мәхәллә муллалары, мәктәп йәки бүтән уҡыу йорттары мөғәллимдәре, Ырымбур уҡыу округы, шулай уҡ башҡа дәүләт ойошмаларының етәксе хеҙмәткәрҙәре менән инспекторҙары, шағир һәм яҙыусылар булған. Улар башҡорт халҡын мәғрифәт һәм мәҙәниәт юлына сығарыу, башҡорт теле һәм әҙәбиәте өсөн уңайлы алфавит төҙөү, йәштәрҙе уҡыуға, белем алыуға йәлеп итеү, халыҡ ижадының бай өлгөләре, тормош һәм ғәмәли көнкүреш нигеҙендә тәрбиә биреү маҡсатын үҙ алдына ҡуйып, был бурыстарҙы педагогик хеҙмәте, хатта көнитмеше һәм шәхси йәшәү өлгөһөндә лайыҡлы үтәй. Был осорҙағы мәғрифәтсе мөғәллимдәрҙең байтағы Октябрь революцияһынан һуң да яңы шарттарҙа педагогик хеҙмәтен дауам итеп, халҡыбыҙ мәнфәғәттәре өсөн ныҡышмалы эшләй.

Был китапта иҫәпкә алынған мәғрифәтсе мөғәллимдәрҙән тыш, башҡорттарҙың үҙ араһынан сыҡҡан уҡымышлы зыялылары, башҡорт халҡы өсөн эшләгән күренекле урыҫ ғалим-мөғәллимдәре тағы ла байтаҡ. Улар Башҡортостан өсөн, беҙҙең халыҡтың аң-белем кимәлен күтәреү өсөн ҙур хеҙмәт күрһәттеләр. Мәғрифәтсе мөғәллимдәрҙең башҡарған эштәрен баһалай белеүсе, иғтибарлы һәм рәхмәтле халҡыбыҙ, үҙ тарихының рухи ҡиммәттәре булараҡ, уларҙы һис ҡасан онотмай.

Айырым осорға индерелгән педагогтарҙың хеҙмәте был дәүер менән генә сикләнмәй. Уларҙың күптәре бер нисә быуын кешеләренең оло хөрмәтен ҡаҙана.

## АҠМУЛЛА (Мифтахетдин Камалетдин улы Камалетдинов)

*(1831 – 1895)*



Аҡмулла – Мифтахетдин Камалетдин улы Камалетдинов – XIX быуатта Башҡортостан ижтимағи-сәйәси фекеренең алдынғы вәкилдәренең береһе, башҡорт халҡының күренекле мөғәллим-мәғрифәтсеһе, киң билдәле талантлы шағиры.

Мифтахетдин Камалетдин улы Камалетдинов Башҡортостандың хәҙерге Миәкә районы Туҡһанбай ауылында 1831 йылдың 27 декабрендә донъяға килә. Башланғыс белемде үҙ ауылы мәҙрәсәһендә ала, шунан Мәнәүезтамаҡ һәм Әнәс мәҙрәсәләрендә уҡый, данлыҡлы Стәрлебаш мәҙрәсәһендә суфый шағир Шәмсетдин Зәкиҙән һабаҡ ала, күптәрҙе үҙенә ылыҡтырып торған Троицкиҙа Зәйнулла Рәсүлев мәҙрәсәһендә белем ала. Йәй көндәрендә ҡаҙаҡ балаларын уҡытып аҡса эшләй, ҡыш мәҙрәсәлә уҡый. Йәштән килгән ҡыҙыҡһыныу, күп белергә тырышыу, ғилемгә һыуһау сифаттары Мифтахетдин Аҡмуллаға ныҡ ярҙам итә, мәҙрәсәләрҙә дин ғилеме менән бер рәттән, үҙ алдына уҡып, фарсы, ғәрәп телдәре, Көнсығыш әҙәбиәте буйынса төплө белем ала.

Троицк мәҙрәсәһенән киткәс, М.Аҡмулла ҡаҙаҡтар араһында балалар уҡыта, башҡорт ауылдарында ла уҡытыу эштәре менән шөғөлләнә. Балалар ниндәй телдә һөйләшһә, М.Аҡмулла шул телдә уҡытырға ынтыла.

Хеҙмәтсән башҡорт, татар, ҡаҙаҡ халыҡтарының милли азатлыҡ хәрәкәте барышында иҫке, ҡәҙим мәктәптәрен заман талаптарына ярашлы йәҙит мәктәптәре итеп үҙгәртергә тырышалар. Уларҙың белемгә, мәғрифәткә ынтылышын ҡәнәғәтләндереүҙә Мифтахетдин Аҡмулла ла ҡатнаша. Улар уҡытыуҙың алдынғы алымдарын файҙалана, балаларға хеҙмәт күнекмәләре бирергә ынтыла, хеҙмәткә өндәй.

Сит ерҙәрҙә ун өс йыл йөрөгәс, М.Аҡмулла тыуған ауылы Туҡһанбайға ҡайта. Ләкин оҙаҡ тормай, тағы сығып китә. Тәүҙә ул

Троицк янындағы Ҡарабалыҡ ҡаҙаҡтары араһында мөғәллим булып йөрөй. Унда үткер телле шағир булараҡ танылa. Уны башҡорт ауылдарында ла, ҡаҙаҡ далаларында ла йор һүҙле сәсән тип беләләр.

1872 йылда М.Аҡмулла Ҡазанда була, унда татар халҡының бөйөк мәғрифәтселәре Шиһабетдин Мәржәни, Ҡәйүм Насыри менән таныша, шунан Петербургка ла барып сыға. 1881 йылда М. Аҡмулла йәнә Троицк яҡтарына юллана. Моҡтаған исемле ҡаҙаҡ ерендә балалар уҡытыу менән шөғөлләнә, башҡа ерҙәрҙә ғүмер кисерә. 1894 йылда илсе сәсән Өфөгә килеп, шул замандың күренекле зыялылары Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Ризаитдин бин Фәхретдинов һәм башҡалар менән таныша. Бер мәжлестә М. Аҡмулла менән М.Өмөтбаевтың шиғыр әйтеше ойошторола. Шунан ул үҙ шиғырҙарын баҫтырып сығарыу өсөн Р.Фәхретдиновҡа ебәрергә вәғәҙә бирә. 1894 – 1895 йылғы ҡышты ҡаҙаҡ дуҫы Моҡтағанда үткәрә, яҙын Златоуст яғына юл тота.

1981 йылда мәғрифәтсе шағир һәм мөғәллим Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына 150 йыл тулыу айҡанлы, уның биографияһын һәм уҡытыу эшмәкәрлеген аныҡлау буйынса ҙур эш башҡарылды. Уның ысынлап та башҡорт шағиры һәм мөғәллиме булыуы асыҡланды.

Мифтахетдин Аҡмулла, башҡорт халҡының батыры, сәсән-шағиры Салауаттан һуң беренсе булып, үҙ халҡына, башҡорттарым, тип мөрәжәғәт итте, уны эске ярһыу менән мәғрифәткә, ғилемгә саҡырҙы.

Үҙ халҡын мәҙәниәтле, мәғрифәтле итеп күрергә тырышыу, тормошта ошо идея менән янып йәшәү Мифтахетдин Аҡмулланы һәр ваҡыт тәрән фекерле шиғырҙар яҙырға илһамландырып, саҡырып торҙо. Бына шундай шиғырҙарҙың бер генә строфаһы:

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк,
Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк.
Аңғыра айыуҙан Уралдағы ҡурҡҡандай,
Эй, туғандар, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк.

Кешеләр менән аралашҡанда саф, аҡ күңелле булғаны, халыҡты мәғрифәткә һәм мәҙәниәткә өндәгәне, был изге эштәргә тулыһынса бирелгәне өсөн, мөғәллим мулланы ҙурлап, Аҡмулла тип йөрөтәләр. Был исем уның фамилияһына әйләнә.

Мифтахетдин Аҡмулла шиғырҙарын төрки телдә яҙа, фәндең әһәмиәтен аңлай, фән вәкилдәрен юғары баһалай һәм үҙ халҡын улар өлгөһөндә белемле итергә ынтыла. Мифтахетдин Аҡмулла әҫәрҙәренең күбеһе уның педагогик ҡараштарын, ысын белем өсөн көрәшен сағылдыра. Шағир-мөғәллим ҡырағай ғөрөф-ғәҙәттәр менән ҡыйыу көрәшә, наҙан муллалар менән тиңдәшһеҙ алышҡа күтәрелә, халыҡты яҡтылыҡҡа, мәҙәниәткә һәм мәғрифәткә саҡыра.

Мифтахетдин Аҡмулланың үҙе иҫән саҡта бер генә китабы – «Даменла Шиһабетдин хәҙрәтнең мәрҫиәсе» донъя күрә. Шағир вафат булғандан һуң, уның бер нисә йыйынтығы Ҡазанда, Алма-тыла баҫылып сыға. 1981 йылда Өфөлә бер ни тиклем тулы шиғырҙар китабы нәшер ителә.

Шағир, мөғәллим мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулланың ижади мираҫын халыҡҡа кире ҡайтарыуҙа башҡорт ғалимдары Рәшит Шәкүр, Әхәт Вилданов маҡтаулы эш башҡара: әҙәби әҫәрҙәренең тулы йыйылмаһын туплай, ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара. Хәҙерге ваҡытта ил ағаһының тыуған ере – Миәкә районында Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге премия булдырылған. Уға әҙәбиәт, мәғрифәт һәм мәҙәниәт вәкилдәренең хеҙмәттәре тәҡдим ителә, уға лайыҡ булғандар Мифтахетдин Аҡмулла премияһы лауреаттары тип баһалана.

## АЛЕКСАНДР ГРИГОРЬЕВИЧ БЕССОНОВ

*(1848 – 1917)*

Башҡорт мәғарифы тарихында уҡытыусы, халыҡ училищелары инспекторы Александр Григорьевич Бесссоновтың «Букварь для башкиръ» исемле китабы иң ҡәҙерле ҡомартҡыларҙың береһе булып һанала. Автор үҙе – этнограф; башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, удмурт телдәренең мәшһүр белгесе; башҡорт халыҡ әкиәттәрен йыйған фольклорсы.

Александр Григорьевич Бессонов 1848 йылдың 14 декабрендә Вятка ҡалаһында (хәҙер Киров) ваҡ сауҙагәр ғаиләһендә тыуған. Рухани семинарияла белем алғас, ул Ҡазан рухани академияһында уҡый. Тәүҙә Уржум өйәҙендә, шунан Ҡазанда уҡытыусы булып эшләй.

1880 йылда Ырымбур уҡыу округы инспекторы В.В.Катаринский А.Г.Бессоновты үҙе янына эшкә саҡыра. Ул татар уҡытыусылар мәктәбендә урыҫ теле һәм педагогика уҡыта, 1882 – 1889 йылдарҙа Орскиҙа, 1889 – 1906 йылдарҙа Екатеринбург өлкәһендә ҡаҙаҡ мәктәптәре инспекторы, 1906 – 1909 йылдарҙа Орск һәм Верхнеурал өйәҙҙәрендә халыҡ училищелары инспекторы була, башҡорт һәм ҡаҙаҡ телдәрен өйрәнә, халыҡ әкиәттәрен, мәҡәлдәрен, йомаҡтарын йыя.

Александр Григорьевич Бессонов 1909 йылдан ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем, 1917 йылға ҡәҙәр, Кукарка биҫтәһендә (Киров өлкәһенең Советск ҡалаһы) йәшәй, мәктәптә уҡытыу-тәрбиә эштәре менән шөғөлләнә.

1880 – 1881 йылдарҙа А.Г.Бессонов «О говорах татарского наречия и об отношении его к ближайшим к нему наречиям и языкам», «О значении названий татарских и башкирских селений Приуралья» кеүек мөһим мәҡәләләр яҙа, «Хрестоматия для киргизских училищ» китабын баҫтырып сығара. Бында ҡаҙаҡ теле һәм училищелары тураһында һүҙ бара. Ул оҙаҡ йылдар башҡорт йәнле һөйләү телен, уның диалект һәм һөйләш үҙенсәлектәрен өйрәнә. Башҡорт диалекттары уның «Первая после букваря книга для чтения для северо-восточных башкиръ» (Ҡазан, 1906), «Первая после букваря книга для чтения для юго-восточных башкиръ» (Ҡазан, 1906), «Букварь для башкиръ» (Ҡазан, 1907) китаптарында сағылыш тапҡан. Александр Григорьевич Бессонов – башҡорт диалектологияһына һәм топонимикаһына нигеҙ һалыусыларҙың береһе.

А.Г.Бессоновтың «Букварь для башкиръ» тигән китабы 1907–1917 йылдарҙа урыҫ-башҡорт мәктәптәрендә киң файҙаланыла. Бигерәк тә туған тел уҡытыуҙы урыҫ графикаһы нигеҙендә алып барыу тарихында ул ҙур әһәмиәткә эйә.

«Букварь для башкиръ» китабы 46 биттән тора. Материал икегә бүленә: 3 – 25-се биттәрҙә башҡорт һүҙҙәрендә өн һәм хәрефтәр үтелә, артабан башҡортса һәм урыҫса текстар аралаштырып урынлаштырыла. 3 – 14-се биттәрҙә каллиграфия өлгөләре бирелә, өн анализы һәм синтезы методы нигеҙендә 15 хәрефте танырға өйрәтеү күҙ уңында тотола. 32 – 38-се биттәрҙә логик күнегеүҙәрҙе һүрәттәр (йорт хайуандары һәм ҡырағай йәнлектәр) менән биҙәү айырыуса уңышлы килеп сыҡҡан.

«Букварь для башкиръ» китабында «Яман һәм яҡшы», «Ҡаһым түрә», «Ихсан старшина», «Приглашение в школу», «Утром» кеүек бик матур текстар, «Бейәнән ала ла тыуа, ҡола ла тыуа», «Керер ишегеңде ныҡ япма», «Кешегә хаслыҡ ҡылма», «Дәртем бар, дарманым юҡ», «Ата даны менән ҡыҙ үтә», «Ахмаҡҡа закон юҡ», «Оятһыҙҙың бите ҡанһыҙ», «Белер-белмәҫ һүҙҙе һөйләмә», «Һылыу һылыу булмаҫ, һөйгән – һылыу» һымаҡ мәҡәлдәр, тапҡыр һүҙҙәр һәм һөйләмдәр ҙур урын алып тора.

39 – 42-се биттәрҙә автор урыҫ графикаһы нигеҙендә төҙөлгән башҡорт алфавитын ғәрәп азбукаһы менән сағылдырған таблица тәҡдим итә. Унда *ә, ү, ө, һ, ҫ, ң* хәрефтәре өсөн *ӓ, ӱ, ӧ, г̆, с̆, й̈* тамғалары бирелә. *Ҡ, ҙ* хәрефтәренә ике телдә лә бер үк төрлө тамғалар ҡулланыу тәҡдим ителә.

Был китапта хәҙерге орфографияға өлгө булырлыҡ яҙылыштар ҙа байтаҡ (мәҫәлән, уаҡыт, уафат, йуҡ, тойаҡ һ. б.).

А.Г.Бессонов *я, ю, і, о, у* хәрефтәрен урыҫ һүҙҙәрендә генә яҙыу отошло тип иҫәпләй. «Букварь» китабы берәмектән дөйөмгә барыу принцибы нигеҙендә төҙөлгән (хәрефтәрҙән – ижектәр, ижектәрҙән – һүҙҙәр, һүҙҙәрҙән – һөйләмдәр, һөйләмдәрҙән телмәр төҙөү, ҡағиҙәләр менән ябай формала таныштырыу һәм башҡа принциптар асыҡ ҡына күренә).

Китаптың 43 – 46-сы биттәрендә башҡорт теленә генә хас өндәргә ҡылыҡһырлама бирелә. Александр Григорьевич Бессонов үҙенең «Букварь для башкиръ» китабын урыҫ графикаһы нигеҙендә яғымлы, иҫ киткес матур һәм ябай башҡорт телендә уҡырға өйрәнергә һәм уны яратырға саҡырыу һүҙҙәре менән тамамлай.

А.Г.Бессоновтың балаларҙы уҡырға һәм яҙырға өйрәтеү тураһындағы китаптары заманы өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булды. Әлбиттә, уларҙың социаль-сәйәси шарттарға ярашлы етешһеҙлектәре лә бар ине. Шулай ҙа башҡортса уҡырға һәм яҙырға өйрәтеү тарихында был китаптар айырым урын алып тора.

Күренекле тел белгестәре, әлифбасылар ғилми-тикшеренеү эштәрендә йыш ҡына А.Г.Бессоновтың китаптарына мөрәжәғәт итәләр, фәнни һығымталарын уның хеҙмәттәре менән нығыталар һәм байыталар.

А.Г.Бессоновтың башҡорттар араһынан ғүмер буйы йыйған әкиәттәре 1941 йылда ғына «Башҡорт халыҡ әкиәттәре» исеме менән баҫылып сыҡты. Уға атаҡлы тюрколог, профессор Н.К.Дмитриев баш һүҙ яҙған.

Оҙаҡ йылдар буйы туплаған башҡорт халыҡ әкиәттәренең ҡулъяҙма йыйынтығы өсөн А.Г.Бессонов 1909 йылда Рәсәй География йәмғиәтенең кесе алтын миҙалына лайыҡ була.

## МИРСӘЛИХ МӨРСӘЛИМ улы БИКСУРИН

*(1819 – 1903)*

XIX быуатта йәшәгән һәм хеҙмәт иткән күренекле башҡорт педагогы, мәғрифәтсе ғалим һәм яҙыусы Мирсәлих Мөрсәлим улы Биксурин халыҡ мәғарифы һәм мәҙәниәт тарихында М.Аҡмулла, М. Өмөтбаев кеүек оло зыялылар сафында күркәм урын биләй.

Мирсәлих Мөрсәлим улы Биксурин 1819 йылда Ырымбур губернаһында дворян, обер-офицер ғаиләһендә тыуған. 1830 йылда Мирсәлихте ата-әсәһе Ырымбур И.И.Неплюев хәрби училищеһына (1844 йылдан – кадет корпусы) уҡырға бирә. Был уҡыу йортонда Мирсәлих Биксурин үҙен тик яҡшы яҡтан ғына күрһәтә. 1837/38 уҡыу йылы өсөн төҙөлгән отчетта ул Европа һәм Азия бүлектәренең йөҙләп уҡыусыһы араһында «бик яҡшы әхлаҡи сифаттары һәм уҡыуҙа юғары уңыштары менән» айырылып торған 17 курсант исемлегенә индерелгән. Училищела ул тарих, география, математика, урыҫ теле һәм әҙәбиәте, ғәрәп, фарсы, татар телдәре һәм хәрби дисциплиналарҙан төплө белем ала. Уҡыу йортон 1838 йылда коллежский регистратор дәрәжәһендә тамамлай. Ырымбур хәрби губернаторы күрһәтмәһе буйынса, Мирсәлих Мөрсәлим улы Биксурин И.И.Неплюев хәрби училищеһында бергә уҡыған курсант менән сик буйы комиссияһында тәржемәсе итеп тәғәйенләнә. 1841 йылдың апрелендә училищеның түбән синыфтарында ғәрәп һәм фарсы телдәре уҡытыусыһы итеп алына, биш йылдан һуң был телдәр буйынса өлкән уҡытыусы итеп билдәләнә.

1844 йылда батша хөкүмәте ҡаҙаҡтарҙан писарҙар һәм тәржемәселәр әҙерләү өсөн Ырымбур сик буйы комиссияһы эргәһендә махсус мәктәп астыра. Мирсәлих Биксурин 1850 – 1869 йылдарҙа унда ҡаҙаҡ балаларына татар теле, һуңға табан урыҫ һәм ҡаҙаҡ телдәрен уҡыта. Был хеҙмәте өсөн ул 1869 йылда II дәрәжә Анна ордены менән бүләкләнә. Был унын тормошонда алған тәүге ҙур бүләк, артабан бындай баһаларға күп тапҡыр лайыҡ була.

М.М.Биксурин үҙ эшен бик яратып, бөтә күңелен биреп башҡара, башҡорт, ҡаҙаҡ, татар зыялыларын әҙерләүгә, был халыҡтарҙың ижтимағи аңын, мәҙәниәтен үҫтереүгә ҙур өлөш индерә. Унда белем һәм тәрбиә алыусылар араһында И.Алтынсарин, М.Өмөтбаев кеүек белемле, ялҡынлы мәғрифәтсе-демократтарҙың булыуы быны асыҡ раҫлай.

1857 йылда кадет корпусының Европа бүлегендә Көнсығыш телдәрҙе уҡытыу бөтөрөлгәс, М.М.Биксурин унда уҡыусыларға ғәмәли дәрестәр үткәреү өсөн ҡалдырыла. 1859 йылда уға 20 йыл уҡытҡан өсөн пенсия билдәләнә, әммә ул яратҡан эшен, бер аҙ өҙөклөктән һуң, артабан дауам итә. Шунан 1865 йылда Төркөстанда тәржемәсе, 1866 йылда кадет корпусының Көнсығыш телдәр буйынса кәңәшсе-уҡытыусыһы булып эшләй, өс айҙан йәнә Урта Азияға тәржемәсе итеп ебәрелә, 1867 йылдың сентябрендә кадет корпусын үҙгәртеү һөҙөмтәһендә төҙөлгән 4-се

хәрби училищеға, артабан хәрби гимназияға Көнсығыш телдәр уҡытыусыһы итеп тәғәйенләнә, бер үк ваҡытта ул Ырымбур генерал-губернаторы канцелярияһында Көнсығыш телдәр тәржемәсеһе вазифаһын башҡара.

Хәрби уҡыу йорттарында һәм башҡа урындарҙа эшләү осоронда М.М.Биксурин Ырымбур йәмәғәтселегендә, уҡытыусылар, хәрби кешеләр, халыҡ араһында иң абруйлы кешеләрҙең береһе булып таныла. Ул коллежский секретарь, титулярный советник, статский советник дәрәжәләренә лайыҡ була, Владимир таҫмаһы, Изге Станислав, Изге Владимир ордендары менән бүләкләнә.

М.М.Биксурин уҡытыу һәм тәрбиә эштәре менән генә сикләнмәй, фән, әҙәбиәт, хәрби эш өлкәләрендә лә шаҡтай хеҙмәт күрһәтә. Иң тәүҙә ул йәмәғәтселеккә Көнсығыш телдәр буйынса уҡытыу ҡулланмаһы төҙөүсе педагог-ғалим булып таныла. Уның был китабы «Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с наречиями бохарцев, башкир, киргизов и жителей Туркестана» тип атала. Китап 1859 йылда Ҡазанда баҫылып сыға, бер аҙ үҙгәртелгән икенсе баҫмаһы 1869 йылда донъя күрә. Ҡулланмала «Батыр батшаның хикәйәте» әҫәре башҡорт фольклористикаһында тәүге тапҡыр туған телдә баҫыла. М.М.Биксурин «Өс туған» әкиәтен «Император Ҡазан университетының ғилми яҙмалары»ның 3-сө китабында башҡортса әҙерләп сығара.

Мирсәлих Мөрсәлим улы Биксуриндың эшмәкәрлегендә башҡорт мәҙәниәте һәм мәғарифы тарихында тәүге тапҡыр башҡорт яҙма әҙәби телен булдырыу, балаларҙы туған телдә уҡытыу кеүек алдынғы йүнәлеш ғәмәлдә тормошҡа ашырыла.

М.М.Биксурин халыҡ ижады өлгөләрен китапта әкиәт, мәҡәл, әйтемдәргә бүлеп урынлаштыра. Был әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе йыйыусының ижтимағи-эстетик, педагогик ҡараштарын асыҡ күрһәтә. Автор үҙ китабына башҡорт, татар, ҡаҙаҡ әҙәбиәттәре өлгөләрен дә, фарсы, ғәрәп әҙәбиәттәре әҫәрҙәрен дә индерә. Уның ҡулланмаһы бер нисә ҡәрҙәш төрки телдәрҙе урыҫ, фарсы телдәре менән сағыштырып өйрәнеү буйынса тюркология тарихында тәүге тәжрибә булды.

Урта Азияла тәржемәсе булып эшләгән ваҡытта М.М.Биксурин урындағы халыҡтарҙың көнкүрешен, хужалыҡ алымдарын, матди һәм рухи мәҙәниәтен өйрәнә. 1872 йылда уның «Төркөстан төйәге» тигән юлъяҙмалар йыйынтығы донъя күрә. «Төркөстандың Тәре хәҙрәт мәсетен һүрәтләү», «Төркөстан өлкәһендәге клевер», «1866 йылда Һырдаръя аръяғындағы урыҫтар тарафынан баҫып алынған

ерҙәрҙе һүрәтләү», «Беҙҙең Урта Азия сауҙаһының торошо тураһында» тигән мәҡәләләрҙән торған был йыйынтыҡтың авторы Төркөстанды яҡшы белеүен асыҡ күрһәтә. Был китап та Ҡазанда университет яҙмаларында донъя күрә.

Мирсәлих Мөрсәлим улы Биксурин урыҫ телен һәм әҙәбиәтен бик яҡшы белә. Ул кадет корпусы китапханаһындағы барлыҡ китаптарҙы ла алып уҡый, башҡорт, татар, ҡаҙаҡ балаларына урыҫ телен белеүҙең әһәмиәте тураһында әңгәмәләр үткәрә, урыҫ әҙәбиәтенән шиғырҙар, проза әҫәрҙәренән өҙөктәр уҡып ишеттерә. Мөғәллим үҙенең уҡытыу-тәрбиә эшендә урыҫ әҙәбиәтенең тәьҫирле, тәрбиәүи әһәмиәткә эйә булған иң яҡшы өлгөләрен оҫта файҙалана. Уларҙы уҡытыусы һәр яҙыусыға, халыҡ ижады әҫәрҙәренә айырым тотолған дәфтәрҙәренә алдан яҙып ала.

Мирсәлих Мөрсәлим улы Биксурин балаларҙы Көнсығыш халыҡтарҙың теле, әҙәбиәте һәм мәҙәниәте менән таныштырыуға ҙур иғтибар бирә. Ул буласаҡ офицерҙарҙың юғары белемгә ныҡлы эйә булыуҙарын талап итә. Быны өсөн уҡытыусы балаларға ғәрәп, фарсы һәм башҡа телдәрҙән төплө белем биреү өҫтөндә арымай-талмай эшләй.

Мирсәлих Мөрсәлим улы Биксуриндың күп яҡлы педагогик, ғилми-әҙәби һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге Ырымбур төйәгендә, шулай уҡ Башҡортостанда ла ижтимағи фекер, мәғариф, мәҙәниәт, фән, әҙәбиәт тарихында тәрән эҙ ҡалдыра. Уның башҡорттарға күрһәткән хеҙмәтен халҡыбыҙ бер ҡасан да онотмаҫ.

## ШӘМСЕТДИН ЗӘКИ
## (Шәмсетдин Йәрмөхәмәт улы Ғөбәйҙуллин)

*(1822 – 1865)*

Мөғәллим һәм шағир Шәмсетдин Йәрмөхәмәт улы Ғөбәйҙуллин башҡорт мәғрифәтселеге һәм әҙәбиәте тарихында Шәмсетдин Зәки исеме менән ингән. Ул уҡыусы балаларҙы, шул замандағыса әйткәндә, шәкерттәрҙе уҡытыу һәм тәрбиәләү эшендә, башҡорт әҙәбиәтендә мөһим урын алып тора.

Шәмсетдин Йәрмөхәмәт улы Ғөбәйҙуллин (Шәмсетдин Зәки) Башҡортостандың хәҙерге Көйөргәҙе районы Зәк-Ишмәт ауылында 1822 йылдың 28 апрелендә мулла ғаиләһендә тыуған. Тыумыштан тома һуҡыр бала бик зирәк, отҡор була, атаһы бер тапҡыр уҡыған хәҙистәрҙе, йәғни әхлаҡ, көнкүреш ҡағиҙәләрен, шунда уҡ отоп алып, күңеленә һеңдерә. Белемде ул тәүҙә ауыл мәҙрәсәһендә үҙләштерә. Унып күп белергә тырышыуы, белемгә һыуһауы артабан Стәрлетамаҡ өйәҙенең Әтәс, атаҡлы Ашҡаҙар-Балыҡлы мәҙрәсәләренә алып бара. Ләкин Шәмсетдин Зәки был мәҙрәсәләрҙә алған белеме менән мөрхәтһенмәй, артабан уҡырға ынтыла.

Теләген бойомға ашырыу маҡсатында Шәмсетдин Зәки Ҡазан ҡалаһының Мөхәмәткәрим мәҙрәсәһенә барып эләгә. Оҙон-оҙон әҫәрҙәрҙе, халыҡ ижады өлгөләрен, Ҡөрьән Кәримде отоп ала, яттан һөйләй. Көнсығыштың Сәғҙи, Ғаттар кеүек шағирҙары менән ныҡлап ҡыҙыҡһына, уларҙың әҫәрҙәрен бер уҡыуҙа ятлап ала. Башҡорт шәкерте үҙенең күп белеүе менән Ҡазан шәкерттәрен хайран ҡалдыра.

Шәмсетдин Зәки Ҡазанда уҡыған йылдарҙа ижад эше менән шөғөлләнә башлай. Ул заманда яҙыу теле булып һаналған төрки телдә шиғырҙар ижад итә, үҙенең көсөн ғәрәп, фарсы, төрөк телдәрендә ижад итеүҙә һынап ҡарай. Был телдәрҙә ижад иткән әҫәрҙәрен үҙе төрки телгә тәржемә итә.

Тома һуҡыр булһа ла, Шәмсетдин Зәки ҡул эштәренә бик оҫта булған: боҙолған сәғәтте һүтеп төҙәтә, бысаҡ яһай, балта, көрәк һаплай, йорт-ҡура эштәрен бер үҙе башҡара алған.

Ҡазан мәҙрәсәһендә төплө белем һәм күнекмәләр алғас, Шәмсетдин Зәки 1848 йылда Зәк-Ишмәт мәҙрәсәһенә ҡайтып, балалар уҡыта башлай. Унып яҡшы мөғәллим булыуы, күпте белеүе тураһындағы һүҙҙәр Башҡортостанда һәм унан сит тарафтарҙа ла ишетелә. Хатта Урал аръяғынан килгән Тамъян-Түңгәүер шәкерттәре Зәк-Ишмәттә тирмә, ҡыуыш ҡороп ята, Шәмсетдин Зәкиҙән һабаҡ ала. Мөғәллим уларға Ҡөрьән Кәрим аяттарын, хәҙистәрен ятлап алырға ҡуша, ә үҙе Ҡөрьән Кәримде тотош яттан уҡып ишеттерә. Ул шәкерттәргә ғилемде аңлап үҙләштерергә тәҡдим итә, уларҙың һабаҡтарын белеү-белмәүен һөйләү, ятлау күнекмәләре нигеҙендә асыҡлай.

1850 йылда Шәмсетдин Зәки барлыҡ шәкерттәре менән бергә заманында даны алыҫтарға таралған Стәрлебаш мәҙрәсәһенә барып, мөғәллим булып урынлаша, шәкерттәре уҡырға инә. Стәрлебаш мәҙрәсәһе идарасыһы Ниғмәтулла Биктимеров сәсән шағир, уҡымышлы мөғәллим Шәмсетдин Зәкиҙең килеүен хуплап ҡаршы-

лай, уға уңыштар теләй. Мөғәллим ысынлап та ҙур уңыштарға ирешә. Быны уның билдәле кешеләр булып киткән шәкерттәре миҫалында күрергә мөмкин. Мәҫәлән, Башҡортостандың буласаҡ арҙаҡлы сәсән шағиры, мәғрифәтсеһе, ғалимы, мөғәллиме Аҡмулла Шәмсетдин Зәкиҙән һабаҡ ала. Мөғәллим үҙенең шәкертендә ижад итеү теләге уята, иң тәүге әҫәрҙәрен хуплай. Шиғриәткә мөкиббән бирелгән мөғәллим менән шәкерт икәү осрашып күрешкәндә йыш ҡына шиғыр юлдары әйтешкән, ҡайһы ваҡыт, остаз менән шәкерт икәнлектәрен дә онотоп, бер-береһенә шиғырҙарын ярһып уҡыр булған.

Шәмсетдин Зәки үҙенең уҡытыу алымдары менән белем һәм тәрбиә биреүҙә айырым урын алып тора. Уның уҡытыу ысулдары телдән һөйләүгә, ятлап алыуға, аңлап үҙләштереүгә нигеҙләнә. Мөғәллим күп нәмәләрҙе үҙе яттан һөйләй алыуы менән шәкерттәрендә ла шундай күнекмәләр тәрбиәләй, уларҙың был сифатын артабан үҫтерергә булышлыҡ итә.

Шиғриәте менән Шәмсетдин Зәки башҡорт әҙәбиәтен байыта. Ул – сәсәндәр ижадына ҙур өлөш индергән шағир. Күренекле ғалим Ризаитдин бин Фәхретдинов Шәмсетдин Зәкиҙе, бөйөк әзербайжан шағирына тиңләп, «Урал – Волга буйы Физулийы» тип атай.

Шәмсетдин Зәкиҙең шиғырҙары Башҡортостан мәҙрәсәләрендә киң тарала. Уларҙы һәр мөғәллим, һәр шәкерт яттан белә, авторын ололап телгә ала.

Хәтирәләренән күренеүенсә, бөйөк башҡорт юлбашсыһы һәм ғалимы Зәки Вәлиди Туған да Шәмсетдин Зәкиҙең түбәндәге шиғыр юлдарын йыш ҡына иҫенә төшөрөр булған:

Был йыһан шәһәренең, баҙарының сауҙаһы күп,
Ҡыл сауҙаны, йәнә әллә була, әллә булмай…
Ат һинең аҫтыңдалыр, йөрө гел, был ерҙең сигенә сыҡ,
Ҡабат ул ат һинең аҫтыңда әллә була, әллә булмай…

Оло педагог-мөғәллим, атаҡлы шағир Шәмсетдин Зәки 1865 йылдың көҙөндә Ҡөрьән Кәрим ғәмәлдәренең береһен – хаж ҡылыуҙы үтәү өсөн оҙон, ауыр юлға сыға, әммә маҡсатына ирешә алмай, китеп барғанда Таганрог ҡалаһында вафат була.

# ЗЫЯ КАМАЛЫЙ (Зыяитдин Ямалетдин улы Камалетдинов)

*(1873 – 1942)*



Донъя гиҙеп, заманының күренекле уҡыу йорттарында белем алған, уны халҡының аңын күтәреүгә, тормошон еңеләйтеүгә, көнкүрешен яҡшыртыуға бағышлаған зыялылар араһында Зыя Камалый үҙенә генә хас айырым урын алып тора. Ул – халҡыбыҙҙың йөҙөк ҡашы тип баһаланырға хаҡлы мәғрифәтсе, атаҡлы «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә нигеҙ һалып, шәкерттәрен уҡытыу һәм тәрбиәләү эшен яңыса ойошторған реформатор мөғәллим, етәксе.

Зыя Камалый, тулы исем-шәрифтәре Зыяитдин Ямалетдин улы Камалетдинов, 1873 йылдың 22 декабрендә Башҡортостандың хәҙерге Шишмә районы Келәш ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Атаһы тормоштоң әсеһен-сөсөһөн мул татый, бәхетте илдәр, ер-һыуҙар буйлап эҙләй, Волгала – бурлаҡ, станция, пристандәрҙә йөк ташыусы, кочегар булып, төрлө ауыр эштәр башҡара. Сит ерҙәрҙә оҙаҡ йөрөгәндән һуң, ул тыуған ауылы Келәшкә ҡайтып, кирбес һуғыу эшенә тотона, йорт төҙөп инә, өйләнә, дүрт ир бала, ике ҡыҙ тәрбиәләп үҫтерә. Баш балаһы Фәрүәзетдин бик зиһенле, отҡор була, хеҙмәт һөйөп үҫә, ишеткән-күргәндәрен хәтерендә ныҡ ҡалдыра. Алты йәшендә ул атаһы менән кирбес һуға, ат башында йөрөй, ун йәшендә бесән саба. Баш балаға күберәк төшә шул.

Мәҙрәсәлә ғәрәп теле дәрестәрендә Фәрүәзетдин иҫ киткес зирәклек күрһәтә. Унын ятлап алыу һәләте көслө була. Мәҙрәсә мөғәллиме быны үҫмерҙең атаһына еткереп, улының был сифатын үҫтерергә өндәй. Ата кеше шулай эшләй ҙә. Улының уҡыуға, белем алыуға ынтылышын һәр саҡ хуплап ҡына тора, тишек-тошоҡ кейемен кейҙереп, санаға ултыртып, үҙе мәктәпкә алып бара.

1888 йылда 15 йәшлек Фәрүәзетдин Камалетдинов Өфөгә бәхет эҙләп сығып китә. Ул данлыҡлы «Ғосмания» мәҙрәсәһенә уҡырға

инә, унда бик яҡшы уҡый, буш ваҡытында байҙарға тамаҡ хаҡына ялланып эшләй. Уҡыуҙы тамамлағас, Фәрүәзетдин Камалетдиновты хәйриә йәмғиәте Мысырға уҡырға ебәрә. Йәш егет Ҡаһирәнең Әл-Әзһәр дарелфөнүнендә (университетында) – XI быуатта төҙөлгән «Дар-әл хикмә»лә («Белем йорто»нда) белемен күтәрә, ғәрәп, инглиз, француз, немец телдәрен, Көнсығыш әҙәбиәтен өйрәнә. «Белем йорто» янында обсерватория ла бар. Унда күренекле астрономдар, йондоҙсолар, тарихсылар, фәйләсуфтар, математиктар, физиктар, башҡа фән әһелдәре ғилем менән шөғөлләнә. Бына ҡайҙа ул фән донъяһы! Обсерватория китапханаһында, уҡыу залдарында Фәрүәзетдин йыш була, ғилем ынйыларын йыйып, мейеһенә һеңдерә.

Ҡаһирәнең Әл-Әзһәр дарелфөнүнендә фән йондоҙо булып балҡыған Фәрүәзетдин Камалетдинов Истамбул, Бейрут, Александрия ҡалаларына ла барып сыға, унда күренекле мәҙрәсәләрҙә белемен арттыра, аҡылын байыта, Көнсығыштың башҡа илдәрендә лә була. Ҡаһирә университеты ректоры, заманының күренекле ғалимы Ғәбде Мөхәммәд шәкерте менән үҙе һөйләшә һәм уны университетта уҡытыусы булып ҡалырға өндәй. Егет өсөн был көтөлмәгән хәбәр була. Уның ҡайтыуын көткән тыуған ере – һөйгән Ватаны бар ҙа инде! Уны Фәрүәзетдин үҙе лә һағына, йыл, айҙарын ғына түгел, хатта көндәрен түҙемһеҙләнеп һанай. Уның Тыуған илендә халыҡ ярлы, аң-белем йәһәтенән ҡараңғылыҡта көн күрә. Кешеләрҙе уҡытырға, уларға мәғрифәт һәм мәҙәниәт нуры һибергә кәрәк. Аҡылды, алған белемде үҙ мәнфәғәтең өсөн генә файҙаланыу килешеп бөтмәҫ – ул халыҡҡа хеҙмәт итһен, ил яҙмышын еңеләйтеүгә яҡты нур бирһен.

Фәрүәзетдин хөрмәтле үә ҡәҙерле ғилем эйәһе Ғәбде Мөхәммәд Ғәли йәнәптәренә шул турала һөйләй. Уны остазы иғтибар менән тыңлап, фатихаһын бирә. «Бик дөрөҫ уйлайһың, халҡыңа хеҙмәт ит», – ти ул. Әммә уның исемен яратып еткермәүен асыҡтан-асыҡ әйтә, ғәрәпсә мәғәнә көсәйтеүсе зи нигеҙендә яһалған Зыяитдин (яҡтылыҡ нуры) исемен алырға тәҡдим итә. Фәрүәзетдин үҫмер бына шунан һуң Зыяитдин егет булып Өфөгә ҡайта. Был инде 1904 йылдың авгусы була.

Зыяитдин Камалетдиновты халыҡ Зыя Камалый тип исем-фамилияһын ҡыҫҡартып йөрөтә, быны үҙе лә хуп күрә. Уны остазы, «Ғосмания» мәҙрәсәһе хакимиәте башлығы Хәйрулла Усманов Ғәли йәнәптәре эшкә саҡыра. Был данлыҡлы мәҙрәсәлә Зыя Камалый бер йыл эшләй. Ул яңы мәҙрәсә асырға уйлай, уй-фекерҙәрен Өфө байҙары, таныштары менән уртаҡлаша һәм эш башлай. 1906 йылда башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ һәм башҡа төрки халыҡ йәштәре – шәкерттәр «Ғәлиә» мәҙрәсәһендә уҡыу йылын башлап ебәрә. Зыя

Камалый унда Көнсығыштың данлыҡлы уҡыу йорттарындағы кеүек уҡытыу алымдарын, ғилемдәрҙе ғәмәлгә индерә.

Был осорҙа мәҙрәсәнең бинаһы ла булмай әле. Шәкерттәр Зариф мулланың мәсетендә уҡый. Зыя Камалый Өфө байҙарына, ярҙам итерҙәй уртаса байҙарға иғәнә һорап мөрәжәғәт итә. Хәйриә йәмғиәте оло эш башҡара. Бер йыл эсендә кирбестән өс ҡатлы мөһабәт бина күтәрелә. «Ғәлиә» мәҙрәсәһе шунда күсә. Ул төрки халыҡтарҙың мәҙәниәт усағына әйләнә. Унда буласаҡ яҙыусылар, шағирҙар, журналистар, табиптар, геологтар, тарихсылар, башҡа фәндәр буйынса күренекле ғалимдар уҡып сыға. Мәҙрәсәнең элекке шәкерте, билдәле татар яҙыусыһы Ғ.Ибраһимов тел һәм әҙәбиәт уҡыта, С.Ҡудаш, Х.Туфан, Ш.Бабич, Ш.Фидаи уҡый, М.Ғафури бер йыл булып китә, С.Рәмиев, Ғ.Алпаров, Б.Ишемғолов, С.Ғәбәши, Ә.Зөбәиров белем ала. Мәҙрәсәнең иң йәш шәкерте Сабир Ҡунаҡбаев һуңынан данлыҡлы селекционер булып таныла. Арыштың «Сулпан» сортын килтереп сығарған ғалим Социалистик Хеҙмәт Геройы исеменә лайыҡ була.

Зыя Камалый мәҙрәсәлә донъяуи фәндәр уҡытыуға ныҡлы иғтибар бирә, уларҙы яңыса уҡытыу методтарын һәм алымдарын ғәмәлгә индерә. Уның ғәйәт киң ғилем даирәһе барлыҡ мөғәллимдәргә лә һиҙелерлек ярҙам күрһәтергә мөмкинлек бирә. Ул барыһына ла өлгөрә: уҡыта ла, кәңәшмәләр ҙә үткәрә, хужалыҡ эштәре менән дә шөғөлләнә. Уҡытыу кабинеттарына күп төрлө әҙәбиәт, методик әсбаптар алына, китапхана байытыла, хатта Зыя Камалый уҡып ҡайтҡан Көнсығыш илдәренең уҡыу йорттарынан да бай әҙәбиәт ҡайтарыла. Уның үҙенең дә шәхси китапханаһы була, кәрәкле китаптарҙы мөғәллимдәргә лә, шәкерттәргә лә биреп тора. Мәҙрәсә хакимиәте башлығы, ойоштороу эштәренән тыш, шәкерттәрҙе уҡытыуға, уларҙы үҙе белгән мәғлүмәттәр менән ҡоралландырыуға ҙур әһәмиәт бирә.

Бер үк ваҡытта Зыя Камалый мәғрифәтселек өлкәһендә ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара. «Фәлсәфәүи игьтикадия» («Инаныу фәлсәфәһе») тигән хеҙмәтендә ул кешелек тарихында фәлсәфә, аҡыл, хеҙмәт тураһындағы уй-фекерҙәрен тасуирлай, уҡыусылар менән бай тәжрибәһен һәм белемен уртаҡлаша. Ул мәҙрәсәлә уҡытыла торған һәр фән нигеҙҙәре (мәҫәлән, тарих, ғәрәп, фарсы телдәре, Көнсығыш әҙәбиәт һ. б.) буйынса дәреслектәр ҙә баҫтырып сығара.

«Ғәлиә» мәҙрәсәһе артабан юғары уҡыу йорто вазифаларын үтәй. Был уның эшен ҡатмарлаштыра, иғәнәселәрҙең ярҙамы туҡтала. Октябрь революцияһынан һуң мәҙрәсә ябыла.

«Ғәлиә» мәҙрәсәһе Башҡортостанда мәғрифәт, мәҙәниәтте үҫтереүҙә ғәйәт ҙур роль уйнай. Мәғрифәтселек һәм халыҡ мәғарифы тарихында уның әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ.

Зыя Камалый Өфөлә Ризаитдин Фәхретдинов етәкселегендәге Диниә назаратында эшләй, мәҙрәсәләрҙә уҡыта.

Ул 1937 йылда ҡулға алынып, ун йылға Вологда төрмәһенә оҙатыла. Аслыҡ, нахаҡҡа рәнйетелеү, ялған бәләләр һәм өҫтөнә ябырылған бысраҡлыҡтар Зыяитдин Ямалетдин улы Камалетдиновтың ғүмерен ҡыҫҡарта. Ул 1942 йылда төрмәлә вафат була.

## ВАСИЛИЙ ВЛАДИМИРОВИЧ КАТАРИНСКИЙ

*(1846 – 1902)*

Василий Владимирович Катаринский – урыҫ графикаһы буйынса төҙөлгән тәүге «Букварь для башкиръ» китабының авторы, башҡорт лексикографияһына нигеҙ һалыусы. Уның исеме урыҫ графикаһы менән башҡорт яҙыуы тарихында беренсе һәм күренекле урын алып тора.

Василий Владимирович Катаринский 1846 йылдың 1 мартында тыуған. Урта һәм юғары белемде Ҡазанда тәүҙә рухани семинарияла, шунан рухани академияла ала. 1860 – 1870 йылдарҙа Ҡазан дәүләт университетының тарих-филология факультетында һәм рухани академияла Көнсығыш телдәрҙең танылған ғалимы, күренекле тюрколог, миссионерҙар йәмғиәте идеологы Н.И.Ильминский (1822 – 1891) уҡыта. Василий Катаринский уның иң тырыш һәм яратҡан шәкерттәренең береһе була.

1872 – 1875 йылдарҙа В.В.Катаринский Чебоксар рухани училищеһы смотрителе вазифаһын башҡара һәм шунда урыҫ телен уҡыта. Ул татар һәм сыуаш телдәре буйынса үҙенең ғәмәли күнекмәләрен нығытыу өҫтөндә ныҡышмалы эшләй, башҡорт һәм ҡаҙаҡ телдәрен өйрәнеүгә тәүге ынтылыштар яһай.

1874 йылда Ырымбур уҡыу округы ойошторола. Был округ Ырымбур, Пермь, Өфө губерналарын, Уральск, Турғай өлкәләрен берләштерә. Уға бөтәһе 24 өйәҙ мәктәбе ҡараған. Ҡайһы бер өйәҙ һәм өлкәләр үҙҙәре икешәр районға бүленгән булған. Ырымбур уҡыу округында башҡорт, татар, ҡаҙаҡ мәктәптәре инспекторы вазифаһы индерелә. 1875 йылдың сентябрендә, Н.И.Ильминскийҙың

тәҡдиме буйынса, был вазифаға В.В.Катаринский тәғәйенләнә. Василий Владимирович был эште 27 йыл буйы, ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем, башҡарып, башҡорт, татар, ҡаҙаҡ һәм башҡа халыҡтар араһында ҙур ихтирам ҡаҙана. Ул башҡорт һәм ҡаҙаҡ ауылдарында йыш була, урындағы халыҡтарҙың тормошон, көнкүрешен, айырыуса башҡорт һәм ҡаҙаҡ йәнле һөйләү телдәрен ентекле өйрәнә. Замандаштары уның йә Темәстә, Турғайҙа, Мәтәлдә, Аҡкөсөктә, Сәйетҡолда, йә Мәскәү, Петербург ҡалаларында булыуы, сәйәхәттә күп йөрөүе тураһында иҫкә алалар. В.В.Катаринский үҙ тирәһенә талантлы һәм абруйлы кешеләрҙе тупларға ынтыла. Бигерәк тә А.Г.Бессонов, И.А.Алтынсарин, Б.Ә.Юлыев, М.Ю.Ҡыуатов, Л.К.Әбделғәзизов кеүек йәштәргә ижади теләктәшлек күрһәтә, уларҙы үҙ халыҡтары өсөн файҙалы эштәргә саҡыра.

XIX быуаттың икенсе яртыһында Ырымбур уҡыу округына ҡараған өйәҙҙәрҙә күп кенә урыҫ-башҡорт, урыҫ-татар, урыҫ-ҡаҙаҡ мәктәптәре асыла. Мәҫәлән, урыҫ-башҡорт мәктәптәре Ырымбур губернаһында ғына йөҙгә яҡынлаша, Өфө губернаһында унан да күберәк була. Урыҫ-башҡорт мәктәптәренән Мәтәлдә Л.К.Әбделғәзизов, Аҡкөсөктә М.Ю.Ҡыуатов, Беренсе Этҡолда Б.Ә.Юлыев, Сәйетҡолда М.Ш.Мәжитов кеүек киң билдәле уҡытыусылар эшләй, төрлө йылдарҙа төрлө өйәҙҙәрҙә А.Г.Бессонов, И.А.Алтынсарин һымаҡ мәктәп инспекторҙары эш башҡара. Ырымбур уҡыу округы инспекторы В.В. Катаринский, алдынғы ҡарашлы мөғәллимдәр, мәктәп инспекторҙары урыҫ-башҡорт мәктәптәренең уҡытыу пландарын һәм программаларын тотороҡло итергә тырышҡан. Был осорҙа тәү башлап мәктәп дәреслектәре, методик ҡулланмалар төҙөлә.

Василий Владимирович Катаринский – урыҫ графикаһы нигеҙендә башҡорт һәм ҡаҙаҡ яҙыуын булдырыуҙа иң күп хеҙмәт күрһәтеүселәрҙең береһе. Уға беренсе сиратта Н.И.Ильминский, башҡорттарҙан Б.Ә.Юлыев, М.Ю.Ҡыуатов, ҡаҙаҡтарҙан И.А.Алтынсарин ҙур ярҙам күрһәтә. Ул «Букварь для киргизовъ» (1892), «Букварь для башкиръ» (1892, 1898), «Краткий русско-башкирский словарь» (1893), «Краткий башкирско-русский словарь» (1899–1900), «Грамматика киргизского языка» (1897) тигән һәм башҡа китаптар яҙа, докладтар, мәҡәләләр менән сығыш яһай.

В.В.Катаринский төҙөгән һүҙлектәр һәм дәреслектәр – урыҫ алфавиты нигеҙендә башҡорт яҙыуының тәүге өлгөләре. Улар башҡорт халҡының мәғрифәт тарихында ифрат ҙур әһәмиәткә эйә.

Василий Владимирович Катаринский дәреслектәрен һәм уҡытыу ҡулланмаларын К.Д.Ушинский, Ф.И.Буслаев, Н.А.Корф, Н.Ф.Бунаков, В.П.Вахтеров кеүек мәшһүр педагогтарҙың дидактик принциптарына таянып ижад итә. Мәҫәлән, «Букварь для башкиръ»

китабы – 58 биттән торған бәләкәй генә форматлы дәреслек. Уның 3 – 36-сы биттәрен – башҡорт бүлеге, 37 – 58-се биттәрен урыҫ бүлеге тәшкил итә. Унда башҡорт графикаһы өсөн 28 хәреф тәҡдим ителә.

Балаларға хәрефтәрҙе өйрәтеү тәүҙә өн-хәреф, шунан ижек, һүҙ, һөйләм һәм бәйләнешле текст менән таныштырыуға нигеҙләнә. Мауыҡтырғыс текстар, халыҡ ижады, педагогика һәм дидактика (өгөтнамә) өлгөләре һәр уҡыусының – китап менән танышҡан кешенең иғтибарын йәлеп итә. В.В.Катаринскийҙың хеҙмәттәрен Н.И.Ильминский, П.И.Мелиоранский кеүек күренекле ғалимдар юғары баһалаған.

В.В.Катаринский үҙен белгән барлыҡ халыҡ вәкилдәренең, шул иҫәптән башҡорттарҙың да, оло хөрмәтен яулай, уға һәр ерҙә ҡәҙер күрһәтәләр, рәхмәт белдереп оҙаталар. Уның ғилми-педагогик эшмәкәрлеге махсус өйрәнеүгә лайыҡлы.

## СӘЛИХЙӘН ӘХМӘТЙӘН улы КҮКЛӘШЕВ

*(1811 – 1878)*

Сәлихйән Әхмәтйән улы Күкләшев – башҡорт теле, ауыҙ-тел ижады буйынса күренекле белгес, мәғрифәтсе мөғәллим, дәреслек һәм һүҙлек авторы, үҙ заманының абруйлы ғалимы. Ул үҙенең ижтимағи-педагогик ҡараштарын йәш мөғәллимдәр менән уртаҡлашҡан.

Сәлихйән Әхмәтйән улы Күкләшев 1811 йылдың 11 мартында Ырымбурҙа надворный советник ғаиләһендә донъяға килә. Кесе йәштән уны мәҙрәсәгә уҡырға бирәләр. 1822 йылда И.И.Неплюев хәрби училищеһына уҡырға инеп, 1831 йылда тамамлай, шунан бер аҙ ваҡыт Ырымбур сик буйы комиссияһында тәржемәсе булып эшләй.

1831 йылдың 4 мартында хәрби губернатор «училищеның сығышы буйынса башҡорт тәрбиәләнеүселәренән бер төркөмдө» йыл һайын Ҡазан университетының медицина факультетына уҡырға ебәреү тураһында күрһәтмә сығара. 1832 йылдың мартында

Сәлихйән Күкләшев Бикарыҫлан Собханғолов, Мөхәмәтдин Мөслимов, Хәлил Шәрипов кеүек һабаҡташтары менән медицина факультетына уҡырға әҙерләнеү өсөн Ҡазан гимназияһына юллана. Гимназияла әҙерлек үткәндән һуң, улар университеттың медицина факультетына алына.

Ләкин Сәлихйән Күкләшев медицина факультетын мөрхәтһенеп етмәй, шуға ла 1834 йылдың көҙөндә филология факультетының Көнсығыш бүлегенә күсә. Ике йылдан шул бүлектә уҡыуын бөтөрөп, филология фәндәре кандидаты дәрәжәһенә лайыҡ була. Шунан йәш белгес Ырымбур хәрби училищеһында көнсығыш телдәре буйынса өлкән уҡытыусы булып эшләй, йәштәр менән күңелен биреп шөғөлләнә.

1850 йылда С.Ә.Күкләшев Ырымбур сик буйы комиссияһы эргәһендәге ҡаҙаҡ балалары мәктәбенә ҡараусы-тәрбиәсе (надзиратель) итеп күсерелә. Унда мөғәллим алты йыл эшләй, бер үк ваҡытта училищела көнсығыш телдәр буйынса дәрес биреүен дауам итә. Мөғәллим шәкерттәргә һәм хәрби уҡыу йорто уҡыусыларына көнсығыш, көнбайыш һәм урыҫ телдәре буйынса күп яҡлы белем бирә, уларҙы барлыҡ телдәрҙе лә күңел биреп өйрәнергә, әҙәбиәт менән таныша барырға, яҙыусылар һәм шағирҙар менән хәбәрҙар булырға өндәй. Ул башҡорт һәм башҡа төрки халыҡ балаларын тормошҡа, хәрби эшкә белемле, бөтөн яҡтан да әҙерлекле кешеләр итеп тәрбиәләргә ынтыла. Күренекле мөғәллимдең йәштәргә йоғонтоһо көслө булды. Күптәр яратҡан мөғәллимдәре кеүек мәҙәниәтле кешеләр булып өлгөрә. 1859 йылда коллежский советник исемен алғандан һуң, С.Ә.Күкләшев эшен ҡалдыра.

Сәлихйән Әхмәтйән улы Күкләшев – үҙ заманының күп яҡлы белемгә эйә булған мәҙәниәтле ғалимы, талантлы мөғәллиме. Ул башҡорттарҙың ғына түгел, шулай уҡ ҡайһы бер башҡа төрки, көнсығыш һәм көнбайыш халыҡтарҙың да телен, тарихын һәм әҙәбиәтен яҡшы белә, улар менән уҡыусыларын таныштырыуға, төрлө телдәрҙе өйрәтеүгә ҙур иғтибар бирә. И.И.Неплюев кадет корпусын (хәрби училище шулай тип үҙгәртелә) тикшереү айҡанлы, 1844 йылда генерал И.Анненков Рәсәйҙең хәрби уҡыу йорттары начальнигына рәсми яҙыу ебәрә. Унда шундай юлдар бар: «С.Күкләшев сит ил телдәренән латин, немец, француз, ғәрәп, фарсы һәм татарҙы белә». Бына ошо полиглотлыҡ уның ғилми-педагогик эшмәкәрлеге, бигерәк тә филология өлкәһендәге эҙләнеүҙәре, йүнәлешенә ҙур йоғонто яһай, уның уңышын тәьмин итеүҙә билдәле урын алып тора. Сәлихйән Күкләшев үҙе яҙғанса, «төрөк һәм татар ҡәбиләләре һөйләшкән һәм яҙған «төрки» тигән дөйөм

атама менән билдәле булған» («Диуан хикәйәте татар», Ҡазан, 1859, 1 – 2-се биттәр) телдәрҙе өйрәнеүгә ҙур иғтибар бирә, күп шөғөлләнә. Ғалим Урал – Волга арауығында йәшәгән төрки халыҡтарҙың, атап әйткәндә, башҡорт һәм татарҙарҙың ауыҙ-тел ижады өлгөләрен йыя, яҙма әҙәбиәте һәм айырым вәкилдәренең ижады менән ҡыҙыҡһына.

Төрки телдәр буйынса заман талаптарына яуап биргән дәреслектәр булмау сәбәпле, уҡытыу-тәрбиә эшендә килеп тыуған ҡыйынлыҡтарҙы иҫәпкә алып, С.Ә.Күкләшев «Диуан хикәйәте татар» («Татар хикәйәте йыйынтығы», йәғни «Татар хрестоматияһы») һәм «Словарь к татарской хрестоматии» исемле китаптар яҙа. Уларҙың икеһе лә 1859 йылда Ҡазанда нәшер ителә. Ғалимдың «Татар хрестоматияһы» – күренекле урыҫ педагогы К.Д.Ушинскийҙың уҡыу китабы рәүешендә яҙылған педагогик ҡомартҡы.

Был ваҡытта Рәсәйҙә барған социаль-иҡтисади үҙгәрештәр, заман үҙе башҡорт милли мәҙәниәте эшмәкәрҙәре алдына туған халҡын ағартыу, донъяуи белем таратыу, мәғариф эшен яңыса ойоштороу, кешеләрҙе әүҙем эшмәкәрлеккә әйҙәгән яңы фәлсәфәүи фекер барлыҡҡа килтереү мәсьәләләрен көн тәртибенә ҡуя. Ә уларҙы булдырыу халыҡтың һөйләү теленә нигеҙләнгән. Шуға күрә уға аңлайышлы әҙәби тел һәм әҙәбиәт булдырырға мөмкин. Шуның өсөн дә С.Ә.Күкләшев кеүек уҡымышлы, алдынғы ҡарашлы эшмәкәрҙәр бар иғтибарын иң тәүҙә тел мәсьәләләренә йүнәлтә.

Үҙенең хеҙмәтен «Диуан хикәйәте татар» – «Татар хрестоматияһы» тип исемләгәндә С.Ә.Күкләшев, хәҙерге ваҡытта ҡайһы бер ғалимдар уйлағанса, бары тик татар халҡын, уның телен һәм әҙәбиәтен күҙ уңында тотмай. Унда автор бигерәк тә Ырымбур төйәгендә йәшәгән төрки телле халыҡтарҙың тел мәҙәниәтен баһалауға ҙур иғтибар бирә. Хрестоматия материалдары уҡыусы балаларға ҡыҙыҡлы һәм аңлайышлы, уларҙың йәш һәм психологик үҙенсәлектәренә яуап бирә.

Хрестоматия материалдары төрки халыҡтар өсөн ни ҡәҙәр уртаҡ булмаһын, уларҙы тел үҙенсәлектәре буйынса айырыу бер ҙә ҡыйын түгел. Күп кенә мәҡәл, әйтемдәрҙә башҡорт теленә хас лексик берәмектәрҙе һәм фонетик үҙенсәлектәрҙе осратырға мөмкин. Мәҫәлән: күп эшләгән белмәҫ, күп ҡыҙырған белер; күренгәннең алыҫлығы юҡ, күтәргәннең ауырлығы юҡ; алыҫтағы дошмандан аңдып торған дуст яман. Бындай өлгөләр бик күп.

Сәлихйән Әхмәтйән улы Күкләшев – башҡорт халҡының күренекле педагогы, арҙаҡлы ғалимы, йәмәғәт эшмәкәре. Уның эшмәкәрлеге оло баһаға, айырым өйрәнеүгә лайыҡ.

# МИХАИЛ ИВАНОВИЧ ОБЎХОВ

*(1871 – 1943)*



Халыҡтың ирекле тормошо һәм яҡты мәғрифәте өсөн көрәшселәр араһында Михаил Иванович Обухов төп урындарҙың береһен биләй. Ул – халыҡ уҡытыусыһы, Башҡортостан мәғарифын ойоштороусы, уҡытыу-тәрбиә эшенең яңы йүнәлештәренә нигеҙ һалыусы.

Михаил Иванович Обухов 1871 йылдың 29 октябрендә Түбәнге Новгород губернаһы Арзамас өйәҙе Пешелань ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. 1891 йылда ул Лукьяновка өйәҙе Кендя ауылында земство ҡарамағындағы башланғыс мәктәпкә уҡытыусы итеп ебәрелә. Тәүҙән үк педагогик эшмәкәрлеген халыҡ менән бәйләй. Уҡытыусы аслыҡтан интеккән крәҫтиәндәрҙе яҡлап сыҡҡаны өсөн 1892 йылда тыуған ауылына өс йылға һөргөнгә ебәрелә. Батша охранкаһы уны туҡтауһыҙ эҙәрләй, күп тапҡыр тентеү яһап, бер өйәҙҙән икенсеһенә ҡыуып йөрөтә – уҡытыусы бер мәктәптә ике йылдан артыҡ эшләй алмай.

1905 йылғы революцияла ҡатнашҡаны өсөн М.И.Обухов Архангельск ҡалаһына өс йылға һөргөнгә ебәрелә. 1907 йылда унан ҡаса һәм Шонин исеме аҫтында йәшеренеп йәшәй башлай. 1910 йылда Мәскәүҙә тотолоп, Әстерхан губернаһына тағы һөргөнгә оҙатыла.

1913 йылдың июлендә М.И.Обухов Өфөгә килеп эләгә һәм 1916 йылдың сентябренә ҡәҙәр земство халыҡ мәғарифы бүлегендә статист булып эшләй, артабан бүлек мөдире итеп тәғәйенләнә. 1917 йылдың 16 февралендә Өфө губернаторы М.Башилов: «Михаил Иванович Обуховты бөтә эштәрҙән, земствола һәр төрлө хеҙмәттән бушатырға һәм миңә уның һөҙөмтәләре тураһында тиҙ арала хәбәр итергә», – тип бойороҡ бирә. Ләкин, февраль буржуаз-демократик революцияһының башланыуы һөҙөмтәһендә, губернаторҙың бойороғо үтәлмәй ҡала.

Күҙәтеү аҫтында йәшәүгә ҡарамаҫтан, М.И.Обухов Өфөлә төрлө яҡлы эшмәкәрлек башлап ебәрә. Заманының алдынғы гәзит-жур-

налдарында Шонин псевдонимы менән мәҡәләләр яҙа, демократик ойошмалар эшендә ҡатнаша. Шул уҡ ваҡытта ул урыҫ педагогтары К.Д.Ушинский, Н.Ф.Бунаков, В.В.Водовозов хеҙмәттәре менән танышып, уларҙың идеяларын ҡабул итә. М.И.Обухов һәр йылғы статистик отчеттарында һәм очерктарында күп милләтле башланғыс мәктәптәрҙә уҡыусы балаларҙы, сословие һәм енестәренә ҡарамайынса, туған телдә уҡытыу проблемаһын күтәрә.

М.И.Обухов мәктәптә уҡытыуҙың йөкмәткеһен, дәрес үткәреү системаһын тәнҡитләй, халыҡ мәғарифы өлкәһендә Башҡортостандың ныҡ артта ҡалыуын әсенеп һүрәтләй. 1915 йылда уның «Өфө губернаһы мәктәптәре» тигән монографияһы баҫылып сыға. Ул – мәктәптәрҙе тикшереүгә бағышланған күп яҡлы тәүге һәм берҙән-бер хеҙмәт. Унда автор башҡорт һәм татар халыҡтарының белем алыуға ынтылышын асыҡ һүрәтләй.

М.И.Обухов китапханалар ойоштороуға һәм мәктәптән тыш учреждениелар менән етәкселек итеүгә ҙур иғтибар бирә. Был темаларға байтаҡ хеҙмәттәр яҙа. Ул мәктәптән башҡа ойошмаларҙы халыҡҡа үҙ аллы белем алырға ярҙам итеүсе, уның мәҙәни-ағартыу ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүсе тип ҡарай.

Октябрь революцияһынан һуң М.И.Обухов яңы мәктәп эшен ойоштороуҙа яҡындан ҡатнаша, Өфө губерна халыҡ мәғарифы бүлегендә, мәктәптәрҙә етәксе вазифалар башҡара, ололар өсөн әлифбалар һәм уҡытыу ҡулланмалары баҫтырып сығара. Ул халыҡтың оло ихтирамы менән файҙалана.

## МӨХӘМӘТСӘЛИМ ИШМӨХӘМӘТ улы ӨМӨТБАЕВ

*(1841 – 1907)*



Мөхәмәтсәлим Ишмөхәмәт улы Өмөтбаев – башҡорт халҡының күренекле мәғрифәтсе мөғәллиме, беренсе ғалимы һәм яҙыусыһы. Ул халыҡ мәғарифын үҫтереүгә, йәштәрҙе уҡытыу һәм тәрбиәләү эшенә ҙур өлөш индерә, заманының арҙаҡлы шәхесе булып танила.

Мөхәмәтсәлим Ишмөхәмәт улы Өмөтбаев 1841 йылдың 21 авгусында Өфө губернаһының Ибраһим ауылында (хәҙер Ҡырмыҫҡалы районына ҡарай) 25-се кантон башлығы ғаиләһендә тыуған. Улының үҙе һымаҡ хәрби хеҙмәткәр булыуын теләп, атаһы уны 1852 йылда Ырымбур И.И.Неплюев кадет корпусына уҡырға бирә. Унда М.Өмөтбаев яҡшы уҡый: урыҫ, фарсы, татар телдәрен үҙләштерә, арифметика, география, тарих һәм архитектура сәнғәте буйынса төплө генә белемгә эйә була, һынлы сәнғәт, каллиграфия һәм физкультура буйынса ныҡлы күнекмәләр ала. Быларҙың бөтәһе лә уға күренекле мәғрифәтсе мөғәллим, тәүге башҡорт ғалимы һәм шағиры булып үҫергә мөмкинлек бирә.

М.И.Өмөтбаевтың барлыҡ ғилми эшмәкәрлеге халыҡҡа аң-белем биреүгә, ауыҙ-тел ижадын, телен, тарихын, этнографияһын өйрәнеү менән бәйле эштәргә йүнәлтелгән.

1880 йылда М.И.Өмөтбаев Өфөгә күсә һәм рухани йыйылышта тәржемәсе булып эш башлай. XIX быуаттың 80 – 90-сы йылдарында уның ижады яңы бейеклектәр яулай. Ул Урыҫ география йәмғиәтенең Ырымбур бүлегенә ағза итеп һайлана.

М.И.Өмөтбаевтың эшмәкәрлеге халыҡ ижады әҫәрҙәрен йыйыуҙан һәм баҫып сығарыуҙан башлана. 1886 йылда Өфө ҡалаһына 300 йыл тулыуға (ул ваҡытта Өфө 1586 йылда нигеҙләнгән тип иҫәпләнгән, ә хәҙер уға 1574 йылда нигеҙ һалынған тип ҡарайҙар) әҙерләнеү комиссияһында ҙур эш башҡара. 1899 йылда бөйөк урыҫ шағиры А.С.Пушкиндың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы уның «Баҡсаһарай фонтаны» әҫәрен беренсе булып татар теленә тәржемә итә.

М.И.Өмөтбаевтың халыҡ араһында йыйған фольклор әҫәрҙәре 1883 йылда «Өфө губернаһы мосолмандарының ырымдары, йолалары, мәҡәлдәре һәм мәғәнәле һүҙҙәре» китабында баҫылып сыға. Шунан һуң уның «Фарсыса – татарса – урыҫса һүҙлеге», «Татар нәхүенең мохтасары» китаптары донъя күрә.

«Татар нәхүенең мохтасары» тигән грамматикаһында М.И.Өмөтбаев ғәрәп алфавитын башҡорт, татар телдәренең фонетик үҙенсәлектәренә яҡынайтырға ынтыла һәм 6 хәреф өҫтәй, барлығы 33 хәреф ала, уларҙың ҡайһы берҙәрен яҙыу өсөн ике хәрефте бергә ҡуша. Грамматика авторы йыш ҡына башҡорт теленән миҫалдар килтерә, фактик материалдар ҡуллана. Туған тел материалында ул лингвистика терминологияһын беренсе булып эшләй.

Мәҙрәсә һәм башҡа уҡыу йорттарының уҡытыу программаларына М.И.Өмөтбаев тормошта һәм ғәмәли эштә кәрәкле предметтарҙы, шул иҫәптән урыҫ телен, индерергә тәҡдим итә. Урыҫ булмаған халыҡтар араһында Европа мәғарифын таратыу өсөн,

уның фекеренсә, туған телдә тәү башлап уҡырға-яҙырға өйрәтеү иң мөһим аҙым булып тора. Грамматикаһында автор башҡорт телен урыҫ теле менән сағыштыра, ике телдең оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын күрһәтә, уларҙың ғәмәли әһәмиәтен асыҡларға тырыша.

М.И.Өмөтбаевтың биш томдан торған ҡулъяҙмалар архивында урыҫ әлифбаһын башҡорт, татар балаларына өйрәтеү тәртибе тураһында күрһәтмәләр бар. Ғалим уҡытыуҙы дүрт баҫҡысҡа бүлеп, һәр береһенең йөкмәткеһен асыҡ күрһәтә.

Урыҫ грамотаһын өйрәтеүҙең барлыҡ этаптарында ла, М.И.Өмөтбаевтың фекере буйынса, төрлө күнегеүҙәргә ҙур урын бирелә, бында мөғәллим уҡыусы балаларҙың аңлап уҡыуына һәм яҙыуына иғтибар итергә бурыслы.

М.И.Өмөтбаев Башҡортостан тарихы, тел һәм фольклор буйынса үҙенсәлекле әҫәрҙәр ижад итә, башланғыс мәктәп өсөн туған тел, грамматика, арифметика, география дәреслектәре төҙөй. Уның педагогик эшмәкәрлеге йәштәрҙе белемле итеү маҡсатын күҙ уңында тота.

М.И.Өмөтбаевтың әҙәби мираҫы шаҡтай үҙенсәлекле һәм ҡаршылыҡлы. Ул башҡорт әҙәбиәтенә Башҡортостан темаһын алып инә, үҙ халҡының тарихи яҙмышы һәм тормошо тураһында яҙа. Әҙәби әҫәрҙәренең теле аңлайышлы булыуы менән М.И.Өмөтбаев ул заманда йәшәгән барлыҡ шағирҙарҙан да айырылып тора. Уның күп әҫәрҙәре «Йәдкәр» китабында тупланған.

Мөхәмәтсәлим Ишмөхәмәт улы Өмөтбаев башҡорттар араһында мәғрифәтселекте таратыу буйынса ҙур эш башҡара, йәштәрҙе белем алырға саҡыра. Уны халыҡтар дуҫлығы, татыу йәшәү идеялары рухландыра. Күренекле шәхесебеҙҙең «Йәдкәр» китабы, тулыландырылып, 1985 йылда баҫылып сыҡты, уға телсе ғалим Ғиниәт Ҡунафин баш һүҙ яҙҙы.

# ЗӘЙНУЛЛА ХӘБИБУЛЛА улы РӘСҮЛЕВ

*(1833 – 1917)*



Башҡортостан Республикаһының мәғрифәт һәм мәҙәниәт тарихында Зәйнулла Хәбибулла улы Рәсүлев ифрат ҙур урын биләй. Уның исем-шәрифтәре XVIII – XX быуаттарҙа йәшәгән күренекле башҡорт һәм татар зыялылары – Ризаитдин Фәхретдинов, Шиһабетдин Мәржәни, Ҡәйүм Насыри, Зыя Камалый кеүек аҡыл эйәләре менән бер рәттә тора. Үҙ исемендәге мәҙрәсә асып, шәкерттәр уҡытып, йәштәрҙе тормошҡа, халыҡты ағартыу эшенә әҙерләүе менән уның милләттәштәренә күрһәткән хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ.

Мәшһүр мәғрифәтсе һәм дин эшмәкәре Зәйнулла Хәбибулла улы Рәсүлев хәҙерге Башҡортостандың Учалы районы Шәрип ауылында мулла ғаиләһендә 1833 йылдың 25 мартында донъяға килә. Кесе йәштән отҡор Зәйнулла атаһынан Ҡөрьән Кәримдең байтаҡ сүрәләрен, хәҙистәрҙе, «Әфтиәк» уҡыу китабын ятлап, ғүмер буйы хәтерендә һаҡлай. Ул заманында төп уҡыу йорто булған мәҙрәсәләрҙә белем ала, мулла булып, халыҡҡа күберәк файҙа ҡылырға теләй.

Мәҙрәсәлә уҡыған йылдарҙа уҡ шәкерт Зәйнулла Рәсүлев суфыйлыҡ идеялары менән ҡыҙыҡһына, артабан уларҙы ныҡлап өйрәнә. Суфыйлыҡтың әһәмиәтен ул кешенең рухи һәм әхлаҡи яҡтан таҙарыныуында күрә, Аллаһы Тәғәләне үҙ аллы, интуитив, туранан-тура танып белергә тырышыу идеяһын хуплай. Ҡөрьән Кәрим уның төп уҡыу китабына һәм ғүмерлек юлдашына әйләнә.

1859 йылда Зәйнулла Рәсүлев Аҡкужа ауылы мәсетенең имам-хатибы итеп билдәләнә. Тиҙ арала был мәсет тирә-яҡ ауылдарҙа йәшәгән мосолмандар өсөн изге йыйын урынына әйләнә. Унда һәр аҙнаның йома көнөндә халыҡ ағымы артҡандан-арта.

1869 – 1870 йылдарҙа Зәйнулла Рәсүлев Төркиәлә Истамбул диниә уҡыу йортонда белемен күтәрә, дөрөҫлөктө, мистик танып белеү ысулдарын үҙләштерә, суфый Нәҡшбәндийә тәғлимәтен мәҙрәсәлә уҡытырға иджазнамә (рөхсәт) ала. Төркиәнән ҡайтҡас, ул ҡыҫҡа ваҡыт эсендә суфыйлыҡ тәғлимәтен таратыусы күренекле ишан булып танылa, урындағы мосолмандар араһында суфыйлыҡ ғәмәлдәренә байтаҡ яңылыҡтар индерә. Уларҙан: ҡысҡырып зикер әйтеү – Аллаһы Тәғәлә исемен күп тапҡыр иҫкә алыу, Мәүлит – Мөхәммәт ғәләйһис-сәләмдең тыуған көнөн байрам итеү, тиҫбе тартыу һәм башҡа шундай яңы ғәмәлдәрҙе күрһәтергә мөмкин.

1870 йылда – суфыйлыҡты бер йыл тараткан ваҡыт эсендә генә – Зәйнулла Рәсүлев ишан Урал аръяғы башҡорттарынан ете мең кешене үҙ мөриттәре (уҡыусылары) сафына баҫтыра. Уның шәкерттәре үҙҙәрен Зәйнулла ишандың ысын юлын дауам иткән мулла һәм мөғәллимдәр тип иҫәпләй, һәр ҡайҙа уның идеяларын тарата. Был осраҡта улар суфыйлыҡты илдә хакимлыҡ итеүсе дәүләт системаһына һәм рәсми дини доктринаға социаль ҡаршылыҡ күрһәтеү формаһы итеп файҙаланырға тырыша. Ошо йәһәттән Зәйнулла ишандың шәкерттәренән Х. әл-Бөрйәни (1863 – 1927) һәм башҡалар халыҡ араһында хөрмәт яулаған муллалар булып танылa.

Суфыйлыҡты социаль ҡаршылыҡ күрһәтеү ысулы итеп файҙаланыу ҡайһы бер муллаларға оҡшамай. Улар Зәйнулла ишанды аллаһыҙлыҡта һәм властарға ҡаршы эш алып барыуҙа ғәйепләй, нахаҡҡа ҡара бәләләр тағa, ялыуҙар яҙа. Шуның һөҙөмтәһендә Зәйнулла Рәсүлев ҡулға алына һәм 1873 йылдың ғинуар айында Вологда губернаһы төрмәһенә ябыла. Иҫәпһеҙ ауырлыҡ һәм мәсхәрәләр күреп, ул 1881 йылда һөргөндән ҡайта. Тиҙҙән, 1884 йылда Троицк ҡалаһының бишенсе собор мәсете имам-хатибы итеп ҡуйыла.

Зәйнулла Рәсүлевтең халыҡҡа күрһәткән иң ҙур хеҙмәте 1884 йылда, Троицк ҡалаһында бишенсе мәсет эргәһендә мәҙрәсә асыуында айырыуса асыҡ сағыла. Халыҡ уның мәҙрәсәһен «Рәсүлиә» мәҙрәсәһе тип йөрөтә. Тәүге ваҡытта мәҙрәсәнең уҡытыу программаһында дин – Аллаһы Тәғәлә тәғлимәттәре, Ҡөрьән Кәрим һәм хәҙистәрҙе өйрәнеү өҫтөнлөк ала. Артабан мөҙәрис Зәйнулла Рәсүлев схоластикаға ҡаршы сыға. «Рәсүлиә» мәҙрәсәһе шәкерттәре Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм тәғлимәтен традицион мантиҡ (логика) һәм калйәм (догматика) буйынса ғына түгел, шулай уҡ тәүге өйрәнеү сығанаҡтары булған Ҡөрьән Кәрим китабы һәм хәҙистәр нигеҙендә, ислам дине тәғлимәтсе-

ләре Ғәбденнасир Көрсәуи һәм Шиһабетдин Мәржәни китаптары буйынса үҙләштерә.

Мөҙәрис Зәйнулла Рәсүлев Ырымбур өлкәһенең данлыҡлы Ҡарғалы мәҙрәсәһе тәжрибәһен, уның мөҙәрисе Ғабдрахман бин Мөхәммәтшәрифтең ғилми хеҙмәттәрен, шөһрәтле Стәрлебаш мәҙрәсәһенең эш алымдарын, уның етәксеһе Ниғмәтулла Биктимеровтың бай мираҫын, Стәрлетамаҡ мәҙрәсәһе тарихын, эш ысулдарын өйрәнә, уларҙың тәжрибәһенән уҡытыуҙың иҫке, ҡәҙимселек ысулдарына ҡарағанда яңы, йәҙитселек ысулдарын – белем биреү системаһында реформатор хәрәкәтен өҫтөн күрә. Шуға ла мөҙәрис 1893 йылда мәҙрәсәлә балаларҙы уҡырға-яҙырға өйрәтеүҙең өндәр методын индерә, синыфтарҙа (төркөмдәрҙә) һабаҡ (дәрес) үткәреү ҙур урын ала.

XX быуат башына «Рәсүлиә» мәҙрәсәһе 11 йыллыҡ уҡытыу йортона әйләнә, Урал аръяғы мосолмандарының дини тормошо үҙәге булып таныла. Уның программаһында диндe, Ҡөрьән Кәрим һәм хәҙис китаптарын өйрәнеү менән бер рәттән төрки, урыҫ, ғәрәп телдәре, матур яҙыу, уҡыу, дөйөм донъя тарихы, ислам тарихы, теология, мосолман хоҡуҡтары, логика, этика, гигиена, география, тәбиғәт белеме, химия, физика, зоология, педагогика һәм башҡа фәндәр буйынса белем биреү ҡаралған. 1913 йылда «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә 13 мөғәллим шәкерттәргә белем һәм тәрбиә биреү менән шөғөлләнә.

«Рәсүлиә» мәҙрәсәһе ҡаҙаҡ байы И. Алтынсарин аҡсаһына асыла, артабан иғәнәселәр (бағымсылар) аҡсаһы һәм саҙаҡа иҫәбенә тотола. Мөҙәрис Зәйнулла Рәсүлев үҙе 19 мең һум аҡса индерә. Был аҡсаға мәҙрәсә өсөн ике төп бина һатып алына, ярҙамсы хужалыҡ өсөн йорттар төҙөлә.

1907 йылда мәҙрәсәлә шәкерттәрҙе уҡытыу түләүле булып китә. Һәр шәкерт бер йылға һигеҙ һум аҡса индерә. Мәҙрәсә үҙ шәкерттәре өсөн дөйөм ятаҡ тота.

«Рәсүлиә» мәҙрәсәһенең китапханаһы бик бай була. Уға Зәйнулла Рәсүлев үҙенең Истамбулдан алып ҡайтҡан, Көнсығыштың данлыҡлы баҙарҙарында һатып алған шәхси китаптарын һәм 3,5 мең һумлыҡ ваҡыф[1] мираҫ итеп ҡалдыра. Мәҙрәсә 1919 йылдың октябрендә ябыла.

Аллаһы Тәғәлә тәғлимәтен яҡшы белеү, табиптың гипноз һәләте, тибет медицинаһы алымдарын үҙләштереү, шулай уҡ кеше яҙмышына күрәҙәлек ҡылыу ҡеүәһе Зәйнулла ишандың шөһрәтен арттыр-

---

[1] Ваҡыф – берәй кешенең хәйриә маҡсатында йәмәғәт файҙаһына васыят итеп ҡалдырған мал-мөлкәте

ра. Ишан көн тип тормай, төн тип тормай, килгән кешеләрҙең барыһын да ҡабул итә, уларҙа һауығыуға, сәләмәтлеген нығытыуға ныҡлы ышаныс уята.

Зәйнулла Рәсүлев Троицкиға килеп сыҡҡан күренекле мәғрифәтсе шағир М. Аҡмулла менән бер нисә тапҡыр осраша, уға матди һәм рухи ярҙам күрһәтә.

Ишан һәм мөҙәрис Зәйнулла Рәсүлев мәҙрәсәлә Ҡөрьән Кәрим, хәҙис һәм дин буйынса һабаҡ бирә, Аллаһы Тәғәлә тәғлимәте тураһында ғилми хеҙмәттәр яҙа. Был китаптар мәҙрәсәләрҙә уҡыу әсбаптары итеп файҙаланыла. Башҡортостан мосолмандарын, Рәсәйҙең төрки халыҡтарын дини һәм милли яҡтан уятыуҙа, уларға аң-белем биреүҙә Зәйнулла Рәсүлев хеҙмәттәре ҙур әһәмиәткә эйә була.

Халҡыбыҙҙың күренекле мәғрифәтсеһе З.Х. Рәсүлевтең эшмәкәрлеге тураһында замандаштары күп яҙып ҡалдырған. Уларҙан арҙаҡлы мөғәллим, мөхәррир һәм яҙыусы Р. Фәхретдинов, ғалим В. Бартольд хеҙмәттәрен иң тәүҙә күрһәтергә мөмкин.

## МӨХӘМӘҘИНУР ШАҺИНУР улы ШАҺИӘХМӘТОВ

*(1879 – 1922)*



XX быуат баштарында һәр төбәктә мәҙрәсә, мәхәллә, мәктәп, мәсет хеҙмәткәрҙәренән ябай башҡорт халҡы ҡатламдарының мәғрифәткә, мәҙәниәткә ынтылышын асыҡ сағылдырған мөғәллимдәр һәм муллалар күтәрелеп сыға. Ҡырмыҫҡалы төйәгендә Мөхәмәҙинур Шаһинур улы Шаһиәхмәтов – шундай арҙаҡлы шәхестәрҙең береһе.

Мәғрифәтсе, реформатор мулла, мөғәллим Мөхәмәҙинур Шаһинур улы Шаһиәхмәтов 1879 йылдың 15 майында хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ҡырмыҫҡалы районы Шайморатов (элекке Биштәкә) ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә.

Ата-әсәһенән уҡырға-яҙырға өйрәнгәс, туғыҙ йәшлек Мөхәмәҙинурҙы Ҡыйышҡы мәҙрәсәһенә уҡырға бирәләр. Бында отҡор малай Мирсаяф Камалетдиновтың һәләтле шәкерттәренең береһе була, һигеҙ йыл эсендә ул замандағы дини белем донъяһының барлыҡ өлкәләрен яҡшы үҙләштерә, яҙырға, һүрәт төшөрөргә өйрәнә, умарта тотоу, баҡса үҫтереү буйынса белем ала.

Биштәкәгә ҡайтҡас, 1898 йылда, Мөхәмәҙинур Шаһиәхмәтов ауыл мәҙрәсәһенә имам-хатиб итеп ҡуйыла, йортта атаһына хужалыҡ эштәрендә булыша, ауылда берҙән-бер ҙур, бынамын тигән өй һалып инергә ярҙамлаша.

1902 йылда Мөхәмәҙинур Шаһиәхмәтов батша армияһына хәрби хеҙмәткә алынып, Алыҫ Көнсығышта һалдат бурысын үтәй. Тиҙҙән, 1904 йылда, урыҫ-япон һуғышы башлана. Мөхәмәҙинур Шаһиәхмәтов японлдарға ҡаршы аяуһыҙ алыша. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн Николай ордены, Георгий тәреһе менән бүләкләнә. Был уға, һуғыш бөтөү менән үк, хәрби хеҙмәте тулмаһа ла, тыуған төйәгенә ҡайтып китергә мөмкинлек бирә.

Биштәкә халҡы үҙенең батыр улы Мөхәмәҙинур Шаһиәхмәтовты ҙурлап ҡаршылай. Ул шунда уҡ мәхәллә муллаһы, мәҙрәсә имам-хатибы итеп тәғәйенләнә. Ер-һыуҙар күреү, мәғлүмәтле кешеләр, офицерҙар менән осрашыу Мөхәмәҙинур Шаһиәхмәтовты үҙ халҡының тормошо, йәштәрҙең киләсәге тураһында тәрән уйҙарға һала. Ул уҡыу йәшендәге балаларҙы төрлө ауылдарға һәм Өфө ҡалаһының данлыҡлы «Ғәлиә», «Ғосмания» мәҙрәсәләренә уҡырға алып бара. Йәштәргә яңыса, донъяуи белем биреү маҡсатында 1912 йылдың 12 сентябрендә Мөхәмәҙинур Шаһинур улы Шаһиәхмәтов тыуған ауылында дүрт йыллыҡ урыҫ-башҡорт мәктәбе асыуға өлгәшә. Шәкерттәрҙе уҡытыу тәүҙә уның атаһы нигеҙендә ҡалған йортонда ойошторола, бер йылдан һуң ике таш бина төҙөлә. Биштәкә урыҫ-башҡорт мәктәбендә уҡытыу программаларына хисап, тарих, география, урыҫ теле һәм әҙәбиәте, медицина нигеҙҙәре индерелә. Мөҙәрис Мөхәмәҙинур Шаһинур улы Биштәкәгә яҡын-тирәләге ауылдарҙан барлыҡ балаларҙы ла уҡыуға йәлеп итә, мәктәп янындағы яңы ғына төҙөлгән интернатҡа урынлаштыра.

Күп тә үтмәй, ауыл күрке булып урта мәктәп-интернат бинаһы файҙаланыуға тапшырыла, уҡыу йортоноң даны тирә-яҡҡа киң тарала.

Оҙаҡ йылдар буйы халыҡ мәктәпте «Мөхәмәҙинур мәктәбе» тип йөрөтә, уның беренсе мөҙәрисе һәм мөғәллиме Мөхәмәҙинур Шаһинур улы Шаһиәхмәтовты әле лә ололап иҫкә ала.

1965 йылда Шайморатов урта мәктәбенә башҡорт халыҡ батыры М.М. Шайморатов исеме бирелә. Был уҡыу йорто – төбәктә алдынғы мәктәптәрҙең береһе.

## ЛОТФУЛЛА КӘЛИМУЛЛА улы ӘБДЕЛҒӘЗИЗОВ

*(1866 – 1913)*



Халыҡ мәғарифы тарихында Лотфулла Кәлимулла улы Әбделғәзизов алдынғы ҡарашлы мәғрифәтсе, башланғыс урыҫ-башҡорт мәктәптәренең күренекле мөғәллиме, урыҫ телен уҡытыу методтарын һәм алымдарын эшләгән педагог булып танылды.

Лотфулла Кәлимулла улы Әбделғәзизов 1866 йылдың 12 июнендә Ырымбур губернаһының Һарыҡташ ауылында хәлле крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. 1886 йылда Ырымбур татар уҡытыусылары мәктәбен тамамлап, ул урыҫ теле уҡытыусыһы танытмаһын ала. Ырымбур уҡыу округы инспекторы В.В.Катаринскийҙың тәҡдиме буйынса, йәш мөғәллим заманының күренекле Мәтәл башланғыс урыҫ-башҡорт мәктәбенә эшкә тәғәйенләнә. Был мәктәптең бай ғына тәжрибәһе булһа ла, Л.К.Әбделғәзизовҡа башҡорт балаларын урыҫса уҡырға-яҙырға өйрәтеү еңел булмай. Йәш уҡытыусы К.Д.Ушинский, Н.А.Корф, Ф.И.Буслаев, Ҡәйүм Насыри кеүек оло педагогтарҙың хеҙмәттәрен өйрәнә, В.В.Катаринский, А.Г.Бессонов, И.А.Алтынсариндан кәңәштәр ала, урыҫ-инородецтар мәктәптәренең алдынғы уҡытыусылары менән күп яҡлы бәйләнеш тота. Ул үҙ эшендә яңы алым һәм ысулдарҙы ҡыйыу ҡуллана, урыҫ теле һәм уҡыу дәрестәре өсөн күргәҙмә әсбаптар яһай.

Уҡытыусы Л.К.Әбделғәзизов дәрестә күргәҙмә материалдар нигеҙендә тура (натураль) алымды оҫта файҙалана. Ул тәү башлап урыҫ грамотаһына өйрәтеүҙә өн анализы һәм синтезын төп эш алымы итеп һайлай, уны сағыштырыу, тәржемә итеү ысулдары менән байыта. Уларҙы ижади ҡулланыу, балаларҙың туған теле үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу Мәтәл мәктәбендә ике-өс йыл эсендә урыҫ теле уҡытыуҙың сифатын яҡшыртырға мөмкинлек бирә.

Дини-схоластик ҡараштар һәм ҡәҙимселек ҡараңғылығы хөкөм һөргән заманда уҡытыу-тәрбиә эшендә яңы ысул һәм алымдарҙы

файҙаланыу, уларҙы әүҙем пропагандалау Лотфулла Әбделғәзизовтың алдынғы ҡарашлы педагог булыуын асыҡ күрһәтә.

1895 йылдың 1 авгусында Л.К.Әбделғәзизов Ырымбур уҡыу округының Аҡкөсөк (Сермән) башланғыс урыҫ-башҡорт мәктәбенә директор һәм урыҫ теле уҡытыусыһы итеп ебәрелә. Был мәктәптә ул ете йыл эшләй, уҡытыу ысулдарын һәм алымдарын камиллаштыра, халыҡ араһында мәҙәни-ағартыу эштәре алып бара. Мөғәллим ауыл кешеләрен йәшелсә, емеш-еләк үҫтерергә өйрәтә.

Быға тиклем, 1892 – 1893 йылдарҙа, Л.К.Әбделғәзизов Ырымбурҙа йәйге каникул ваҡытында баҡсасылыҡ һәм ҡортсолоҡ нигеҙҙәрен өйрәнеү өсөн ҡыҫҡа ваҡытлы курстарҙа була. Ул уҡыусы балалар менән Мәтәлдә, Аҡкөсөктә мәктәп баҡсаһы булдыра, унда емешеләк, йәшелсә үҫтерә, умартасылыҡ менән шөғөлләнә, ауыл халҡына лекциялар уҡый, был эштәрҙең әһәмиәтен аңлата.

1902 йылдың 1 авгусында Л.К.Әбделғәзизов Троицк ҡалаһының ике синыфлы урыҫ-татар мәктәбенә директор итеп тәғәйенләнә. Бында ул башҡорт, татар балаларына урыҫ телен уҡытыу ысул һәм алымдарын камиллаштырыу мәсьәләләрен хәл итеү өҫтөндә эшләүен дауам итә, төрлө темаларға дәрес пландары, методик ҡулланмалар яҙа. «Рәсүлиә» мәҙрәсәһе шәкерттәренең һорауын үтәп, ул үҙе уҡытҡан һәм директор булған мәктәптә урыҫ телен өйрәнеүселәр түңәрәге, шәхси дәрестәр һәм консультациялар ойоштора.

Л.К.Әбделғәзизов 1900 йылда Аҡкөсөк урыҫ-башҡорт мәктәбе эшен яҡшы ойошторғаны өсөн «За усердие» миҙалы менән бүләкләнә, 1906 йылда уға Троицк ҡалаһының шәхсән хөрмәтле гражданы тигән маҡтаулы исем бирелә. 1912 йылдың ноябрендә уның педагогик эшмәкәрлегенә 25 йыл тулыуы юбилейы киң билдәләп үтелә, Ырымбур ваҡытлы матбуғаты биттәрендә ҡыҫҡа хәбәрҙәр баҫылып сыға, ҡотлау телеграммалары ебәрелә.

Талантлы педагог Л.К.Әбделғәзизов үпкә туберкулезы менән ауырып, 1913 йылдың 30 октябрендә вафат була. 31 октябрҙә, уны ерләгән көндө, Троицк мәктәптәрендә уҡытыу туҡтатыла, барлыҡ ҡала халҡы, уҡытыусылар, шәкерттәр уны һуңғы юлға оҙата.

## РЕВОЛЮЦИЯНАН ҺУҢҒЫ ҺӘМ КОЛХОЗЛАШЫУ ОСОРО

*(1917 йылдан башлап – 30-сы йылдар)*

Октябрь революцияһынан һуңғы йылдарҙа халыҡ мәғарифы яңы йөкмәткe һәм йүнәлеш ала. Уның төп бурысы – дәүләт власы ҡанундарын үтәүгә барлыҡ халыҡты йәлеп итеү. Бының өсөн наҙанлыҡты бөтөрөү, халыҡты дәүләт һәм йәмәғәт эштәренә ылыҡтырыу, йәш быуынды яңы рухта уҡытыу һәм тәрбиәләү, мәктәптәр һәм башҡа уҡыу йорттары асыу, яңы алфавит нигеҙендә яҙма булдырыу йәһәтенән күп эштәр башҡарыла.

Яңы тормош төҙөү идеяһы, уҡыу һәм тәрбиә алыуға мөмкинлектәрҙең артыуы белемгә ынтылған йәштәрҙе мәғариф һәм мәҙәниәт эштәрен йәнләндереү, халыҡтың тормошон һәм көнкүрешен яҡшыртыу өлкәләрендә эшләгән күренекле мәғариф хеҙмәткәрҙәре, абруйлы педагогтар итеп күтәрә. Улар ил тарихында тәүге тапҡыр ҡуйылған дөйөм мәжбүри башланғыс уҡытыу, бөтөн халыҡты ла уҡырға-яҙырға өйрәтеү һәм белемле итеү бурыстарын үтәүҙә, кешеләрҙе коллектив хужалыҡтарға әйҙәү һәм башҡа мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеү менән бер рәттән, ҙур әүҙемлек күрһәтеп, халыҡтың рухи тормошона йүнәлеш биреүсе, ойоштороусы агитатор һәм пропагандистар булып сығыш яһай.

Башҡортостан ҡалалары һәм райондарында халыҡ мәғарифының үҫеше яңы мәктәптәр, педагогия техникумдары, юғары уҡыу йорттары асыуҙа, мәғариф учреждениелары өсөн урта һәм юғары белемле кадрҙар әҙерләүҙе арттырыуҙа һәм уларҙың фиҙакәр хеҙмәте емешле һөҙөмтәләр биреүҙә асыҡ күренә.

Был осорҙа мәғариф өлкәһендә ҙур хеҙмәт күрһәткән педагогтар, башҡа һөнәрмәндәр кеүек, киләсәктә лә, һис шикһеҙ, абруйлы

шәхестәр булыр, халыҡҡа баһалап бөткөһөҙ файҙа килтерер ине. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, 30-сы йылдарҙа киң ҡолас алған сәйәси репрессия уларҙың ғүмерен ҡыйҙы – күптәр, нахаҡ бәләләр тағылып, золом ҡорбаны булды.

Шундай ауыр шарттарҙа ла халыҡ мәғарифы, башҡа хужалыҡ тармаҡтары һымаҡ, ҙур уңыштар яулай. Педагогтар үҙ халҡының яҙмышын еңеләйтеү һәм яҡты киләсәген яҡынайтыу өсөн ең һыҙғанып эшләй.

## ИБРАҺИМ ХАФИЗ улы АБЫҘБАЕВ

*(1901 – 1945)*



Ибраһим Хафиз улы Абыҙбаев – Башҡортостанда мәғариф менән етәкселек итеүгә, уны камиллаштырыуға, педагогик кадрҙар әҙерләүгә үҙ өлөшөн индергән халыҡ комиссарҙарының береһе.

И.Х.Абыҙбаев 1901 йылдың 10 октябрендә хәҙерге Белорет районының Сермән ауылында урмансы ғаиләһендә тыуған. Бик йәшләй ул ауыл байҙарына ялланып эшләй, Аҡкөсөк (Сермән) башҡорт-урыҫ башланғыс мәктәбен тамамлай. Тамъян-Ҡатай кантонының Аҡкөсөк олоҫон аҡ гвардиясылар баҫып алғас, Ибраһим Абыҙбаев ҡыҙыл партизандарға ярҙамлаша, бәхетле тормош өсөн көрәшселәрҙе Колчак ғәскәрҙәренән йәшерә.

1919 йылдан һуң Башҡортостанда яңы тормош төҙөлә башлағас, И.Х.Абыҙбаев крәҫтиән депутаттарының Сермән олоҫ Советы башҡарма комитеты сәркәтибе итеп һайлана. Тиҙҙән ул үҙе теләп Ҡыҙыл Армия сафына яҙыла, 5-се армияның 13-сө атлы дивизияһында хеҙмәт итә. Артабан Өфөлә һәм Ҡазанда хәрби-сәйәси мәктәптәрҙә уҡыта.

1921 йылда Ибраһим Абыҙбаев Мәскәүҙә Көнсығыш хеҙмәтсәндәрҙең коммунистик университетын тамамлай, шунан һуң партия Үҙәк Комитеты эргәһендәге Ҡыҙыл профессура тарих-партия институтында уҡый.

И.Х.Абыҙбаев Ватанын, халҡын яратҡан йәштәрҙе тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирә. Шуға күрә һәр ерҙә улар араһында күп эш алып бара. Ул йәштәрҙең тормош-көнкүрешен яҡшы белә, Мәскәүҙә үҙе уҡыған Коммунистик университетта йәштәр ячейкаһы сәркәтибе була, уларҙың һәр береһенә ярҙам итергә, мохтажлыҡтарын кәметергә, тормош ауырлыҡтарын еңеләйтергә тырыша. Украинала комсомолдың округ комитеты инструкторы, Кесе Башҡортостандың баш ҡалаһы Стәрлетамаҡта комсомол өлкә комитетының йәштәр менән эшләү бүлеге етәксеһе була.

1924 – 1926 йылдарҙа И.Х.Абыҙбаев Өфөлә В.И.Ленин исемендәге махсус уҡыу йорто – етем балалар өсөн асылған интернатлы туғыҙ йыллыҡ тулы булмаған урта мәктәп директоры була. Бында ул үҙен йәш балаларҙы тәрбиәләүсе ысын педагог, уҡытыусылар коллективының эшен оҫта ойоштороусы, талантлы етәксе итеп таныта, алдынғы уҡытыусыларҙы һайлап алып, ижади хеҙмәткә илһамландыра. Заманында шул мәктәптә эшләгән, аҙаҡ Башҡортостандың күренекле рәссамы булып киткән Александр Эрастович Тюлькин иҫән сағында беҙҙең менән әңгәмәләрҙә мәктәп директоры Ибраһим Хафиз улының айырыуса йәштәрҙе төрлө яҡлап үҫтерерү сараларын күреүе, һәр кемде хеҙмәткә дәртләндереүе хаҡында иҫтәлектәре менән уртаҡлашыр ине. И.Х.Абыҙбаевтың уҡытыусыларға ла, етем балаларға ла йоғонтоһо көслө була.

Артабан И.Х.Абыҙбаев партия эшенә күсерелә. Тәүҙә ул партияның Тамъян-Ҡатай, шунан Йылайыр кантон комитеттарының агитация-пропаганда бүлектәре мөдире булып эшләй, хеҙмәтсәндәр араһында мәҙәни-ағартыу эштәрен киң йәйелдереп ебәрә.

Ауыл хужалығын коллективлаштырыу йылдарында И.Х.Абыҙбаев тәүҙә партияның Арғаяш кантон комитеты, 1930 йылдан район комитеты сәркәтибе була, халыҡ араһында партия сәйәсәтен дөрөҫ тормошҡа ашыра, наҙанлыҡты бөтөрөү өсөн көрәшә. Ул районның «Еңербеҙ!» гәзитен ойоштороуҙа туранан-тура ҡатнаша.

1931 йылда Ибраһим Абыҙбаев ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты аппаратына етәксе эшкә үрләтелә. Тәүҙә ул сәнәғәт бүлеге мөдире, шунан һуң кадрҙар бүлеге мөдире була.

Һәләтле ойоштороусы, теоретик яҡтан яҡшы әҙерлекле, халыҡ мәғарифы эшен яҡшы белгән, педагогик хеҙмәтте аңлаған Ибраһим Хафиз улы Абыҙбаев 1937 йылдың июлендә Башҡортостан мәғариф халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. Был ҙур вазифаны ул иң һыҙғанып башҡарырға тотона. Республикала йәштәрҙе дөйөм уҡытыу, тәрбиә эшен яҡшыртыу, халыҡ мәғарифын юғары кимәлдә ойоштороу өсөн һөҙөмтәле саралар күрелә. Бының өсөн иң тәүҙә уҡытыу-

сылар кадрҙары әҙерләүгә, мәктәптәрҙе һәм башҡа халыҡ мәғарифы ойошмаларын белемле кешеләр менән тәьмин итеүгә, һәләтле йәштәрҙән һәм уҡытыусыларҙан етәкселәр һайлап алыуға һәм үҫтереүгә йүнәлеш алына. Мәғариф халыҡ комиссары эшкә ижади ҡарарға өйрәтеүсе етәксе булып әүерелә. Ул үҙенең барлыҡ белемен, бай тәжрибәһен һәм ойоштороу талантын Башҡортостанда халыҡ мәғарифын үҫтереүгә бағышлай.

Башҡортостандың яуаплы һәм ҡатмарлы эштәрендә үҙен һәләтле етәксе, оҫта ойоштороусы итеп күрһәткән Ибраһим Хафиз улы Абыҙбаев хеҙмәтсәндәрҙең һәм юғары даирәләрҙең оло абруйын ҡаҙана, халыҡ һөйөүен яулай. Ул күп тапҡыр партияның өлкә комитеты ағзаһы, бюро ағзаһы итеп һайлана, үҙенә күрһәтелгән яуаплылыҡты намыҫлы аҡлай.

Ибраһим Хафиз улы Абыҙбаев һоҡланғыс кешелеклелек сифаттары менән айырылып тора. Уның эргәһендә һәр ваҡыт кешеләр йыйылып китә торған булған. Ул оҫта әңгәмәсе булыуы, шаянлығы, күпте белеүе менән хөрмәт ҡаҙанған. Мәғариф халыҡ комиссары булып И.Х.Абыҙбаевҡа оҙаҡ эшләргә насип булмай – 1937 йылдың октябрендә нахаҡ бәләләр яғылып, ул уйлаған эштәренең осона сыға алмай, Сталин репрессияһына эләгә.

## ЗАКИР НАСИР улы АЙЫУХАНОВ

*(1889 – 1961)*



Закир Насир улы Айыуханов балаларҙы башҡортса уҡырға һәм яҙырға өйрәтеү өлкәһендә ҙур хеҙмәт күрһәтте, сөнки 50 йылдан ашыу башланғыс һәм урта мәктәптәрҙә, махсус урта һәм юғары уҡыу йорттарында, төрлө йәмәғәт ойошмаларында уҡытыусы, ғилми хеҙмәткәр, тәржемәсе булып хеҙмәт итеү менән бергә әлифбалар төҙөү, уларҙы файҙаланыу тураһында методик ҡулланмалар яҙыу кеүек мөһим, кәрәкле эш башҡарҙы.

Закир Насир улы Айыуханов 1889 йылдың 23 майында хәҙерге Ульяновск өлкәһе Ҡалмайыр ауылында крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Башланғыс белемде 1901 – 1907 йылдарҙа Мәләкәс ҡалаһы мәктәбендә ала, 1909 – 1911 йылдарҙа Ырымбурҙа «Хөсәйниә» мәҙрәсәһендә уҡый, бер үк ваҡытта мәҙрәсәнең башланғыс синыфтарында уҡыта, башҡа уҡыу йорттарында эшләй, 1911 – 1914 йылдарҙа Ҡаһирә университетында уҡый.

Бер аҙ ваҡыт Башҡортостанда төрлө уҡыу йорттарында эшләгәс, 1918 – 1926 йылдарҙа З.Н.Айыуханов Томск университетында белемен күтәрә, мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә эше менән шөғөлләнә, Томск педагогия техникумында, совет-партия мәктәбендә, уҡытыусылар институтында эшләй.

1926 йылдың йәйендә З.Н.Айыуханов Өфөгә килә. Тәүҙә ул В.И. Ленин исемендәге етем балалар мәктәбендә уҡытыу эштәре бүлеге мөдире, башланғыс синыфтар уҡытыусыһы, шунан 1930 – 1936 йылдарҙа ауыл хужалығы һәм педагогия институттарында доцент була. Артабан бер йыл Мәскәүҙә 523-сө мәктәптә балалар уҡыта.

1937 йылдан ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем (1961 йылдың 22 июне) З.Н.Айыуханов Өфөлә йәшәй, 1937 – 1956 йылдарҙа 14-се мәктәптә уҡытыусы булып эшләй, 1956 – 1961 йылдарҙа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми эштәр менән шөғөлләнә, Башҡорт дәүләт университетында ғәрәп телен уҡыта.

Закир Насир улы Айыухановтың үҙе йәки уның ҡатнашлығында коллектив авторҙар тарафынан төҙөлгән «Әлифба» китабы 1929 – 1968 йылдарҙа балаларҙы уҡырға-яҙырға өйрәтеү өсөн Башҡортостан мәктәптәрендә төп уҡыу әсбабы булды. Төрлө форматта, графикала һәм шрифтта төҙөлгән әлифбалар буйынса уҡырға һәм яҙырға өйрәнгән кешеләр әлифбасы Закир Насир улы Айыухановты оҙаҡ йылдар иҫтә тотоп, ихтирам иттеләр.

1909 йылдан башлап төрлө әлифбалар буйынса уҡытыу эше менән шөғөлләнгән тәжрибәле педагог З.Н.Айыуханов башҡорт әлифбаһының лингвистик-дидактик нигеҙҙәрен эшкәртеүгә ҙур көс һала. Уның иң мөһим хеҙмәте шунан тора. Әлифба төҙөү, методик ҡулланмалар яҙыу эше менән Закир Насир улы Айыуханов Башҡортостан халыҡ мәғарифы тарихына инде.

1940 – 1960 йылдарҙа урыҫ графикаһы буйынса төҙөлгән әлифбаларҙа өн анализы һәм синтезы методының алымдары тулыраҡ файҙаланыла. Балаларҙы тәү башлап уҡырға һәм яҙырға өйрәтеү тулы һөйләм һәм бөтөн һүҙҙәр методынан өн анализы һәм синтезы методына күсерелә. Өн анализы һәм синтезы алымдарын тормош талаптарына яраҡлаштырыу, тулыландырыу һәм камиллаштырыуҙа

С.Моратов, Х.Усман, З.Шакиров кеүек методистарҙың эшмәкәрлеге, кәңәштәре һәм тәҡдимдәре лә ҙур әһәмиәткә эйә була. Закир Насир улы Айыуханов ғалим-новатор була, ғалим-методистар, үҙенең авторҙаштары, уҡытыусылар менән тығыҙ ижади бәйләнеш тота, эшендә уларға таяна, уларҙың үҙҙәренә лә ярҙам күрһәтә.

50-се йылдарҙа З.Н.Айыуханов мәктәптә «Әлифба» китабын файҙаланыу тураһында методик ҡулланмалар яҙыу менән шөғөлләнә. Әлифба һәм методик ҡулланма төҙөүгә ул йәш, белдекле ғалим Абдрахман Әбдрәхим улы Ғәлләмовты йәлеп итә. Улар авторҙаш булып сығыш яһай, «Әлифба» китабын бер нисә тапҡыр баҫтырып сығара. Артабан уҡыусыһы А.Ә.Ғәлләмов остазының эшен уңышлы дауам итеп, башҡорт грамотаһына өйрәтеү буйынса күп төрлө хеҙмәттәр яҙҙы.

## ЛИДИЯ АНДРЕЕВНА ГАЛАНОВА

*(1876 – 1956)*



Лидия Андреевна Галанова – яңы совет мәктәбенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе, халыҡ мәғарифы эшен яңыса ойоштороуға үҙ өлөшөн индергән талантлы педагог, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, юғары исем һәм наградаларға лайыҡ булған мәғариф хеҙмәткәре.

Лидия Андреевна Галанова 1876 йылдың 7 ноябрендә Өфө губернаһының Минзәлә өйәҙе Заинка ауылында крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Ауыл мәктәбен тамамлағас, ул Сарапул гимназияһында белем ала. 1894 йылда гимназияның тулы курсын бөтөрөп сығыуға, уны ҡаланың башланғыс мәктәбенә уҡытыусы итеп билдәләйҙәр. Әммә Лидия Галанова тыуған төйәгенә ҡайтырға ынтыла, 1896 йылда – Минзәлә, тиҙҙән Зилнә мәктәбендә балалар уҡыта.

1903 йылда Л.А.Галанова Мәскәүгә юғары ҡатын-ҡыҙҙар курсына уҡырға ебәрелә, әммә уны тамамлай алмай. 1905 йылда студент-

тарҙың революцион сыуалыштарында ҡатнашҡаны өсөн Өфөгә һөргөнгә оҙатыла, бында полиция күҙәтеүе аҫтында йәшәй. Уҡытыусы шәхси гимназияла математика, география, тарих уҡыта. Ул Өфөлә профессиональ революционер В.Д.Галановҡа кейәүгә сыға, уға ярҙам күрһәтә. Бының өсөн тентеү, күҙәтеүҙәргә дусар була. Лидия Андреевна хатта иренең йоғонтоһонда профессиональ революционер юлына баҫырға уйлап ҡуя, шулай ҙа педагогик эшкә өҫтөнлөк бирә.

Октябрь революцияһынан һуң Лидия Андреевна Галанова халыҡ мәғарифы эшенә барлыҡ булмышы менән сума. Ул шәхси гимназия базаһында асылған 52-се мәктәп директоры итеп билдәләнә (был мәктәп аҙаҡ 11-се мәктәп итеп үҙгәртелә һәм Л.А.Галанова унда 1918 йылдан 1939 йылға тиклем директор булып эшләй, мәктәп 1930 йылда хәҙерге бинаға күсә).

Гимназия бинаһы мәктәп өсөн уңайһыҙ була. Лидия Андреевна юғары даирәләрҙең ярҙамы менән Фрунзе урамындағы буш торған элекке дәүләт гимназияһы бинаһына мәктәпте күсереүгә өлгәшә. Бында Бөтә Союз старостаһы М.И.Калининдың Өфөгә килеүе һәм уны күреп һөйләшеү ҙур әһәмиәткә эйә була.

Яңыса уҡытыу шарттарында мәктәптә балаларҙы уҡытыу һәм тәрбиәләү эшен ойоштороу мәшәҡәтле, яуаплы бурыс булып һанала. Лидия Андреевна Галанова үҙен һәләтле ойоштороусы, яҡшы педагог итеп күрһәтә. Уның тырышлығы, уҡытыусыларҙың намыҫлы хеҙмәте менән коллектив педагогик эштә яңынан-яңы уңыштар яулай. Мәктәптә бер заман талантлы уҡытыусылар күбәйеп китә. Уларҙан иң тәүҙә П.А.Крупин, А.Д.Тайч, Б.С.Давыдкин, А.М.Петрова кеүек педагогтарҙы күрһәтергә мөмкин. Мәктәп директоры Л.А.Галанова беренсе сиратта уларға таяна, йәштәрҙе оло коллегалары кеүек ижади хеҙмәт өлгөләре күрһәтергә дәртләндерә. Уҡытыусыларҙың ижади эштәре мәктәпте баш ҡала мәктәптәре араһында алдынғы педагогик коллектив итеп күтәрә.

Л.А.Галанова үҙ кабинетында ултырып сыҙамай, һәр ваҡыт уҡытыусылар һәм балалар араһында булырға ынтыла.

1930 йылда мәктәп уҡытыу-курс комбинаты итеп үҙгәртелә. Уға башланғыс мәктәп, урта мәктәп, педагогия техникумы инә. Барлыҡ уҡытыу-тәрбиә эше үҙгәртеп ойошторола, оҫтаханалар асыла, эш алымдары ныҡ үҙгәртелә. Был осраҡта Лидия Андреевна фиҙакәр хеҙмәт өлгөләре күрһәтә, заман талаптары ҡуйған бурыстарҙы намыҫлы үтәргә тырыша.

Уҡытыу-тәрбиә эшендә өлгәшкән уңыштары өсөн Лидия Андреевна Галанованың педагогик хеҙмәте юғары баһалана. 1922 йылдың 11 ноябрендә уға Башҡортостан буйынса Хеҙмәт Геройы исеме

бирелә, 1934 йылда педагог Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә, шул уҡ йылдың 6 ноябрендә Өфө ҡалаһының 11-се урта мәктәбенә уның исеме бирелә. 1936 йылда ул Рәсәй Хеҙмәт Геройы исеменә лайыҡ була. Был юғары исемде биреү тураһындағы документҡа М.И.Калинин ҡул ҡуйған.

1938 йылдың декабрендә Лидия Андреевна Галанова хаҡлы ялға – пенсияға сыға, шулай ҙа педагогик эштән китмәй, бер нисә йәмәғәт эше алып бара. Баш ҡала халыҡ мәғарифы бүлегендә йәмәғәт башланғысында эшләгән инспектор була, 11-се урта мәктәптә уҡыуҙа артта ҡалған балаларға ярҙам ойоштора.

1947 йылда талантлы педагог Лидия Андреевна Галановаға Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән ҙур исем бирелә. Күп йыллыҡ һәм уңышлы педагогик хеҙмәте өсөн ул илебеҙҙең иң ҙур наградаһына – Ленин орденына лайыҡ була, күп тапҡыр миҙалдар һәм Маҡтау грамоталары менән бүләкләнә.

Лидия Андреевна Галанова оҙайлы педагогик хеҙмәт йылдарында үҙен арыу-талыу белмәҫ, энергиялы һәм бай рухлы мәғариф хеҙмәткәре итеп күрһәтә, үҙен белгән кешеләрҙең, айырыуса уҡытыусылар һәм балаларҙың оло һөйөүен ҡаҙана, халыҡтың ысын ихтирамы менән файҙалана.

Лидия Андреевна Галанова уҡыусыларға һәм йәштәргә уҡытыусы хеҙмәтенең бөйөклөгө тураһында һөйләй, уларҙы үҙҙәренең аңлы ғүмерен педагогик эшкә бағышларға саҡыра.

## ҒАБДУЛЛА ТӨХВӘТ улы ҒИСМӘТУЛЛИН

*(1883 – 1937)*



Ғабдулла Төхвәт улы Ғисмәтуллин – Башҡортостанда халыҡ мәғарифын, башҡа хеҙмәт тармаҡтарын үҫтереүгә үҙ өлөшөн индергән күренекле хеҙмәткәр, республика мәғариф халыҡ комиссары, мәрхәмәтһеҙ репрессия ҡорбаны. Ул 1883 йылдың 28 октя-

брендә Ҡаҙағстандың Кустанай ҡалаһында уҡытыусы ғаиләһендә тыуған. Уның атаһы Төхвәтулла – Ырымбур башҡорто, әсәһе ҡаҙаҡ ҡыҙы булған, Ғабдулла бишенсе бала, беренсе ир-азамат булып иркәләнеп үҫә. Тормошта белемдең ҡәҙерен белгән атаһы улын Троицкиҙа үҙе уҡып сыҡҡан Яуышевтар мәҙрәсәһенә уҡырға бирә. Зирәклеге, күп белергә ынтылыуы Ғабдулла Ғисмәтуллинды китапханала шөғөлләнергә өйрәтә, мәҙрәсәлә уҡыған арала егет урыҫ-башҡорт мәктәбен тамамлай.

1905 йылда башланған беренсе урыҫ революцияһы йоғонтоһонда шәкерттәр араһында сыуалыштар күтәрелә. Тормош үҙе донъяуи фәндәр уҡытыуҙы талап итә. Мәҙрәсәлә уҡытыу тәртибе менән килешмәү, дөйөм ризаһыҙлыҡ Ғабдулла Ғисмәтуллинға заманының алдынғы кешеләре – Мәжит Ғафури, Йософ Шәрҡи, Хәлим Искәндәров менән аралашырға булышлыҡ итә.

Ғабдулла Ғисмәтуллин ҙурыраҡ уҡыу йортонда белем алырға хыяллана. Шул теләк менән 1907 йылда Ҡазанға бара, уҡытыусылар семинарияһына уҡырға инә. Тиҙҙән Ғабдулла Ғисмәтуллин бөйөк татар шағиры Ғабдулла Туҡай, «Мөхәммәҙиә» мәҙрәсәһе мөғәллиме Закир Шакиров менән таныша. Улар яҡын дуҫтар булып китә.

Шул осорҙа Петербургта психо-неврология институты асыла. Ғ.Т.Ғисмәтуллин институттың юридик факультетына уҡырға инә, бер үк ваҡытта татар мәктәбендә балалар уҡыта. 1916 йылда уҡыуҙы тамамлағас, ул Юрьев төҙөлөш идаралығында эшләй, эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр комитеты рәйесе итеп һайлана.

Был саҡта Ғ.Т.Ғисмәтуллин Милләттәр Халыҡ Комиссариатының мосолман секцияһында, «Ҡыҙыл шәкерт» гәзите редакцияһында эшләй. 1920 йылға ул алдынғы хеҙмәткәр, большевик булып таныла. Шуға ла уны Мәскәүҙә Көнсығыш халыҡтар институты комиссары итеп ҡуялар. Бында ул Милләттәр Халыҡ Комиссариаты вәкиле була. 1922 йылда Комиссариат бөтөрөлгәс, Ғабдулла Ғисмәтуллин Башҡортостанға ҡайта, тәүге мәлдә республика дәүләт план комитеты рәйесе урынбаҫары, шунан комитет рәйесе булып эшләй.

1926 йылда Ғабдулла Төхвәт улы Ғисмәтуллин Башҡортостан мәғариф халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. Уның етәкселегендә халыҡ мәғарифын үҫтереү саралары күрелә. Иң тәүҙә мәктәптәр селтәре киңәйә, уҡыусылар арта. 1925/26 уҡыу йылында 67 урта мәктәп булһа, 1927/28 уҡыу йылына улар 87-гә етә. Урта мәктәптәрҙә – 13 мең, башланғыс мәктәптәрҙә 156 мең бала шөғөлләнә.

Мәғариф халыҡ комиссары Ғ.Т.Ғисмәтуллин республикала балаларға дөйөм белем биреүҙе ойоштороуға, педагогик курстарҙа,

педагогия техникумдарында һәм институттарында уҡытыусылар әҙерләүгә ҙур иғтибар бирә, йәмәғәт эштәрендә лә ҡатнаша.

Халыҡ мәғарифы эшен киң ҡолас менән йәйеп ебәргәндә генә Ғ.Т.Ғисмәтуллин унан ситләтелә, 1928 – 1929 йылдарҙа ул Башсовнархоз рәйесе вазифаһын башҡара, 1930 – 1932 йылдарҙа дәүләт план комитеты рәйесе урынбаҫары була, шунан партияның өлкә комитетына яуаплы урынға күсерелә. Барлыҡ көсөн, белемен биреп эшләп йөрөгәндә Ғабдулла Төхвәт улы Ғисмәтуллин Сталин репрессияһы ҡорбаны була.

## ҒӨБӘЙҘУЛЛА ӘХМӘТКИРӘЙ улы ДӘҮЛӘТШИН

*(1893 – 1938)*



Уҙған быуаттың 30-сы йылдарында, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә, мәғариф халыҡ комиссары Ғөбәйҙулла Әхмәткирәй улы Дәүләтшин Башҡортостанда халыҡ мәғарифын ойоштороуға, мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә эшен яҡшыртыуға үҙ өлөшөн индергән дәүләт эшмәкәре, яҙыусы булып таныла. Уның тормошо күптәргә өлгө булып тора.

Ғөбәй Дәүләтшин – Ғөбәйҙулла Әхмәткирәй улы Дәүләтшин – 1893 йылдың 29 декабрендә Һамар губернаһы Ташбулат ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ул кесе йәштән үкһеҙ етем ҡала. Үҫеп еткәс, һалдатҡа алынып, өс йыл ғүмерен фронтта үткәрә. Тап шул ваҡытта Ғөбәй Дәүләтшин халыҡ бәхете өсөн көрәшсе булып китә. 1917 йылда, Февраль буржуаз-демократик революцияһынан һуң, ул фронттан Мәскәүгә, мосолмандарҙың I Бөтә Рәсәй съезына делегат булып бара, унда сығыш яһай.

Ғөбәй Дәүләтшин илдә барған граждандар һуғышында ҡатнаша, ауылда яңы тормош төҙөү өсөн көрәшә. 20-се йылдарҙа партияның Пугачев өйәҙ комитетында, Һамар губерна комитетында яуаплы эштәр башҡара. Тиҙҙән ул Башҡортостан партия ойошмаһының

юллауы буйынса, Өфөгә саҡырып алына, республиканың күренекле эшмәкәрҙәренең береһе булып танылa.

Башҡортостанда йәшәү йылдарында Ғөбәй Дәүләтшин Баймаҡ районы «Йылайыр» совхозында политбүлек начальнигы, партияның Арғаяш кантон комитеты сәркәтибе булып эшләй. Өфөлә Ғилми үҙәк мөдире, К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институты директоры булараҡ, ул республикала халыҡ мәғарифын үҫтереүгә, уҡытыусылар, мәҙәниәт, сәнғәт белгестәре әҙерләүгә бөтә көсөн бирә.

1935 йылда Ғөбәйҙулла Әхмәткирәй улы Дәүләтшин мәғариф халыҡ комиссары итеп билдәләнә. Быға ул барлыҡ йөрәк ҡайнарлығын, аҡыл дәртен биреп тотона, тиҙ арала үҙен булдыҡлы хеҙмәткәр, педагог, талантлы ойоштороусы итеп күрһәтә. Халыҡ комиссары республикала мәғариф системаһын камиллаштырыу, мәктәптәрҙе уҡытыусылар менән тәьмин итеү, дәреслектәр һәм башҡа уҡыу әсбаптары баҫып сығарыу бурыстарын даими хәл итә, быға һәләтле кешеләрҙе, бигерәк тә йәш кадрҙарҙы йәлеп итә. Был ваҡытта уға нәфис китап баҫып сығарыу, сәнғәткә етәкселек итеү, Яҙыусылар союзы идараһы эшен ойоштороу кеүек бурыстар ҙа йөкмәтелә, «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналының баш мөхәррире вазифаһын да башҡара. Ни хәл итәһең, заманы шулай ине.

Мәғариф Халыҡ Комиссариаты аппаратының көндәлек эшенә етәкселек итеү менән бергә Ғөбәй Дәүләтшин йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнаша, мәғариф мәсьәләләрен яҡтыртҡан мәҡәләләр яҙа, әҙәбиәт, сәнғәт тураһындағы яҙмалары менән ваҡытлы матбуғатта йыш сығыш яһай.

Халыҡ комиссары Ғ.Ә.Дәүләтшин республикала мәғарифты үҫтереүгә ҙур өлөш индерҙе, тип әйтә алабыҙ. Уны һәр мәктәптә көтөп алалар, теләк, үтенестәрен белдерәләр. Комиссар халыҡтың һорауҙарын ҡәнәғәтләндереүгә һәр саҡ етди ҡарай.

Ғөбәй Дәүләтшин яҙыусы булараҡ та киң билдәле. 1924 йылда уның «Ҡуңалтаҡ тормош эсендә» тигән хикәйәһе «Белем» журналында донъя күрә. Артабан уның «Ҡунаҡ» хикәйәһе, «Зильский» повесы һәм башҡа әҫәрҙәре баҫылып сыға.

Ғөбәй Дәүләтшин төрки халыҡтар араһында беренсе булып партия гимны «Интернационал»ды башҡорт теленә тәржемә итә. Был тәржемә әҙәбиәт белгестәренең ҙур баһаһына лайыҡ була. Заманында Ғөбәй Дәүләтшин төрлө йыйын, күңел асыу кисәләрен ойоштора, «Ғәлиәбаныу» йыр көйөнә бейеүе менән күптәрҙе хайран ҡалдыра. Шундай кеше нахаҡҡа ғәйепләнеп, репрессияға эләгә һәм ваҡытһыҙ вафат була.



# КӘРИМ АБДУЛЛА улы ИҘЕЛҒУЖИН

*(1895 – 1937)*

Ҡанлы репрессия ҡорбандары араһында Кәрим Абдулла улы Иҙелғужин да бар. Ул – дәүләт эшмәкәре, талантлы журналист, мәғариф халыҡ комиссары, ғалим.

Кәрим Абдулла улы Иҙелғужин 1895 йылдың 10 октябрендә Ырымбур губернаһының Мерәҫ ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Был башҡорт милли азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе – Сәғит Мерәҫов йәшәгән ауыл. Атаһы вафат булғас, Кәрим тормоштоң әсеһен-сөсөһөн күп күрә, байҙарҙа мал көтә, ялланып эшләй. Отҡор үҫмерҙе Сәғит Мерәҫов күреп ҡала һәм мәктәпкә уҡырға урынлаштыра.

1912 йылда Кәрим Иҙелғужин Өфөләге «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Бында ул алгебра, геометрия, физика, химия, тарих, география, педагогика, урыҫ телен өйрәнә, шәкерттәрҙең төрлө түңәрәктәрендә ҡатнаша.

1915 йылда Кәрим Иҙелғужин әрмегә алынып, беренсе донъя һуғышында ҡатнаша. Октябрь революцияһын окопта ҡаршылай, 1917 йылдың октябрь аҙаҡтарында тыуған ауылына ҡайта. Бында ул ауыл Советы сәркәтибе була, 1918 йылдың авгусында Ырымбурҙа сыҡҡан «Башҡортостан хәбәрҙәре» гәзитенең сәркәтибе булып эшләй, шунан атлы дивизия писары булып хеҙмәт итә. Башҡорт ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡас, Кәрим Иҙелғужин армия частарын тулыландырыу өсөн башҡорттарҙан доброволецтар йыйыу комиссияһы рәйесе була, 1919 йылдың авгусында Тамъян-Ҡатай кантонының хәрби комиссары итеп тәғәйенләнә.

Был осорҙа Башҡортостанда сәйәси хәл бик ҡатмарлы була. Берәүҙәр Башҡортостан автономияһын яҡлап көрәшә, икенселәр уға ҡаршы сығыш яһай. Халыҡ араһында ризаһыҙлыҡ көсәйә. Шул

ваҡытта баш күтәреүселәр менән һөйләшеү өсөн Темәскә делегация ебәрелә. Уның составында К.А.Иҙелғужин да була.

Яңы тормош өсөн көрәш йылдарында белемле кешеләр бер юлы әллә нисә урында эшләй, кадрҙар йыш алышынып тора. К.А. Иҙелғужин да Тамъян-Түңгәүер, Туҡ-Соран кантон башҡарма комитеттарына етәкселек итә, бер аҙ Ырымбур башҡорт педагогия техникумы директоры булып та ала.

1924 йылдың баштарында К.А.Иҙелғужин Мәскәүҙә була, Советтарҙың XI Бөтә Россия съезы эшендә ҡатнаша, унан ҡайтҡас, Арғаяш кантон башҡарма комитеты рәйесе итеп ебәрелә. 1925 йылда ул «Башҡортостан» гәзитенең мөхәррире итеп тәғәйенләнә. Полиграфия базаһының йомшаҡ булыуы һәм ҡағыҙ етмәү сәбәпле, ул саҡта гәзит сығарыу бик ауыр була. Уны ваҡытында баҫып сығарыу өсөн, яңы мөхәрриргә күп эшләргә тура килә. Тырышлыҡ яҡшы һөҙөмтәләр бирә – гәзиттең йөкмәткеһе, биҙәлеше яҡшыра, форматы ҙурайтыла. Төрлө проблемалар яҡтыртыла, гәзиттең абруйы күтәрелә. Был мәлдә Кәрим Абдулла улы Иҙелғужин башҡорт халҡы тарихын ныҡлап өйрәнә. Шуның һөҙөмтәһендә «1917 – 1919 йылдарҙа башҡорттар хәрәкәте» тигән ҡиммәтле китап яҙа. Был китап әле лә әһәмиәтен юғалтмаған.

1928 йылда Кәрим Абдулла улы Иҙелғужин Башҡортостан мәғариф халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. Илдә һәм республикала дөйөм мәжбүри башланғыс белем биреүҙе индерергә әҙерлек башлана. Әммә бының өсөн кәрәкле шарттар етерлек түгел. Уҡытыусылар аҙ, мәктәп биналары насар. Мәғариф Халыҡ Комиссариатынан, уның урындағы органдарынан уҡытыусылар әҙерләү, мәктәп биналары табыу буйынса ғәйәт ҙур тырышлыҡ талап ителә. Яңы педагогия техникумдары, уларҙың эргәһендә педагогик курстар асыла, уҡытыу-тәрбиә эшен яңыса ойоштороу саралары күрелә. Был айырыуса ауыр һәм мөһим бурыстарҙы үтәүҙә мәғариф халыҡ комиссары күп көс түгә.

1931 – 1934 йылдарҙа К.А.Иҙелғужин Ленинградта ғилми-тикшеренеү педагогия институты аспирантураһында уҡый. Уны тамамлағандан һуң, Өфөгә ҡайтып, Башҡортостан ғилми-тикшеренеү педагогика институты ойоштороу һәм асыу эшенә тотона, уның директор урынбаҫары вазифаһын намыҫлы башҡара.

Шулай ҙа нығый барған Совет власы элекке дошмандарын тыныс ҡалдырмай. 1936 йылдың сентябрендә К.А.Иҙелғужин ҡулға алынып, контрреволюцион эшмәкәрлектә ғәйепләнә. 1937 йылдың 10 февралендә биш йылға иркенән мәхрүм ителә, әммә бер аҙҙан эш яңынан ҡарала һәм ҡот осҡос хөкөм сығарыла:

атырға! Башҡорт халҡының данлы улдарының береһе – Кәрим Абдулла улы Иҙелғужиндың ғүмере 1937 йылдың 8 декабрендә өҙөлә.

1956 йылдың июнендә Башҡортостан Юғары суды президиумы ултырышы К.А.Иҙелғужинға билдәләнгән нигеҙһеҙ ғәйепләүҙе ғәмәлдән сығара, ул аҡланып, яҡты исеме яңынан тарихҡа ҡайта.

## МСТИСЛАВ АЛЕКСАНДРОВИЧ ҠУЛАЕВ

*(1873 – 1959)*



Мстислав Александрович Ҡулаев (башҡортса исем-шәрифтәре Мөхәмәтхан Сәхипкирәй улы Ҡулаев, үҫәргән башҡорто) – күренекле дәүләт эшмәкәре, хәҙерге башҡорт алфавитына нигеҙ һалған ғалим, уны урыҫ графикаһы нигеҙендә эшләгән тел белгесе.

М.А.Ҡулаев 1873 йылдың 7 февралендә хәҙерге Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районының Бәкәтәр ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Тәүҙә ауыл мәҙрәсәһендә уҡый. Ауылда урыҫ-башҡорт мәктәбе асылғас, шунда уҡырға инә. Өс йылдан һуң, 1886 йылда, Ырымбур гимназияһына ҡабул ителә, уны 1896 йылда бөтөрөп сыға. Белемдең ҡәҙерен аңлап өлгөргән егет шул уҡ йылда Ҡазан университетының медицина факультетына уҡырға инеп, 1902 йылда уңышлы тамамлай.

Табип хеҙмәтен башҡарыуы һәм дәүләт эшмәкәре булыуынан бигерәк, беҙҙе Мстислав Александрович Ҡулаевтың башҡорт теле өҫтөндә эшләүе, ғалимлығы ҡыҙыҡһындыра. Гимназияла һәм университетта уҡыу, артабан университетта эшләү дәүерендә ул урыҫ мәҙәниәте буйынса төплө белем ала, бер нисә сит ил телен өйрәнә, докторлыҡ диссертацияһы яҙа. Йәш белгес халҡына белем, мәҙәниәт юлын асыуҙы мәғрифәттә күрә һәм үҙ алдына саф башҡортса яҙма булдырыу маҡсатын ҡуя. 1912 йылда Ҡазанда уның «Основы звукопроизношения и азбука для башкир» тигән китабы баҫылып сыға. Башҡортса яҙыу

өсөн М.А.Ҡулаев урыҫ-грек графикаһы нигеҙендә башҡорт милли алфавитын төҙөй, башҡорт телендәге өндәргә баһалама бирә, һәр өнгә хәреф билдәләй.

Октябрь революцияһынан һуң М.А.Ҡулаев Башҡортостанға ҡайтып, шул замандағы ҡатмарлы сәйәси көрәшкә инеп китә. 1919 йылда башҡорт ғәскәрҙәренең Ҡыҙыл Армия сафтары яғына сығыуында ла, Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы төҙөүҙә лә ул билдәле роль уйнай. Республика төҙөү тураһындағы Рәсәй Федерацияһы хөкүмәте менән килешеүгә Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе В.И.Ленин ҡул ҡуйған документта Башҡортостан хөкүмәте рәйесе М.А.Ҡулаевтың да ҡултамғаһы тора. Шулай итеп, ул – Башҡортостан хөкүмәтенең беренсе рәйесе.

1918 йылдың аҙағынан 1919 йылдың февраленә тиклем М.А.Ҡулаев башҡорт теле буйынса эшләүен туҡтатмай, алфавитын артабан камиллаштыра, 1919 йылда Өфөлә уның «Әлепей» китабы донъя күрә. Китапта һыҙылышы ҡатмарлы хәрефтәр ябайлаштырыла, улар хатта хәҙерге башҡорт теле алфавитына яҡын тора. Ләкин М.А.Ҡулаевтың алфавитын революциянан һуң тәүге йылдарҙа ғәмәлгә индереп булмай, сөнки граждандар һуғышы, 1921 йылғы йотлоҡ был эште бойомға ашырырға мөмкинлек бирмәй.

М.А.Ҡулаев башҡорт теленең фонетик принципҡа нигеҙләнгән яҙмаһын оҙаҡ һәм ныҡышмалы эшләй. Революцияға тиклем дә, унан һуң да ғәрәп алфавитын төрки халыҡтар теленә яраҡлаштырыу, реформа үткәреү буйынса күп бәхәстәр, кәңәшмәләр булған. Башҡорт тел белеменең ҙур ғалимы М.А.Ҡулаев был дискуссияларҙан ситтә ҡалмай.

1919 йылдың мартында М.А.Ҡулаев Мәскәүҙән ҡайтышлай Ҡазанда мәрйә ҡатыны менән тороп ҡала, Татарстанда һаулыҡ һаҡлау эшендә әүҙем ҡатнаша. 1922 йылдың октябрендә ул Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советына үҙ алфавитын Башҡортостанда ғәмәлгә ашырыуҙы һорап мөрәжәғәт итә, төрки телдәрҙә ғәрәп хәрефле яҙыуҙың тарихы тураһындағы «Башҡорт яҙмаһы» тигән ҡулъяҙма китабын һәм «Әлепей»ен ебәрә.

М.А.Ҡулаев киң күңелле, бик аҡыллы, алдан күрә белеүсе кеше булған. Ул иң элек башҡорт халҡын мәҙәниәткә өйрәтеүҙе ҙур маҡсат итеп ҡуя. Уның урыҫ-грек графикаһында башҡорт алфавитын төҙөүе – бының асыҡ миҫалы. 1928 йылда һәм артабан, төрки халыҡтар яҙмаларын ғәрәп алфавитынан латин алфавитына күсереү кампанияһы дәүерендә, ул урыҫ графикаһын ҡабул итеү кәрәклеген йәнә лә яҡлап сыға. Уның башҡорт яҙмаһын урыҫ графикаһы нигеҙендә төҙөү идеяһы 1939 йылда тормошҡа ашырыла. М.А.Ҡулаев башҡорт теленең ғәмәли йүнәлешен эшләү

менән генә сикләнмәй. 1939 йылда яҙған «Башҡорт теленең ҡылымдары тураһында» тигән хеҙмәтендә ул башҡорт теленең синтаксисын, морфологияһын, һүҙлек составын тикшерә. Ғалимдың башҡортса-урыҫса, урыҫса-башҡортса һүҙлектәре лә фәнни донъяла киң билдәле.

Мстислав Александрович Ҡулаевтың башҡорт тел белеме өлкәһендәге хеҙмәттәрен юғары баһалап, атаҡлы башҡорт ғалимы, профессор Ж.Ғ.Кейекбаев уны, башҡорт тел белеменең ветераны, тип атаны. Башҡа ғалимдар ҙа уның хеҙмәтенә тейешле баһа бирҙе.

М.А.Ҡулаев – башҡорт халҡының мәғрифәтсе ғалимы, табип, дәүләт эшмәкәре. Уның раҫлауынса: «Һәр кем үҙ телендә уҡый-яҙа белергә тейеш», «Белемде ныҡ һеңдерә торған тел – әсә теле, әсәйҙең өндәшеүе. Башҡорттарға белем алыр өсөн үҙ теле – әсә теле кәрәк».

## ҒӘБДЕЛРӘҮЕФ ХӘКИМ улы НИЯЗБАЕВ

*(1884 – 1920)*



Ғәбделрәүеф Хәким улы Ниязбаев тарихҡа күренекле педагог һәм яҙыусы булып инә. Ул барлыҡ ғүмерен халҡыбыҙҙың аң-белем, мәҙәни кимәлен күтәреүгә бирә.

Мәғариф хеҙмәткәре һәм әҙип 1884 йылдың 12 февралендә Ырымбур губернаһының Ҡарғалы ауылында уҡытыусы ғаиләһендә донъяға килә. Башҡортостан ауылдарында мәктәптәр асыуға, уҡытыу-тәрбиә эшен яңыса ойоштороуға, әҙәби әҫәрҙәре менән башҡорт драматургияһын һәм милли театрын барлыҡҡа килтереүгә үҙ өлөшөн индерә.

1905 – 1907 йылдарҙағы беренсе урыҫ революцияһын Ғ.Х.Ниязбаев шатланып ҡаршылай, азатлыҡ өсөн көрәштә ярайһы ғына ҡатнаша. Уның шәхес булып үҫеп етеүендә мәғрифәтселек

идеялары, алдынғы демократик ҡараштар хәл иткес әһәмиәткә эйә була.

Яҡты идеялар менән рухланған Ғ.Х.Ниязбаев, революция күтәрелеше баҫыла төшһә лә, үҙенең алдынғы ҡараштарынан баш тартмай. Был ваҡытта ул Ҡазан уҡытыусылар мәктәбендә уҡый, йәш шәкерттәр хәрәкәтендә ҡатнашҡаны өсөн ҡулға алына һәм бер аҙ ваҡыт ултырып та сыға.

Ғ.Х.Ниязбаев тыуған яғына ҡайтып, барлыҡ һәләтен халыҡ араһында аң-белем таратыуға бирә. Мәҙәниәт үҫешендә, аң-белемде күтәреүҙә ул халыҡты артта ҡалғанлыҡтан, ҡараңғылыҡтан сығарыу юлдарын күрә, милли мәктәптәрҙә уҡытыуҙы яйға һалыуҙы мөһим сара тип иҫәпләй.

Ғ.Х.Ниязбаев мәктәптә балалар уҡыта, тәжрибә туплай. Алдынғы педагогик ҡарашлы хеҙмәткәр яңы властың мәғариф эштәрендә әүҙем ҡатнаша. Ул 1919 йылдың декабрендә Башҡортостан халыҡ мәғарифы хеҙмәткәрҙәренең Стәрлетамаҡта үткәрелгән I съезында делегат була, Башҡортостан хөкүмәтенең мәктәптәр асыуға, дөйөм наҙанлыҡты бөтөрөүгә ҙур көс һалыуы менән үҙенең күптәнге хыялдарының тап килеүен күреп шатлана, яңы ижади пландар ҡора, хеҙмәт дәрте менән педагогик эшмәкәрлеген йәнләндереп ебәрә.

Был йылдарҙа Ғәбделрәүеф Хәким улы Ниязбаев Башҡортостандың Ҡыпсаҡ-Ете ырыу кантон халыҡ мәғарифы бүлеге инспекторы булып эшләй. Кантондың алыҫ төбәктәрендә уның байтаҡ яңы мәктәптәр асыуы, уларҙың эштәрен яйға һалыуы, уҡытыусыларға ҙур ярҙам күрһәтеүе, мәғариф хеҙмәткәрҙәренең белемен камиллаштырыу өсөн курстар асыуы һәм уларға етәкселек итеүе киң билдәле. Мәктәптәрҙә, уҡытыусылар араһында инспекторҙың исеме оло ихтирам менән телгә алына. Был уның мәғариф хеҙмәткәрҙәре өсөн күп эштәр башҡарыуына бәйле.

Ҡыҫҡа ғына ғүмерендә Ғ.Х.Ниязбаев яңы мәктәп эшенә тейешле йүнәлеш биреүе, уны яҡшы ойоштороуы, мәғариф эштәрен үҫтереүгә лайыҡлы өлөш индереүе менән бер рәттән, әҙәби ижад менән дә шөғөлләнә. Уның «Көслөләр һәм көсһөҙҙәр» («Брәдаран Ғәлимовтар»), «Беренсе таң» драмалары сәхнәлә ҙур уңыш менән бара. Быларҙан тыш, ул «Ҡараңғы төндәр», «Башҡортостан тормошона ғаъид»[1] («Гөлбоҫтан»), «Ҡыҙыл истиҡбал[2] өсөн көрәш» тигән пьесаларын да яҙа.

1920 йылда «Мәғариф эштәре» журналының 3-сө һанында Ғ.Х.Ниязбаевтың вафат булыуы айҡанлы баҫылған некрологта

[1] Ғ а ъ и д – бәйле
[2] И с т и ҡ б а л – киләсәк

шундай юлдар бар: «Унының яҙған әҫәрҙәре тулы мөндәрижәһе[1], матур яҙылыуы, замандың ысын тормошонан алыныуы менән әҙәбиәтебеҙҙә беренсе урында торалар. Октябрь инҡилабынан һуң яҙған драмалағы башҡорт әҙәбиәтенә беренсе нигеҙ ташы урынын алалар».

## ҒӘЛИ РАФИҠИ
## (Ғәли Лотфрахман улы Рафиҡов)

*(1890 – 1944)*



Уҡытыусылар һәм ғалимдар даирәһендә Ғәли Рафиҡиҙың исеме (Ғәли Лотфрахман улы Рафиҡов әҙәби, педагогик һәм ғилми хеҙмәттәрен шундай псевдоним аҫтында баҫтырып сығарған) заманында киң билдәле булған. Ул – күренекле педагог, мәғрифәтсе, тәбиғәт фәндәрен пропагандалаусы ғалим.

Ғәли Лотфрахман улы Рафиҡов 1890 йылдың 29 июлендә Башҡортостандың Миәкә районы Баязит ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Башланғыс белемде Ғәли Стәрлебаш мәҙрәсәһендә ала, 1905 йылда Ҡазанға юллана, унда «Мөхәммәҙиә» мәҙрәсәһендә уҡый. Ата-әсәһенең матди ярҙам күрһәтә алмауы сәбәпле, уға йәйен ҡаҙаҡ далаларында балалар уҡытып аҡса эшләргә, ҡышын уҡыуын дауам итергә тура килә. Уҡыусы йәштәргә ҙур йоғонто яһаған йәҙитселек хәрәкәте тәьҫирендә Ғәли Рафиҡов Өфөгә күсеп, «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Бында ул ике йыл белем алғас, мәҙрәсә идараһының тәҡдиме буйынса Бешкәк ҡалаһына уҡытыу эшенә китә.

1909 йылдан 1912 йылға тиклем Ғәли Рафиҡов Бешкәк ҡалаһында мосолман халыҡтарының «Ижтиһад» алты йыллыҡ мәктәбендә тәбиғәт һәм география дәрестәрен алып бара. Шул ваҡытта

---

[1] Мөндәрижә – йөкмәтке

Ырымбурҙа нәшер ителгән «Шура» журналында ул үҫемлектәр донъяһы, микробиология, кеше физиологияһы тураһында фәнни-популяр мәҡәләләр баҫтырып сығара. Был хеҙмәттәрендә йәш белгес шәкерттәрҙе урыҫ ғалимдары Д.И.Менделеев, И.И.Мечников, К.А.Тимирязев, сит ил ғалимдарынан микробиологияға нигеҙ һалыусы Луи Пастер, тәбиғәт белгесе Джозеф Пристли, фәнни физиология һәм эмбриология белгесе Уильям Гарвей, күренекле ғалимдар Лавуазье, Чарльз Дарвин менән таныштыра, уларҙың тәғлимәтен тасуирлай.

1912 йылда Ғәли Рафиҡи Ҡазан уҡытыусылар мәктәбенә уҡырға инә, алдынғы кешеләр менән аралаша, «Аң», «Аҡ юл» журналдарында хикәйәләрен, юлъяҙмаларын, «Шура» журналындағы кеүек, «Ғ.Рафиҡи» псевдонимы аҫтында баҫтырып сығара.

1916 йылда Ғәли Рафиҡи Бәләбәй өйәҙе Айыт ауылында земство башланғыс мәктәбендә балалар уҡыта башлай, артабан Стәрлебаш мәҙрәсәһе китапханаһы мөдире була, халыҡ араһында ғилем һәм мәҙәниәттең әһәмиәтен аңлата.

1919 – 1923 йылдарҙа Ғәли Рафиҡи Елдәр олоҫонан Оло Кәркәле һәм Баязит ауылдарында яңы мәктәптәр асыуҙа яҡындан ҡатнаша, уларҙың тәүге уҡытыусыһы була.

Шунан һуң Ғәли Рафиҡи Бәләбәй кантон башҡарма комитетының башҡорт телен уҡытыуҙы бойомға ашырыу бюроһы сәркәтибе ярҙамсыһы итеп билдәләнә. Уның етәкселегендә кадрҙар әҙерләү курстары ойоштторола. 1926 йылда Бәләбәй педагогия техникумының тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы булып эшләй. Шул ваҡытта К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының ситтән тороп уҡыу бүлеген бөтөрөп сыға, ауылдарҙа ҙур йәмәғәт эштәре алып бара. Тәбиғәт фәндәре буйынса белгес булараҡ, ул халыҡҡа донъяуи белем биреүҙә әүҙем ҡатнаша, кешеләрҙе яңы тормош төҙөргә рухландыра.

Ғәли Рафиҡи Бәләбәй педагогия техникумы директоры булып эшләгән йылдарҙа уҡыу йортоноң матди базаһын нығытыуға, мәктәптәр өсөн уҡытыусы кадрҙары әҙерләүгә күп көс һала. 1938 йылда педагогия училищеһы уҡытыусыһы Ғ.С.Еникеев менән бергә урыҫ теле грамматикаһын яҙа. Был дәреслек һәйбәт баһа алып, 1938 йылда уҡ донъя күрә, йәмғеһе өс тапҡыр баҫылып сыға.

Ғәли Рафиҡиҙы халҡыбыҙ күренекле педагог һәм ғалим булараҡ хәтерләй. Уның хеҙмәте махсус өйрәнеүҙе талап итә.

## ШӘРИФ СҮНЧӘЛӘЙ
**(Шәрифулла Хәмиҙулла улы Сүнчәләев)**

*(1885 – 1959)*



Башҡортостан мәғарифы тарихында мәктәп һәм башҡа балалар ойошмаһы эштәрен яңыса ойоштороусы күренекле хеҙмәткәр, этнограф, иҡтисадсы, талантлы педагог Шәрифулла Хәмиҙулла улы Сүнчәләевтың яҡты исеме сағыу балҡый.

Шәрифулла Хәмиҙулла улы Сүнчәләев (замандаштары араһында ул Шәриф Сүнчәләй исеме менән билдәле) 1885 йылдың 3 ноябрендә Һарытау губернаһының Хвалын өйәҙе Иҫке Мәстәк ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. 1903 йылда Шәриф Сүнчәләй Ҡазан уҡытыусылар мәктәбенә уҡырға бара. 1905 – 1907 йылдарҙағы беренсе урыҫ революцияһы осоронда шәкерттәр сыуалышында ҡатнаша, листовкаларҙы тәржемә итеп тарата. Уҡытыусылар мәктәбен тамамлағас, 1907 йылда Шәриф Сүнчәләй Пермь губернаһының Сараши урыҫ-башҡорт мәктәбенә уҡытыусы итеп ебәрелә. Быны ул халыҡ араһында сәйәси-ағартыу эше менән бергә алып бара. Батша ялсылары уҡытыусыға бер урында тыныс ҡына эшләргә ирек бирмәй. 1915 йылда ул Өфө губернаһының Бәләбәй өйәҙе Ҡарғалы ауылына күсерелә. Бында ул мәктәптән тыш уҡытыу бүлеге мөдире була.

Февраль революцияһы ваҡытында Шәриф Сүнчәләй ярлы крәҫтиәндәрҙе митингыларға, юғары башланғыс училище уҡытыусыларын һәм шәкерттәрен демонстрацияларға саҡыра, яңы тормош төҙөргә өндәй, халыҡ алдында күп тапҡыр телмәр тота.

1917 йылдың мартында Шәриф Сүнчәләй Өфөгә күсә. Унда революционер Ш.Хоҙайбирҙин, яҙыусылар Ғ.Ибраһимов һәм М.Ғафури менән бергә «дин үә милләт» хаҡына берләшкән башҡорт, татар реакцион көстәренә ҡаршы көрәшә, «Ирек» гәзитен сығара.

Октябрь революцияһынан һуң Шәриф Сүнчәләй төрлө комитеттарҙа эшләй, Өфө губерна Советы эргәһендәге башҡорт-татар комиссариатының халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире була, ваҡытлы матбуғат биттәрендә буржуаз милләтселәрҙе һәм контрреволюционерҙарҙы фашлай. 1919 йылдың йәйендә Өфө Колчак ғәскәрҙәренән азат ителгәс, ул губернала мәғариф эштәрен әүҙем ойоштороусыларҙың береһе була, Өфөлә һәм ауылдарҙа уҡыу йорттары асыуҙа ҡатнаша, яңыса уҡытыу-тәрбиә эшенең асылын халыҡҡа аңлата, наҙанлыҡты бөтөрөү саралары күрә.

1922 – 1927 йылдарҙа Шәриф Сүнчәләй Башҡортостан мәғариф халыҡ комиссары урынбаҫары, социаль тәрбиә идаралығы мөдире, ғилми-методик үҙәк рәйесе һәм коллегия ағзаһы була. Был осорҙа ул мәктәп, педагогия техникумдары һәм Өфө халыҡ мәғарифы институты уҡытыусыларын, мәғариф хеҙмәткәрҙәрен үҙ тирәһенә туплай, уларҙың барлыҡ көсөн һәм тырышлыҡтарын уҡытыу-тәрбиә эшенең фәнни-ғәмәли мәсьәләләрен хәл итеүгә йүнәлтә.

Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссариатында, фәнни-методик академия үҙәгендә Шәриф Сүнчәләй З.Шакиров, Н.Чижов, Ә.Мансуров, Хөсни Усман, С.Ямалиев менән бергә яңы педагогика һәм методика талаптарына яуап биргән уҡытыу программалары, дәреслектәр һәм башҡа әсбаптар төҙөү буйынса ҙур эш башҡара. 1927 йылда Өфө халыҡ мәғарифы институтына етәкселек итеүҙе көсәйтеү маҡсатында Шәриф Сүнчәләй был уҡыу йортоноң директоры итеп тәғәйенләнә.

Мәғарифты ойоштороу буйынса бай тәжрибә туплаған Шәриф Сүнчәләй бында эшләгән ике йыл эсендә институтты юғары уҡыу йорто – Башҡорт дәүләт педагогия институты итеп үҙгәртеүгә ҙур хеҙмәт индерә. Педагогия институты юғары белемле кадрҙар менән нығытыла, Рәсәй Федерацияһының юғары уҡыу йорттары араһында үҙ урынын ала.

Был йылдарҙа Шәриф Сүнчәләй мәғариф, педагогика, иҡтисад, этнография темаларына фәнни-ғәмәли хеҙмәттәр яҙа, балалар баҡсалары эшен ойоштороу мәсьәләһен күтәрә.

1930 – 1934 йылдарҙа Шәриф Сүнчәләй иҡтисад буйынса коммунистик академия эргәһендәге аспирантурала уҡый. Был уҡыу йортон тамамлағандан һуң, ул Мәскәүҙә Көнсығыш халыҡтар ғилми-тикшеренеү институтында ғилми хеҙмәткәр итеп ҡалдырыла, шул уҡ ваҡытта Мәскәү туҡымалар институтында сәйәси иҡтисад доценты вазифаһын башҡара.

Шәриф Сүнчәләй Башҡортостан тарихы һәм иҡтисады, этнография темалары буйынса ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара, Мәскәүҙә йәшәгән йылдарҙа (1932 – 1959) күп ғилми хеҙмәттәр

яҙа. Уның айырыуса «Башҡортостан тураһында дөйөм мәғлүмәттәр», «Башҡортостан мәктәптәрендә тыуған яҡты өйрәнеү» тигән хеҙмәттәре ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. 1947 йылда Мәскәүҙә урыҫ телендә баҫылып сыҡҡан «Этнографические особенности башкир» тигән китабы төрлө мәғлүмәттәргә бай булыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә. Ғалим башҡорт фольклоры, теле буйынса библиография төҙөй, ғилми күҙәтеүҙәр яһау, дөйөмләштереү менән шөғөлләнә.

1938 йылда Шәрифулла Хәмиҙулла улы Сүнчәләев нигеҙһеҙ эҙәрләүҙәргә дусар ителә, әммә 1956 йылда тулыһынса аҡланып, нахаҡ бәләләр кире алына.

## АБДРАХМАН БИКМӨХӘМӘТ улы СӘҒИТОВ

*(1898 – 1943)*



Баймаҡ районының күренекле уҡытыусылары араһында үҙенең тынғыһыҙ эштәре, яҡшы ойоштороусы булыуы менән айырылып торған мөһабәт һәм абруйлы шәхес бар. Ул – Абдрахман Бикмөхәмәт улы Сәғитов, талантлы педагог, оҫта етәксе, район уҡытыусыларынан орденға лайыҡ булған тәүге мәғариф хеҙмәткәре.

Абдрахман Бикмөхәмәт улы Сәғитов 1898 йылдың 1 ғинуарында Башҡортостандың Федоровка районы Юлдаш ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Балаға 11 йәш тигәндә – атаһы, бер аҙҙан әсәһе үлеп китә, ә ағаһы беренсе донъя һуғышында була. Етем малай Ырымбур яҡтарында хеҙмәтсе, ялсы булып йөрөй, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн күреп үҫә.

1917 йылдың майында Абдрахман Сәғитов Ваҡытлы хөкүмәт армияһына алына, Октябрь революцияһынан һуң ҡорал тотоп Ырымбурға ҡайта, шул тирәләге аҡ казактарға ҡаршы һуғыша. 1918 йылдың майында йәш егет ағалы-энеле Кашириндар отрядына

ҡушылып, атаман А.И.Дутовҡа ҡаршы алыштарҙа ҡатнаша һәм данлыҡлы В.К.Блюхер рейдында ауыр юл үтә.

1922 йылда Абдрахман Сәғитов Ырымбур педагогия техникумына уҡырға инә. Йәше 24-тә булһа ла, ул 15–16 йәшлек үҫмерҙәр менән бер парта артына ултырып, тырышып уҡый. Уның тыныс тормошта белем алыуға һыуһауы фән нигеҙҙәрен еңел үҙләштерергә ярҙам итә.

1927 йылда А.Б.Сәғитов Йылайыр кантонына эшкә бара. Кантон халыҡ мәғарифы бүлеге йәш белгесте Темәс терәк мәктәбенә директор һәм уҡытыусы итеп билдәләй. Ул Темәс колхоз йәштәре мәктәбе, һуңынан тулы булмаған урта мәктәп директоры булараҡ, ҙур эштәр атҡара. Мәктәп методик үҙәккә әйләнә.

Темәс мәктәбе эргәһендә емеш-еләк һәм йәшелсә баҡсаһы, малайҙар өсөн оҫтахана, ҡыҙ балалар өсөн тегеү-сигеү түңәрәге булдырыла. Мәктәп директоры ауыл кешеләре араһында наҙанлыҡты бөтөрөү, уларҙы яңы тормош төҙөүселәре итеп тәрбиәләү буйынса күп яҡлы эш алып бара, колхозда бригадир, партия ойошмаһы сәркәтибе вазифаларын башҡара.

Талантлы педагог, оҫта етәксе булып танылған А.Б.Сәғитов Түбә урта мәктәбе директоры, Баймаҡ район халыҡ мәғарифы бүлеге инспекторы, бүлек мөдире булараҡ, Темәс, Түбә урта мәктәптәренең яңы биналарын төҙөтә, уларҙың уҡытыу-матди базаларын нығытыу буйынса эшлекле саралар күрә.

1939 йылда Абдрахман Бикмөхәмәт улы Сәғитовтың педагогик хеҙмәте юғары баһалана – ул Баймаҡ районы халыҡ мәғарифы хеҙмәткәрҙәренән беренсе булып Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Был бүләкте уға М.И.Калинин тапшыра.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, яңы тормош өсөн көрәшеп, арымай-талмай хеҙмәт иткән Абдрахман Сәғитов тыныс ҡына йәшәй алмай. Ул фронтҡа ебәреүҙе һорап ғариза яҙа. 1942 йылдың мартында талантлы педагог армия сафына алына, Сәмәрҡәнд ҡалаһында Мәскәүҙән күсерелгән М.В.Фрунзе исемендәге академияның алты айлыҡ курсын тамамлағас, өлкән лейтенант фашист илбаҫарҙарына ҡаршы ҡаты алышҡа инә. Яугир Кавказ, Донбасс, Киев өсөн барған ауыр һуғыштарҙа ҡатнашып, ҡаһармандарса айҡалаша һәм 1943 йылдың октябрендә Мелитополь өсөн барған алышта вафат була. Халҡыбыҙ үҙенең батыр улын онотмай. Уның ғүмере – халыҡ бәхете өсөн хеҙмәт итеү өлгөһө.

# ТӨХВӘТ ЧЕНӘКӘЙ

**(Төхвәтулла Ғиззәтулла улы Ченәкәев)**

*(1893 – 1959)*



Хәҙерге «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы – педагогик баҫманың беренсе мөхәррире кем булған? Төхвәтулла Ғиззәтулла улы Ченәкәев, әҙәби әҫәрҙәрендә ҡул ҡуйылғанса, Төхвәт Ченәкәй – 1920 йылда Кесе Башҡортостандың баш ҡалаһы Стәрлетамаҡта сыға башлаған «Мәғариф эштәре» тигән тәүге педагогик журналдың мөхәррире, уҡытыусы, шағир, халыҡ ижады өлгөләрен йыйған хеҙмәткәр.

Төхвәт Ченәкәй 1893 йылдың 2 ғинуарында Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районы Рәдүт ауылында (урыҫсаһы Никитино) ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Сабый саҡта уҡ уның әсәһе вафат була, өс апаһы менән Төхвәт үгәй әсә ҡарамағында үҫә. Атаһы, ярлы игенсе буларaҡ, бала-сағаһын тейәп, байҙарға ашлыҡ урып, ауылдан-ауылға йөрөп, ауыр тормош кисерә.

Төхвәт Ченәкәй тәүҙә мәҙрәсәлә уҡый. Ауыл мәктәбен тамамлағандан һуң, үҫмергә ситкә китеп уҡырға матди хәле мөмкинлек бирмәй. Атаһының бер туған апаһының ире ауылдың бай муллаһы була. Шул мулланың улы Ырымбур Ҡарғалыһы мәҙрәсәһендә уҡып йөрөгәндә Төхвәтте лә үҙе менән алып китә. 1904 йылда Ҡарғалыла тәүге ысул йәдит мәктәбе асыла. Төхвәт Ченәкәй шул мәктәптә уҡый. 1913 йылдан 1946 йылға ҡәҙәр ул Ырымбур, Өфө, Ҡазан, Үзбәкстан мәктәптәрендә башҡорт, татар, урыҫ телдәрен, әҙәбиәттәрен, тарих һәм география уҡыта. Заманында ул һәр саҡ алға ынтылған, күренекле педагог булып таныла.

Төхвәт Ченәкәйҙең яңы әҙәби формала яҙа башлауы 1910 йылға тура килә. 1910 – 1914 йылдарҙа яҙылған шиғырҙарының һайланмаһы Ырымбурҙа «Ваҡыт» нәшриәтендә «Һаҡмар буйы» тигән йыйынтыҡ булып баҫыла. Был – шағирҙың тәүге китабы. Артабан уның бер нисә йыйынтығы донъя күрә. Шағир үҙен яңы тормошто йырлаған әҙип итеп күрһәтә.

1919 йылдың аҙаҡтарында Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссариаты зыялылар даирәһендә билдәлелек алған Төхвәт Ченәкәйҙе Стәрлетамаҡҡа саҡырта. Халыҡ комиссары А.Айҙаров уны йылы ҡаршылай, хәл-әхүәл һәм донъя хәлдәре тураһында һорашҡас, һәйбәт уҡытыусы, мәшһүр шағир булараҡ маҡтап ала, шунан уның алдына ике бурыс ҡуя: беренсеһе – шағир Шәйехзада Бабичтың әҙәби мираҫын туплап тәртипкә килтереү, икенсеһе – күптән түгел генә нәшер итергә ниәтләнелгән «Мәғариф эштәре» исемле тәүге педагогик журналды сығара башларға әҙерләү, коллектив йыйыу, уның мөхәррире булыу.

Төхвәт Ченәкәй ауыр шарттарҙа ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә мәшһүр шағир Ш.Бабичтың халыҡ араһында таралған, матбуғатта баҫылып сыҡҡан байтаҡ әҫәрҙәрен – бөтәһе 22 шиғырын һәм биографияһын аҡҡа күсереп яҙа, 1920 йылдың көҙөндә Комиссариаттың нәшриәт бүлегенә тапшыра.

Халыҡ араһында йөрөгәндә, кешеләр менән аралашҡанда Төхвәт Ченәкәй халыҡ ижады өлгөләрен – йыр, таҡмаҡ, ҡобайырҙар яҙып ала, был эшен оҙаҡ йылдар дауам итә. Ул өлгөләр халыҡ ижадын ғилми өйрәнеү өсөн киң файҙаланыла.

1920 йылдың ғинуар айы «Мәғариф эштәре» журналының мөхәррире Төхвәт Ченәкәй өсөн көсөргәнешле үтә. Тиҙ арала журналға материал йыйыла. Ул мартта баҫылып сыҡһа ла, 1-се һанының нәшер ителеү ваҡыты итеп февраль айы күрһәтелә. Шул рәүешле педагогик баҫмаға нигеҙ һалына. Журналдың тәүге һандары уның мөхәррире Төхвәт Ченәкәйҙең талантлы педагог һәм оҫта нәшерсе булыуын раҫлай. Материалдар һәләтле кешеләр – уҡытыусылар, Мәғариф Халыҡ Комиссариатының етәкселәре һәм башҡа хеҙмәткәрҙәре тарафынан яҙыла (дөрөҫ, мәҡәләләрҙең күбеһенә псевдоним ҡултамғалар ҡуйылған, уларҙы кемдәрҙең яҙыуын асыҡлау ауыр).

Мәҡәләләр төрлө бүлектәргә бүлеп бирелгән. Халыҡ мәғарифы эшенең көнүҙәк мәсьәләләрен яҡтыртыуға ынтылыу, уҡытыусыларға методик ярҙам күрһәтеү ниәте асыҡ төҫмөрләнә.

Төхвәт Ченәкәй педагогик журнал сығарыуға бөтөн көсөн, ижади һәләтен ҡыҙғанмай. Әммә тормош ауырлыҡтары уны даими сығарырға мөмкинлек бирмәй. Журналдың ни бары дүрт һаны ғына нәшер ителә.

Төхвәт Ченәкәй педагогик эшкә бирелә, балалар уҡытыу һәм тәрбиәләү, әҙәби ижад уны ялмап ала.

Шәйехзада Бабичтың әҫәрҙәрен йыйыу буйынса ҙур хеҙмәтен иҫәпкә алып, Төхвәт Ченәкәйҙе 1958 йылдың йәйендә Башҡортостан Яҙыусылар союзы менән Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты Өфөгә ҡунаҡҡа саҡыра. Ауырыуына ҡарамаҫтан, Төхвәт Ченәкәй Үзбәкстандың Алмалыҡ ҡалаһынан Өфөгә килеп,` Ш.Бабич тура-

һындағы иҫтәлектәрен тапшыра. Өфө йәмәғәтселегенең оло ихтирам менән, дуҫтарса ҡабул итеүенә шағир бик шатлана. Күренекле башҡорт яҙыусыһы Сәғит Агиш уны редакциянан редакцияға йөрөтөп, журналистар менән таныштыра.

Шундай осрашыуҙарҙың береһендә ошо юлдарҙың авторына, Башҡорт дәүләт университеты студентына, ҡатнашырға тура килде. Төхвәт Ченәкәй үҙе, тормош юлы тураһында һөйләне, шиғырҙарын уҡыны. Аҡрын ғына, йомшаҡ тауышлы, йыуантыҡ һәм тәпәш кәүҙәле шағирҙың һыны әле лә күҙ алдында тора. Их, алдан белгән булһам, шунда уның менән нығыраҡ танышыр, һөйләшер инем. 1970 йылда «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналының 50 йыллығы айҡанлы миңә, журнал хеҙмәткәренә, Төхвәт Ченәкәй тураһында белешергә, материалдар йыйырға насип булды.

## РИЗА ВАХИТ улы ӘБҮБӘКИРОВ

*(1902 – 1938)*



1902 йылдың 20 ноябрендә Башҡортостандың хәҙерге Салауат районы Күсәләр ауылында урта хәлле крәстиән Вахит Әбүбәкировтың ишле ғаиләһендә туғыҙынсы булып ир бала донъяға килә. Уға ата бик шатланып Риза тип исем ҡуша. Өйҙә һәм Арҡауылда башланғыс белем алғас, Риза Әбүбәкиров 1914 йылда Ҡыйғы ике синыфлы башланғыс халыҡ училищеһына уҡырға инә. Был уҡыу йортон 1916 йылда бөтөрөп, 1918 йылдың ғинуарына тиклем Дыуан-Ҡошсо юғары башланғыс халыҡ училищеһында белем ала. 1919 йылда Риза Әбүбәкиров кантонда тәүҙә техник хеҙмәткәр, шунан уполномоченный вазифаларын башҡара.

1920 йылда Риза Вахит улы йәштәр араһында эшкә әүҙем ҡушыла, уны өлкәндәр менән яңы тормош төҙөү, быға бар халыҡты йәлеп итеү ҡыҙыҡһындыра. Әммә яңы тормош төҙөү өсөн белем кәрәк. 1922 – 1925 йылдарҙа Риза Әбүбәкиров Өфөлә рабфакта

уҡый, урыҫ телен ныҡлап өйрәнә. Ул бик яҡшы уҡыуы, оҫта ойоштороусы булыуы менән тиҫтерҙәренән айырылып тора, шуға ла уны иптәштәре ихтирам итә, үҙҙәренең етәксеһе итеп күрә.

Тиҙҙән Риза Вахит улы Әбүбәкиров К.А.Тимирязев исемендәге ауыл хужалығы академияһына уҡырға тәҡдим ителә. Ҙур өмөттәр һәм йәшлек хыялдары менән ул 1925 йылдың көҙөндә баш ҡалала академияла уҡый башлай. Әммә ҡаты ауырыу уға уҡыуын бөтөрөп сығырға мөмкинлек бирмәй.

Өфөгә ҡайтып, бер аҙ ваҡыт үткәс, Риза Вахит улы Әбүбәкиров Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссариатында эшкә урынлаша. Тиҙ арала уны инициативалы һәм үҙ аллы фекер йөрөтөүсе инспектор итеп таныпйҙар. Шуға күрә тикшереүҙәрҙе юғары кимәлдә үтәүсе һәм республикала мәғариф эштәрен яҡшы ойоштороусы хеҙмәткәрҙе 1927 йылда Рәсәй Мәғариф Халыҡ Комиссариатына милли мәктәптәр бүлеге инспекторы итеп алалар. Бында ул күренекле педагог Н.К.Крупская етәкселегендә ил өсөн файҙалы эштәр башҡара, үҙен һәләтле ойоштороусы итеп күрһәтә.

1930 йылдың февралендә, Башҡортостан хөкүмәтенең юллауы буйынса, Р.В.Әбүбәкиров Өфөгә ҡайта һәм «Башҡортостан» гәзите мөхәррире итеп тәғәйенләнә, шул йылдың мартында Башҡортостан мәғариф халыҡ комиссары итеп ҡуйыла.

Риза Вахит улы Әбүбәкиров яңы вазифаһын аппараттың планлы һәм перспективалы эшен ойоштороуҙан, уны белемле, һәләтле кадрҙар менән тәьмин итеүҙән, уларҙың үҙ аллы, булдыҡлы эшмәкәрлеген юлға һалыуҙан башлап ебәрә. Был уңышлы килеп сыға: тап шул осорҙа һәм артабан Мәғариф Халыҡ Комиссариатында эшләгән халыҡ комиссары урынбаҫары С.Я.Ямалиев, инспекторҙар һәм бүлек начальниктары Ә.Ә.Еникеев, Б.С.Давыдкин, Ғ.Ғ.Ишбулатов, Ғилми-методик академия үҙәге мөдире Ш.Х.Сүнчәләй, П.В.Глухов һәм башҡа һәләтле педагогтар республикала мәғарифты, уҡытыусылар менән методик эште оҫта ойоштороусылар булып өлгөрә.

20 – 30-сы йылдарҙа республикала мәҙәни-ағартыу, нәшриәт эштәре, яҙыусылар ойошмаһы менән етәкселек итеү ҙә Мәғариф Халыҡ Комиссариаты ҡарамағында була. Комиссар Риза Вахит улы Әбүбәкиров был тармаҡтарҙың һәр береһенә һәләтле белгестәрҙе һайлап билдәләүгә бик етди ҡарай. Республикала мәғариф эшенә туранан-тура етәкселек итеү, был системаны камиллаштырыу, урындарҙа мәктәптәр асыу, уларҙың селтәрен яйға һалыу, уҡытыусылар менән тәьмин итеү, дәреслектәр һәм башҡа укыу әсбаптары баҫып сығарыу кеүек яуаплы ла, ҡатмарлы ла мәсьәләләр менән көн һайын шөғөлләнеүенән тыш, Риза Вахит улы республикала мәҙәни-ағартыу эшенә лә ҙур иғтибар бирә, К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педа-

гогия институты, уҡытыусылар институттары, педагогика ғилми-тикшеренеү институты, педагогия училищелары эштәренә йүнәлеш бирә, уларҙы контролдә тота, кадрҙар менән ныҡытыу, республикала уҡыу йорттары өсөн юғары белемле белгестәр әҙерләү тураһында хәстәрлек күрә, кәрәкле сараларҙы тормошҡа ашыра.

30-сы йылдар башында, хөкүмәт ҡарарҙарына ярашлы, республикала барлыҡ балаларҙы ла дөйөм башланғыс белем алыуға йәлеп итеү проблемаһы уңышлы хәл ителә. Шул турала мәғариф халыҡ комиссары Р.В.Әбүбәкиров партия өлкә комитетына рапорт тапшыра. Был йылдарҙа ул киң эрудициялы мәғариф эшмәкәре булыуы менән айырылып тора, хөкүмәттең абруйлы етәкселәренең береһе була.

1935 йылда Р.В.Әбүбәкиров партия өлкә комитетында мәктәптәр һәм фән бүлеге мөдире булып эшләй, 1936 йылда пропаганда, агитация һәм матбуғат бүлеге мөдире итеп ҡуйыла. Ялҡынлы көрәшсе, дәүләт эшмәкәре Р.В.Әбүбәкиров нахаҡҡа ғәйепләнеп, репрессияға эләгә. Әммә уның исеме халыҡ күңелендә йәшәй.

## СӘЛӘХ ЯМАЛЕТДИН улы ЯМАЛИЕВ

*(1889 – 1938)*



Сәләх Ямалетдин улы Ямалиев – Башҡортостанда яңы мәктәптәр асыуға, мәғарифты үҫтереүгә һәм камиллаштырыуға ҙур көс һалған һәм байтаҡ уңыштар яулаған хеҙмәткәр, башҡорт грамотаһына өйрәтеү тураһында күп кенә ғилми хеҙмәттәр авторы, республика мәғариф халыҡ комиссары урынбаҫары.

Сәләх Ямалетдин улы Ямалиев 1889 йылдың 6 апрелендә Башҡортостандың Бәләбәй районы Исмәғил ауылында дин әһеле ғаиләһендә донъяға килә. Атаһында һәм ауыл мәҙрәсәһендә уҡырға-яҙырға өйрәнгәс, 1903 йылда Сәләхте Бәләбәй мосолман мәҙрәсәһенә уҡырға бирәләр. Унда 1911 йылға хәтлем уҡый, бер үк ваҡытта түбән, урта синыфтарҙа мөғәллим булып эшләй.

1915 – 1917 йылдарҙа С.Я.Ямалиев батша армияһында хеҙмәт итә, беренсе донъя һуғышында ҡатнаша. Уҡытыусы булыу сәбәпле, ул хәрби хеҙмәттән ҡайтарып ебәрелә, 1917/18 уҡыу йылында Бәләбәйҙә балалар уҡыта, 1918 – 1922 йылдарҙа Бәләбәй уҡытыусылар семинарияһында һәм уның эргәһендәге педагогик курстарҙа эшләй. 1922 йылда һәләтле педагог Бәләбәй педагогия техникумының идара бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. Тәүге осорҙа техникумда уҡытыу-тәрбиә эшенә етәкселек итеү, һәләтле уҡытыусыларҙы ылыҡтырыу, уларҙың белемен күтәреү курстары ойоштороу, семинарҙар үткәреү туранан-тура С.Я.Ямалиевтың эшмәкәрлеге менән бәйле. 1923 йылда ул педагогия техникумы директоры итеп тәғәйенләнә һәм бында 1930 йылға тиклем эшләй.

1928/29 уҡыу йылында С.Я.Ямалиев квалификация күтәреү маҡсатында Ҡазанда командировкала була, туған тел, әҙәбиәт һәм методика буйынса махсус белем ала.

1930 йылда Сәләх Ямалетдин улы Ямалиев Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссариатына эшкә саҡырыла. Ул кадрҙар бүлеге, башланғыс һәм урта мәктәптәр идаралығы башлығы, мәғариф халыҡ комиссары урынбаҫары кеүек яуаплы вазифалар башҡара. Уның етәкселегендә башҡорт, татар, урыҫ мәктәптәренең төрлө типтары өсөн уҡытыу пландары, дәреслектәр төҙөлә.

Мәғариф халыҡ комиссары урынбаҫары педагогик кадрҙар әҙерләү, мәктәп уҡытыусыларының методик оҫталығын күтәреү буйынса эшлекле саралар күрә. Башҡорт дәүләт педагогия институты, педагогия техникумдары менән бәйләнеш тотоу ошо мөһим бурыстарҙы үтәүгә йүнәлтелә.

С.Я.Ямалиев алдынғы мәктәптәр һәм уҡытыусыларҙың тәжрибәһен өйрәнеүгә, уны таратыуға ҙур иғтибар бирә. Уның был темаларға бағышланған һәм матбуғат биттәрендә баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәре алдынғы педагогик тәжрибәне дөйөмләштерергә ярҙам итә, мәғариф эштәрен яңы баҫҡысҡа күтәрергә мөмкинлек бирә.

Сәләх Ямалетдин улы Ямалиев башланғыс һәм урта мәктәптәрҙә, педагогия техникумында уҡытыу, Мәғариф Халыҡ Комиссариатында төрлө вазифаларҙа оҙаҡ йылдар эшләү осоронда туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыу мәсьәләләре буйынса күҙәтеүҙәр алып бара, уҡытыу методтары һәм алымдары тураһында системалы дөйөмләштереүҙәр яһай. Был тәжрибә уға республика мәғарифына уңышлы етәкселек итергә, мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә эшен яҡшыртырға һәм уҡытыусыларға педагогик ярҙам күрһәтеүҙе көсәйтергә булышлыҡ итә.

Мәғариф халыҡ комиссары урынбаҫары С.Я.Ямалиев республиканың мәҙәниәт тормошо мәсьәләләре менән дә тәрән ҡыҙыҡһына, айырыуса Яҙыусылар союзы эшендә әүҙем ҡатнаша, әҙәби әҫәрҙәргә рецензиялар яҙа.

# ҺУҒЫШ ҺӘМ ҺУҒЫШТАН ҺУҢҒЫ ОСОР

*(1940 – 1950-се йылдар)*

20 – 30-сы йылдарҙа мәктәптә, урта махсус һәм юғары уҡыу йорттарында хөрмәтле педагогтарҙан белем алған кешеләр илебеҙ алдына көтмәгәндә килеп сыҡҡан һынауҙарҙы лайыҡлы үтәргә әҙер ине. 1941 йылда башланып киткән Бөйөк Ватан һуғышы – шундай һынауҙарҙың иң ҙуры һәм дәһшәтлеһе. Һуғыштан һуң емереклектәрҙе төҙәтеү, халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу, мәғариф эшен яйға һалыу бурыстары уҡытыусыларҙан, мәғариф эшен ойоштороусыларҙан һәм етәкселәрҙән көсөргәнешле хеҙмәт, бөтөн халыҡты бөйөк эштәргә ылыҡтырыуҙы талап итте.

Был осорҙоң иң ҙур һөҙөмтәләре – Бөйөк Ватан һуғышында фашистар Германияһын тар-мар итеү, һуғышты еңеү менән тамамлау һәм халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу. Был мөһим эштәрҙе үтәүҙә бөтөн халыҡ менән бергә мәғариф хеҙмәткәрҙәре алғы һыҙыҡта, фронтта һәм тылда, иң ауыр, яуаплы урындарҙа әүҙем ҡатнашҡан һуғышсылар, хеҙмәт алдынғылары булды. Шундай ауыр шарттарҙа ла уҡытыусылар, ҡала, район һәм республика мәғариф органдары етәкселәре быға тиклем яулап алынған ҡаҙаныштарҙы һаҡлап ҡалды, уларҙы артабан арттырыуға өлгәште.

Китаптың был өлөшөнә индерелгән педагогтарҙың күбеһе, әлбиттә, быға ҡәҙәр ҙә, һуңғараҡ та мәғариф өлкәһендә дәррәү эшләй, ҙур уңыштар яулай. Әммә 40 – 50-се йылдарҙағы педагогик хеҙмәттә уларҙың ҡаҙаныштары айырыуса әһәмиәтле.

Тап ошо дәүерҙә алдынғы педагогтарҙы дәртләндереү өсөн Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы (1940 йылдың 11 феврале), уның артынса Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы

(1940 йылдың 26 феврале) тигән маҡтаулы исемдәр булдырыла. Уға республиканың байтаҡ арҙаҡлы уҡытыусылары, мәғариф хеҙмәткәрҙәре лайыҡ була, күптәр һуғышта күрһәткән батырлыҡтары, педагогик хеҙмәттә яулаған уңыштары өсөн орден, миҙалдар алыуға өлгәшә.

Мәғариф хеҙмәткәрҙәре йәштәргә дөйөм ете йыллыҡ, артабан һигеҙ йыллыҡ белем биреү бурысын лайыҡлы үтәп, тағы ла ҙурыраҡ бурыстарҙы тормошҡа ашырырға әҙерләнә.

## ТӘВҠӘЛҮН ХАММАТ улы ВӘЛИЕВ

*(1896 – 1960)*



Салауат, Ҡыйғы райондарының күренекле мәғариф хеҙмәткәрҙәре, талантлы уҡытыусылары, мәктәп етәкселәре араһында Тәвҡәлүн Хаммат улы Вәлиев педагогик коллективтарҙы оҫта ойоштороусы, заманында тәүгеләрҙән булып ике тапҡыр Ленин ордены, башҡа юғары исем һәм бүләктәр алыуы менән күркәм урындарҙың береһен биләй. Ул – күптәрҙең күңелендә сағыу эҙ ҡалдырған һоҡланғыс шәхес, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Тәвҡәлүн Хаммат улы Вәлиев Башҡортостандың Ҡыйғы районы Дүшәмбикә ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә 1896 йылдың 19 ноябрендә донъяға килә. Үрге Ҡыйғы ике синыфлы училищеһын тамамлап, ул уҡытыу эшенә тотона. Ике йыл эшләгәс, йәш учитель (халыҡ, яратып, уға һәр ваҡыт шулай өндәшә) тыуған ауылына ҡайтып, Дүшәмбикә һәм Түбәнге Ҡыйғы мәктәптәрендә уҡыта.

Октябрь революцияһынан һуң Тәвҡәлүн Вәлиев халыҡ араһында күп эшләй, кешеләргә яңы властың маҡсатын, мәҙәни-ағартыу бурыстарын аңлата, уҡытыу-тәрбиә эшенә барлыҡ көсөн, дәртен бирергә хыяллана.

Тәвҡәлүн Вәлиев был васыятына тоғро ҡала. 1929 йылға тиклем ул үҙ ауылы мәктәбендә уҡытыусы һәм директор булып

эшләй. Тәжрибәле педагог яңы эшкә күсерелә һәм ике йыл Әй буйындағы Аҫылғужа мәктәбе коллективына етәкселек итә. 1931 йылда Бөрө ҡалаһындағы балалар йорто директоры итеп тәғәйенләнә. Ундағы коллективтың эшен ойоштороу менән бер рәттән, Тәвҡәлүн Вәлиев Бөрө педагогия техникумында уҡый. Уны тамамлап сыҡҡас, ете йыллыҡ мәктәп директоры итеп билдәләнә, уҡытыусыларҙы удар хеҙмәткә рухландыра.

1934 йылда Т.Х.Вәлиев Салауат районына эшкә ебәреүҙәрен һорап, Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссариатына ғариза яҙа. Уның теләге бойомға аша. Һәләтле йәш педагог Нәсибаш ете йыллыҡ мәктәбе директоры итеп күсерелә. Уҡытыусыларҙың ижади эшен ойоштороу менән бергә директор ауылда идеология фронтының алдынғы көрәшсеһе булып таныла, колхозсылар араһында сәйәси-ағартыу эштәре алып бара.

Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетын ситтән тороп тамамлағас, Тәвҡәлүн Хаммат улы Вәлиев, уҡытыусылар коллективының эшен ижади ойоштороусы, тәжрибәле етәксе буларак, 1937 йылда Лаҡлы урта мәктәбе директоры итеп ҡуйыла. Бында ла ул ҡыҫҡа ваҡыт эсендә оҫта етәксе, йәмәғәт хеҙмәткәре булып таныла. Был йылдарҙа Салауат районы мәктәптәре араһында Лаҡлы урта мәктәбе алдынғы коллектив буларак билдәлелек ала. Директорҙың тынғыһыҙ хеҙмәте арҡаһында ул һәр саҡ маҡтаулы урынға лайыҡ була, оло ихтирам тойғоһо менән телгә алына. Уҡытыусыларҙың бер нисә тематик йыйылышы Лаҡлы урта мәктәбендә үткәрелә. Район мәктәптәренән барған педагогтар һәм мәктәп етәкселәре унда алдынғы эш алымдарын һәм ысулдарын өйрәнә.

1939 йылда Башҡортостандың бер төркөм халыҡ мәғарифы хеҙмәткәрҙәре ордендар һәм миҙалдар менән бүләкләнә. Тәвҡәлүн Хаммат улы Вәлиев Салауат районынан беренсе булып илебеҙҙең ул ваҡыттағы иң юғары наградаһы – Ленин орденына лайыҡ була.

Педагогик хеҙмәткә йәне-тәне менән бирелгән талантлы педагог Т.Х.Вәлиев үҙенә тапшырылған вазифаны намыҫлы башҡара, йәш быуынды белемле, әҙәпле итеп тәрбиәләү өсөн барлыҡ көсөн бирә. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ауылдан бик күптәр – уҡытыусылар, колхозсылар, етәксе хеҙмәткәрҙәр фронтҡа киткәс, мәктәп директоры тылда ҡалған кешеләргә бөтә ауырлыҡ төшөүен күрә, халыҡ ҡайғыһын һиҙгер йөрәге аша үткәреп, көнө-төнө мәктәп, колхоз эштәре менән була.

1944 йылда алдынғы педагог Т.Х.Вәлиев Ҡаратаулы урта мәктәбе директоры итеп ебәрелә. Ҡыйынлыҡтарға ҡарамаҫтан, бында уҡытыусылар коллективы ике йыл эсендә ҙур эштәр башҡара, районда алдынғылар сафына баҫа. Бында уның етәксеһе Тәвҡәлүн Вәлиев-

теӊ хеҙмәте баһалап бөтөргөһөҙ. Барлыҡ уҡытыусылар, ата-әсәләр, малсылар һәм башҡа кешеләр үҙ урындарында сәмләнеп эшләй, уларҙың һәр береһе, яңы директорҙан уңдыҡ, тиҙәр.

1949 йылда талантлы етәксе, ойоштороусы Т.Х.Вәлиевтең уңышлы педагогик хеҙмәте йәнә юғары баһалана. Ул Ленин ордены менән бүләкләнә. Тәвкәлүн Хаммат улы Вәлиев – Салауат районында ғына түгел, бөтә Башҡортостанда Ленин орденына ике тапҡыр лайыҡ булған өс мәғариф хеҙмәткәрененң береһе. Шул йылда уҡ уға Башҡортостан Республикаһынының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исем бирелә.

Күренекле педагог Т.Х.Вәлиев һәр урында уҡытыусыларҙы, балаларҙы ижади, файҙалы эштәргә илһамландыра. Ул мәктәп менән генә сикләнмәй, колхозсылар, урмансылар, ата-әсәләр араһында ла ҡайнарға ярата.

Халыҡ мәғарифы өлкәһендә 40 йылға яҡын эшләгәндән һуң, 1957 йылда Т.Х.Вәлиев хаҡлы ялға сыға. Ул артабан да уҡытыусылар коллективына балаларҙы уҡытыу-тәрбиәләүҙә ҡулынан килгән тиклем ярҙам итә, йәмәғәт эштәрендә елеккесә, йәштәргә хас дәрт менән ҡатнаша, үҙ хеҙмәтенең һөҙөмтәләрен күреп ҡыуана.

## ФАТИМА НУРЕТДИН ҡыҙы ҒӘНИЕВА

*(1909 – 1989)*



Уҙған быуаттың 30-сы йылдары аҙағында – 50-се йылдары башында Башҡортостан Республикаһында Фатима Нуретдин ҡыҙы Ғәниеваның исем-шәрифтәре киң билдәле була. Ул – орден һәм миҙалдар кавалеры, СССР Юғары Советы депутаты.

Фатима Нуретдин ҡыҙы Ғәниева 1909 йылдың 25 мартында Башҡортостандың Белорет районы Мышы (Аҙналы) ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Атаһы 1919 йылда, әсәһе һәм туғандары 1921 аслыҡ йылында үлеп, үкһеҙ етем

ҡалған Фатима тәүҙә Сермән балалар йортонда, шунан Өфөлә В.И.Ленин исемендәге мәктәп-интернатта тәрбиәләнә. Был интернатлы мәктәптә Мөхлис Туҡаев, Хәнифә Мостафина кеүек һәйбәт тәрбиәселәр, Николай Краснов, Вафа Сөләймәнов, Александр Тюлькин, Сәғит Мифтахов һымаҡ арҙаҡлы уҡытыусылар Фатима Ғәниеваның аң-белем даирәһен киңәйтеүгә, шәхес итеп тәрбиәләүгә ҙур йоғонто яһай.

Фатима Ғәниева иң маҡтаулы һәм гүзәл профессия – уҡытыусы эшен һайлай. К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетында яҡшы уҡый. Уны тамамлағас, 1935 – 1937 йылдарҙа ул Белорет ҡалаһында совет-партия мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡыта, шунан Баймаҡ районы Беренсе Этҡол, Икенсе Этҡол мәктәптәрендә эшләй, 1949 йылда Стәрлетамаҡҡа күсеп, В.И.Ленин исемендәге мәктәптә балалар уҡыта, 1951 – 1969 йылдарҙа Баймаҡ районы «Йылайыр» совхозы мәктәбендә уҡытыусы, мәктәп директоры вазифаларын башҡара.

Фатима Нуретдин ҡыҙы һәр ерҙә һәм һәр ваҡыт намыҫлы хеҙмәт өлгөләре күрһәтә. Уның эшкә ижади ҡарашы барлыҡ уҡытыусыларҙы ла тырыш хеҙмәткә илһамландыра.

Баймаҡ районының Беренсе Этҡол урта мәктәбендә уҡытыу-тәрбиә эшендә өлгәшкән уңыштары өсөн 1939 йылда Фатима Нуретдин ҡыҙы Ғәниева «Почет Билдәһе» ордены менән бүләкләнә. 8 августа был орденды уға СССР Юғары Советы Президиумы рәйесе М.И. Калинин тапшыра.

Ауыр һуғыш йылдарында Ф.Н.Ғәниева, барлыҡ уҡытыусылар кеүек, йәштәрҙе илгә бирелгәнлек рухында тәрбиәләй, мәктәптә балалар уҡытыу менән бергә колхозда бригадир ҙа була.

Фатима Нуретдин ҡыҙы Ғәниеваның педагогик хеҙмәте юғары баһалана. Уға 1944 йылда Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исем бирелә, төрлө йылдарҙа миҙалдар һәм Маҡтау грамоталары ала. 1946 йылда Ф.Н.Ғәниева икенсе саҡырылыш СССР Юғары Советы депутаты итеп һайлана. Был хәлде талантлы уҡытыусы онотолмаҫ ваҡиға, ҙур бәхет күреп, ғүмер буйы хәтерендә һаҡлай, депутат буларак, халыҡҡа тоғро хеҙмәт итә.

Шундай маҡтаулы исем һәм юғары баһалар Ф.Н.Ғәниеваны ҙур эштәргә рухландыра. Ул ваҡытын һәм көсөн йәлләмәй, балалар менән арымай-талмай эшләй, башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу буйынса бай тәжрибә туплай. Барыһы ла тырыш хеҙмәт һөҙөмтәһендә килә. Уның педагогик тәжрибәһе район мәктәптәрендә таратыла, бөтәһенең дә уртаҡ хазинаһына әйләнә – уҡытыусылар белемен

камиллаштырыу институты тарафынан дөйөмләштерелеп, уҡытыу-тәрбиә эшендә файҙаланыу өсөн республика мәктәптәренә өйрәнеүгә тәҡдим ителә.

Уҡытыусы һөнәрен яңылышмай һайлауы, был эштә өлгәшкән уңыштары өсөн халыҡ ихтирамын яулауы менән Фатима Нуретдин ҡыҙы үҙен бәхетле һанай. Өфө ҡалаһының М. Ғафури урамындағы фатирында хөрмәтле уҡытыусыбыҙ менән миңә оҙаҡ һөйләшеп ултырырға насип булды. Ул үҙенең тормош юлы, педагогик хеҙмәте тураһында ихлас һөйләне.

Заманында талантлы педагог, дәүләт эшмәкәре Ф.Н.Ғәниева тураһында гәзит-журналдарҙа күп яҙыла, плакат, буклеттар сығарыла.

## МӘХМҮТ ӘХМӘТЙӘН улы ЕНИКЕЕВ

*(1887 – 1959)*



Тырыш хеҙмәт емештәре өсөн тәүге тапҡыр ордендар менән бүләкләнгән Башҡортостан уҡытыусылары араһында Мәхмүт Әхмәтйән улы Еникеев та бар. Ул – Салауат районы мәктәптәрендә уҡытыу-тәрбиә эшен яңы талаптар нигеҙендә үҙгәртеп ҡороуға һәм камиллаштырыуға үҙ өлөшөн индергән талантлы педагог, оло ихтирам яулаған уҡытыусы.

Мәхмүт Әхмәтйән улы Еникеев 1887 йылдың 13 ғинуарында Пенза өлкәһе Пендәл ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Тәүҙә ул үҙ ауылындағы башланғыс мәктәптә белем ала, шунан күрше ауыл мәктәбендә уҡыуын дауам итә. Үҫмер йәй көндәрендә байҙарға ялланып мал көтә, ауыл хужалығы эштәрен башҡара, ҡышын мәктәптә уҡый. Егет булып етеүгә, төрлө ауыл мәктәптәрендә балаларҙы уҡытыу, өлкәндәрҙе уҡырға-яҙырға өйрәтеү менән шөғөлләнә, шул ваҡытта уның күңелендә яҡшы мөғәллим булыу теләге уяна.

1907 йылда педагогик белемгә эйә булыу һәм уҡытыу оҫталығын арттырыу маҡсатында Мәхмүт Еникеев Ҡазан уҡытыусылар семинарияһына уҡырға инә. Был уҡыу йортонда ул бик яҡшы уҡып, уны Маҡтау грамотаһына тамамлай. Йәш белгескә урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы танытмаһы бирелә.

Ҡазан уҡытыусылар семинарияһында уҡыған йылдарҙа Мәхмүт Еникеев матди яҡтан бик ауыр йәшәй. Һис бер мөмкинлек булмағас, ул бөйөк татар шағиры Ғабдулла Туҡайға ярҙам һорап бара. Шағир буласаҡ мөғәллимде йылы ҡаршылай, уның хәл-әхүәлен һорашҡас: «Тырыш, уҡы, туған», – тип аҡса биреп оҙата. Йәй эшләп аҡса тапҡас, Мәхмүт Еникеев бурысын түләр өсөн шағирға бара. «Миңә алған аҡсаһын алып килеүсе беренсе кеше һин булдың», – ти Ғабдулла Туҡай, киләсәктә лә килеп йөрөргә саҡыра. Бөйөк әҙип менән осрашыуы, уның менән яҡшы мөнәсәбәттә булыуы тураһында Мәхмүт Еникеев уҡытыусыларға һәм балаларға йыш һөйләй.

1911 йылда Мәхмүт Еникеев хәҙерге Салауат районы Тирмән ауылы мәктәбенә килә. Йүрүҙән һәм Әй буйҙарында урынлашҡан ауылдарҙа була, халыҡтың көнкүреше менән таныша. Уға бигерәк тә Йүрүҙән буйындағы Арҡауыл ауылы оҡшай, һәм шунда йорт һалып инә.

Октябрь революцияһынан һуң М.Ә.Еникеев бөтөнләйгә уҡытыу-тәрбиә эшенә бирелә. Шунда уның педагогик һәләте тулыһынса асыла, уҡыусыларҙың, уҡытыусыларҙың һәм ата-әсәләрҙең һөйөүен яулай. 30-сы йылдарҙа ул Таймый, Дыуан-Мәсетле мәктәптәрендә уҡытыусы, директор урынбаҫары булып эшләй, Арҡауыл мәктәбендә урыҫ теле һәм әҙәбиәте, тарих уҡытыу менән бергә директор вазифаһын башҡара. Уның педагогик хеҙмәте юғары баһалана. Салауат районының бер төркөм мәғариф хеҙмәткәрҙәре менән ул 1939 йылда Мәскәүгә бара һәм «Почет Билдәһе» ордены менән бүләкләнә.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында талантлы педагог М.Ә.Еникеев йәш быуынды уҡытыу һәм тәрбиәләүгә бөтөн көсөн бирә, йәмәғәт эштәрен уҡытыусыға хас бөхтәлек, теүәллек менән башҡара. Илебеҙҙең граждандар һуғышы, яңы тормош төҙөү, халыҡ араһында наҙанлыҡты бөтөрөү, фашист илбаҫарҙарына ҡаршы һуғыш, артабан һуғыш килтергән емереклектәрҙе төҙәтеү, хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу кеүек ауыр һынауҙар кисергән боролош мәлдәрендә педагог М.Ә.Еникеев ауылда иң әүҙем көрәшсе булып танылa, халыҡтың оло абруйын ҡаҙана. Төрлө йылдарҙа намыҫлы хеҙмәте өсөн ул миҙалдарға һәм Маҡтау грамоталарына ла лайыҡ була.

## ИБРАҺИМ ҒАТА улы ИСХАҠОВ

*(1892 – 1985)*



Элегерәк, уҙған быуаттың 40-сы йылдарында, Ейәнсура районында «Арҙаҡлы уҡытыусыларҙан кемдәрҙе әйтә алаһығыҙ?» тигән һорауға иң тәүҙә Ибраһим Ғата улы Исхаҡовтың исем-шәрифтәрен телгә ала торғайнылар. Ул – Байыш урта мәктәбенең башланғыс синыфтары уҡытыусыһы, талантлы педагог, барлыҡ булмышы – йәшәйеше, мәктәптә һәм йәмәғәт урындарында үҙен тотоуы, кешеләр менән аралашыуы, мөғәмәләһе буйынса ысын халыҡ мөғәллиме. Шуға күрә ауылда һәм районда олоһо ла, кесеһе лә уҡытыусы Ибраһим Исхаҡовты ихтирам итә, уны ғүмере буйы «мөғәллим Ибраһим» тип йөрөтә.

Ибраһим Ғата улы Исхаҡов 1892 йылдың 9 июнендә хәҙерге Татарстан Республикаһының Биләр районы Күлбәй-Мораса ауылында ишле крәҫтиән ғаиләһендә һигеҙенсе бала булып донъяға килә. Кесе йәштән мәҙрәсәгә һабаҡҡа йөрөй, 14 йәшендә атаһы: «Улым, һине башҡаса уҡыта алмайым», – тигәс, үҫмер Ырымбур губернаһының Орск ҡалаһына сығып китә. Йәй көндәрендә мөғәллим ҡаҙаҡ балаларын уҡыта, ҡышын үҙе белем ала. Бынан тыш, Ибраһим Исхаҡов бай балаларына аш-һыу әҙерләй, шуның менән тамаҡ ялғап, аслы-туҡлы йәшәй. 1909 йылда И. Исхаҡов Орск уҡытыусылар мәктәбен тамамлап сыға ла 1914 йылға хәтлем китапханала эшләй. Шунан һуң 1920 йылға ҡәҙәр мөғәллим Орск мосолман мәктәбендә һәм хәҙерге Хәйбулла районы үҙәге Аҡъярҙа ауыл земство мәктәбендә балалар уҡыта, халыҡҡа яңы тормош төҙөү бурыстарын аңлата, ата-әсәләр менән күп төрлө эштәр алып бара.

1920 йылдың август айында Ибраһим Ғата улы хәҙерге Ейәнсура районы Әбүләис мәктәбенә башланғыс синыфтар уҡытыусыһы итеп алына. Бер ни ҡәҙәр тәжрибә туплаған педагог яңы урында

тырышып эшләй, ата-әсәләр менән тәрбиә һәм аңлатыу сараларын дауам итә.

1924 йылдың авгусынан 1956 йылдың декабренә ҡәҙәр Ибраһим Ғата улы Исхаҡов Байыш урта мәктәбендә башланғыс синыфтарҙа уҡыта. Ул 1942 йылдың июненән 1943 йылдың февраленә тиклем хеҙмәт армияһында була, Ҡолтүбә станцияһында фронт кәрәк-яраҡтары өсөн ағас яра, таҡта быса, уны фронтҡа оҙатыуҙа әүҙем ҡатнаша.

Байышта йәшәргә килгәс, Ибраһим Исхаҡов балаларҙы ваҡытында ашатып-эсереүҙе үҙенә маҡсат итеп ҡуя, сөнки туҡ балаларҙың ғына белем алыуға һәләтле булыуҙарын, һабаҡ алырға тырышлыҡтарын яҡшы аңлай. Мөғәллим һәм ата-әсәләр тәүге осорҙа мәктәп өсөн күп итеп һоло сәсәләр ҙә, уны һатып, ат алалар. Мәктәптең иген баҫыуы булдырыла, ҙур майҙанда ашлыҡ үҫтерелә һәм бер аҙҙан ике һыйыр һатып алына. (Башланғыс мәктәпте ете йыллыҡ итеп үҙгәртеп ҡорғанда уҡыу йортоноң ике һыйыры, ике башмағы, ике быҙауы, бер аты, 400 бот игене була.)

Мәктәп бер йылды колхозға хатта 180 бот бойҙайын орлоҡҡа бирә. Колхоз үҙ бурысын шул йылдың көҙөндә үк мәктәпкә ҡайтара. Ҡайнар аш, ҡайнар һөт биреүҙе ойоштороу уҡыу йәшендәге балаларҙы мәктәпкә йәлеп итеүҙең һәйбәт сараһына әйләнә. Уҡыусылар хатта кескәй туғандарын мәктәпкә алып килә башлайҙар.

Уҡыусы балалар тәүге мәлдәрҙә бәләкәй генә ағас мәктәптә шөғөлләнә. Ике йылдан һуң, мөғәллим Ибраһим Исхаҡовтың тырышлығы һөҙөмтәһендә, яңы мәктәп бинаһы һәм ашхана файҙаланыуға тапшырыла. Уҡыусыларҙың, ата-әсәләрҙең шатлығы эстәренә һыймай, балалар белем алыуға дәртләнеп тотона.

Байыш башланғыс мәктәбен уңышлы тамамлаған балалар Мәкәтә колхоз йәштәре мәктәбенә (хәҙер Ырымбур өлкәһенең Мөхәмәҙейәр ауылы) уҡырға ебәрелә. Байыштан барғандарҙың бөтәһе лә унда яҡшы уҡый.

30-сы йылдарҙа комплекслы уҡытыу осоронда мөғәллим Ибраһим Исхаҡов һәр ваҡыт ике план төҙөй, уның береһе буйынса уҡыусыларға белем бирә, икенсеһен килгән инспекторҙарға күрһәтергә әҙерләй.

1945 йылда Байышта балалар йорто асыла. Бығаа тиклем мәктәпкә йөрөмәгән балаларҙы бергә йыялар ҙа Ибраһим Исхаҡовҡа уларҙы уҡытырға тапшыралар. Улар уҡыу йылын уңышлы тамамлай. Эштә өлгәшкән уңыштары өсөн уҡытыусы 1947 йылдың 15 авгусында РСФСР халыҡ мәғарифы министрының бойороғо буйынса 1000 һум аҡса менән бүләкләнә.

Талантлы педагог, халҡыбыҙҙың бер нисә быуын йәштәренә белем һәм тәрбиә биргән абруйлы уҡытыусы Ибраһим Ғата улы Исхаҡов 1952 йылдың 22 авгусында илебеҙҙең ул ваҡытта иң ҙур наградаһы – Ленин ордены менән бүләкләнә, уға 1953 йылдың 20 ғинуарында Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы тигән маҡтаулы исем бирелә, төрлө йылдарҙа миҙал һәм Маҡтау грамоталарына лайыҡ була. «Минең иң ҙур бәхетем халҡыма хеҙмәт итеүем булды, шуға ла уның ихтирамын һәм рәхмәтен ишеттем», – ти торғайны педагог иҫән сағында. Ул үҙенең оҙон тормош юлы һәм хеҙмәте тураһында һөйләргә, бай тәжрибәһен йәш уҡытыусылар менән уртаҡлашырға ярата.

Уҡытыусы Ибраһим Ғата улы Исхаҡов 1959 йылдың декабрь аҙаҡтарында хаҡлы ялға сыға, 1985 йылдың 10 октябрендә 93-сө йәшендә донъя ҡуя. Уның кәүҙәһе Байыш ауылы зыяратында ерләнгән.

Шунан һуң инде күпме йылдар үтеп китте. Байышта уны барыһы ла хәтерләй, хөрмәтләп иҫкә ала. Мөғәллимдең исеме онотолмай.

## ҒИМАТ СӨЛӘЙМӘН улы ИХСАНОВ

*(1899 – 1956)*



Бөрйән районының тәжрибәле һәм талантлы уҡытыусылары, мәғариф эшен оҫта, юғары кимәлдә ойоштороусылары сафында Ғимат Сөләймән улы Ихсанов башҡарған оло хеҙмәте менән үҙенә лайыҡлы, мәртәбәле урында айырылып тора. Ул – һәләтле педагог, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Ғимат Сөләймән улы Ихсанов 1899 йылдың 1 июлендә Башҡортостандың Күгәрсен районы Ибрай ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Ул үҙ ауылы мәктәбен 1914 йылда

тамамлап сыға. Биш йыллыҡ белем алған үҫмер 1914 – 1917 йылдарҙа кесе уҡытыусы булып эшләй, шунан мәктәп директоры итеп билдәләнә.

Октябрь революцияһынан һуң Ғимат Ихсанов яңы тормош төҙөүҙә әүҙем ҡатнаша, йәштәр менән эшләй. Юғары белем алырға өмөтләнгән егет 1920 йылдың көҙөндә институтҡа уҡырға ебәрелә, 1920/21 уҡыу йылында Ырымбур халыҡ мәғарифы институтында, 1921/22 уҡыу йылында Ташкент халыҡ мәғарифы институтында белем ала, бер аҙ Һырдарья өлкәһендә балалар уҡытҡас, Башҡортостанға ҡайта.

Йәш белгес Ғ.С.Ихсанов 1924 йылдың декабрендә хәҙерге Бөрйән районы Иҫке Монасип башланғыс мәктәбен асып, балаларҙы уҡыуға йәлеп итә. Ул терәк мәктәп булып таныла. 1924 йылда Иҫке Собханғолда ла мәктәп асыла, 1925 йылда Байназар, Байғаҙы, Ғәҙелгәрәй, Әтек мәктәптәре эш башлай. Уларҙың эшен ойоштороп ебәреүҙә Ғимат Сөләймән улының хеҙмәте ҙур. Ул айырыуса Иҫке Собханғол, Байназар ауылдарында яңы мәктәптәр асыуҙа яҡындан ҡатнаша, уҡытыусыларға программалар, дәреслектәр табып тарата, уҡытыу тәжрибәһе менән уртаҡлаша. 1928 йылдың сентябренән Ғимат Ихсанов Иҫке Собханғол башланғыс мәктәбендә эшләй, уны ла терәк мәктәп кимәленә күтәрә, уҡытыусыларҙы яңыса эшләргә өйрәтә.

1930 йылда Бөрйән кантоны төҙөлгәс, Ғимат Сөләймән улы Ихсанов кантон халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә, уҡытыусылар менән уҡытыу-тәрбиә эшен яйға һалыуҙа, наҙанлыҡты бөтөрөүҙә, балаларға башланғыс белем биреүҙе ойоштороуҙа ең һыҙғанып эшләй, мәҙәни-ағартыу сараларына йәлеп ителә.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Ғ.С.Ихсанов партияның Бөрйән район комитетында яуаплы вазифалар башҡара, тик 1948 йылда ғына яратҡан эшенә – балалар уҡытыуға ҡайта. Ул Иҫке Собханғол мәктәбендә тарих уҡыта, аҙаҡ директор итеп ҡуйыла. 1938 йылда уҡ төҙөлә башлаған ике ҡатлы мәктәп бинаһы һуғыштан һуң ғына һалынып бөтә, интернат та күп ауырлыҡтар менән сафҡа индерелә. Иҫке Собханғол мәктәбендә шунан һуң ғына уҡытыу-тәрбиә эше йәнләнә, коллективҡа йәш уҡытыусылар өҫтәлә.

Иҫке Собханғол урта мәктәбе директоры Ғимат Сөләймән улы Ихсанов һәр уҡытыусыны ижади хеҙмәткә рухландыра, уның нисек эшләүен, нисек йәшәүен яҡшы белә, барлыҡ уҡытыусыларға ла методик ярҙам ойоштора.

Уҡыусы йәштәргә ныҡлы белем биреү һәм тәрбиәләү эшендә 42 йыл хеҙмәт итеү осоронда Ғимат Сөләймән улы Ихсанов үҙен ысын уҡытыусы, талантлы педагог итеп күрһәтә, уҡытыу-

сыларҙы алда торған мөһим бурыстарҙы уңышлы үтәүгә илһамландыра.

Уҡытыу-тәрбиә эшендә өлгәшкән уңыштары өсөн Ғимат Сөләймән улы Ихсановҡа 1941 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән ҙур исем бирелә, төрлө йылдарҙа ул миҙалдар һәм Маҡтау грамоталары менән бүләкләнә.

## ҒӘЙНУЛЛА ҒӨБӘЙҘУЛЛА улы ИШБУЛАТОВ

*(1903 – 1975)*



Үткән быуаттың 40 – 60-сы йылдарында Башҡортостан Республикаһы Халыҡ мәғарифы министрлығы аппаратында эшләгән инспекторҙар араһында Ғәйнулла Ғөбәйҙулла улы Ишбулатов киң белемле, ярҙамсыл булыуы менән күптәрҙе үҙенә ылыҡтырҙы, күркәм сифаттары менән айырылып торҙо. Ул – дәреслектәр һәм синыфтан тыш уҡыу китаптары авторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Ғәйнулла Ғөбәйҙулла улы Ишбулатов 1903 йылдың 9 сентябрендә Башҡортостандың Благовар районы Өйҙөрәкбаш ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Башланғыс белемде ауыл мәктәбендә ала. 1919 йылда Өфө Колчак· ғәскәрҙәренән азат ителгәс, Ғ.Ғ.Ишбулатов 1-се уҡытыусылар семинарияһына уҡырға инә. Тиҙҙән семинария педагогия техникумы итеп үҙгәртелә. Уны тамамлағас, Ғ.Ғ.Ишбулатов бер төркөм йәштәр менән Донбасс шахтерҙары араһында эшләргә китә, Петр руднигында уҡытыусы була.

Башҡортостанға ҡайтҡас, Ғ.Ғ. Ишбулатов Тамъян-Ҡатай кантон халыҡ мәғарифы бүлеге ҡарамағына ебәрелә. Ул 1926/27 уҡыу йылында Ҡобағош, 1927 – 1929 йылдарҙа Ҡаҙаҡкол башланғыс мәктәптәрендә балалар уҡыта. Асҡар мәктәбе директоры һәм уҡытыусыһы булып бер йыл эшләгәс, 1930 йылда Мәғариф Халыҡ Комиссариатында инспектор, 1932 – 1936 йылдарҙа «Культура револю-

цияһы» журналы мөхәррире урынбаҫары вазифаларын башҡара. 1936 йылда 9-сы мәктәпкә уҡытыусы итеп ебәрелә. Ул ваҡытта яңы асылған был мәктәпкә иң оҫталарҙы ғына һайлап алғандар. Бында Ғ.Ғ.Ишбулатов үҙенең егәрлелеген күрһәтә. Шул йылда ул К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының физика-математика факультетына ситтән тороп уҡырға инә, уны 1940 йылда тамамлай һәм 9-сы мәктәптең талантлы педагогы булып өлгөрә.

1941 йылда Ғ.Ғ.Ишбулатов армияға алына һәм Владимир ҡалаһындағы уҡыу курсынан Бөйөк Ватан һуғышына китә. Яугир һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм миҙалдар менән бүләкләнә.

1946 йылда Ғәйнулла Ишбулатов Башҡортостан Халыҡ мәғарифы министрлығына ҡабаттан инспектор итеп эшкә алына. Тыныс хеҙмәттең ҡәҙерен аңлаған һәм шуға һыуһаған хеҙмәткәр эштә өлгәшкән уңыштары өсөн Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы тигән исемгә лайыҡ була, Маҡтау грамоталары ала.

1950 йылда Ғ.Ғ.Ишбулатов министрлыҡтың мәктәптәр идаралығы начальнигы итеп билдәләнә. 1952 йылда уға һуғыш ваҡытында туҡтаған «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналын сығарыу эшен ойоштороу йөкмәтелә. Был үтә яуаплы вазифаны арҙаҡлы мәғариф хеҙмәткәре оло яуаплылыҡ тойоп үтәй, 1955 йылға тиклем журналдың мөхәррире була.

Шунан һуң Ғәйнулла Ғөбәйҙулла улы Халыҡ мәғарифы министрлығының өлкән инспекторы итеп билдәләнә. Был уның өсөн йәнә яңы һәм ҡатмарлы эш була. Фиҙакәр һәм намыҫлы хеҙмәт эйәһе был вазифаны тырышып башҡара. Киң эрудициялылыҡ, бөхтәлек һәм тырышлыҡ уға эште уңышлы үтәргә мөмкинлек бирә.

50 – 60-сы йылдарҙа республикала мәғариф системаһының алға китеүе, уҡытыу программаларын үҙгәртеү Ғ.Ғ.Ишбулатовты дәреслектәр, методик ҡулланмалар яҙыуға ылыҡтыра. Ул II – IV синыфтар өсөн туған тел дәреслектәре, синыфтан тыш уҡыу китаптары, уларҙы файҙаланыу тураһында методик ҡулланмалар яҙа. Уның был хеҙмәттәре 1955 йылдан 1975 йылға тиклем мәктәптә тоторокло әсбаптар булараҡ файҙаланыла.

Халыҡ мәғарифын үҫтереүҙә өлгәшкән уңыштары өсөн Ғәйнулла Ғөбәйҙулла улы Ишбулатовҡа 1955 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исем бирелә. Ул байтаҡ Маҡтау грамоталарына һәм төрлө бүләктәргә лайыҡ була.

## КӘРИМӘ
## СӘЛИМГӘРӘЙ ҡыҙы
## МАМЛИЕВА

*(1887 – 1962)*



Башҡортостандың Бүздәк районы, Өфө ҡалаһы уҡытыусылары, мәғариф хеҙмәткәрҙәре Кәримә Сәлимгәрәй ҡыҙы Мамлиеваны талантлы педагог, уҡытыу-тәрбиә эшенә барлыҡ көсөн һәм һәләтен биргән яҡшы уҡытыусы күреп иҫкә алалар. Ул – Ленин ордены кавалеры, миҙал һәм Маҡтау грамоталарына лайыҡ булған.

Кәримә Сәлимгәрәй ҡыҙы Мамлиева 1887 йылдың 15 авгусында Бүздәк районы Иҫке Бүздәк ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. XIX быуаттың 60-сы йылдары уртаһында Иҫке Бүздәк ауылында өйәҙ мәктәбе асыла. Уҡыу йәшенә еткән Кәримәне ата-әсәһе ошо мәктәпкә бирә. Башланғыс белем алғас, Кәримә Мамлиеваны уҡытыусылары Өфөлә асылған ике йыллыҡ ҡатын-ҡыҙҙар училищеһына уҡырға ебәрәләр. Уны бөтөрөп сыҡҡас, ул Өфөлә өс йыллыҡ курста белемен күтәрә, педагогик хеҙмәт серҙәрен өйрәнә. Ярҙамсыһыҙ ҡыҙға бында уҡыу мөмкин булмаҫ ине. Әммә уҡыуға тырышлығын иҫәпкә алып, уға элек уҡып сыҡҡан ҡатын-ҡыҙҙар училищеһы приютында йәшәргә рөхсәт итәләр.

Өс йыллыҡ педагогия курсын уңышлы тамамлағандан һуң, Кәримә Мамлиева үҙе башлап һабаҡ алған Иҫке Бүздәк мәктәбенә мөғәллимә булып ҡайта. Бында ул алты йыл эшләй, бай тәжрибә туплай, шунан Өфө халыҡ мәғарифы институтында уҡып, урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып сыға.

Һәләтле уҡытыусы Кәримә Сәлимгәрәй ҡыҙы Мамлиева Өфө башҡорт педагогия техникумында, В.И. Ленин исемендәге, Ф.Э.Дзержинский исемендәге мәктәптәрҙә урыҫ теле һәм әҙәбиәтен уҡыта. Ул 43 йыл ғүмерен йәш быуынды уҡытыу һәм тәрбиәләүгә бирә, үҙен талантлы педагог итеп таныта. Бала сағынан урыҫ мәктәптәрендә уҡыу, был телде белгән кешеләр менән аралашыу уға тел һәм әҙәбиәт буйынса күренекле белгес, заманса уҡытыусы кимәленә күтәрелергә булышлыҡ итә. Бында үҙенең тырышлығы, әлбиттә,

мөһим урын алып тора. Уҡытыусы белемен күтәреү өҫтөндә даими эшләй, алдынғы эш методтарын һәм алымдарын, яҡшы тәжрибәләрҙе өйрәнә. Уның уҡыусылары урыҫ теле һәм әҙәбиәте буйынса юғары өлгәш бирә, тормошҡа ныҡлы белем алып сыға.

Башҡортостан мәктәптәре өсөн дәреслектәр етмәгән ауыр йылдарҙа Халыҡ мәғарифы министрлығы алдынғы уҡытыусыларҙан бригадалар ойоштороп, урыҫ теле һәм әҙәбиәте дәреслектәре төҙөтә. Бригадир Кәримә Мамлиева етәкселегендә яҙылған дәреслектәр дүрт тапҡыр баҫылып сыға, мәктәптә һәйбәт ҡулланма итеп файҙаланыла.

Иҫке Бүздәк мәктәбендә балалар уҡытҡан йылдарҙа Кәримә Мамлиева халыҡ араһында наҙанлыҡты бөтөрөүҙә туранан-тура ҡатнаша. Ул ауыл ҡатын-ҡыҙҙарын уҡыу түңәрәктәренә йәлеп итә, уларҙы илдә, сит илдәрҙә булып торған яңылыҡтар менән таныштыра, әүҙем кешеләр итеп тәрбиәләй, яңы тормош төҙөүҙә бар күңелдән ҡатнашыуҙарына ирешә.

Өфө белем биреү йорттарында К.С.Мамлиева, уҡытыу-тәрбиә эшенән тыш, предмет комиссияһы рәйесе була, уҡытыусылар өсөн өлгө дәрестәр үткәрә, Халыҡ мәғарифы министрлығының ҡушыуы буйынса, имтихандар өсөн билеттар төҙөй.

Уҡытыу-тәрбиә эшендә өлгәшкән уңыштары өсөн Кәримә Сәлимгәрәй ҡыҙы Мамлиева 1944 йылда – Ленин ордены, башҡа йылдарҙа миҙалдар һәм Маҡтау грамоталары менән бүләкләнә, РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы тигән исемгә лайыҡ була.

## ҒАБДУЛЛА СӘЙЕТ улы МИРСӘЙЕТОВ

*(1891 – 1969)*



Яңы мәктәп өсөн көрәшселәр, уҡытыу-тәрбиә эшен заман талаптары нигеҙендә ойоштороусылар һәм йәш быуынды белемле, мәҙәниәтле кешеләр итеп тәрбиәләүселәр сафында Ғабдулла Сәйет улы Мирсәйетовтың тырыш хеҙмәте өсөн маҡтап иҫкә алыуға хоҡуғы бар. Ул – Дәүләкән һәм Ауырғазы райондарында

мәғарифты үҫтереүгә ҙур өлөш индергән хеҙмәткәр, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Ғабдулла Сәйет улы Мирсәйетов 1891 йылдың 2 февралендә хәҙерге Дәүләкән районының Бик-Ҡарамалы ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Башланғыс белем алып, ныҡышмалы эшләү һәм аң-белем кимәлен күтәреү һөҙөмтәһендә, ул яҡшы мөғәллим булыу хыялын аҡрынлап тормошҡа ашыра – 1907 йылда балалар уҡыта башлай. Әммә урядник, староста һәм уларҙың ҡуштандары уға тыныс ҡына эшләргә ирек бирмәй.

Белемен артабан күтәреү маҡсатында Ғ.С.Мирсәйетов 1909 йылда Өфөлә «Ғәлиә» мәҙрәсәһендә уҡый башлай, уны 1912 йылда бөтөрөп сыға. Ауыл мәктәбендә шәкерттәр уҡытыуҙан тыш, мөғәллим табип та, агроном да була, был хеҙмәт нигеҙҙәрен унда «Ғәлиә» мәҙрәсәһе тәрбиәләгән. Аң-белемгә, аҡыллы кәңәшкә һыуһаған, яҡшы һүҙгә сарсаған кешеләр мөғәллимгә бара, уның тормошто еңеләйтеү тураһындағы һүҙҙәрен йотлоғоп тыңлай.

Октябрь революцияһынан һуң мөғәллим Ғ.С.Мирсәйетов үҙ эшен дауам итә – балалар уҡыта, кешеләрҙе мәҙәни-ағартыу сараларына йәлеп итә. Тәжрибәле, һәләтле педагог Ғабдулла Сәйет улы Мирсәйетов 1930 йылда Дәүләкән кантон халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. Ул арыу-талыуҙы белмәйенсә, ҡоласын киң йәйеп эшләй. Кантон мәғариф өлкәһендә ҙур уңыштарға өлгәшә, балаларҙы уҡыуға йәлеп итеү буйынса республикала беренсе урын яулай, наҙанлыҡты бөтөрөү саралары ғәмәлгә ашырыла.

1932 йылда Ғ.С.Мирсәйетов К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтына уҡырға инеп, уның тел һәм әҙәбиәт факультетын ситтән тороп тамамлай.

1934 йылда Ғ.С.Мирсәйетов Ауырғазы район үҙәге Талбазы урта мәктәбендә татар теле һәм әҙәбиәте уҡыта башлай, бер үк ваҡытта халыҡ араһында күп төрлө эштәр башҡара.

Коллектив менән эшләү һәләтен күреп, Ғабдулла Сәйет улы Мирсәйетовты 1936 йылда урта мәктәп директоры итеп тәғәйенләйҙәр. Бында уның ойоштороу һәләте, педагогик таланты артабан үҫә, тәжрибәһе арта. Уның етәкселегендә коллектив балалар уҡытыу-тәрбиәләүҙә яңы үрҙәр яулай, өлгәшкән уңыштары барлыҡ мәктәптәргә еткерелә. Уҡытыусыларҙың алдынғы тәжрибәләре педагогик коллективтарҙа таратыла. Был – мәктәп директорының һәр уҡытыусыға методик ярҙам күрһәтеү, уны ижади эшләргә өйрәтеү һәм рухландырыу һөҙөмтәһе.

Бөйөк Ватан һуғышының ауыр йылдарында Ғ.С.Мирсәйетов Ауырғазы район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире вазифаһын лайыҡлы башҡара. Оҫта етәксе ҡатмарлы шарттарҙа ла йәш быуынды

тормошҡа әҙерләү өсөн ҡулдан килгәндең барыһын да эшләргә саҡыра. Уҡытыусылар ҙа, ауыл эшсәндәре лә директорҙың күрһәтмәләрен теүәл үтәргә тырыша.

Ғабдулла Сәйет улы Мирсәйетов 36 йыл уҡытыусы һәм мәктәп директоры, алты йыл халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире булып эшләгәндә өлгәшкән уңыштары өсөн 1948 йылда Ленин ордены менән бүләкләнә, 1956 йылда уға Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы исеме бирелә.

## ШӘРИФЙӘН СӘЙЕТГӘРӘЙ улы МӘҠСҮТОВ

*(1897 – 1976)*



Шәрифйән Сәйетгәрәй улы Мәҡсүтов – Дүртөйлө районының абруйлы, халыҡ араһында дан һәм шөһрәт ҡаҙанған уҡытыусыларының береһе, орден һәм миҙалдар кавалеры.

Шәрифйән Сәйетгәрәй улы Мәҡсүтов 1897 йылдың 11 ғинуарында Башҡортостандың Дүртөйлө районы Күкҡуян ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Атаһының тырышлығы менән Шәрифйән иҫкесә лә, яңыса ла белем ала, Мортаза ауыл мәктәбендә уҡый. Шунан Ҡазанда «Мөхәммәҙиә» мәҙрәсәһендә белем ала. Октябрь революцияһынан һуң мәктәптә балаларҙы яңыса уҡытыуҙы яҡлап сығыш яһай.

1918 йылда Шәрифйән Мәҡсүтов Бөрөлә уҡытыусылар курсында белемен күтәрә һәм Күкҡуян беренсе баҫҡыс мәктәбенең тәүге уҡытыусыһы булып ҡайта. Ул үҙенең педагогик оҫталығын камиллаштырыу өҫтөндә күп эшләй, методик китаптар, гәзит-журналдар алдыра, йыл һайын Өфөлә һәм Бөрөлә уҡытыусылар белемен күтәреү курстарында була, 1936 йылда Бөрө педагогия техникумын ситтән тороп тамамлай.

Шәрифйән Мәҡсүтов уҡыусыларҙы тәбиғәтте һөйөргә, ҡәҙерләргә өйрәтә. 1932 йылда Күкҡуянда ете йыллыҡ мәктәп асылғас, ул

химия, биология предметтарын уҡыта. 1940 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтының биология факультетына ситтән тороп уҡырға инә.

Бөйөк Ватан һуғышы уҡытыусының барлыҡ пландарын селпәрәмә килтерә. Шәрифйән Мәҡсүтов Волхов фронтында фашист илбаҫар-ҙарына ҡаршы батырҙарса һуғыша. Һөжүм башланыр алдынан Ш.Мәҡсүтовҡа, Благовещен ҡалаһы егете М.Ғәлимовҡа һәм тағы бер нисә һалдатҡа дошман снайперҙары урынлашҡан ҡалҡыулыҡты табыу һәм юҡ итеү бурысы йөкмәтелә. Егеттәр юлға сыға, урман аҡландарын шыуышып үтә. Ағастар араһында егеттәрҙең береһе дошманды граната ырғытып юҡ итә. Разведчиктарҙың батырлығы көндәлек ғәҙәткә әйләнә. Шундай алыштарҙың береһендә Ш.С.Мәҡ-сүтов ҡаты яралана, аңын юғалта. Иптәштәре уны ялан госпита-ленә урынлаштыра. 1944 йылда II группа инвалиды, батыр яугир, күкрәгенә II дәрәжә Ватан һуғышы ордены, күп миҙалдар тағып, ауылына ҡайта.

Ш.С. Мәҡсүтов иркенләп ял итергә лә өлгөрмәй, район етәксе-ләре уны 1944 йылдың сентябрендә мәктәп директоры итеп тәғәйенләй. Балалар ас-яланғас, уҡытыусылар өлкән синыф уҡыусылары менән мәктәпте йылытыу өсөн утын әҙерләй, ас балаларҙы ашатыу ойош-торола.

Шәрифйән Сәйетгәрәй улы химия, биология уҡытыуҙы ташла-май, уҡыусылар менән мәктәп баҡсаһына нигеҙ һала. Кушнаренко ауыл хужалығы техникумы питомнигынан алмағас, ҡарағат, ҡурай еләге һәм башҡа үҫентеләр алып ҡайтып ултырта, картуф һәм йәшелсә үҫтерелә. Күкҡуян мәктәбе районда, республикала был йәһәттән беренселекте ала. Баҡса ҙур табыш килтерә. 1949 йылда мәктәп директоры Шәрифйән Сәйетгәрәй улы Мәҡсүтов Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә, һуңынан байтаҡ миҙалдар-ға лайыҡ була.

Талантлы уҡытыусы, мәктәп директоры Ш.С.Мәҡсүтов балалар-ға хеҙмәт тәрбиәһе биреү, тәбиғәтте яратыу, уны ҡәҙерләп һаҡлау мәсьәләләрен даими иғтибарҙа тота. Үҙ белемен, бар көсөн ул тыуған ауылы өсөн, халҡыбыҙҙың йәш быуынын тормошҡа әҙерләүгә, ысын граждандар тәрбиәләүгә йәлләмәне. Оло хөрмәт ҡаҙанған педагог йәштәргә өлгөлө, данлы тормош юлын үтте, тырыш хеҙ-мәте менән район һәм республика мәғарифы тарихында юйылмаҫ эҙ ҡалдырҙы. 1997 йылдың ғинуарында, тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы, Күкҡуянда элек ул йәшәгән урамға Шәрифйән Сәлимгәрәй улы Мәҡсүтовтың исеме бирелде.

# НИКОЛАЙ ЕВГРАФОВИЧ СКОБЕЛЕВ

*(1910 – 1964)*



Николай Евграфович Скобелев 1910 йылдың 9 майында Башҡортостандың Туймазы районы Үрге Троицк ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуған. Уның атаһы Октябрь революцияһына ҡәҙәр халыҡ йорто директоры, уҡытыусы булған, революциянан һуң почтала эшләгән. 1919 йылда Николай Языково мәктәбенә бара, уны тамамлағас, 1926 йылда Благовещен педагогия техникумына уҡырға китә. Хеҙмәт юлын 1930 йылда Нуриман районы Орел башланғыс мәктәбе уҡытыусыһы булып башлай. Һәләтле йәш педагог райондың етәксе даирәләре иғтибарын йәлеп итә һәм 1931 йылда Салдыбаш ете йыллыҡ мәктәбе директоры итеп тәғәйенләнә. Унда йәш директор тырышып эшләй һәм бай тәжрибә туплай. Уның уҡытыусылар коллективына етәкселек итеү алымдары район халыҡ мәғарифы бүлеге тарафынан бер нисә тапҡыр өйрәнелеп, башҡаларға таратыла.

Николай Евграфович мәктәптә уҡытыу-тәрбиә һәм йәмәғәт ойошмалары эшенә ҙур иғтибар бирә. Директор етәкселегендә профсоюз, пионер, комсомол комитеттары уҡытыу-тәрбиә эштәрен һәйбәт ойоштороусыларға әйләнә.

1938 йылда Н.Е.Скобелев Красный Ключ урта мәктәбе директоры урынбаҫары итеп күсерелә, бер йылдан мәктәп директоры итеп ҡуйыла. Был ваҡытта ул Н.К.Крупская исемендәге Ленинград коммунистик педагогия институтында ситтән тороп уҡый. Әммә уны тамамлай алмай, 1940 йылда армия хеҙмәтенә алына, тиҙҙән Бөйөк Ватан һуғышы башлана.

Николай Скобелев һуғыштың тәүге көндәренән аҙағына хәтлем фронтта була. Тәүҙә Иваново өлкәһенең Шуя ҡалаһында Ф.Энгельс исемендәге хәрби-сәйәси училищела уҡый. 1942 йылдың декабренән армияла уҡсылар ротаһы командиры, батальон командиры

урынбаҫары сифатында фашист илбаҫарҙарына ҡаршы аяуһыҙ һуғыша. Батырлыҡтары өсөн I дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары һәм миҙалдар менән бүләкләнә.

1946 йылда Н.Е.Скобелев Өфөгә ҡайта. Уны партия өлкә комитетының фән һәм уҡыу йорттары бүлеге инструкторы итеп ҡабул итәләр. Ул, нигеҙҙә, мәктәп эше менән шөғөлләнә. Өҙөлөп ҡалған уҡыуын дауам итеү маҡсатында, 1950 – 1951 йылдарҙа А.И.Герцен исемендәге Ленинград педагогия институтында ситтән тороп уҡый.

Республикала мәғарифты үҫтереүгә һәм камиллаштырыуға Н.Е.Скобелев халыҡ мәғарифы министры урынбаҫары булып эшләгән йылдарҙа айырыуса ҙур өлөш индерә. Был вазифаға ул 1951 йылдың декабрендә билдәләнә. Хеҙмәт һөйгән, тырыш, оҫта етәксе республика мәктәптәренең һәм балалар ойошмаларының матди базаһын нығытыуға ҙур иғтибар бирә. 50-се йылдарҙа колхоз-совхоз аҡсаһына мәктәп, интернат, балалар баҡсалары, уҡытыусылар өсөн фатир төҙөү киң ҡолас ала. Был министр урынбаҫары Н.Е.Скобелевҡа тапшырыла. Ул ең һыҙғанып эшләй, үҙенә төшкән бурысты намыҫлы үтәй.

Башҡортостан мәғарифы тарихында Николай Евграфович Скобелевтың исеме лайыҡлы урын алып тора.

## БИКТИМЕР СОЛТАН улы СОЛТАНОВ

*(1892 – 1966)*



Биктимер Солтан улы Солтанов 1892 йылдың 2 октябрендә Башҡортостандың Миәкә районы Миәкәбаш ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Кесе йәштән белемгә ынтылыу Биктимерҙе Троицк ҡалаһының данлыҡлы «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенә саҡыра. Үҫмер егет бында 1908 – 1915 йылдарҙа уҡый, бер үк ваҡытта донъяуи училищела өс йыл буйы ярайһы уҡ төплө белем ала. Уҡытыу теләге менән тыуған ауылына ҡайтҡан йәш

мөғәллимде беренсе донъя һуғышына оҙаталар. Һалдат ауыр хәрби хеҙмәт мохтажлыҡтарын, михнәттәр кисерә. Октябрь революцияһынан һуң тыуған ауылына ҡайтҡас, ул үҙе кеүек йәштәр менән халыҡты мәҙәни-ағартыу эштәрендә әүҙем ҡатнаша, наҙанлыҡты бөтөрөү буйынса саралар ойоштороп, йәштәрҙе ылыҡтыра. Мөғәллим көндөҙ Миәкәбаш мәктәбендә балалар уҡыта, педагогик хеҙмәт серҙәрен йотлоғоп өйрәнә.

1932 йылда М.В.Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының ситтән тороп уҡыу бүлеген тамамлағас, Биктимер Солтан улы Солтановты, байтаҡ тәжрибә туплауын иҫәпкә алып, Әлшәй районы Никифар мәктәбенә эшкә ебәрәләр. Бында уның педагогик һәләте тулыһынса асыла. Уҡытыусы, мәктәп директоры урынбаҫары, директор – был һоҡланғыс педагогтың хеҙмәт юлы баҫҡыстары шулар.

Биктимер Солтан улы Солтанов – ысын мәғәнәһендә новатор педагог. Ул программа һәм дәреслек биремдәре менән генә сикләнмәй, балаларға үҙе уҡытҡан тарих, туған тел һәм әҙәбиәт буйынса киң белем биреү маҡсатында, өҫтәмә сығанаҡтарға мөрәжәғәт итеп, дәрестә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр файҙаланыу һөҙөмтәһендә, уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныусанлығын бермә-бер арттыра.

Талантлы педагог һәм директор урынбаҫары Биктимер Солтан улы Солтановтың намыҫлы хеҙмәте 1939 йылда юғары баһа – Ленин ордены менән билдәләнә. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ул уҡыусыларҙы тоғро ватансылар итеп тәрбиәләүгә бөтә көсөн бирә. Был осорҙа уға район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире, колхоз партия ойошмаһы сәркәтибе вазифаларын башҡарып, халыҡты фиҙакәр хеҙмәткә күтәреүҙә – ярыш ойоштороуҙа ҡатнашырға, сәйәси эштәргә етәкселек итергә тура килә.

1948 йылда Никифар мәктәбе директоры Биктимер Солтан улы Солтановтың педагогик хеҙмәте йәнә лә юғары баһалана – ул икенсе тапҡыр Ленин ордены менән бүләкләнә.

Мәктәп директорының алдынғы эш тәжрибәһе район, республика гәзит-журналдары аша киң таратылып, халыҡҡа еткерелә, уҡытыусылар һәм мәктәп директорҙарының уртаҡ ҡаҙанышына әйләнә. Б.С.Солтанов йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнаша.

Ғәйниямаҡ ете йыллыҡ мәктәбендә уҡытыу-тәрбиә эштәрен яҡшыртыу Биктимер Солтан улына ышанып тапшырыла. Ул уҡытыусыларҙың эшен ысынлап та юғары баҫҡысҡа күтәрә. Был хеҙмәте өсөн Биктимер Солтан улы Солтановҡа 1957 йылдың 19 сентябрендә Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исем бирелә. Төрлө йылдарҙа ул байтаҡ миҙал һәм Маҡтау грамоталарына лайыҡ була.

# ҺИҘИӘТ СӘҒӘҘӘТ улы СӘҒӘҘӘТОВ

*(1896 – 1968)*



Һәр районда һәм ҡалала, ғәҙәттә, бер нисә быуын кешеләренә белем һәм тәрбиә биргән бик абруйлы уҡытыусыларҙың да уҡытыусыһы була. Уның тураһында халыҡ оҙаҡ йылдар буйы онотмай, балаларына, ейәндәренә яратып, оло ихтирам, рәхмәт һәм һөйөү тойғолары менән һөйләй. Һиҙиәт Сәғәҙәт улы Сәғәҙәтов – шундайҙарҙың береһе, Ленин ордены һәм миҙалдар кавалеры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Һиҙиәт Сәғәҙәт улы Сәғәҙәтов 1896 йылдың 17 авгусында Башҡортостандың Әбйәлил районы Хәмит ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Атаһы уны үҙе бер аҙ уҡырға-яҙырға өйрәткәс, 1906 йылда Рыҫҡужа ауылы мәҙрәсәһенә, шунан 1911 йылда яҡын-тирәлә данлыҡлы Үтәк ауылы мәҙрәсәһенә уҡырға бирә. Ата улын киләсәктә уҡымышлы кеше итеп күрергә теләй, уны мохтажлыҡ күрһәтмәйенсә үҫтерергә тырыша, уҡыған саҡтарында үҙе аҙыҡ-түлек һәм башҡа кәрәкле әйберҙәр алып бара, мәҙрәсә хужаларына көндәлек эштәрендә ярҙамлашып китә. Үтәк мәҙрәсәһендә Һиҙиәт Сәғәҙәтов 1915 йылға тиклем һабаҡ ала. Артабан армияла хеҙмәт итә. Уҡытыусы булыу сәбәпле, беренсе донъя һуғышына ебәрелмәй, тик ярҙамсы часта һалдат бурысын үтәй. Февраль һәм Октябрь революцияларында ҡатнаша, яңы тормош дошмандарына ҡаршы һуғыша, тиҙерәк тыныс тормошҡа ҡайтырға ашҡына.

1918 йылда Верхнеурал халыҡ мәғарифы идаралығы мөғәллим Һиҙиәт Сәғәҙәт улы Сәғәҙәтовты Хәмит ауылының беренсе баҫҡыс мәктәбенә уҡытыусы итеп ебәрә. Ул балаларға Советтар талап иткән яңыса белем һәм тәрбиә биреү эштәре менән шөғөлләнә. 1921 йот йылда, мөғәллим штаты ҡыҫҡартылыу сәбәпле, эштән бушатыла, үҙенең йорт-ҡураһында хужалыҡ менән була. 1923 йыл-

да Һиҙиәт Сәғәҙәтов Хәмит башланғыс мәктәбендә йәнә дәртләнеп уҡыта башлай, ауыл тормошоноң халыҡты ағартыу, уға яңы властың маҡсат һәм бурыстарын аңлатыу, кешеләрҙе яңы тормош төҙөргә дәртләндереү кеүек яуаплы йәмәғәт эштәрендә әүҙемлек күрһәтә. Бына шул йылдарҙа уның педагогик хеҙмәте яҡшы һөҙөмтәләр бирә, мөғәллимдең даны киң тарала.

1931 йылда Темәс терәк мәктәбендә колхоз йәштәре мәктәбе уҡытыусылары әҙерләү буйынса ике айлыҡ курсты тамамлағас, мөғәллим Һиҙиәт Сәғәҙәт улы Сәғәҙәтов Билал ете йыллыҡ мәктәбенә башҡорт теле һәм әҙәбиәте, тәбиғәт фәндәре уҡытыусыһы итеп ебәрелә. Унда балалар менән дә, ата-әсәләр менән дә күп төрлө эштәр башҡара, наҙанлыҡты бөтөрөү буйынса көрәштә алдынғылар сафында була. Билал мәктәбендә бер йылға яҡын уҡытҡас, 1932 йылда мөғәллим Әбйәлил районының мәғариф бүлегенә инспектор итеп алына.

Районда балалар уҡытыу һәм тәрбиәләүҙе яҡшыртыу, мәктәп етәкселәренә, уҡытыусыларға тейешле ярҙам күрһәтеү, кадрҙар әҙерләү кеүек бурыстарҙы үтәүҙә инспектор Һиҙиәт Сәғәҙәтов һәр саҡ башлап йөрөүсе булараҡ сығыш яһай, мәғарифты күтәреүгә барлыҡ көсөн бирә, бөтә ваҡытын һәм дәртен халыҡ өсөн файҙалы эштәргә йүнәлтеүҙән йәлләмәй. Уны һәр ауылда, һәр мәктәптә власть кешеһе күреп, аҡыллы һәм ярҙамсыл мөғәллим исәпләп ҡаршылайҙар, ҙурлап оҙаталар.

Инспектор Һиҙиәт Сәғәҙәт улы булып киткән мәктәптә, шулай уҡ ауылда ла көндәлек эш һәм тәртип яҡшыра. Ул ҡыҫҡа ғына арала уҡытыусылар һәм ауыл кешеләре йөрәгендә йәшәүгә, хеҙмәткә дәрт, әүҙемлек уятып өлгөрә, ялҡынлы һүҙҙәре менән тормошто матурлай. Быны мөғәллим үҙе лә аңлай, шуға күрә йыл эсендә мөмкин тиклем күберәк ауыл, мәктәптәрҙә булырға тырыша.

Мәктәп инспекторы булған 1932 – 1942 йылдарҙа Һ.С.Сәғәҙәтов алты бүлек мөдире менән бергә эшләй. Ауыр һуғыш йылдарында халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире вазифаһын уның үҙенә йөкмәргә тура килә. Был ҡатмарлы һәм мәшәҡәтле эште ул 1942 йылдан 1946 йылға тиклем үтә ҙур яуаплылыҡ тойоп башҡара, район һәм республика етәкселәре алдында Әбйәлил районының мәғариф эшенә тел тейҙермәй, уны камиллаштырыуға үҙ өлөшөн индерә, ауыр шарттарҙа ла мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә эшенең сифатын төшөрмәй, уҡытыусыларға тейешле ярҙам күрһәтә.

Кадрҙар етешмәү сәбәпле, Һ.С.Сәғәҙәтов ҡайһы берҙә мәғариф бүлегенең әллә нисә хеҙмәткәре вазифаһын бер үҙе башҡара, көнөтөнө эшләй, район етәкселеге вәкиле сифатында төрлө ауылдарға сығып, яҙғы сәсеү, мал аҙығы әҙерләү, ураҡ, мал ҡышлатыу

барышын тикшерә, шуға ла һәр ауыл кешеләрен, уларҙың бала-сағаларын яҡшы беләә. Уның һәр көнө көсөргәнешле үтә.

Оҫта етәксе, мәғариф эштәрен әүҙем ойоштороусы, талантлы педагог Һиҙиәт Сәғәҙәт улы Сәғәҙәтов 1946 йылдың авгусында бүлек мөдире вазифаһынан үҙе теләп китә, мәктәп инспекторы булып ҡала һәм был эште 1956 йылға тиклем, йәше буйынса хаҡлы ялға сыҡҡансы, башҡара. Ул Әбйәлил районының хужалыҡ эштәрендә уның халыҡ мәғарифы өлкәһендә ғәйәт ҙур хеҙмәт күрһәтә. Намыҫлы эше өсөн Һиҙиәт Сәғәҙәт ул Сәғәҙәтов 1949 йылда Ленин ордены һәм төрлө йылдарҙа миҙалдар менән бүләкләнә. 1949 йылдың 1 майында уға Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, 1954 йылдың 4 мартында Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исемдәр бирелә.

## ШӘЙХУЛЛА СИБӘҒӘТУЛЛА улы ТУЛВИНСКИЙ

*(1886 – 1970)*



Башҡортостан Республикаһының Тәтешле, Яңауыл, Бөрө райондарында, Татарстанда һәм Пермь өлкәһендә Шәйхулла Сибәғәтулла улы Тулвинскийҙың исеме киң билдәле. Берәүҙәр уны яҡшы педагог булғаны өсөн тәрән ихтирам тойғоһо менән иҫкә ала, икенселәр шағир булараҡ ололай.

Шәйхулла Сибәғәтулла улы Тулвинский 1886 йылдың 2 авгусында Пермь өлкәһе Башайтуҙ ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуып үҫә, хәҙерге Тәтешле районының Йосоп ауылы мәҙрәсәһендә уҡый. Шул осорҙа Башҡортостан уны үҙенә тарта. Ул егет сағынан ғүмеренең һуңғы көндәренә ҡәҙәр Башҡортостанда йәшәй, уны яҡын күреп, маҡтап, шиғырҙар яҙа.

Мәҙрәсәлә уҡыған ваҡытта уҡ Шәйхулла Тулвинский ил тормошо, уның иҡтисади хәле менән ҡыҙыҡһына, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша. 1909 йылда Өфөлә «Ғосмания» мәҙрәсәһен тамамлағас, йәш

мөғәллим Йосоп ауылына уҡытырға ҡайта. Ауыл имамы Фәхретдин Ишморатов уны шатланып ҡаршылай, уның йәҙитсе ҡарашын, айырыуса әҙәбиәткә ынтылышын хуплай. Имам үҙе лә әҙәбиәт ярата, ижад менән шөғөлләнә. Был уның улы, күренекле татар драматургы Риза Ишмораттың ижадына ла йоғонто яһамай ҡалмағандыр.

Йәш мөғәллим Фәхретдин Ишморатовтың йортонда йыш була, уның китапханаһында Өфө, Ырымбур, Ҡазандан килгән гәзит-журналдар менән таныша. Уның тәүге шиғыры «Сабыйға» исеме аҫтында «Шура» журналының 1911 йылғы сентябрь һанында баҫылып сыға.

Шәйхулла Тулвинский балаларға күренекле урыҫ педагогтарының тәғлимәтенә таянып белем бирергә ынтыла, айырыуса К.Д. Ушинский хеҙмәттәрен өйрәнә, алдынғы уҡытыусыларҙың эш алымдарына мөрәжәғәт итә.

1908 – 1910 йылдарҙа Ирәкте төбәгендә бер нисә мәҙрәсә асыла. Шәйхулла Тулвинский Аҡсәйет, Күрҙем кеүек алдынғы мәҙрәсәләргә эшкә саҡырыла.

Ләкин халыҡтың яратҡан мөғәллиме Йосоп, Үрге Тәтешле мәктәптәрендә уҡытыуын дауам итә, йәштәргә төплө белем, тәрбиә бирергә тырыша, уларҙы йәмғиәткә файҙалы, үҙ аллы эшләргә һәм йәшәргә һәләтле кешеләр итеп тәрбиәләй.

Октябрь революцияһынан һуң Шәйхулла Сибәғәтулла улы Тулвинский мәҙрәсә һәм мәктәптәрҙең матди базаһын нығытыуға ауыл йәмәғәтселеген ылыҡтыра. Уҡытыу-тәрбиә эшендә яңы власть ойошмалары үҙ мәнфәғәттәрен яҡлаған йөкмәтке һәм ысулдар индереүҙе талап итә. Шәйхулла Тулвинский балаларға белем һәм тәрбиә биреүҙә лә, өлкәндәрҙең наҙанлығын бөтөрөү, уларҙы яңы тормош төҙөүгә йәлеп итеүҙә лә яңыса эшләргә ынтыла. Ул – идеология фронтының ялҡынлы көрәшсеһе, агитатор, пропагандист була. Мөғәллим балаларҙы урыҫ телендә яҙырға, уҡырға өйрәтә, тәбиғәт предметтарын да уҡыта. Ул бер нисә быуын кешеләренең күңелендә яҡшы уҡытыусы, аҡыллы кәңәшсе булып йәшәй.

Күптәр Шәйхулла Тулвинскийҙың дәрестә үҙ шиғырҙарын яттан һөйләүен, уларҙы уҡытыу-тәрбиә эшендә уңышлы файҙаланыуын хәтерләй. Ул көтмәгәндә шиғыр сығара, әкиәт, хикәйәләр һөйләй торған булған.

Уҡытыу-тәрбиә эшендә өлгәшкән уңыштары өсөн абруйлы педагог Шәйхулла Сибәғәтулла улы Тулвинский 1949 йылда Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Ләкин уның өсөн иң ҡиммәтлеһе халыҡ ихтирамы була. Вафатына байтаҡ йылдар үтһә лә, халыҡ үҙ мөғәллимен онотмай, урамдарға уның исеме бирелгән, музейҙарҙа шәхесенә һәм эшмәкәрлегенә бәйле байтаҡ нәмәләр һаҡлана.

# ДИНМӨХӘМӘТ СӘМӘХУЖА улы ХАФИЗОВ

*(1883 – 1966)*



Башҡортостан һәм ут күрше Силәбе өлкәһе мәктәптәрендә йәш быуынға белем, тәрбиә биреүҙә Динмөхәмәт Сәмәхужа улы Хафизовтың тотҡан урыны ҙур һәм мәртәбәле. Ул – беҙҙең республика халыҡ хужалығының төрлө тармаҡтары өсөн юғары белем алырға һәләтле йәштәр – буласаҡ кадрҙар әҙерләгән талантлы педагог, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Динмөхәмәт Сәмәхужа улы Хафизов 1883 йылдың 17 майында хәҙерге Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Мәтәл ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Үҙ ауылындағы башҡорт-урыҫ башланғыс мәктәбендә 1899 йылда ул заман өсөн ярайһы ғына төплө, күп яҡлы белем алып сыға. Бер аҙ йортта хужалыҡ эштәре менән шөғөлләнгәндән һуң, мөғәллим 1907 – 1912 йылдарҙа Мәтәл мәктәбендә балалар уҡыта. Белемен артабан күтәреү теләге уны Красноуральск реаль училищеһына алып бара. Ул бында 1912 – 1914 йылдарҙа уҡый.

1914 йылда Беренсе донъя һуғышы башланып китә. Батша хөкүмәте ир-егеттәрҙе Ватанды дошмандан һаҡларға саҡыра. Динмөхәмәт Хафизов та фронтҡа алына, 1917 йылға тиклем һалдат бурысын үтәй, большевик агитаторҙарҙың телмәрен тыңлай, күҙәтә.

1917 йылдың көҙөндә Д.С. Хафизов хәҙерге Башҡортостандың Учалы районы Ҡаҙаҡкол мәктәбендә яратып өлгөргән хеҙмәтен – балалар уҡытыу һәм тәрбиәләү эшен башлап ебәрә. Уҡыусыларға төплө белем биреү өсөн, йәш мөғәллим көсөн дә, ваҡытын да йәлләмәй, төрлө түңәрәктәр ойоштора, бөтәһен дә яңы тормош талаптарына ярашлы алып бара. Ул ата-әсәләр менән эшләргә лә ваҡыт таба, уларға Октябрь революцияһының маҡсатын аңлата, мәҙәни-ағартыу сараларын йәйелдерә, яңы шарттарҙа яңыса йәшәргә өйрәтә.

Ҡаҙаҡкол ауылы халҡы тырыш, әҙәпле Динмөхәмәт Сәмәхужа улын бик ярата, уға йә «мөғәллим», йә «учитель» тип кенә мөрәжәғәт итә, ауылдан киткәс тә, уны оҙаҡ йылдар буйы хәтерендә һаҡлай. Уҡытыусы балаларҙың да, ата-әсәләрҙең дә оло һөйөүен яулай, ҙур хөрмәт ҡаҙана. Әммә 1919 йылда уға китергә тура килә.

Динмөхәмәт Хафизов яңы урында – хәҙерге Силәбе өлкәһенең Ҡолой мәктәбендә балалар уҡыта башлай. Бында өс йыл эшләп, бай тәжрибә туплай. Әммә мөғәллим үҙенең әйтер һүҙен әйтмәгән әле. Уны 1921 йылдан 1957 йылға тиклем тыуған төйәге Мәтәл ауылы мәктәбендә уҡытыусы, директор булып эшләгән дәүерҙә әйтә – дан-шөһрәт ҡаҙанған талантлы педагог булараҡ таныла.

Уҡытыусы тәү сиратта үҙ белемен күтәреү өҫтөндә даими, ныҡышмалы эшләй, уҡытыу-тәрбиә тураһында китаптар алдырып уҡый, курс, семинарҙарҙа була, алдынғыларҙың тәжрибәһен йотлоғоп һеңдерә. Ә 1922 йыл башынан үҙ эше, уҡытыу-тәрбиә мәсьәләләрен хәл итеү юлдары һәм ысулдары тураһында уҡытыусылар, мәктәп етәкселәре кәңәшмәләрендә сығыш яһай, докладтар һөйләй, август кәңәшмәләрендә бай тәжрибәһе менән күп тапҡыр уртаҡлаша. Силәбе өлкәһендә Динмөхәмәт Хафизовты эскерһеҙ, ярҙамсыл булғаны өсөн уҡытыусылар ҙа, ябай хеҙмәт кешеләре лә хөрмәт итәләр.

Бөйөк Ватан һуғышы ауырлыҡтары мәктәп эшендә ҙур мохтажлыҡ тыуҙыра. Балалар ас-яланғас, халыҡ бөлгөнлөккә төшә, укыусылар кәмей. Мөғәллим ауылдаштарын сыҙамлы булырға өндәй, дошманды еңеү өсөн фиҙакәр хеҙмәткә рухландыра, үҙе уҡыусылар, ата-әсәләр менән күп яҡлы эштәр алып бара.

Директор Динмөхәмәт Сәмәхужа улы Хафизов 1949 йылда башланғыс мәктәпте ете йыллыҡҡа әйләндереү өсөн күп көс һала, уның директоры булып эшләүен дауам итә. Халыҡ уға оло хөрмәт күрһәтә – 1950 йылда Силәбе өлкә Советына депутат итеп һайлай. Был ихтирамға мәктәп директоры ике тапҡыр лайыҡ була.

Медицина фәндәре докторы, профессор, яҙыусы З.Ә.Ихсанов, филология фәндәре кандидаты Б. Сәйәрғәлиев, табибәләрҙән М.Хафизова, М.Хәлитова, юғары һәм урта белемле уҡытыусыларҙан Г. Хафизова, Г.Шәйхелисламова, Ҡ.Яҡупова, Башҡортостандың элекке юстиция министры С.Әүзәнов, партия эшмәкәре һәм тарихсы Р.Ҡузыев, башҡа бик күптәр Мәтәл мәктәбендә белем нигеҙҙәрен төплө үҙләштергәс, уҡытыусы Д.С.Хафизовтың көслө тәьҫирендә уҡыуҙарын артабан дауам итеп, Башҡортостандың маҡтаулы һөнәр эйәләре һәм арҙаҡлы шәхестәре булып үҫеп етте, халыҡ һөйөүен яуланы. Шуға күрә халҡыбыҙ күренекле педагог Д.С.Хафизовты, уның данлыҡлы кешеләр булып киткән уҡыусыларын һис тә онотмай.

Балалар уҡытыу һәм тәрбиәләүҙә өлгәшкән ҙур уңыштарын һәм халыҡ араһында әһәмиәтле мәҙәни-ағартыу эштәре ойоштороуын иҫәпкә алып, илебеҙ Динмөхәмәт Сәмәхужа улы Хафизовҡа оло хөрмәт күрһәтә, уның хеҙмәтен юғары баһалай. 1937 йылда уҡытыусыға Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденын Бөтә Союз старостаһы М.И.Калинин үҙе тапшыра, икенсе тапҡыр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденын Д.С.Хафизов 1939 йылда Н.К.Крупская ҡулынан ала.

1951 йылда Динмөхәмәт Сәмәхужа улы Хафизовҡа Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исем бирелә. Быға уның уҡыусылары, ауылдаштары, таныш-белештәре үҙҙәре маҡтаулы исемгә лайыҡ булғандай ҡыуаналар. Уҡытыусы хеҙмәтенең абруйы ул заманда айырыуса ҙур ине шул.

## ХӘБИБРАХМАН ЛОТФРАХМАН улы ХӘМЗИН

*(1885 – 1976)*



Ишембай районының оло быуын уҡытыусылары, мәғариф хеҙмәткәрҙәре һәм төрлө һөнәр кешеләре абруйлы педагог Хәбибрахман Лотфрахман улы Хәмзинды хәтерләйҙер, моғайын. Ул – оҙаҡ йылдар уҡытыусы булып эшләгән арҙаҡлы шәхес, орден һәм миҙалдар кавалеры.

Хәбибрахман Лотфрахман улы Хәмзин 1885 йылдың 12 ноябрендә Башҡортостандың Стәрлетамаҡ районы Үрге Услы ауылында хәлле генә крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Башланғыс белемде ул атаһынан ала, ауыл мәҙрәсәһендә уҡый. Ата-әсәһенең риза булмауына ҡарамаҫтан, йәш егет Троицк ҡалаһына, «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға китә. Уның белем алыуға дәрте көслө булһа ла, матди хәленең мөшкөллөгө дәрестән буш ваҡытта, ял көндәрендә тимер юлда йөк тейәү һәм бушатыу кеүек эштәр башҡарырға мәжбүр итә, шәкерт йәй көндәрендә байҙарға ялсы булып йөрөй, шулай ҙа уҡыуын дауам итә.

Мəҙрəсəлə уҡытылған предметтарҙың күбеһе Х.Л.Хəмзинды ҡәнәғәтләндермәй, сөнки дини һабаҡтарға ҙурыраҡ иғтибар бирелə. Математика, физика, əҙəбиəт буйынса төплө белем алыу теләге шәкертте Ҡазанға алып бара.

Х.Л.Хəмзин Ҡазандың данлыҡлы «Мөхәммәҙиә» мəҙрəсəһенə уҡырға инә. Ләкин оҙаҡ уҡый алмай. 1905 – 1907 йылдарҙағы беренсе урыҫ революцияһы тәьҫирендә шәкерттәр араһында сыуалыштар башлана.

– Ҡазанға килеп уҡый башлағас, мин ошо революцион йәштәр араһына инеп киттем, – тип хәтерләй торғайны Хәбибрахман ағай. – Минең бүлмәмдә йәшерен листовкалар, тыйылған китаптар һаҡлана ине. Жандармдар тентеү яһағанда уларҙы таптылар, ҡайһы бер уҡыусы йәштәрҙе, шул иҫәптән мине лә, Ҡазандан ҡыуҙылар.

Ҡазандан сығып киткәс, төрлө осраҡлы эштәр менән шөғөлләнгәндә лә Х.Хәмзиндың күңелендә артабан уҡыу теләге бер ҡасан да һүнмәй. 1907 йылдың көҙөндә ул яңынан Ҡазанға барып, уҡытыусылар мәктәбенә уҡырға инә.

Х.Л.Хәмзин ҡаҙаҡ далаларында балалар уҡыта, уларға белем һәм тәрбиә биреү серҙәрен үҙләштерә. 1909 йылда ул Өфөгә килеп, урыҫ теле уҡытыусылары әҙерләү курсында уҡый. 1910 йылдан 1925 йылға ҡәҙәр тыуған ауылы мәктәбендә балалар уҡыта, Октябрь революцияһынан һуң йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша, ата-әсәләргә яңы тормош төҙөү бурыстарын аңлата, уларҙың наҙанлығын бөтөрөү, мәҙәни-ағартыу эштәре менән шөғөлләнә. 1918 йылда Стәрлетамаҡта Советтарҙың беренсе өйәҙ съезына делегат булып бара.

1926 – 1928 йылдарҙа уҡытыусы Х.Л.Хәмзин Стәрлетамаҡ педагогия техникумында уҡып, белемен күтәрә. 1928 йылда тәжрибә туплаған әҙерлекле мөғәллим Ишембай районы Сәлих мәктәбенә эшкә килә. Бында Хәбибрахман Хәмзиндың педагог таланты тулыһы менән асыла. Уның башланғыс синыфтарында уҡыған балалар урта һәм юғары синыфтарҙа яҡшы уҡый, әүҙем, тәртипле булыуҙары менән айырылып тора.

Х.Л.Хәмзин – уҡытыу-тәрбиә эшенә йәне-тәне менән бирелгән, үҙ хеҙмәтен көн һайын ҙур ҡәнәғәтләнеү тойғоһо менән башҡарған намыҫлы уҡытыусыларҙың береһе. Ул ата-әсәләр менән дә күп эштәр алып бара. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында, унан һуң да уҡытыусының йәштәргә хас дәрте, илһамы һүнмәй, яратҡан эшен ғүмер буйы рухланып дауам итә.

Талантлы педагог Хәбибрахман Лотфрахман улы Хәмзин 1948 йылда Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Төрлө йылдарҙа ике миҙалға һәм Маҡтау грамоталарына лайыҡ була, 1952 йылда 67 йәшендә генә хаҡлы ялға сыға.

## ӘҘЕҺӘМ МИҘХӘТ улы ЧАНЫШЕВ

*(1902 – 1985)*



Баймаҡ районында мәғарифты үҫтереүгә, мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә эшен яҡшыртыуға, уҡытыусы коллективтарының хеҙмәтен камиллаштырыуға ҙур көс һалған Әҙеһәм Миҙхәт улы Чанышевты күптәр данлыҡлы педагог, оҫта етәксе булараҡ әле лә яҡшы хәтерләй.

Әҙеһәм Миҙхәт улы Чанышев 1902 йылдың 27 сентябрендә Башҡортостандың Баймаҡ районы Юлыҡ ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Ата-әсәһе иртә вафат булыуы сәбәпле, кескәй Әҙеһәм олатаһы менән өләсәһендә тәрбиәләнә. Уның олатаһы Ҡаһарман Чанышев 56 йыл мөғәллим була. Ул Әҙеһәмде мәҙрәсәгә уҡырға бирә, ике йылдан башланғыс мәктәпкә күсерә, артабан үҫмерҙе Верхнеуралға алып барып, реаль училищеға урынлаштыра.

Октябрь революцияһынан һуң Әҙеһәм Чанышев Юлыҡ мәктәбендә балалар уҡыта, 80-се йәш менән барған олатаһын алмаштыра. Ул – ауыл мәктәбендә яңыса уҡытыуҙы ойоштороусыларҙың береһе. Мөғәллим йәштәрҙе уҡытыуға, тәрбиәләүгә бөтә көсөн бирә, ата-әсәләр менән күп эшләй. Әҙеһәм Чанышев драматург Мирхәйҙәр Фәйзи менән бергә йәштәрҙе түңәрәктәргә ылыҡтыра, төрлө йәмәғәт эштәре алып бара. Ул мәктәптә һәм ауылда әйҙәүсе педагогҡа әйләнә.

1926 йылда Ә.М. Чанышев Баймаҡ башланғыс мәктәбе директоры итеп күсерелә. Өфөлә махсус курсты тамамлағас, ул терәк мәктәп директоры итеп тәғәйенләнә, бай тәжрибә туплай, күренекле мәғариф хеҙмәткәре булып өлгөрә.

1930 йылда Әҙеһәм Миҙхәт улы Чанышев Баймаҡ кантон халыҡ мәғарифы бүлегенең беренсе мөдире итеп үрләтелә. Ул үҙен оҫта етәксе итеп күрһәтә. Оло быуын кешеләре уны күп йылдар буйы

уҡытыусыларҙың уҡытыусыһы тип иҫкә ала. Ул иң тәүҙә уҡытыусылар әҙерләү курстары ойоштора, мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә эшенең сифатын күтәреү сараларын күрә. 1937 йылда Ә.М.Чанышев Баймаҡ 1-се мәктәбенә география уҡытыусыһы булып күсә, шунан һуң мәктәп директоры урынбаҫары, директор була, бер үк ваҡытта география уҡыта.

1942 йылда, Бөйөк Ватан һуғышының иң ауыр мәлендә, Ә.М.Чанышев яңынан район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. Мәктәптәрҙә уҡытыусылар етешмәй, ремонт яһалмай, балалар асяланғас. Шулай ҙа уларҙы уҡытырға кәрәк. Һуғыш тыуҙырған ҙур ҡыйынлыҡтарға ҡарамаҫтан, Ә.М.Чанышев етәкселегендә халыҡ мәғарифы бүлеге, район мәктәптәренең уҡытыусы коллективтары үҙҙәренә тапшырылған бурысты намыҫлы үтәй, йылдың-йылы уҡыу дауам итә, балалар белем ала.

1953 йылда, ауырыу сәбәпле, Ә.М.Чанышев мәғариф бүлеге мөдире вазифаһынан бушатыла. Ул тәүҙә эшсе йәштәр мәктәбендә, 1958 йылда Сибайға күскәндән һуң – ете йыллыҡ мәктәп директоры, ике йыл үтеүгә, Сибай 7-се урта мәктәбе директоры урынбаҫары булып эшләй, үҙенең талантлы педагог икәнен раҫлай.

Ҡайҙа ғына эшләһә лә, Әҙеһәм Миҙхәт улы Чанышев һәр ваҡыт үҙенә талапсан була, йәш уҡытыусыларға, мәктәп директорҙарына һәм башҡа мәғариф хеҙмәткәрҙәренә ихлас ярҙам итә, педагогик такт, принципиаллек сифаттары менән айырылып тора. Ул һәр эште ҙур яуаплылыҡ тойоп башҡара, бүтәндәрҙән дә шуны ғәҙел талап итә.

Уҡытыу-тәрбиә һәм етәкселек эштәрендә ҙур уңыштары өсөн Әҙеһәм Миҙхәт улы Чанышев Ленин ордены, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, «Почет Билдәһе» ордендары менән бүләкләнә. Уның исеме һәр ерҙә оло ихтирам менән телгә алына. Халыҡ үҙ улын онотмай.

## ЯҢЫ БЕЙЕКЛЕКТӘР ДӘҮЕРЕ

*(60 – 80-се йылдар)*

Был осорҙа мәғариф, мәктәптәр һәм башҡа уҡыу йорттары хеҙмәттә юғары уңыштар яулауға ирешә. Бының өсөн бөтөн шарттар ҙа була: матди база нығый, юғары белемле уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр күбәйә, уҡыусылар араһында белемле, әҙерлекле граждандар булып үҫеүгә ихтыяж арта.

Алдынғы педагогтар республика мәғарифын камиллаштырыуҙа, мәктәптә һәм башҡа балалар ойошмаларында уҡытыу-тәрбиә эшен яҡшыртыуҙа үҙен аҡлаған ысул һәм алымдарҙы киң файҙалана. Уҡытыуҙың кабинет системаһы нығытыла, техник саралар, күргәҙмә әсбаптар мул йәлеп ителә. Уҡытыу-тәрбиә эшенең матди базаһы бығаса булмаған темптар менән йылдам үҫә.

Тап ошо осорҙа мәктәптәр, балалар ойошмалары өсөн иркен, яҡты биналар төҙөүгә, инициатив ысул менән төҙөлөш эштәрен йәйелдереүгә иғтибар арта. Яҡшы биналарҙа уҡытыу-тәрбиә эшен камиллаштырыу өсөн мөмкинлектәр ҙә күберәк бит. Халыҡ араһында уҡытыусының, белемдең бәҫе күтәрелә.

Бөтөн мөһим шарттарҙы тормошҡа ашырыу мәғариф хеҙмәткәрҙәре алдына заманы өсөн айырыуса ҙур бурыс – йәштәргә дөйөм урта белем биреү бурысын ҡуйырға мөмкинлек бирә. Уны көн тәртибенә сығарыу юғары уҡыу йорттарында белемле кадрҙар әҙерләү, илебеҙҙең киләсәге тураһында хәстәрлек күреү, уның иҡтисади һәм оборона ҡеүәтен нығытыу кеүек ифрат ҡатмарлы мәсьәләләрҙе уңышлы хәл итеү менән бәйле. Барлыҡ мәғариф хеҙмәткәрҙәре үҙ алдында торған бурыстарҙы һәр ваҡыттағы кеүек намыҫлы үтәү юғарылығында булды, фиҙакәрлек, педагогик эшкә бирелгәнлек өлгөләре күрһәтте.

Шул йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының күренекле педагогтарынан ике кеше Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән юғары исемгә лайыҡ булды, алдынғыларҙың да алдынғылары илебеҙҙең юғары бүләктәрен алыуға өлгәште. Был осорҙо мәғариф эшенең эре аҙымдар менән алға барыу мәле, яңы бейеклектәргә күтәрелеү дәүере тип баһаларға мөмкин.

## АНДРЕЙ АЛЕКСАНДРОВИЧ АЛЕКСАНДРОВ

*(1936)*



Хеҙмәт юлының 30 йылға яҡын дәүерен халыҡ мәғарифы идаралығы башлығы булып эшләгән Андрей Александрович Александровтың исем-шәрифтәре республика мәғариф хеҙмәткәрҙәренә яҡшы билдәле.

Андрей Александрович Александров 1936 йылдың 2 февралендә Башҡортостандың Мишкә районы Иҫке Ҡолсобай ауылында тыуа. Урта мәктәпте тамамлағандан һуң, Бөрө педагогия институтының физика һәм математика факультетына уҡырға инеп, 1958 йылда юғары белемле уҡытыусы дипломын ала.

А.А.Александров шул ваҡыттан бирле Бөрө, Мишкә райондары мәктәптәрендә математика, физика уҡытыусыһы булып эшләй, 1972 йылда Мишкә район халыҡ мәғарифы идаралығы башлығы итеп билдәләнә һәм был вазифаны 30 йылға яҡын башҡара.

А.А.Александров үҙен тәүге ваҡыттан уҡ инициативалы, хеҙмәт һөйөүсән, талапсан етәксе, оҫта ойоштороусы белгес итеп күрһәтә. Ул мәғариф учреждениеларының матди базаһын нығытыуға ҙур иғтибар бирә. Андрей Александрович эшләгән йылдарҙа һәр береһе 320-шәр урынлы 14 мәктәп, алты тулы булмаған мәктәп биналары төҙөлә. Балалар спорт мәктәбе, йәш натуралистар станцияһы, фильмотека, йәш техниктар станцияһы, балалар туристик базаһы, пио-

нерҙар һәм уҡыусылар йорто, үҫмерҙәр үҙәге асылып, уңышлы эшләй.

Район халыҡ мәғарифы идаралығы башлығы хеҙмәткә өйрәтеүҙең матди базаһын нығытыу буйынса маҡсатҡа ынтылышлы эш алып бара. Барлыҡ мәктәптәрҙә лә башланғыс синыф уҡыусылары өсөн ҡул хеҙмәте кабинеттары, 32 оҫтахана йыһазландырыла, тракторҙы һәм башҡа ауыл хужалығы машиналарын өйрәнеү өсөн 16 кабинет эшләй, бер мәктәптә сауҙа эше өйрәнелә.

Өлкән синыф уҡыусыларын хеҙмәткә өйрәтеү, хужалыҡ эштәрен үтәү өсөн район мәктәптәрендә 28 трактор, ике еңел машина, 20 йөк машинаһы һатып алынған, ауыл хужалығы ҡорамалдары булдырылған. Күп мәктәптәрҙең тәжрибә баҡсаларында йәшелсә үҫтерәләр, бәләкәй генә фермаларҙа сусҡа һәм һыйыр малдары үрсетәләр. Үҫемлекселек һәм малсылыҡ аҙыҡтары уҡыусы балаларҙың туҡланыу рационын тулыландыра.

А.А.Александров мәғариф хеҙмәткәрҙәренең сифат составын яҡшыртыу буйынса күп саралар күрә. Районда барлығы 718 уҡытыусы, 100 балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе эшләй. Уларҙың бөтәһе лә тейешенсә белемле һәм әҙерлекле. Кадрҙарҙың ижади һәләтен үҫтереү системаһы эшләнгән. Район урындағы кадрҙар менән тулыһынса тәьмин ителә.

А.А.Александровтың туранан-тура етәкселегендә уҡытыу предметтарын тәрән өйрәнеү буйынса маҡсатҡа йүнәлешле эш алып барыла. Барлыҡ урта мәктәптәр һәм тулы булмаған урта мәктәптәрҙең күбеһе кабинет системаһы буйынса эшләй, бөтәһе лә уҡытыуҙың техник саралары, методик әҙәбиәт менән тәьмин ителгән. Быларҙың барыһы ла һәйбәт һөҙөмтәләр бирә. Йыл һайын урта мәктәпте тамамлаусыларҙың 25 проценты – юғары уҡыу йорттарына, 15 проценты – техникумдарға һәм колледждарға, 35 проценты һөнәрселек-техник училищеларға уҡырға инә.

1977 йылдан Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы исемен йөрөткән А.А.Александров Мишкә районында мәғарифты үҫтереү, юғары белемле кадрҙар әҙерләү өсөн мөмкин булғандың бөтәһен дә эшләргә ынтыла. Ул 2001 йылда II дәрәжә «Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн» орден-миҙалы менән бүләкләнә.

## АСИЯ МИҢЛЕҒӘЛИ ҡыҙы АРДАШИРОВА

*(1923 – 1999)*



Педагогик хеҙмәт оҫтаһы, уны дөйөмләштереп, уҡытыусылар коллективтарында киң таратыусы методист Асия Миңлеғәли ҡыҙы Ардашированың исеме Башҡортостан мәктәптәрендә һәм республика йәмәғәтселегенә яҡшы билдәле. Ул – башҡорт мәктәптәренең башланғыс урыҫ синыфтары өсөн «Букварь», урыҫ теле дәреслеге һәм методик ҡулланмалар авторы.

Асия Миңлеғәли ҡыҙы Ардаширова 1923 йылдың 12 ғинуарында Башҡортостандың Ҡырмыҫҡалы районы үҙәге Ҡырмыҫҡалы ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Урта мәктәпте тамамлағас, ул К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына уҡырға инә. 1940 йылда институттың II курсын бөтөргәс, Асия Ардаширова Салауат районына урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып бара, Нәсибаш, Таймый мәктәптәрендә балалар уҡыта, институттың ситтән тороп уҡыу бүлеген 1948 йылда бөтөрөп сыға.

1943 йылда А.М.Ардаширова ғаилә шарттары буйынса (атаһы вафат булып, әсәһе өс бала менән ҡала) Ҡырмыҫҡалыға ҡайтырға мәжбүр була. Йәш белгесте партия район комитетына эшкә алалар. 1946 йылда Асия Миңлеғәли ҡыҙы Өфөгә күсә, тәүҙә 9-сы мәктәптә өлкән тәрбиәсе, шунан 15-се мәктәптең башланғыс синыфтарында урыҫ теле уҡытыусыһы булып эшләй. Тырышлыҡ, педагогик әҙерлек һәм эш тәжрибәһе уға ысын уҡытыусы булып үҫергә мөмкинлек бирә. Уның һәләтле педагог һәм күренекле методист булып формалашыуында 15-се мәктәп директоры Шәмсулла Заһиҙулла улы Ғиззәтуллин, мәктәптең уҡытыусылар коллективы, Өфө ҡала халыҡ мәғарифы бүлеге методисы, башҡорт мәктәбенең IV синыфы өсөн урыҫ теле дәреслеге авторы Хәҙисә Рәхим ҡыҙы

Яфаева ҙур ярҙам күрһәтә. Мәктәп директоры ла, ҡала халыҡ мәғарифы бүлеге методисы ла Асия Миңлеғәли ҡыҙының дәрестәрендә, синыфтан тыш тәрбиә сараларында йыш булып, методик алымдарҙы ҡулланырға, уҡытыу һәм тәрбиә эшен берҙәм ойоштороғға ярҙам итә, педагогик хеҙмәт сәнғәтенең серҙәрен үҙләштерергә булышлыҡ күрһәтә.

Үҙенең бай материалдары һәм уҡытыу-тәрбиә эшенең алдынғы тәжрибәһе А.М.Ардашироваға башҡорт мәктәбенең II синыфы өсөн урыҫ теле дәреслеген ҡыҫҡа ваҡыт эсендә яҙырға мөмкинлек бирә. Дәреслек күренекле методист С.П.Редозубовтың юғары баһаһын ала һәм уның мөхәррирлегендә 1950 йылда баҫылып сыға.

1951 йылда А.М.Ардаширова Ғафури районы Еҙем-Ҡаран урта мәктәбенә урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып китә. Бында ул биш йыл мәктәп директоры урынбаҫары, йәнә биш йыл директор булып эшләй, бер үк ваҡытта урыҫ теле һәм әҙәбиәтен уҡыта. Уҡытыусы, методист башҡорт мәктәптәренең I һәм II синыфтары өсөн урыҫ теле дәреслектәренең йөкмәткеһен, методик аппаратын камиллаштырыуҙы дауам итә, уларҙың ыңғай яҡтарын ғәмәлдә күрә, дәреслек материалдары йыя, уларҙы уҡыусы балаларға өйрәтеү алымдарын асыҡлай. Быңың өсөн Башҡортостан Халыҡ мәғарифы министрлығының йәмәғәт инспекторы сифатында Еҙем-Ҡаран, Сәйетбаба урта мәктәптәренең башланғыс синыфтарында, башҡа башланғыс мәктәптәрҙә дәрестә булып, үҙе өсөн ҡиммәтле һығымталар яһай.

1967 йылда Асия Ардаширова йәнә Өфөгә күсеп килә. Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтында тәүҙә етәксе хеҙмәткәрҙәр кабинеты мөдире, шунан һуң башланғыс мәктәп кабинеты методисы вазифаларын күңел йылыһын биреп башҡара. Был мәктәптәрҙә уҡытыуҙың яңы йөкмәткеһенә күсеү дәүере була. Институт коллективы ҙур эшкә күмелә. Асия Миңлеғәли ҡыҙы Ардаширова, бай тәжрибә туплаған талантлы педагог буларак, һәр ваҡыттағыса үҙенә йөкмәтелгән бурысты йөрәк ҡайнарлығын биреп үтәй, уҡытыусыларға һәм мәктәп етәкселәренә ҙур ярҙам күрһәтә.

Институтта эшләгән саҡта А.М.Ардаширова алдынғы уҡытыусыларҙың һәм педагогик коллективтарҙың тәжрибәһен барлыҡ педагогтар өсөн файҙалы хазина күреп тарата, ваҡытлы матбуғатта башланғыс белем биреү, урыҫ теле уҡытыу мәсьәләләре тураһында мәҡәләләр баҫтырып сығара, методик хаттар яҙып, мәктәптәргә ебәрә.

Асия Миңлеғәли ҡыҙы Ардашированың педагогик һәм методик хеҙмәте ваҡытында, дөрөҫөн әйтәйек, тейешенсә баһаланманы. Ҡайһы

бер педагогтар маҡтаулы исем, бүләктәргә ҙур әһәмиәт бирмәй, үтә баҫалҡылыҡ күрһәтә. Асия Миңлеғәли ҡыҙы ла шундай кеше ине. 1974 йылда Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы тигән маҡтаулы исемдең бирелеүе һәм бер нисә грамота алыу менән сикләнде, шуның менән ҡәнәғәтләнде. Һәр төрлө исемдәргә, маҡтау-ҙурлауға уның иҫе китеп барманы. 1978 йылда хаҡлы ялға сыҡһа ла, А.М.Ардаширова республиканың педагогик йәмәғәтселегенән айырылманы, авторҙаштары менән I, II, III синыфтар өсөн урыҫ теле дәреслектәре һәм уларҙы мәктәптә файҙаланыу тураһында методик ҡулланмалар яҙыуҙа әүҙем ҡатнашты, уҡытыусылар менән бәйләнеш тотто, уларға ҡулынан килгән тиклем ярҙам күрһәтте.

## РОБЕРТ МӨТИҒУЛЛА улы АРЫҪЛАНОВ

*(1934)*



Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институты (хәҙер Башҡортостан мәғарифын үҫтереү институты) директоры, халыҡ мәғарифы министры урынбаҫары һәм башҡа етәксе вазифаларҙы башҡарыу дәүерендә Роберт Мөтиғулла улы Арыҫланов үҙен оҫта ойоштороусы, талантлы педагог итеп күрһәтте. Ул – күп кенә орден һәм миҙалдар кавалеры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре.

Роберт Мөтиғулла улы Арыҫланов 1934 йылдың 8 апрелендә Башҡортостандың Хәйбулла районы Йәнтеш ауылында хеҙмәткәр ғаиләһендә тыуа. 1941 йылда уҡыуға төшөп, 1951 йылда Аҡъяр урта мәктәбен тамамлай, шул уҡ йылда К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының география факультетына уҡырға инә. 1955 йылда уҡытыусы дипломы алып, йәш белгес тыуған яҡтарына ҡайта. Ул һуғыштан һуң юғары белем алған һәм үҙ районына уҡытыусы булып ҡайтҡан беренсе белгес була.

Роберт Мөтиғулла улы Арыҫлановты ҡасандыр үҙе уҡып сыҡҡан Аҡъяр урта мәктәбенә география һәм тарих уҡытыусыһы итеп тәғәйенләйҙәр. Күп тә үтмәй, уны районды комсомол ойошмаһына етәксе эшкә һайлайҙар.

1962 йылдың декабрендә Роберт Мөтиғулла улы Арыҫланов Аҡъяр урта мәктәбе директоры итеп ҡуйыла. Мәктәп – районда иң ҙурыһы. Унда меңдән ашыу бала уҡый, 64 уҡытыусы һәм тәрбиәсе эшләй. Йәш директорға күп ауырлыҡтарҙы еңеп сығыу өсөн уҡытыусылар һәм уҡыусылар коллективтарының эшен планлы ойоштороруға, инициативалы ярҙамсылар тәрбиәләргә тура килә. Мәктәп коллективы районда беренсе булып ауыл хужалығы өсөн киң профилле механизаторҙар, тегеү оҫталары әҙерләү, уҡытыуҙың кабинет системаһына күсеү кеүек ҡатмарлы мәсьәләләрҙе уңышлы хәл итә. Уҡытыусылар коллективының алдынғы тәжрибәһе киң таратыла.

1967 йылда Р.М.Арыҫланов Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институты директоры итеп ҡуйыла. Уның тормошонда яңы осор башлана. Уҡытыусыларҙың педагогик оҫталығын күтәреү, алдынғы тәжрибәне өйрәнеү, дөйөмләштереү һәм пропагандалау өсөн республиканы, мәктәптәрҙе, педагогик коллективтарҙы яҡшы белеү талап ителә. Роберт Мөтиғулла улының көндәлек эшенә РСФСР Педагогия йәмғиәтенең Башҡортостан бүлеге рәйесе вазифаһы өҫтәлә. Тапшырылған бурысты үтәүгә намыҫлы ҡарау, үҙен яуаплы тойоу уға был эштәрҙе уңышлы башҡарырға ярҙам итә.

Башҡортостан өлкә партия ойошмаһында бер аҙ эшләгәс, Роберт Мөтиғулла улы Арыҫлановты Күгәрсен район Советы башҡарма комитеты рәйесе итеп һайлайҙар. Ул эшләй башлаған 1975 йыл бик ҡоролоҡло килә. Ауыл эшсәндәренең, етәксе кадрҙарының ныҡышмалы, тырыш хеҙмәте, уларға оҫта етәкселек итеү ауыл хужалығы культураларынан яҡшы уңыш үҫтереп алырға, мал һанын үҙ кимәлендә һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Был хеҙмәте өсөн Р.М.Арыҫланов «Почет Билдәһе» ордены менән бүләкләнә.

Педагог булараҡ, башҡарма комитет рәйесе районда халыҡ мәғарифын, мәҙәниәтте үҫтереүгә, төҙөлөш эштәренә ҙур иғтибар бирә. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ике мәктәп, китапхана, балалар баҡсаһы өсөн яңы биналар һалына. Әммә ул бында башлап ебәргән эштәренең тамамланыуын күрә алмай – Р.М.Арыҫлановты яңы эшкә тәғәйенләйҙәр.

1978 йылдың мартында Роберт Мөтиғулла улы Арыҫланов Башҡортостан халыҡ мәғарифы министры урынбаҫары вазифаһын башҡарыуға тотона. Уға кадрҙар мәсьәләһе, балалар йорттарында,

мәктәп-интернаттарҙа балаларҙы уҡытыу һәм тәрбиәләү эштәре, уҡытыусыларҙы аттестациялау мәсьәләләрен хәл итеү йөкмәтелә. Былардан тыш, ул туғыҙ педагогия училищеһы эшенә етәкселек итә, өс педагогия институты менән даими бәйләнеш тота.

Мәктәптәрҙе һәм башҡа балалар ойошмаларын квалификациялы педагогик кадрҙар менән тәьмин итеү түбән кимәлдә ине әле. Гуманитар һәм тәбиғи-математика предметтары уҡытыусылары араһында IV – X синыфтарҙа эшләгән юғары белемле белгестәр тик 78 процент, ауыл мәктәптәрендә – 68, мәктәпкәсә ойошмаларҙа 40 процент тәшкил итә.

Рәсәй Халыҡ мәғарифы министрлығы һәм өлкә партия ойошмаһы 1984/85 уҡыу йылына урта мәктәптәрҙе юғары белемле уҡытыусылар менән тулыһынса тәьмин итеү бурысын ҡуя. Роберт Мөтиғулла улы был ваҡытта мөһим мәсьәләне хәл итеү өҫтөндә эшләй. Мәсьәләне уңышлы хәл итеү өсөн бөтәһенән элек уҡытыусыларҙы аттестациялау файҙаланыла. 1978 – 1980 йылдарҙа ғына аттестация һөҙөмтәһендә 400-ҙән ашыу уҡытыусы тәрбиәсе эшенә күсерелә, йәнә 400-ҙән күберәк кеше, педагогик белеме булмау сәбәпле, уҡытыу-тәрбиә эшенән үҙ теләге менән китә. Мәктәптәрҙе квалификациялы кадрҙар менән тулыландырыуҙы яҡшыртыу өсөн, педагогия уҡыу йорттарында уларҙы әҙерләү структураһын үҙгәртергә, эште яңыса ойошторорға кәрәк ине. Халыҡ мәғарифы министры урынбаҫары Р.М.Арыҫлановтың әүҙем ҡатнашлығында кадрҙар әҙерләүҙә ҙур ғына үҙгәрештәр була: Өфөлә, Кушнаренкола, Нефтекамала педагогия училищелары асыла (хәҙер улар 12-гә етә), Башҡорт дәүләт педагогия институтында башланғыс белем биреү факультеты асыла (башҡорт, татар, урыҫ бүлектәре), мәктәпкәсә тәрбиә (башҡорт, татар, урыҫ бүлектәре), физик тәрбиә, тарих-инглиз теле факультеттары, Стәрлетамаҡ педагогия институтында башланғыс уҡытыу (башҡорт, урыҫ бүлектәре), тарих һәм педагогика факультеттары, башланғыс уҡытыу факультетында башланғыс синыф һәм музыка уҡытыусыһы бүлеге, Бөрө педагогия институтында мәктәпкәсә тәрбиә, биология һәм физкультура факультеттары, Башҡорт дәүләт университетында филология факультетының башҡорт бүлеге, Күмертау һәм Сибай педагогия училищеларында мәктәпкәсә тәрбиә бүлектәре эшләй башланы. 1990 йылда Сибай педагогия училищеһы базаһында башланғыс синыфтар уҡытыусылары һәм мәктәпкәсә балалар ойошмалары белгестәре әҙерләү факультеты асылды.

Был сараларҙы ғәмәлгә ашырыу мәктәптәрҙе һәм башҡа балалар ойошмаларын тейешле белеме булған белгестәр менән тәьмин итеүҙе байтаҡ яҡшыртыуға мөмкинлек бирә. Бында халыҡ мәғари-

фы министры урынбаҫары Р.М.Арыҫлановтың хеҙмәте айырыуса ҙур. Был хеҙмәте өсөн ул 1986 йылда Халыҡтар дуҫлығы ордены менән бүләкләнә.

1990 йылда Р.М.Арыҫланов Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтының Өфө филиалы мөдире итеп күсерелә, шунан институт директорының урынбаҫары итеп тәғәйенләнә.

1992 – 1994 йылдарҙа институт коллективы көсөргәнешле эштәр башҡара. Республикала ул белем биреү һәм ғилми-методика үҙәгенә әйләнә. Алдынғы уҡытыусыларҙың тәжрибәһен таратыу, педагогик коллективтарҙы методик әҙәбиәт менән тәьмин итеү эшендә Роберт Мөтиғулла улы әүҙемлек һәм өлгөргәнлек күрһәтә. Уның тынғыһыҙ, уҡытыусыларға файҙалы хеҙмәте тейешенсә баһалана. 1994 йылдың апрелендә уға Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре тигән маҡтаулы исем бирелә, уның Маҡтау грамоталары ла байтаҡ.

1997 йылдың декабрендә Р.М.Арыҫланов Башҡортостан энциклопедияһы ғилми нәшриәтенең география һәм геология редакцияһы мөдире булып эшкә урынлаша. Бында ла намыҫлы хеҙмәт өлгөләре күрһәткән педагог фиҙакәрлек, эшкә бирелгәнлек сифаттары менән айырылып тора.

## ФАЙЗРАХМАН ҺИБӘТУЛЛА улы БАҠАЕВ

*(1905 – 1984)*



Оло быуын уҡытыусылары һәм уларҙың уҡыусылары Файзрахман Һибәтулла улы Баҡаевты яңы мәктәпкә нигеҙ һалыусыларҙың береһе, талантлы педагог, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы тип белә. Ул мәктәп уҡытыусыһы, педагогия училищеһы директоры, иң мөһиме – күптәрҙең хәтерендә ҡалған һәйбәт етәксе булды.

Файзрахман Һибәтулла улы Баҡаев 1905 йылдың 1 ғинуарында элекке Ырымбур губернаһының Ҡыпсаҡ олоҫо Ғабдрафиҡ ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Уның атаһы заманына күрә уҡымышлы ғына кеше була, уҡытыусы эшен барыһынан өҫтөн күреп, 1914 йылдан 1919 йылға тиклем балалар уҡыта. Кескәй Файзрахман башланғыс белемде атаһынан ала, яңы ысул мәктәбендә уҡый. Улдарын уҡытыусы итергә теләп, ата-әсәһе уны 1918 йылда Соран йылғаһы буйындағы Әхмәр ауылында асылған ике айлыҡ уҡытыусылар курсына ебәрә. Шундай уҡ курс ҡыҙҙар өсөн Мерәҫ ауылында ла асыла.

1919 йылда Туҡ йылғаһы буйындағы Ҙур Юлдаш ауылында икенсе баҫҡыс мәктәп эш башлай. Файзрахман Баҡаев менән Ғабдулла Амантаев шул мәктәпкә уҡырға бара. Уларҙы V синыфҡа ҡабул итәләр. Туҡсоран кантон башҡарма комитеты хәрби комиссары Дауыт Юлтый йыш ҡына был мәктәптә әңгәмәләр үткәрә, үҙенең шиғырҙарын уҡый.

Ауылда туғыҙ кешенән торған комсомол ячейкаһы ойошторола. Йәштәр халыҡ араһында мәҙәни-ағартыу эшен башлап ебәрә. Был ваҡытта Ырымбур өлкәһендә һәр төрлө бандалар күбәйеп китә. Улар халыҡты талай, көрәшселәрҙе эҙәрләй. Уларға ҡаршы көрәштә Файзрахман Баҡаев та әүҙем ҡатнаша.

1921 йылдың декабрендә Файзрахман Баҡаевты Туҡсоран кантон халыҡ мәғарифы бүлегенә саҡырып алалар. Ырымбурҙа башҡорт педагогия техникумы асыла, шунда уҡырға ебәреү өсөн уның белемен һынап ҡарайҙар ҙа уҡырға тәҡдим итәләр. Барлығы дүрт кеше һайлап алына. 1921 йылдың декабрь урталарында дүрт үҫмер – Файзрахман Баҡаев, Ғабдулла Амантаев, Харис Айлуҡасов, Сәлих Хантимеров Ырымбурға юллана. Ҡайҙа ҡарама – үлектәр тәгәрәп ята, уларҙы ерләп өлгөрә алмайҙар. Аслыҡтан ҡасып, Ташкент яғына китеп барыусылар шулай юлда вафат булалар.

Педагогия техникумында уҡып китерлек кешеләр етмәү сәбәпле, тәүҙә VII синыф кимәлендә белем биреү өсөн I һәм II әҙерлек синыфтары асыла. Файзрахман Баҡаевты иптәштәре менән II әҙерлек синыфына ҡабул итәләр. Тиҙҙән Сәғит Агишев та килеп ҡушыла.

Техникумда Файзрахман Баҡаев бик тырышып уҡый. Бер заман техникумға Шәһит Хоҙайбирҙин килеп, йәштәрҙе белем алырға илһамландыра, ялҡынлы телмәр һөйләй. Талиптар халыҡты мәҙәни-ағартыу эшенә йәлеп итә, спектаклдәр әҙерләп күрһәтә.

1926 йылда педагогия техникумы беренсе сығарылыш үткәрә. Тантаналы кисәлә 13 кешегә уҡытыусы танытмаһы бирелә. Күптәр

Йылайыр кантонына эшкә ебәрелә. Файзрахман Баҡаев уҡытыу эшен 1926 йылда Ҡыуандыҡ эргәһендәге Мәмбәтәй тигән бәләкәй генә ауылда башлап ебәрә. 1927 йылда уны Таналыҡ-Баймаҡ олоҫоноң Беренсе Этҡол терәк мәктәбенә уҡытыусы итеп күсерәләр. Унда бер йыл эшләгәндән һуң, уҡытыусы Темәс беренсе терәк мәктәбенә күсереләә. Был мәктәптең директоры Абдрахман Бикмөхәмәт улы Сәғитов коллективты алдынғылар сафына сығарыу өсөн бөтә көсөн бирә. Мәктәп яҡшы ғына йыһазландырыла: малайҙар өсөн ағас әйберҙәр эшләү оҫтаханаһы, емеш-еләк баҡсаһы булдырыла, ҡыҙ балалар өсөн тегеү-сигеү түңәрәге ойоштора.

Темәс мәктәбендә 1932 йылға тиклем эшләгәс, Файзрахман Баҡаев Баймаҡ ҡала сәнәғәт училищеһының Темәс филиалы мөдире итеп билдәләнә. Бер аҙҙан филиал Баймаҡҡа күсереләә һәм унда Ф.Һ. Баҡаев бер йыл самаһы эшләй. Ул йәнә Темәскә ҡайтып, ауыл йәштәре мәктәбендә, тулы булмаған урта мәктәптә уҡыта, директор булып эшләй. 1938 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетын тамамлай.

1938 йылда Ф.Һ.Баҡаевты Темәс педагогия училищеһына уҡытыусы итеп саҡыралар. Ул бөтә күңелен биреп эшләй, тәжрибә туплай. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тәүҙә алты ай хәрби-сәйәси училищела уҡып, лейтенант булып фронтҡа китә. Рота командирының сәйәси эш буйынса урынбаҫары, артабан уҡсылар ротаһы командиры Файзрахман Баҡаев үлемесле алыштарҙа ҡатнаша. 1944 йылдың авгусында ҡаты яралана, госпиталдә дауаланып төҙәлгәс, Темәс педагогия училищеһына әйләнеп ҡайта, тел һәм әҙәбиәт, тарих уҡыта. Башта директор урынбаҫары, шунан директор вазифаларын башҡара. Был йылдарҙа Ф.Һ.Баҡаев халыҡ мәғарифы системаһына һуғыш килтергән ауырлыҡтарҙы еңеп сығыуҙа, уҡытыу-тәрбиә эшен ойоштороуҙа педагогик оҫталыҡ, өлгөргәнлек күрһәтә.

1956 йылда Файзрахман Һибәтулла улы Баҡаев Темәс мәктәп-интернатына уҡытыусы итеп күсереләә, 1964 йылда урта мәктәпкә уҡытыусы итеп билдәләнә һәм, халыҡ мәғарифы системаһында 45 йыл эшләгәндән һуң, 1971 йылда хаҡлы ялға сыға.

Файзрахман Һибәтулла улы Баҡаевтың уңышлы педагогик һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге юғары баһалана. 1948 йылда уға Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, 1952 йылда Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исемдәр биреләә. Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн ул II дәрәжә Ватан һуғышы ордены, күп миҙалдар һәм Маҡтау ҡағыҙҙары менән бүләкләнә.

# СУЛПАН АБДУЛХАҠ улы ҒАЙСИН

*(1935)*



Сулпан Абдулхаҡ улы Ғайсин 1935 йылдың 26 майында Башҡортостандың Күгәрсен районы Сәйетҡол ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған. Атаһы Абдулхаҡ Йосоп улы Бөйөк Ватан һуғышында алған яраһынан вафат була, әсәһе Гөлсөм Барлыбай ҡыҙы колхозда, балалар йортонда эшләй, 48 йәшендә донъя ҡуя, берҙән-бер балаһын етем ҡалдыра. Бәләкәй Сулпанға кесе йәштән ауыр тормош михнәттәрен күп татырға тура килә. Ул балалар йортонда тәрбиәләнә. Ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағандан һуң, район үҙәге Моραҡҡа йәйәүләп, бәхет эҙләп сығып китә. Унда 1953 йылда башҡорт урта мәктәбен уңышлы бөтөрөп сыға. Свердлов исемендәге колхозда бер йыл эшләй, шунан армия хеҙмәтенә алына. Егет бурысын намыҫлы үтәп ҡайтҡас, Сулпан Ғайсин 1958 йылда тыуған ауылы Сәйетҡол балалар йорто пионер вожатыйы итеп тәғәйенләнә. Артабан һигеҙ йыллыҡ мәктәпкә урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, тиҙҙән мәктәп директорының уҡытыу-тәрбиә эше буйынса урынбаҫары итеп күсерелә. 1962 йылда Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының ситтән тороп уҡыу бүлеген тамамлап, урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы хоҡуғы биргән диплом ала.

1969 йылдың ноябрендә һәләтле йәш белгес Сулпан Ғайсин Бикбулат һигеҙ йыллыҡ мәктәбе директоры итеп тәғәйенләнә. Тәүҙән үк уҡытыусылар коллективы менән ижади эш йәйелдереп ебәрә, мәктәптең алдынғылар сафына сығыуында байтаҡ хеҙмәт күрһәтеп өлгөрә. Оҫта етәксе булып танылған Сулпан Абдулхаҡ улы Ғайсинды 1971 йылда яңы ғына ойошторолған «Исем» совхозы партия комитеты сәркәтибе итеп һайлайҙар. Был эштә ул ҡайнар йәшлек дәртен, һәммә көсөн ауыл эшсәндәре һәм яңы хужалыҡ алдында торған ҙур бурыстарҙы үтәүгә йүнәлтә. Партия хеҙмәткәре йәштәрҙе

һәм үҫмерҙәрҙе оло быуынға, хеҙмәт һәм һуғыш ветерандарына ихтирам рухында тәрбиәләүгә, ауыл эшсәндәренең хеҙмәт һөйөү, әхлаҡ сифаттарын күтәреүгә ҙур иғтибар бирә. Быға уның проекты буйынса эшләнгән «Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар» мемориалы миҫал була ала. Ул мәктәп һәм совхоз әһәмиәтендәге тәрбиә саралары үткәреү урынына әйләнә.

1977 йылдың сентябрендә Сулпан Абдулхаҡ улы Ғайсин партияның Күгәрсен район комитеты сәркәтибе итеп һайлана. Бында ул барлыҡ энергияһын биреп эшкә сума, фиҙакәр хеҙмәт өлгөләре күрһәтә. Нимәгә тотонһа ла, уның ҡулынан килә, һәйбәт башланғыстарға нигеҙ һала.

Тиҙҙән Сулпан Абдулхаҡ улы Ғайсин оҙаҡ уйлап йөрөгән, йөрәгенә яҡын педагогия эшенә ҡайта – 1985 йылдың ноябрендә Күгәрсен район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. Был вазифаға күсергәндә уның ойоштороу һәләтен, кешеләр менән эшләй белеү, ысын педагог булыу, әҙәп, кешелеклелек һыҙаттарын иҫәпкә алыуҙары бәхәсһеҙ. Был үтә лә яуаплы һәм ҡатмарлы вазифаны башҡарыу дәүерендә ул мәктәптәрҙең һәм балалар ойошмаларының уҡытыу-матди базаһын нығытыу буйынса өлгәшелгәнде артабан дауам итергә тырыша, уларҙың эшенә яңы йүнәлештәр бирә.

Районды, уның етәкселәрен, хеҙмәт коллективтарын яҡшы белеү Сулпан Абдулхаҡ улына эшендә ныҡ ярҙам итә. Ул ун йылдан ашыу халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире булған йылдарҙа Күгәрсен районында 41 дөйөм белем биреү мәктәбе, ете балалар баҡсаһы һәм башҡа ойошмалар өсөн яңы биналар, уҡытыусылар өсөн 33 фатир төҙөлә.

Мәктәптәрҙең матди базаһын яҡшыртыуҙа ла, уҡытыусыларҙың ижади һәләтен күтәреүҙә лә бүлек мөдире Сулпан Абдулхаҡ улының хеҙмәте ҙур. Барлыҡ урта һәм һигеҙ йыллыҡ мәктәптәрҙә методик эш, алдынғы тәжрибәне өйрәнеү һәм ғәмәлдә файҙаланыу, уҡыусы балаларҙың клуб, секция, түңәрәк эштәре гөжләп тора. Һәр мәктәптә ижад ҡомары һиҙелә, алдынғы уҡытыусылар ныҡ арта.

1996 йылда С.А.Ғайсин үҙенең һорауы буйынса Зәйнәб Биишева исемендәге Мораҡ урта мәктәбе директоры итеп күсерелә. Талапсан, тырыш педагог коллектив ағзаларының эшен тиҙ күрә, таный, баһалай белә, шуға ла уларҙың оло һөйөүен ҡаҙана. Уны һәр ерҙә ярҙамсы итеп күрәләр, ысын етәксегә хас хәстәрлеген тоялар.

Халыҡ мәғарифы эшендә күрһәткән уңыштары өсөн Сулпан Абдулхаҡ улы Ғайсинға 1991 йылда Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исем бирелә. Ул байтаҡ миҙал һәм

Маҡтау грамоталарына лайыҡ була. Ҡайһы ауылға, йәмәғәт урындарына барһа ла, уны таныйҙар. Халыҡ менән ихлас булғанға, һәр кешене яҡын күреп, ололар менән дә, йәштәр менән дә тиҙ аралашыу серҙәрен белеп эш иткәнгә, уларҙың ҙур ихтирамын яулай педагог.

# ИСМӘҒИЛ ИБРАҺИМ улы ҒӨБӘЙҘУЛЛИН

*(1924)*



Башҡортостан Республикаһы Халыҡ мәғарифы министрлығының оло эштәр башҡарған берҙәм аппаратында министр урынбаҫары Исмәғил Ибраһим улы Ғөбәйҙуллин тынғыһыҙ, әммә һөҙөмтәле эшмәкәрлеге, мәктәптәр, педагогия училищелары файҙаһына ныҡышмалы хеҙмәте менән сағыу айырылып тора. Илебеҙ тормошоноң торғонлоҡ йылдары тип нарыҡланған көсөргәнешле дәүерендә ул мәғарифты үҫтереүгә күп көс һала.

Исмәғил Ибраһим улы Ғөбәйҙуллин 1924 йылдың 16 июнендә Башҡортостан Республикаһының Ейәнсура районы Байыш ауылында донъяға килә. Ауылда ете йыллыҡ мәктәпте, 1941 йылда Абзан урта мәктәбен тамамлай. Яңы уҡыу йылы алдынан уҡытыусыларҙың күбеһе Бөйөк Ватан һуғышына алына. Уларға алмаш әҙерләү маҡсатында Исмәғил Ғөбәйҙуллинды Йылайыр педагогия училищеһына уҡырға ебәрәләр. Унда ай ярым уҡып ҡайтҡас, И.И.Ғөбәйҙуллин үҙ ауылы мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡыта, физкультура дәрестәре алып бара.

Декабрь айында И.И.Ғөбәйҙуллин Тыуған илде һаҡлаусылар сафына китә, фашист илбаҫарҙары менән иңгә-иң килеп, айбарлы алыша. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм миҙалдар менән бүләкләнә.

И.И.Ғөбәйҙуллин тыныс хеҙмәтте һағынып ҡайта. Ул тәүҙә Байыш мәктәбендә уҡытыусы, шунан директор булып эшләй, педа-

гогик хеҙмәт тәжрибәһе туплай. Тиҙҙән ул Мәскәүгә юғары партия мәктәбенә уҡырға ебәрелә. Уны уңышлы бөтөрөп ҡайтҡас, Исмәғил Ибраһим улы Ғөбәйҙуллин партияның Архангель район комитетында бүлек мөдире, сәркәтип булып оҙаҡ йылдар эшләй. Архангель районы Ҡырмыҫҡалы районына ҡушылып эреләтелгәндән һуң, ул партия өлкә комитетының идеология бүлеге мөдире урынбаҫары вазифаһын башҡара.

1964 йылдың ноябрендә Исмәғил Ибраһим улы Ғөбәйҙуллин республика халыҡ мәғарифы министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. Был вазифаны ул ун дүрт йылға яҡын башҡара, Башҡортостан мәғариф хеҙмәткәрҙәренең абруйлы етәксеһенә әйләнә. Бында И.И.Ғөбәйҙуллиндың ойоштороу, етәкселек итеү һәләте тулыһынса асыла. Уның киң планда эшләй белеүе, үҙаллылыҡ һәм инициатива күрһәтеүе, башҡаларға талапсанлығы һәм башҡа күркәм һыҙаттары мәғарифты үҫтерергә, уның барлыҡ системаһын камиллаштырырға булышлыҡ итә.

Исмәғил Ибраһим улы Ғөбәйҙуллин тәүҙә мәктәптәрҙе тейешле белеме булған уҡытыусылар менән тәьмин итеү мәсьәләһен ентекләп өйрәнә лә Стәрлетамаҡ, Бөрө педагогия институттарына, Башҡорт дәүләт университетына студенттар ҡабул итеүҙе арттырыу, республикала өсөнсө педагогия институты асыу проблемаларын юғары даирәләр алдына ҡәтғи ҡуя, уны хәл итеүҙең мөһимлеген асыҡ миҫалдарҙа күрһәтә. Бер үк ваҡытта министр урынбаҫары Рәсәй Федерацияһы Халыҡ мәғарифы министрлығынан илебеҙҙең юғары уҡыу йорттарын тамамлаусыларҙы Башҡортостанға эшкә ебәреүҙәрен талап итә. Шуның һөҙәмтәһендә 1968 йылда педагогия уҡыу йорттарын тамамлаған 132 белгес, шул иҫәптән 65 математик һәм физик, республика мәктәптәренә оҙатыла. Артабан йыл һайын 400 һәм унан да күберәк уҡытыусы Башҡортостанға килә. Республиканың үҙендә белгестәр әҙерләү йылдан-йыл арта. Сибай педагогия училищеһында хеҙмәт уҡытыусылары әҙерләү бүлеге, Күмертау ҡалаһында физкультура уҡытыусылары әҙерләүсе педагогия училищеһы асыла.

И.И.Ғөбәйҙуллиндың башланғысында 1966 йылдан ауыл мәктәптәре өсөн уҡытыусылар әҙерләгән бер йыллыҡ педагогия синыфтары ойошторола. 1967 йылда, мәҫәлән, ауыл урта мәктәптәрен тамамлаған 540 кеше Өфө ҡалаһының алдынғы мәктәптәрендә шундай курстарҙа уҡый, математика, урыҫ теле һәм әҙәбиәте, сит ил телдәре уҡытыусылары сифатында ауылға эшкә ебәрелә.

Шундай сараларҙы ғәмәлгә ашырыу һөҙөмтәһендә, мәктәптәрҙе тейешенсә белемле уҡытыусылар менән тәьмин итеү мәсьәләһе, нигеҙҙә, хәл ителә. V – X синыфтарҙы юғары белемле уҡытыусылар

менән тәьмин итеү буйынса Башҡортостан Рәсәй Федерацияһы өлкәләре, республикалары һәм крайҙары араһында һуңғы бишәүҙән тәүге тиҫтә сафына күтәрелә. Башланғыс мәктәптәр педагогия училищелары тамамлаған уҡытыусылар менән тулыһынса тәьмин ителә, республика педагогия институттарын тамамлаусыларҙы хатта сит өлкәләргә эшкә ебәреү осраҡтары ла була.

Бер үк ваҡытта министр урынбаҫары И.И.Ғөбәйҙуллинға интернат тибындағы ойошмалар – балалар йорттары, мәктәп-интернаттар, махсус мәктәптәр эшенә етәкселек итеү ҙә йөкмәтелә. 60 – 70-се йылдарҙа уларҙа ҙур үҙгәрештәр ғәмәлгә ашырыла. Балалар йорттарында тәрбиәләнеүселәргә дөйөм урта белем белем буйынса ыңғай тәжрибә РСФСР Халыҡ мәғарифы министрлығы коллегияһында тыңлана һәм хуплауға лайыҡ була. Башҡортостан халыҡ мәғарифы министры урынбаҫары И.И.Ғөбәйҙуллинға коллегия исеменән рәхмәт белдерелә. Был уның тормошонда шатлыҡлы ваҡиға була. Хеҙмәттә яулаған уңыштары өсөн уға СССР мәғариф отличнигы, Рәсәй Федерацияһы халыҡ мәғарифы отличнигы тигән маҡтаулы исемдәр бирелә.

1978 йылдың мартынан И.И.Ғөбәйҙуллин Өфө ҡалаһының 1-се педагогия училищеһы директоры булып эшләй. Был вазифаға ла ул йәштәргә хас дәрт, етеҙлек һәм илһам менән тотона. «Көн уҙһын, сабата туҙһын» тип түгел, ә башҡарған эшең файҙалы, кешеләргә һәм йәмғиәткә кәрәкле булһын, тип тырыша ул. Яңы директор иң тәүҙә училищеның уҡытыу-матди базаһын нығытыу тураһында ҙур хәстәрлек күрә. Унда яҡшы йыһазландырылған, техник саралар һәм күргәҙмә материалдар менән тәьмин ителгән уҡытыу кабинеттары булдырыла, музыка ҡоралдары, мебель, ҡорамалдар һатып алына. Училищеның быға тиклем бер ҡасан да дөйөм ятағы булмай. И.И.Ғөбәйҙуллин баш ҡала властарын училище уҡыусылары өсөн 300 урынлыҡ дөйөм ятаҡ төҙөүгә күндерә. Был уның эшендә мөһим мәсьәләләрҙең береһен уңышлы хәл итеү була.

Училище директоры йәштәрҙе педагогик хеҙмәткә тулы әҙерлекле белгестәр итеп сығарыу өсөн уҡытыу-тәрбиә эшенең сифатын яҡшыртыуға ныҡлы иғтибар бирә, үҙе лә күп тир түгә, уҡытыусыларҙан да шуны талап итә. 1983 йылда Өфө ҡалаһының 1-се педагогия училищеһы Рәсәй педагогия училищелары араһында икенсе урынды яулаңы. Уҡытыусылар коллективы бүләктәргә лайыҡ булды, күптәр юғары исемдәр алды.

Исмәғил Ибраһим улы Ғөбәйҙуллин республикала мәғарифты үҫтереүгә, етәксе кадрҙар, уҡытыусылар әҙерләүгә лайыҡлы өлөш индерҙе. Уны ябай уҡытыусыларҙан алып етәкселәргә тиклем барыһы ла белә, ихтирам итә.

## АБДРАХМАН ӘБДРӘХИМ улы ҒӘЛЛӘМОВ

*(1926 – 1989)*



Абдрахман Әбдрәхим улы Ғәлләмов – башҡорт теле уҡытыу методикаһы буйынса бик күп ғилми-методик хеҙмәттәр һәм мәктәп дәреслектәре авторы, башҡорт теле уҡытыу методикаһын фән кимәленә күтәргән күренекле методист, педагогия фәндәре кандидаты, доцент, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Абдрахман Әбдрәхим улы Ғәлләмов 1926 йылдың 15 октябрендә Башҡортостандың Баймаҡ районы Күсәй ауылында тау эшсеһе ғаиләһендә тыуған. 1943 йылда Темәс педагогия училищеһын тамамлағас, ул К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына уҡырға инә. 1947 йылда уның башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлеген уңышлы бөтөрөп сыға.

Абдрахман Әбдрәхим улы Ғәлләмов хеҙмәт юлын 1947/48 уҡыу йылында Баймаҡ районы Сибай ҡасабаһының 1-се урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте, тарих уҡытыусыһы булып башлай, бер үк ваҡытта директорҙың башланғыс синыфтар буйынса урынбаҫары вазифаһын да башҡара. 1948 йылдың августында Белорет педагогия училищеһына эшкә күсерелә. Унда башҡорт теле, әҙәбиәте, матур яҙыу дәрестәре алып бара, студенттарҙың педагогик практикаһы менән етәкселек итә, күҙәтеүҙәр үткәрә, тәжрибәһен байыта.

1953 – 1957 йылдарҙа А.Ә.Ғәлләмов Сибай ҡалаһы мәктәптәрендә туған тел, әҙәбиәт, тарих, логика предметтарын уҡыта, Сибай ҡала халыҡ мәғарифы бүлеге инспекторы булып эшләй. Был йылдарҙа башланғыс синыф уҡытыусыларының методик берекмәһе етәксеһе А.Ә. Ғәлләмов бөтә педагогтарға ла төплө ярҙам күрһәтергә тырыша.

1958 йылдың ғинуарында Абдрахман Әбдрәхим улы Ғәлләмов Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтына эшкә алына, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса методист, туған телдәр һәм әҙәбиәттәр кабинеты мөдире булып эшләй. 1968 йылдың июнь айынан ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем А.Ә.Ғәллә-

мов Башҡорт дәүләт университетында доцент вазифаһын башҡара. Ул 1989 йылдың 19 февралендә 63-сө йәшендә вафат була.

Абдрахман Әбдрәхим улы Ғәләмовтың тормош юлы һәм педагогик эшмәкәрлеге башҡорт башланғыс мәктәбе, башҡортса уҡытыу тарихы һәм уның үҫеш баҫҡыстары менән туранан-тура бәйләнгән. Ул үҙе лә илебеҙҙә дөйөм башланғыс белем биреүҙе ғәмәлгә ашыра башлауҙың тәүге йылында мәктәпкә уҡыуға төшә. Тәүге баҫҡыс белемде уға Баймаҡ районының абруйлы уҡытыусылары Әсмә Баймырҙина, Мостафа Зәйнәғәбдинов, Ғәҙел Әҙеһәмовтар бирә. Теләс педагогия училищеһында Ә.Ғәлимов, С.Алсынбаев, Ә.Ниғмәтуллин, К.Ғәлимов, Г.Измайлова, З.Зөбәйеров кеүек юғары квалификациялы оҫта педагогтарҙың йоғонтоһонда төплө белемгә эйә була. Башҡорт дәүләт педагогия институтында З.Шакиров, Х.Зиннәтуллина, У.Хөсни, Н.Чижов, Х.Еникеев, Б.Мәғәсүмова, Б.Кипарисов кеүек күренекле ғалим-педагогтарҙың һабаҡтарын тыңлап, фәһем ала.

Абдрахман Ғәләмовҡа бигерәк тә башланғыс синыфтар буйынса методист У.Хөснөтдиновтың (У.Хөсни, Х.Усман) йоғонтоһо көслө була. Белорет педагогия училищеһының алдынғы уҡытыусылары ла йәш белгескә тейешенсә ярҙам күрһәтә. Был йылдарҙа Абдрахман Ғәләмов тәү башлап дөрөҫ уҡырға, матур яҙырға өйрәтеү, туған телдең грамматик төҙөлөшө, синыфта һәм синыфтан тыш уҡыу, телмәр үҫтереү мәсьәләләре өҫтөндә ныҡышмалы эшләй. Уның туған тел һәм әҙәбиәт методисы булып китеүендә һәм үҙ аллы ғилми хеҙмәттәр яҙа башлауында училищела уҡытыуҙың әһәмиәте айырыуса ҙур була – уны эҙләнергә һәм сағыштырыуҙар яһарға өйрәтә.

Абдрахман Ғәләмов башҡорт грамотаһына өйрәтеү проблемаһы өҫтөндә терәк ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара. Ул – башҡорт «Әлифба»һы, грамотаға өйрәтеү тарихы буйынса ғилми хеҙмәттәр, методик әсбаптар авторы. 1967 йылда А.Ә.Ғәләмов атаҡлы башҡорт ғалимы, профессор Ж.Ғ.Кейекбаевтың ғилми етәкселегендә грамотаға өйрәтеү проблемаһы буйынса кандидатлыҡ диссертацияһын уңышлы яҡлай.

Белорет педагогия училищеһында, уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтында эшләгән осорҙа Абдрахман Ғәләмов алты йәшлек балалар өсөн дә «Әлифба», башҡа уҡыу әсбаптары, методик ҡулланмалар төҙөй.

А.Ә.Ғәләмовтың «Әлифба»һы – ғалимдың төп ғилми-ғәмәли эш һөҙөмтәһе. Уның исеме башҡортса «Әлифба», тәүге уҡыу китаптары яҙған В.В.Катаринский, А.Г.Бессонов, З.Н.Айыуханов кеүек әлифбасылар менән бер рәттә тора. Күренекле методистың «Әлифба»һы 1962 йылдан бирле йәш быуынды грамотаға тиҙ һәм ҡыҫҡа ваҡыт эсендә өйрәтергә ярҙам итә. Был китап төрлө күргәҙмәләрҙә ҡатнашып, дипломдар һәм дәртләндереү бүләктәренә лайыҡ була.

Мәғариф өлкәһендә һәм ғилми-тикшеренеү эштәрендә өлгәшкән уңыштары өсөн Абдрахман Әбдрәхим улы Ғәлләмов Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исемдәргә лайыҡ була, 1975 йылда К.Д.Ушинский миҙалы менән бүләкләнә.

Миңә, «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Аманат» журналдары хеҙмәткәренә, Абдрахман Ғәлләмов менән йыш аралашырға, бергәләп мәҡәләләр яҙырға тура килде. Ул иҫ киткес белемле, киң эрудициялы, саф күңелле шәхес булыуы менән ысын мәғәнәһендә оло педагог, бик алсаҡ, мөләйем, сабыр холоҡло кеше ине.

## СӘЛИХЙӘН ХАФИЗ улы ДӘҮЛӘТБИРҘИН

*(1927)*



Бөрйән төйәгендә Сәлихйән Хафиз улы Дәүләтбирҙинды абруйлы мәғариф хеҙмәткәре, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны, ҡәләм оҫтаһы тип беләләр. Йәш быуынды уҡытыу һәм тәрбиәләүҙә ул үҙен педагогик хеҙмәт оҫтаһы итеп күрһәтте.

Арҙаҡлы ил ағаһы һәм күренекле педагог Сәлихйән Хафиз улы Дәүләтбирҙин 1927 йылдың 26 ғинуарында Бөрйән районының Байназар ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Атаһы үлгәс, ун өс көнлөк кенә сабыйҙы әсә үҙ ауылына – Тимергә алып ҡайта. 1933 – 1937 йылдарҙа ул Тимер башланғыс мәктәбендә уҡый, 1937 – 1940 йылдарҙа Байназар тулы булмаған урта мәктәбендә белем ала.

1940 йылда Иҫке Собханғол урта мәктәбенә уҡырға ингән малай 1942 йылдың башында һуғыш ауырлыҡтары арҡаһында белем алыуҙы ҡалдырып торорға мәжбүр була. Зирәк үҫмерҙе 1942 йылдың мартында Аралбай башланғыс мәктәбенә уҡытыусы итеп алалар. Шул уҡ йылдың сентябрендә Сәлихйән Дәүләтбирҙин Байназар тулы булмаған урта мәктәбенең башланғыс синыфтар уҡытыусыһы итеп күсерелә.

1944 йылдың ноябрендә йәш егет армия сафына саҡырыла. 1945 йылдың 8 августынан 2 сентябренә тиклем ул Байҡал аръяғы фронтында самурайҙар менән һуғышта ҡатнаша. Японияға ҡаршы һуғыш хәрәкәттәрендәге ҡыйыулығы өсөн II дәрәжә Ватан һуғышы ордены, «Батырлыҡ өсөн», «Германияны еңгән өсөн», «Японияны еңгән өсөн» миҙалдары менән бүләкләнә. 1950 йылдың ғинуарына тиклем орудие командиры булып хеҙмәт итә.

Тыуған яғына ҡайтҡас, С.Х.Дәүләтбирҙин 1950 йылдың ғинуарынан ноябренә тиклем Байназар ете йыллыҡ мәктәбендә уҡыта. 1950 йыл аҙағынан 1953 йылдың ноябренә ҡәҙәр ул ВЛКСМ-дың Бөрйән райкомы сәркәтибе була, 1953 – 1954 йылдарҙа КПСС-тың район комитеты инструкторы, 1954 – 1955 йылдарҙа Байназар балалар йорто директоры булып эшләй. Балалар йорто ябылғас, һәләтле йәш ойоштороусыны Бөрйән район Советы башҡарма комитетының мәҙәниәт бүлеге мөдире итеп раҫлайҙар.

1957 йылдың августында Сәлихйән Хафиз улы үҙ теләге менән мәғариф системаһына күсеп, Килдеғол башланғыс мәктәбенә директор һәм уҡытыусы итеп тәғәйенләнә.

1961 йылдың июлендә Тимер башланғыс мәктәбенә директор һәм уҡытыусы итеп күсерелгәндән һуң, өс йыл эшләгәс, Белорет районының Бөрйән төбәге буйынса халыҡ мәғарифы бүлеге инспекторы итеп саҡырыла. 1965 йылдан 1969 йылға тиклем Сәлихйән Хафиз улы Бөрйән районында инспектор була. Ул замандарҙа партия тынғыһыҙ коммунистарын, эште яйға һалып, уңыш яулатыр өсөн, артта ҡалған урындарға ебәрә ине. Шуға ла С.Дәүләтбирҙинға «күсмә тормош»та йәшәп, күп кенә ауыл мәктәптәрен аяҡҡа баҫтырырға тура килә. 1969 йылдың мартында тәжрибәле етәксене Иҫке Монасип һигеҙ йыллыҡ мәктәбенә директор итеп ҡуялар. 1973 йылдан был уҡыу йорто урта мәктәпкә әүерелә.

Сәлихйән Хафиз улы үҙе эшләгән һәр урында берҙәм һәм эшлекле коллектив туплай, мәктәптең матди базаһын нығыта. Иҫке Монасип ауылында ҡыҫҡа ваҡыт эсендә мәктәп бинаһына төкәтмә төҙөлә. Интернат асыла, уҡытыусылар фатир менән тәьмин ителә.

Директор үҙенең методик һәм педагогик белемен күтәреү өҫтөндә ныҡышмалы эшләй, коллектив ағзаларынан да шуны талап итә. Районда беренселәрҙән булып, кабинет системаһына күсәләр, ауыл хужалығы техникаһын өйрәнеүҙе ойошторалар. Уҡыусылар мәктәпте тамамлағанда аттестат менән бергә ауыл механизаторы танытмаһы ла алып сыға.

Эшһөйәр уҡытыусылар коллективы уҡыусыларҙың тулы өлгәшенә ирешә. Мәктәпте тамамлаусыларҙың яртыһы тиерлек юғары һәм махсус урта белем биреү уҡыу йорттарында уҡып, һөнәр алып, халыҡ хужалығының төрлө тармаҡтарында намыҫлы хеҙмәт итә.

С.Дәүләтбирҙин үҙенең дә дәрестәрен юғары кимәлдә алып бара. Шуғалыр, моғайын, мауыҡтырғыс, фәһемле дәрестәрҙән тәрән белем алған уҡыусыларының күбеһе тарихсы һөнәрен һайлай.

Ситтән тороп уҡып, тәүҙә Темәс педучилищеһын, аҙаҡ Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетын тамамлаған Сәлих Хафиз улы үҙ балаларына ла юғары белем алырға, файҙалы һөнәр һайларға ярҙам итә.

1982 йылда С.Дәүләтбирҙинға Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы исеме бирелде. Уға тиклем мәғариф ветераны миҙал һәм Маҡтау грамоталары менән бүләкләнде.

Сәлихйән Хафиз улы 1987 йылдан алып хаҡлы ялда. Ул әле лә йәмәғәт эшендә әүҙем ҡатнаша: район ветерандар советы президиумы ағзаһы, ауыл хакимиәте ветерандар советы рәйесе булып тора.

Абруйлы якташын район халҡы бик ихтирам итә. Уны мәктәптәге кисәләргә, Батырлыҡ дәрестәренә һәр ваҡыт саҡырып торалар. Сәлихйән Хафиз улы йәштәрҙә әхлаҡ, илһөйәрлек сифаттары тәрбиәләүгә көсөн йәлләмәй. Уның район, республика матбуғатында әленән-әле баҫылып торған мәҡәләләре көнүҙәклеге менән айырылып тора һәм бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Һуңғы йылдарҙа С.Дәүләтбирҙин ижад эше менән мауыға – үҙ заманы, замандаштары тураһында ҡыҙыҡлы ла, фәһемле лә әҫәр яҙа. Уның киләсәк быуынға әйтер һүҙҙәре күп әле.

## САЖИДӘ ХӘМӘТЙӘР ҡыҙы ЗАЙЛАЛОВА

*(1919)*



Сажидә Хәмәтйәр ҡыҙы Зайлалова – республикала киң билдәле, абруйлы педагог, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, туған әҙәбиәт дәреслектәре, уларға методик ҡулланмалар, әҙәбиәт уҡытыу һәм уҡыусыларҙы тәрбиәләү тураһындағы ғилми хеҙмәттәрҙең авторы.

Сажидә Хәмәтйәр ҡыҙы Зайлалова 1919 йылдың 1 ноябрендә Башҡортостандың Благовар районы Баштирмә ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ауылында башланғыс мәктәпте уҡышлы тамамлағас, ул Шишмә районының Сәфәр ауылында Башҡорт педагогия техникумының әҙерлек курсында уҡый. 1932 йылда был курс Дәүләкән педагогия техникумына ҡушыла. Сажидә Зайлалова Дәүләкән педагогия техникумында өс йыл уҡый һәм уны 1936 йылда бөтөрөп сыға. Шулай итеп, 16 йәшлек ҡыҙ Шишмә районының Ябалаҡлы ете йыллыҡ мәктәбендә башланғыс синыфтар уҡытыусыһы булып эш башлай.

Тиҙҙән тырыш уҡытыусы С.Х.Зайлалова уҡытыу-тәрбиә эшендә алдынғы ысул һәм алымдарҙы киң файҙаланып, ижади эшләүсе новатор-педагог булып танылa. 1937 йылда ул Мәскәүҙә Рәсәй Федерацияһы отличник-уҡытыусылары кәңәшмәһендә ҡатнаша. 1939 йылда «Хеҙмәт батырлығы өсөн» миҙалы менән бүләкләнә.

Эшкә намыҫлы ҡарауын һәм педагогик коллективтың хеҙмәтен ижади ойоштора белеүен иҫәпкә алып, Сажидә Хәмәтйәр ҡыҙы Зайлалованы 1939 йылда Шишмә районы Ҡараяҡуп ете йыллыҡ мәктәбе директоры урынбаҫары итеп билдәләйҙәр. Уҡытыусылар коллективының ижади эштәре тиҙҙән район мәктәптәренә билдәле була.

Шишмә район халыҡ мәғарифы бүлеге 1940 йылда С.Х.Зайлалованы К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтына уҡырға ебәрә. Бер аҙ тәжрибә туплап, уҡытыу-тәрбиә эшендә белемдең ниндәй әһәмиәткә эйә булыуын яҡшы аңлап килгән уҡытыусы тел һәм әҙәбиәт факультетының башҡорт бүлегендә педагогия серҙәрен тырышып өйрәнә. Ләкин уға тиҫтерҙәре менән бер йыл ғына уҡырға насип була. Беренсе курс имтихандарын тик «5» билдәләренә тапшырып бөтөүгә, фашистар Германияһы илебеҙгә баҫып инә – Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Ауыр афәт касафаты студенттарға ла килеп етә. Уларҙы фронтка киткән уҡытыусылар урынына төрлө райондарға эшкә оҙаталар.

Сажидә Хәмәтйәр ҡыҙы Зайлалова Маҡар районының Ишәй мәктәбенә китә. Бында ла ул намыҫлы хеҙмәт өлгөләре күрһәтә, шуға ла уны 1943 йылда комсомолдың өлкә комитетына мәктәптәр бүлеге инструкторы, шунан партия өлкә комитеты инструкторы итеп билдәләйҙәр.

1948 йылда партияның Башҡортостан өлкә комитеты бюроһы С.Х.Зайлалованы Өфө ҡалаһы 9-сы терәк мәктәбе директоры итеп тәғәйенләй. Мәктәптең бәләкәй генә интернатында аталары Бөйөк Ватан һуғышында ҡорбан булған етем балалар тәрбиәләнә. Был

балаларҙы уҡытыу һәм тәрбиәләү сығымдарын Башҡортостан хөкүмәте тулыһынса үҙ өҫтөнә ала. Мәктәптә Сажидә Хәмәтйәр ҡыҙы ете йыл директор вазифаһын намыҫлы башҡара. Ул республикала киң билдәле, алдынғы мәктәпкә әйләнә. Унда педагогия институты студенттарының практикаһы ойоштороla, ҡала һәм республика уҡытыусыларының төрлө йыйылыштары – конференциялар, кәңәшмәләр, тематик кисәләр үткәрелә.

1950 йылда С.Х.Зайлалова Башҡорт дәүләт педагогия институтының ситтән тороп уҡыу бүлеген тамамлай. Заман талабы булыуҙан тыш, юғары белем алыу мәктәп директорына педагогик коллективтың хеҙмәтен тейешле кимәлдә ойоштороrға мөмкинлек бирә. 9-сы урта мәктәп 1958 йылда 1-се мәктәп-интернат итеп үҙгәртелә. Бында Сажидә Хәмәтйәр ҡыҙы йәнә 20 йыл эшләй, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары араһында талантлы педагог булып танылa.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуға төрлө ҡараш булған саҡтарҙа ла С.Х.Зайлалова был предметтарҙы һәр ваҡыт юғары әҙерлек менән, тейешле идея-теоретик кимәлдә уҡыта, балаларға төплө белем һәм нигеҙле тәрбиә бирергә ынтыла. Синыфтан тыш эштәр дәрестең дауамы тип ҡарала. Уҡыусылар түңәрәктәргә, әҙәби поход, сәйәхәттәргә ҙур теләк менән йөрөйҙәр, осрашыуҙарҙа әүҙем ҡатнашалар. Шуның һөҙөмтәһендә уҡытыусы үҙ предметтары буйынса уҡыусыларҙың тулы өлгәшенә беренселәрҙән булып ирешә.

Мәктәп-интернатта уҡытыу-тәрбиә эштәренән тыш, Сажидә Хәмәтйәр ҡыҙы Зайлалова йәмәғәт бурыстарын үтәүгә лә яуаплы ҡарай. Тәжрибәле уҡытыусы булараҡ, ул Башҡортостан Халыҡ мәғарифы министрлығының уҡыу-методик советы ағзаһы, район халыҡ мәғарифы бүлегенең штаттан тыш инспекторы вазифаларын күңел биреп башҡара. Ул башҡорт әҙәбиәте буйынса программалар, дәреслектәр төҙөүгә, дәреслектәрҙе файҙаланыу тураһында методик ҡулланмалар яҙыуға йәлеп ителә. С.Х.Зайлалова – 1953 йылдан бирле V һәм VI синыфтарҙың туған әҙәбиәт дәреслектәре авторҙашы. Ул IV һәм VII синыфтар өсөн дә дәреслектәр, хрестоматиялар төҙөүҙә ҡатнаша, методик ҡулланмалар яҙа.

Күп йыллыҡ һәм намыҫлы педагогик хеҙмәте өсөн Сажидә Хәмәтйәр ҡыҙы Зайлалова байтаҡ миҙал һәм Маҡтау грамоталарына лайыҡ була, 1963 йылда уға Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исем бирелә.



# КАРАМ ҒӘЛИМЙӘН улы ЗАЛАЛОВ

*(1921)*

Белорет ҡалаһы һәм районында ғына түгел, шулай уҡ бөтә Башҡортостандың мәғариф хеҙмәткәрҙәре араһында Карам Ғәлимйән улы Залаловты белмәгән кеше, моғайын, һирәктер. Ул – үткер һәм ҡыйыу ҡарашлы, мөһабәт кәүҙәле, арыҫлан йөрәкле уҙаман, талантлы педагог, йәмәғәт эшмәкәре, байтаҡ орден һәм миҙалдар кавалеры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, Белорет ҡалаһының хөрмәтле гражданы.

Карам Ғәлимйән улы Залалов 1921 йылдың 15 октябрендә Башҡортостандың хәҙерге Ҡариҙел районы Подлуб ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Ауыл мәктәбендә II синыфты тамамлауға, баланың атаһын – Ғәлимйән Ғәлихан улын – егәрлеге арҡаһында ике ат, ике һыйыр аҫрағаны һәм ауылда иң ҙур йорт һалып ингәне өсөн, Совет власының яуыз дошманы күреп, 1930 йылда Белорет ҡалаһына яҡын Нура махсус йәшәү урынына һөргөнгә ҡыуалар. Тормоштоң әсеһен-сөсөһөн ошо йәштән үк татып өлгөргән кескәй Карам артабан Нура ете йыллыҡ мәктәбендә уҡый, мәктәп директоры Хажи Ғәли улы Ғирфанов кеүек уҫал һәм яғымлы, талапсан һәм ярҙамсыл кеше булһаң икән, тип хыяллана. Мәктәп директоры ысынлап та һәләтле педагог була, 1939 йылда Башҡортостандың бер төркөм халыҡ мәғарифы хеҙмәткәрҙәре араһында «Почет Билдәһе» ордены менән бүләкләнә.

Ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Карам Залалов 1937–1940 йылдарҙа Сермән педагогия училищеһында уҡый. Яраткан педагогтары Әхәт Абушахманов – химия һәм биология уҡытыусыһы, Хәйәт Миңләхмәт ҡыҙы Абушахманова – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы (талантлы артисыбыҙ Әхтәм Абушахма-

новтың ата-әсәһе) откор егеттең күңелендә мәңге онотолмаҫ хәтирәләр калдыра.

1940 йылдың 1 сентябрендә Карам Ғәлимйән улы Залалов Белорет калаһының 13-сө ете йыллык мәктәбендә тарих, башкорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы булып педагог биографияһын башлап ебәрә. Йәш педагогтың иң ҙур хыялы – юғары укыу йортона укырға инеү... Ләкин Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында К.Ғ.Залалов бронь буйынса Белорет металлургия заводының мартен цехында корос иретеүсе ярҙамсыһы була. Һуғыш осоронда коростай сыныккан йәш егет 1945 йылда 2-се урта мәктәп директоры итеп тәғәйенләнә, башкөллө ауыр эшкә сума. Юғары педагогик белем алыу максатында, ул шунда ук К.А.Тимирязев исемендәге Башкорт дәүләт педагогия институтының ситтән тороп укыу бүлегенә инә һәм уның тарих факультетын 1949 йылда уңышлы бөтөрөп сыға.

1949 йылдың аҙактарында К.Ғ.Залаловка Нура касабаһында ташландык нигеҙҙе күрһәтәләр ҙә: «Бына ошо мәктәп бинаһын төҙөп бөтөрөргә кәрәк, үҙең уның директоры булырһың», – тиҙәр. Буласак директор йәш укытыусылар коллективын туплай. Был – хәҙерге 8-се урта мәктәп. Укытыусылар коллективы эштә оло уңыштар яулай.

Талантлы, эшһөйәр педагог К.Ғ.Залалов 1953 йылда Белорет кала халык мәғарифы бүлеге мөдире итеп куйыла, булдыклы уҙаман 1961 йылда кала Советы башкарма комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары итеп һайлана. Ул каланы үҫтереүгә ҙур өлөш индерә.

Күңеле, бар булмышы менән педагог К.Ғ.Залалов мәктәптә укытыу-тәрбиә эшен һағына. 1967 йылда ул буласак 16-сы урта мәктәп бинаһын төҙөүҙә куратор итеп билдәләнә. Уның етәкселегендә был мәктәп коллективы ул йылдарҙа алдынғылар сафында киң танылa. Шунан һуң К.Ғ.Залалов 20-се, 14-се урта мәктәптәрҙең укытыу-тәрбиә эштәренә нигеҙ һала. Уларҙы алдынғы мәктәптәр итеп күтәрә, һәр ерҙә лә ал-ял белмәйенсә эшләй.

Карам Ғәлимйән улы Залаловка 1972 йылда Башкортостан Республикаһының аткаҙанған укытыусыһы тигән мактаулы исем бирелә. Ул Хеҙмәт Кыҙыл Байрак, «Почет Билдәһе» ордендары, ете миҙал менән бүләкләнә, Белорет калаһының хөрмәтле гражданы исемен йөрөтә.

## ҒАБДУЛЛА ҒИНИӘТУЛЛА улы ЗАҺИТОВ

*(1918)*



Донъяның ҡайғы-хәсрәттәрен күреп үҫкән, тормошта һәм эштә күп етешһеҙлектәр кисергән, шулай ҙа намыҫлы хеҙмәте менән һәйбәт уңыштарға өлгәшкән Ғабдулла Ғиниәтулла улы Заһитов Белорет төбәгенең арҙаҡлы педагогтары араһында күркәм урын биләй. Ул – ғүмеренең иң көслө йылдарын киске мәктәп эшен камиллаштырыуға биргән уҡытыусы, замандаштарының хөрмәтен күреп оло йәшкә еткән ил ағаһы.

Ғабдулла Ғиниәтулла улы Заһитов 1918 йылдың 1 ғинуарында Башҡортостан Республикаһының Мишкә районы Янаҡыш ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Уның атаһы Ғиниәтулла Ғөбәйҙулла улы 1930 йылда, йәшәгән еренән ҡыуылып, Белорет ҡалаһы эргәһендәге Нура ҡасабаһына килеп эләгә. 1932 йылда алты балаһы менән әсәһе Бибиәсмә Ишиәр ҡыҙы аталары янына килеп етә. Ғабдулла Заһитов кесе йәштән ил ҡайғыһын, тиҫтерҙәренең яфаларын күреп үҫә. Бала сағында Нура йылғаһына төшә лә асы күҙ йәштәрен уның һалҡын һыуында йыуа. Янаҡышта уны кулак балаһы тип мәктәпкә алмайҙар, 1932 йылда 14 йәше менән барған малайҙы Нура мәктәбенең V синыфына ултырталар. Мәктәп директоры һәм математика уҡытыусыһы Хажи Тажи улы Ғирфанов яҡшы кеше булып сыға, синыфта иң оло баланың башынан һыйпай ҙа, уҡы, тырыш, ти. 1936 йылда Ғ.Ғ.Заһитов педагогия училищеһына уҡырға инеп, ныҡлы белем ала. Шунан ул Баҡый, Хөсәйен башланғыс мәктәптәрендә берәр йыл уҡыта, тәүге Сермән педагогик тәжрибә һабаҡтарын үҙләштерә. Тиҙҙән Белорет ҡалаһының 6-сы мәктәбендә физкультура уҡытыусыһы булып эшләй, 1940 йылда мәктәп директоры итеп тәғәйенләнә, был вазифаға ҡолас йәйеп тотона.

Ғ.Ғ.Заһитов Бөйөк Ватан һуғышында фашистар менән аяуһыҙ алыша. Уға япон самурайҙары менән дә айҡалашырға тура килә.

Һуғыштан һуң яугир педагог 6-сы мәктәптә физкультура уҡытыусыһы булып эшләй. Ғабдулла Ғиниәтулла улының ауыҙ тултырып һөйләрлек маҡтауға лайыҡлы педагогик хеҙмәте 1948 йылда 4-се киске (сменалы) урта мәктәп директоры булып эшләй башлаған ваҡытҡа тура килә. Тиҙҙән һәләтле етәксе 2-се киске мәктәп директоры итеп ҡуйыла. Талантлы педагог 1955 йылда 4-се киске мәктәп директоры булып ҡайта. Бында уҡытыусылар коллективы эшен яйға һалыуға, бер йылдан 1-се киске урта мәктәп директоры вазифаһы йөкмәтелә. 1956 йылда унда 600 йәш эшсе уҡый, уҡытыуҙың кабинет системаһы индерелә. Ғ.Ғ.Заһитов М.И.Калинин исемендәге Белорет металлургия комбинатының мәктәпкә ҙур ярҙам күрһәтеүенә өлгәшә.

Юғары педагогик белемде Ғ.Ғ.Заһитов К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының ситтән тороп уҡыу бүлегендә алып, 1957 йылда география уҡытыусыһы дипломына эйә була.

Ғ.Ғ.Заһитов үҙе директор булып эшләгән киске мәктәптәрҙе өлгөлө уҡыу йорттары сафына күтәрә, уҡытыусыларҙы ижади эшләргә өйрәтә. Директор урта белеме булмаған эшсе йәштәрҙе уҡыуға йәлеп итә, артабан уҡыуҙарын дауам итергә илһамландыра.

1962 йылда Ғ.Ғ.Заһитов мәктәп-интернат директоры итеп тәғәйенләнә. Тәүҙә ул аптырап ҡала: мәктәп-интернат киске мәктәптән ныҡ айырыла, өҫтәүсә, мәғариф хеҙмәткәре ғаиләһе менән Нура ҡасабаһында йәшәй, ә мәктәп-интернат ҡаланың ҡапма-ҡаршы яғында урынлашҡан. Өйҙән мәктәп-интернатҡа биш-алты саҡрым барҙыр. Ҡала партия ойошмаһының беренсе сәркәтибе фатир булыр тип ышандыра, ләкин вәғәҙәһен онота.

Мәктәп-интернатта ла Ғабдулла Ғиниәтулла улы Заһитов элеккесә, йәштәргә хас дәрт менән, илһамланып эшләй, уҡыусылар коллективын алда торған бурыстарҙы үтәүгә рухландыра. Йәш быуынға белем һәм тәрбиә биреү өлкәһендә өлгәшкән уңыштары өсөн Ғабдулла Ғиниәтулла улы Заһитовтың һуғыштағы батырлыҡтары өсөн алған Ҡыҙыл йондоҙ, Ватан һуғышы ордендары һәм миҙалдары янына 1976 йылда «Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы» значогы өҫтәлә.

# ВИКТОР НИКИФОРОВИЧ ЗОТОВ

*(1925 – 1996)*



Республикабыҙҙың изгелекле Баҡалы төйәге дүрт Советтар Союзы Геройын һәм Дан ордендарының тулы кавалерҙарынан өс ҡаһарман тәрбиәләп үҫтерә, уларға буй еткерергә көс бирә. Уларҙың береһе – Виктор Никифорович Зотов – Дан ордендарының тулы кавалеры, һәләтле педагог, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Виктор Никифорович Зотов 1925 йылдың 25 майында район үҙәге Баҡалы ауылында тыуып үҫә. Бөйөк Ватан һуғышы башланған 1941 йылда ул үҙ ауылы мәктәбенең VII синыфын тамамлап, фронтҡа киткән ир-егеттәрҙе колхоз эшендә алмаштыра. 1942 йылдың 10 декабрендә ун ете йәше менән барған егет үҙе теләп фронтҡа китә. Дала, 1-се, 2-се, 3-сө Украина фронттарында фашист илбаҫарҙарына ҡаршы аяҡтарын ныҡ терәп һуғыша. Пулемет расчеты командиры һәм уның һуғышсылары Ингулец, Буг, Днепр, Висла йылғаларын сыҡҡанда пехотаға әүҙем ярҙамлаша. Яугир һуғыш тарихында киң билдәле Сандомир плацдармында гитлерсыларҙы йән асыуы менән туҡмай һәм дөмөктөрә, Европаның күп илдәрен һуғышып үтә, Одер, Нейсе, Шпрее, Эльба йылғаларын дошманға ҡаршы алышып кисә, Бөйөк Еңеүҙе Влтавала ҡаршылай. Һуғыш шарттарында шулай килеп сыға: батыр яугир Дан ордендары менән өс кенә түгел, ә дүрт мәртәбә бүләкләнә: уның III дәрәжәлеһе – икәү, II һәм I дәрәжәлеләре – берәр. Ҡаһармандың йәнә Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, биш хәрби миҙалы ла бар.

Һуғыштан һуң, 1945 йылдың сентябрендә, гвардия өлкән сержанты В.Н.Зотов Мәскәүҙә хәрби-сәйәси училищеға уҡырға инә. Уны бөтөрөп сыҡҡас, рота командирының сәйәси эш буйынса урынбаҫары булып хеҙмәт итә.

1956 йылда Виктор Никифорович Баҡалыға ҡайтып, Октябрьский ҡала халыҡ мәғарифы мөдиренең саҡырыуы буйынса, 8-се урта мәктәп директоры булып урынлаша. Бында ул оҫтахана төҙөүгә, тәжрибә баҡсаһы булдырыуға һәм башҡа файҙалы эштәр ойоштороуға ҙур иғтибар бирә. 8-се урта мәктәптең уҡытыусылар коллективын алдынғылар сафына сығарғас, тәжрибәле педагог һәм етәксе В.Н.Зотов 6-сы урта мәктәп эшен яйға һалыу өсөн директор итеп күсерелә. Был мәктәп тә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уҡытыу-тәрбиә эшендә матур уңыштарға ирешә. Шунан ҡала халыҡ мәғарифы бүлеге Виктор Никифоровичты йәнә бер мәктәпкә директор итеп ҡуйырға уйлай, ләкин шул саҡта яугир педагогтың яҙмышына республика Халыҡ мәғарифы министрлығы килеп ҡушыла. Тәжрибәле һәм һәләтле педагог Өфө эргәһендәге Некрасовка ауылы һигеҙ йыллыҡ мәктәбе директоры итеп тәғәйенләнә. Яңы директор көн тип тормой, төн тип тормай, ал-ял белмәйенсә эшләй, мәктәптең уҡытыу-тәрбиә эшенә яңы һулыш бирә.

1980 – 1986 йылдарҙа Өфө ҡалаһының 43-сө һәм 46-сы урта мәктәптәре директоры булып эшләгәндә Виктор Никифорович Зотовтың педагогик таланты, ойоштороусы һәм етәксе оҫталығы айырыуса асыҡ күренә. Ул уҡытыусылар коллективының тынғыһыҙ етәксеһе, уны ижади эштәргә рухландырыусы, файҙалы эштәргә башланғыс биреүсе булып танылa. Директорҙың талапсанлығы һөҙөмтәһендә, уҡытыусылар үҙ эшенең оҫталары, һәләтле педагогтар булып өлгөрә, алдынғылар сафына баҫа. Улар төрлө йыйындарҙа үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаша.

Район халыҡ мәғарифы бүлеге һәм Мәғариф министрлығының инспектор тикшеренеүҙәре Виктор Никифорович Зотов етәкселек иткән мәктәптәрҙең уҡытыу-тәрбиә эштәре юғары кимәлдә ойошторолоуын күрһәтә. Директорҙың эше башҡа мәктәп етәкселәренә өлгө итеп ҡуйыла, өйрәнергә тәҡдим ителә.

Уҡытыу-тәрбиә эшендә һәм мәктәп коллективтарына етәкселек итеүҙә өлгәшкән уңыштары өсөн Виктор Никифорович Зотов 1976 йылда Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, 1982 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исемдәргә лайыҡ була.

Һәр яңы мәктәптә директор В.Н.Зотов балаларҙы халҡыбыҙҙың данлы һуғышсан традицияларында хәрби-патриотик рухта тәрбиәләүгә, уларҙы хеҙмәткә, үҙ аллы тормошҡа һәм һөнәр алыуға әҙерләүгә һәр ваҡыт ҙур иғтибар бирә, уҡытыусыларҙан да тәрбиә эшен йәнләндереүҙе талап итә. Директорҙың һәм юғары белемле тарих уҡытыусыһының уҡыусылары мәктәптең йәмәғәт эштәрендә, төрлө

түңәрәктәрҙә һәм секцияларҙа, олимпиада һәм конкурстарҙа әүҙем ҡатнашып, призлы урындар яулай, синыфташтарын һәм башҡа синыф уҡыусыларын уңыштары менән ҡыуандыра.

Дан ордендарының тулы кавалеры, Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм хәрби миҙалдар эйәһе, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, миҙалдар һәм Маҡтау грамоталары алған педагог Виктор Никифорович Зотов йәштәргә өлгө булырлыҡ тормош юлы үтте. Уның һуғыш һәм хеҙмәт ҡаһарманлығы һис онотолмай.

## ГӨЛКӘЙ МӘХМҮТ ҡыҙы ЕНИКЕЕВА

*(1929)*



Күп йылдар элек, 1984 йылдың 29 мартында, «Совет Башҡортостаны» (хәҙер «Башҡортостан») гәзитендә баҫылған «Йөрәк тауышы» исемле һүрәтләмәлә уҡытыусы Гөлкәй Мәхмүт ҡыҙы Еникееваның тормош һәм хеҙмәт юлы тасуирлана. Талантлы педагог, йәмәғәт хеҙмәткәре тураһындағы һүрәтләмәнең тәүге өлөшөн генә уҡып ҡарайыҡ әле.

«Һәр кеше менән дә шулай була торғандыр: хеҙмәт юлын башлап ебәргән коллектив йөрәккә яҡын. Гөлкәй Мәхмүтовна ла үҙ аллы тормош юлына сығырға, педагогик хеҙмәт серҙәрен аңларға юл асҡан Абзан урта мәктәбен, бергә эшләгән уҡытыусыларҙы һәм, әлбиттә, тәүге уҡыусыларын йылы хәтерләй. Шул ваҡыттан һуң Салауат районының Баксит урта мәктәбендә, хәҙер Өфө ҡалаһының 1-се мәктәп-интернатында оҙаҡ йылдар эшләһә лә, К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының тарих факультетын тамамлап, Ейәнсура районының Абзан урта мәктәбендә тәүге педагогик совет ултырышында ҡатнашыу, беренсе дәрес үткәреү, уҡытыу-тәрбиә эшен ойоштороу уға күптән түгел, яңыраҡ ҡына булған кеүек күренә.

Гөлкәй Мәхмүтовна балалар менән уҡытыу-тәрбиә эшен бик тәүәккәл башлап ебәрҙе, педагогик хеҙмәттең мәғәнәһенә һәм айышына тиҙ төшөндө. Был беҙгә, уның элекке уҡыусыларына ғына, шулай күренәләр. Ул да тәүге осорҙа, һәр йәш уҡытыусы кеүек үк, дәрескә ентекләп әҙерләнгәндер, мәктәп документацияһы, уҡытыусыларҙың һүҙҙәре буйынса уҡыусыларҙы, уларҙың көнкүреш шарттарын, ата-әсәләрен өйрәнгәндер. Беҙ быларҙың береһен дә белмәй инек, тик дәрескә киләбеҙ ҙә Гөлкәй Мәхмүтовнаның класҡа ғәҙәттәгесә тыныс һәм яҡты йөҙ менән килеп инеүен көтәбеҙ. Ул шулай эшләй ҙә. Беҙ уны тын да алмай тыңларға ғәҙәтләнгәнбеҙ. Бына ул өҫтәл артынан тыныс ҡына тора. Уның ҡарашы ышаныслы, йөҙө яҡты. Илебеҙҙә күптән булып уҙған ваҡиғаларҙы, унда ҡатнашҡан тарихи шәхестәрҙе уҡытыусыбыҙ яҡын һәм аңлайышлы итеп күҙ алдыбыҙға баҫтыра. Уның һөйләү оҫталығы, талғын ғына аҡҡан телмәре уҡыусыларҙың бөтәһен дә үҙенә йәлеп итә. Дәрестең бер өлөшөндә Гөлкәй Мәхмүтовна һәр ваҡыт үҙе генә һөйләй, ә икенсе өлөшөндә беҙ ҙә ҡушылабыҙ, уның һорауҙарына кем уҙарҙан яуап бирәбеҙ. Ул ваҡытта, 50-се йылдар башында, мәктәптә хәҙерге кеүек уҡытыуҙың техник саралары – фильмоскоп, диафильм, телевизор, проекция аппараты һәм башҡа йыһаздар юҡ ине. Тик карталар һәм класс таҡтаһы ғына уҡытыусыға ярҙамға килә. Шулай ҙа ул үҙенең оҫталығы, педагогик эшкә һәләтлеге менән уҡыусыларға тарих буйынса ныҡлы белем бирә алған.

Был уңышҡа өлгәшеүҙә Гөлкәй Мәхмүтовна Еникееваның педагогик хеҙмәтте, балаларҙы яратыуы, әлбиттә, ҙур роль уйнай. Ә уҡытыусы хеҙмәтенең тормошта мөһимлеге һәм кәрәклеге хаҡындағы хәҡиҡәтте ул педагог ата-әсәһенән ишеткәндер. Уҡытыусыбыҙға педагогик хеҙмәттә өлгәшкән уңыштары өсөн Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, өлкән уҡытыусы тигән маҡтаулы исемдәр бирелеүен беҙ, уның уҡыусылары, сикһеҙ ғорурланып һәм шатланып ҡабул иттек.

Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһының 1-се мәктәп-интернаты уҡытыусылары Г.М.Еникееваны илле биш йәше тулыу айҡанлы ҡайнар ҡотланы, уға ныҡлы сәләмәтлек һәм эштә ижади уңыштар теләне. Күп һанлы ҡотлауҙар араһында Абзан урта мәктәбенең элекке уҡыусыларынан да уҡытыусыға адрес папкаһы тапшырылды…

Папкала күп ҡултамғалар теҙелгән: Гөлкәй Аллағолова һәм Фәүзәнә Аҡманова – Өфө ҡалаһы мәктәптәре уҡытыусылары; Хәким Аҙнабаев – Күмертау ҡалаһының мәктәп-интернаты директоры; Сания Аҫылбаева – шул уҡ ҡаланан табип; Өфөнән Анатолий

Майоров – филология фәндәре кандидаты, Камил Яйыҡбаев – журналист…»

Был һүрәтләмәгә шуны ғына өҫтәргә мөмкин: Гөлкәй Мәхмүт ҡыҙы Еникеева 1929 йылдың 15 мартында Салауат районының Арҡауыл ауылында донъяға килә. Ул 1-се мәктәп-интернатта (хәҙер Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика гимназия-интернаты) эшләгән осорҙа оҙаҡ йылдар тәүге партия ойошмаһы сәркәтибе була, методик берекмә ултырыштарында үҙ тәжрибәһе менән ихлас уртаҡлаша.

## ХӘНИФӘ СИРАЖИ ҡыҙы ИСКӘНДӘРОВА

*(1928)*



Тырыш хеҙмәтенең мул емештәрен эшләп йөрөгәндә үк күреүгә ирешкән талантлы уҡытыусы Хәнифә Сиражи ҡыҙы Искәндәрованы Башҡортостанда байтаҡ кешеләр белә. Ул – мәктәптә уҡытыу-тәрбиә эшен юғары кимәлдә ойошторған педагог, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, СССР-ҙың халыҡ уҡытыусыһы, ике саҡырылыш СССР Юғары Советы депутаты, Социалистик Хеҙмәт Геройы.

Хәнифә Сиражи ҡыҙы Искәндәрова 1928 йылдың 20 мартында Башҡортостандың Салауат районы Яхъя ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуған. Ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, ул Мәсәғүт педагогия училищеһына уҡырға инә. Уҡыуҙы тамамлауға, педагогия училищеһының юллау ҡағыҙы буйынса, 1947 йылда Өфө уҡытыусылар институтының тәбиғәт белеме һәм география бүлегенә уҡырға бара һәм уны уңышлы бөтөрөп сыға.

1949 йылда Х.С.Искәндәрова үҙ районының Арҡауыл мәктәбенә биология уҡытыусыһы булып ҡайта. Шул ваҡыттан бирле ул оҙаҡ йылдар буйы йәш быуынды уҡытыу һәм тәрбиәләүгә бөтә көсөн бирә. Йылдар үтеү менән, тырыш уҡытыусы үҙ эшенең

ысын оçтаһына әүерелә, өçтәүенә, Башҡорт дәүләт университетының биология факультетына ситтән тороп уҡырға инә һәм уны 1960 йылда уңышлы тамамлап, юғары белемле уҡытыусы булып китә.

1955 – 1962 йылдарҙа Х.С.Искәндәрова Салауат районының Мешәр, Торналы, Малаяҙ урта мәктәптәрендә биология курсының төрлө предметтарын уҡыта, 1962/63 уҡыу йылында Арҡауыл мәктәбенә күсә, шул ауылда төпләнеп ҡала.

Хәнифә Сиражи ҡыҙы, синыф етәксеһе булараҡ, уҡыусылар коллективының оçта ойоштороусыһы, балаларҙың яҡын дуçы һәм аҡыллы кәңәшсеһе булып танылa. Уның синыфы һәр ваҡыт юғары өлгәш биреүе, йәмәғәт эштәрендә берҙәм ҡатнашыуы менән дан тота.

Алдынғы уҡытыусыларҙың һәм мәктәптәрҙең педагогик тәжрибәһен даими өйрәнеү, үҙ эшендә ижади файҙаланыу нигеҙендә Х.С.Искәндәрова биология дәрестәрен юғары идея-теоретик һәм методик кимәлдә үткәрә. Материалды яҡшы белһә лә, ул һәр дәрескә ентекле әҙерләнә. 1965/66 уҡыу йылынан бирле ул уҡыусыларҙың тулы өлгәшенә ирешә. Х.С.Искәндәрованың дәрестәре һәм тәрбиә эше урта мәктәпте тамамлаусыларҙың артабан һөнәр һайлауында һәм тормош юлын билдәләүендә хәл иткес әһәмиәткә эйә була.

Тәжрибәле уҡытыусы биология буйынса төрлө синыфтан тыш эштәр үткәрә. Йәш натуралистар түңәрәгендә уҡыусылар биология фәне яңылыҡтары менән таныша, төрлө үçемлектәр, ауыл хужалығы культураларының районлашҡан сорттарын үçтереү буйынса тәжрибә үткәрә, уларҙың уңышына минераль, органик ашламаларҙың йоғонтоһон билдәләй, мәктәп баҡсаһында тырышып эшләп, хеҙмәт күнекмәләрен үҙләштерә.

Уҡытыусы һәм мәктәп директоры урынбаçары Х.С.Искәндәрова етәкселегендәге уҡытыу-тәжрибә участкаһы бер нисә йыл мул уңыш бирә, емеш-еләк, йәшелсә менән мәктәпте тәьмин итә.

Хәнифә Сиражи ҡыҙы Искәндәрованың педагогик хеҙмәте һәм әүҙем йәмәғәт эшмәкәрлеге юғары баһаланды. Уға 1968 йылда Социалисик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде. 1967 йылда талантлы педагог Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, 1982 йылда СССР-ҙың халыҡ уҡытыусыһы тигән исемдәргә лайыҡ булды.

Х.С.Искәндәрова 1970 – 1974, 1974 – 1978 йылдарҙа ике саҡырылыш СССР Юғары Советы депутаты итеп һайланды, халыҡтың ышанысын намыçлы үтәне.

# ФӘҺИМӘ ҒӘББӘС ҡыҙы ИСЛАМОВА

*(1925)*



Рәсәй Федерацияһы Халыҡ мәғарифы министрлығы Милли мәктәптәр ғилми-тикшеренеү институтының Башҡортостан филиалы ғилми хеҙмәткәрҙәренән Фәһимә Ғәббәс ҡыҙы Исламованың башҡорт теле һәм уны мәктәптә уҡытыу тураһындағы күп кенә хеҙмәттәре, фәнни-педагогик эшмәкәрлеге республика мәғариф өлкәһендә яҡшы билдәле. Ул – методист, педагогия фәндәре кандидаты.

Фәһимә Ғәббәс ҡыҙы Исламова 1925 йылдың 19 декабрендә Башҡортостандың Илеш районы Ҡарабаш ауылында крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. 1932 йылда ул ауылдың ете йыллыҡ мәктәбенә уҡырға төшә. Үрге Йәркәй урта мәктәбендә белем ала һәм уны 1941 йылда бөтөрөп сыға.

Урта белемле йәш белгес Илеш районы Яңы Ҡырғыҙ башланғыс мәктәбенә уҡытыусы итеп ебәрелә. Унда 1943 йылдың көҙөнә хәтлем балалар уҡыта, бер үк ваҡытта колхозда мәҙәниәт саралары ойоштороусы һәм военрук була, балалар һәм ата-әсәләр менән күп эштәр башҡара.

1943 йылдың октябрендә Фәһимә Исламова К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына уҡырға инә. Факультеттың башҡорт бүлегендә ул иң алдынғыларҙың береһе була: яҡшы уҡый, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша.

1947 йылда, педагогия институтында уҡыуҙы тамамлауға, башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы Фәһимә Исламоваға аспирантурала уҡырға тәҡдим итә. Әммә ауылда ата-әсәһе һәм туғандарының матди хәле мөшкөл булыу сәбәпле, йәш белгес уларға ярҙам күрһәтеү маҡсатында мәктәпкә эшкә китергә мәжбүр була. Уны үҙенең теләге буйынса тыуған районы халыҡ мәғарифы бүлеге

ҡарамағына ебәрәләр. Фәһимә Исламова Үрге Йәркәй урта мәктәбенә урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы итеп билдәләнә. Бында ул ике йыл уҡыта, педагогик тәжрибә туплай.

1949 йылдың сентябрендә Фәһимә Исламова ҡабул итеү имтихандарын уңышлы тапшырып, РСФСР Педагогия фәндәре академияһы аспирантураһына уҡырға инә. Уны уңышлы тамамлай һәм 1952 йылдың 28 ноябрендә «Башҡорт теленең ябай һөйләмдәрендә синтаксик бәйләнеш типтары һәм уларҙы V – VI кластарҙа уҡытыу методикаһы» темаһына кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай. Диссертация баҫылып сыға.

Педагогия фәндәре кандидаты Ф.Ғ.Исламова Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтына эшкә ебәрелә. Бында ул хәҙерге башҡорт теле, тел ғилеменә инеш, урыҫ һәм башҡорт телдәренең сағыштырма грамматикаһы курстары буйынса лекциялар уҡый, бер аҙ ваҡыт башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире була, мәктәптәр өсөн юғары белемле уҡытыусылар әҙерләүгә үҙ өлөшөн индерә.

1954 йылда Ф.Ғ.Исламова Башҡорт дәүләт педагогия институтына эшкә алына, институтта һәм 1957 йылдан һуң Башҡорт дәүләт университетында ассистент, өлкән уҡытыусы була, башҡорт теле буйынса лекциялар уҡый, махсус курстар алып бара.

1958 йылда Фәһимә Ғәббәс ҡыҙы Исламова Милли мәктәптәр ғилми-тикшеренеү институтының Башҡортостан филиалында хеҙмәт юлын дауам итә. Бында ул алдынғы мәктәптәр һәм уҡытыусылар менән даими бәйләнеш тота. Уларҙың тәжрибәһе ғалимәгә башҡорт теле буйынса күҙәтеүҙәрен ғәмәлдә һынап ҡарарға, тикшерергә, шуның нигеҙендә һығымталар яһарға мөмкинлек бирә. Уның башҡорт теле, уны уҡытыу методтары һәм алымдары тураһындағы ғилми хеҙмәттәре алдынғы тәжрибәләрҙе дөйөмләштереү нигеҙендә яҙыла. Ғалимәнең дәреслектәре, методик ҡулланмалары, уҡытыу әсбаптары, үҙенең ярҙамы уҡытыусыларға балаларҙың белем сифатын күтәрергә булышлыҡ итә.

**АВРОРА**
**БУЛАТ ҡыҙы**
**ИШЕМҒОЛОВА**

*(1928 – 1990)*



Башҡортостан мәктәптәрендә урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына ҙур методик ярҙам күрһәткән ғалим-педагогтар һәм дәреслек авторҙары сафында Аврора Булат ҡыҙы Ишемғолова – киң билдәле халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре, абруйлы методист.

Аврора Булат ҡыҙы Ишемғолова 1928 йылдың 26 мартында Өфөлә яҙыусы ғаиләһендә донъяға килә. Уның атаһы – күренекле башҡорт яҙыусыһы Булат Ишемғол, башҡорт әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе, шағир, прозаик. Атаһын нахаҡҡа ғәйепләп ҡулға алғас, «халыҡ дошманы»ның ҡыҙы Аврораға, туғаны Клараға мәктәптә уҡыу йылдары бик ауыр була. Таныштары, дуҫтары уларҙан ситләшә, күрмәмешкә һалыша. Аврора Ишемғолова урта мәктәпте көмөш миҙалға тамамлай, 1946 йылда К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына уҡырға инә, бик яҡшы уҡый, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша. 1950 йылда институтты ҡыҙыл дипломға тамамлағас, Аврора Ишемғолова яҡты хыялдар менән Кушнаренко педагогия училищеһына юллана. Бында ул ҙур тырышлыҡ күрһәтә, башланғыс синыф уҡытыусылары әҙерләүгә барлыҡ көсөн бирә. Фиҙакәр хеҙмәт йәш белгескә коллегаларының бай тәжрибәһен үҙләштерергә, уҡытыу-тәрбиә эшенең серҙәренә эйә булырға ярҙам итә.

1956 йылда тәжрибәле методист Аврора Ишемғолова Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтына эшкә саҡырыла. Бында ул 18 йыл эшләй, тәүҙә – методист, шунан 15 йыл урыҫ теле һәм әҙәбиәте кабинеты мөдире була.

Кабинет оҫта методист А.Б.Ишемғолова етәкселегендә республика уҡытыусыларына, мәктәп етәкселәренә методик ярҙам күрһәтеү,

уларҙың квалификацияһын күтәреү, алдынғы педагогик тәжрибәне дөйөмләштереү һәм таратыу буйынса күп яҡлы эш башҡара. Республиканың ғилми-методик көстәрен кабинет мөдире педагогик коллективтарҙың уҡытыу-тәрбиә эшен камиллаштырыу, уҡыусыларҙың белем һәм күнекмәләре сифатын яҡшыртыу бурыстарын уңышлы хәл итеүгә йүнәлтә.

Уҡытыусыларҙың алдынғы педагогик тәжрибәһен өйрәнеү, ғилми-тикшеренеү күҙәтеүҙәре Аврора Булат ҡыҙына мәктәптә урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыуҙың торошо, уны яҡшыртыу методтары һәм алымдары тураһында фәнни хеҙмәттәр яҙырға этәрә. Тәжрибәле методист мәктәп дәреслектәре, методик ҡулланмалар төҙөүгә йәлеп ителә.

Аврора Ишемғолова авторҙаштары В.П.Песков, М.Ғ.Ғөбәйҙуллин, Р.В.Әлмөхәмәтов, Л.Ғ.Сәйәхова, М.Ғ.Хәйруллина, А.А.Хәсәнова менән мәктәптең V – VIII синыфтары өсөн изложение текстары йыйынтығы, IV синыф өсөн урыҫ теле дәреслеге, уны файҙаланыу тураһында методик ҡулланма, башҡа уҡыу әсбаптары яҙыуҙа әүҙем ҡатнаша, эштең ауыр өлөшөн гел үҙ өҫтөнә ала.

1973 йылдан Аврора Булат ҡыҙы Ишемғолова – Милли мәктәптәр ғилми-тикшеренеү институтының Башҡортостан филиалы хеҙмәткәре. Ул башланғыс синыфта урыҫ теле уҡытыу проблемалары менән шөғөлләнә, уҡыусыларҙың урыҫса һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү мәсьәләләре өҫтөндә эшләй.

Мәғариф өлкәһендәге фиҙакәр хеҙмәттәре өсөн Аврора Булат ҡыҙы Ишемғоловаға 1964 йылда Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исем бирелә. 1971 йылда ул «Почет Билдәһе» ордены менән бүләкләнә, һәр саҡ уҡытыусыларҙың оло ихтирамы менән файҙалана.

## САБИР ШӘЙӘХМӘТ улы ЙЫҺАНШИН

*(1924)*



Сабир Шәйәхмәт улы Йыһаншин – Башҡортостанда билдәле һәм абруйлы шәхестәрҙең береһе. Уны республикала мәғариф эштәрен ойоштороуға һәм камиллаштырыуға күп көс һалған хеҙмәткәр, халыҡ мәғарифы министры булып оҙаҡ йылдар һәм уңышлы эшләгән дәүләт эшмәкәре тип беләләр. Ул – байтаҡ ордендар кавалеры, педагогия фәндәре кандидаты, доцент, шөһрәт һәм дан ҡаҙанған күренекле педагог, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны.

Сабир Шәйәхмәт улы Йыһаншин 1924 йылдың 28 авгусында Башҡортостандың Учалы районы Мансур ауылында алтын йыуыусы ғаиләһендә донъяға килә. Башланғыс белемде үҙ ауылы мәктәбендә ала, шунан һуң Ильинка ете йыллыҡ, Учалы урта мәктәптәрендә уҡый.

1942 йылда урта мәктәпте тамамлауға, 18 йәше лә тулмаған егет Бөйөк Ватан һуғышына алына һәм Воронеж, Дала, 3-сө Украина фронттарында фашист илбаҫарҙарына ҡаршы алыштарҙа батырҙарса һуғыша. Һалдат иңенә төшкән иң ауыр һынауҙарҙы ул Курск дуғаһында, Днепрҙы аша сыҡҡанда кисерә.

Фашистар менән ҡаты алыштарҙың береһендә Сабир Йыһаншин ауыр яралана. Шул сәбәпле артиллерист хәрби хеҙмәттән алына һәм 1944 йыл баштарында тыуған ауылына ҡайтып төшә. Һуғышта күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн ул II дәрәжә Ватан һуғышы, III дәрәжә Дан ордендары, тиҫтәләгән миҙалдар менән бүләкләнә.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа мәктәптәр уҡытыусы кадрҙарына ҙур мохтажлыҡ кисерә. Урта белемле Сабир Йыһаншин мәктәпкә эшкә саҡырыла. Унын уҡытыусы булыу теләге фронтта уҡ уяна. Һуғышҡа тиклем уҡытыусы булып эшләгән рота, взвод командирҙары егеткә көслө тәьҫир иткән була. Тәүҙә фронтовик Ильинка, Таңғатар мәктәптәрендә уҡытыусы булып эшләй, Учалы урта мәктәбендә тарих уҡытыусыһы һәм директор вазифаларын башҡара. Шул ваҡытта юғары педагогик белем алыу ихтыяжы килеп тыуа һәм

Сабир Шәйәхмәт улы Магнитогорск педагогия институтының тарих факультетын ситтән тороп тамамлай. Был йылдарҙа ул ал-ял белмәй эшләй, күп уҡый. Яугир педагог етәкселегендә Учалы урта мәктәбе районда алдынғы мәктәп булып таныла, коллектив уҡытыу-тәрбиә эшенең байтаҡ күрһәткестәре буйынса ҙур уңыштар яулай.

Эшкә һәләтле, кешеләр менән йәһәт аралаша һәм уртаҡ тел таба белгән тырыш хеҙмәткәрҙе тиҙ күрәләр. 1954 йылда С.Ш.Йыһаншин Учалы район Советы башҡарма комитеты рәйесе урынбаçары итеп һайлана, артабан 1958 йылда партия рәйесе комитетының идеология буйынса сәркәтибе вазифаһын башҡара. 1958 – 1960 йылдарҙа ул Учалы төҙөлөш тресы партия ойошмаһы сәркәтибе булып эшләй. 1960 йылда Сабир Йыһаншин йәнә педагогик хеҙмәткә ҡайта һәм Учалы ҡалаһының 1-се урта мәктәбе директоры итеп тәғәйенләнә.

Ҡайҙа һәм кем генә булып эшләмәһен, Сабир Шәйәхмәт улы Йыһаншин һәр саҡ барлыҡ көсөн, белемен, ваҡытын коллективтың эшкә һәләтлеген күтәреүгә туплай, әүҙем ярҙамсылар һәм үҙ хеҙмәтен яратып башҡарыусылар тәрбиәләй. Уның үҙенең дә кешеләрҙе күрә белеү, эште ижади ойоштороу сифаттары, тәжрибәһе арта, яңы күнекмәләрҙе үҙләштерә.

Шуларҙы иçәпкә алып, Сабир Шәйәхмәт улы Йыһаншинды 1963 йылда Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институты директоры итеп тәғәйенләйҙәр. Бына шунда инде уҡытыусылар, мәктәп директорҙары, район һәм ҡала етәкселәре менән эшләй белеү һәләте, педагогик оçталыҡ һәм күнекмәләр уға институт коллективының эшенә йүнәлеш бирергә, республика мәктәптәренә эшлекле ярҙам күрһәтергә, бының өсөн алдынғы уҡытыусылар һәм мәктәптәрҙең тәжрибәһен өйрәнеп, дөйөмләштереп таратыуға оçта етәкселек итергә мөмкинлек бирә. Шул ваҡытта институттың туранан-тура ҡатнашлығында айырым предметтар, тәрбиә эшенең йүнәлештәре буйынса республика конференциялары, семинарҙары, кәңәшмәләре йыш үткәрелә, мәктәптәргә ҙур ярҙам күрһәтелә.

Сабир Йыһаншин һәр эшләгән урынында гәзит-журналдар өсөн мәҡәләләр яҙыуға гел етди ҡарай, унда коллективтың уңыштарын, алда торған бурыстарын тулы яҡтыртырға ынтыла. Ваҡыты бик тар булыуға ҡарамаçтан, ғәҙәттә, мәҡәләне үҙе яҙа.

1967 – 1969 йылдарҙа С.Ш.Йыһаншин партияның Өфө ҡала комитетында яуаплы вазифа башҡара. Шунда уның бай педагогик тәжрибәһе, ҡул аçтындағы материалдары ғилми исем алыу өсөн диссертация яҙырға теләк тыуҙыра, һәм 1969 йылда ул Мәскәүҙә Педагогия фәндәре академияһының ғилми советында «Балаларҙың хоҡуҡ боҙоуын иçкәртеү» темаһына диссертацияһын уңышлы яҡлай.

1971 йылдың майында Сабир Шәйәхмәт улы Йыһаншин Башҡортостан халыҡ мәғарифы министры итеп үрләтелә. Уға респуб-

ликаның иң ауыр һәм ҡатмарлы тармағына етәкселек итеү ышанып тапшырыла. Был вазифаны ул 1985 йылдың февраленә ҡәҙәр, йәғни ун дүрт йыл буйы, намыҫлы башҡара.

Был осорҙа Башҡортостанда, бөтә илебеҙҙәге кеүек, йәштәргә дөйөм урта белем биреү бурысы ҡуйыла һәм мәсьәләне хәл итеүгә мәғариф системаһының бөтә хеҙмәткәрҙәре йәлеп ителә, резервтар эшкә ҡушыла, өҫтәмә көстәр туплана. Ул ваҡытта Рәсәйҙә өлкә һәм республикаларҙың халыҡ мәғарифы эшенә һигеҙ төп күрһәткес (балаларҙың синыфта икенсе йылға ҡалыуын бөтөрөү, ваҡытында туғыҙ йыллыҡ һәм урта белем алыу, мәктәптәрҙе уҡытыусылар менән тәьмин итеү, урта мәктәптә һигеҙ уҡытыу кабинеты булдырыу, хеҙмәт тәрбиәһе биреү өсөн тейешле база булдырыу, мәктәп биналары төҙөү, ауыл уҡытыусыларын фатир менән тәьмин итеү, оҙайлы көн төркөмө ойоштороу һәм мәктәптең бер сменала эшләүен тәьмин итеү) буйынса йомғаҡ яһала ине. Башҡортостан Рәсәй өлкә һәм республикалары араһында арттағы урындарҙың береһендә тора ине. Шунан һуң дөйөм урта белем биреү өсөн төп шарттарҙың иң мөһиме – мәктәп биналары төҙөүгә ҙур иғтибар бирелә башлай. Был эш йылдың-йылы 140 – 160 процентҡа үтәлә, республика беренсе урынға сыға. Башҡортостан халыҡ мәғарифы буйынса 46-сы урындан 4-се урынға күтәрелә. Мәктәп биналары төҙөү мәсьәләһен уңышлы хәл итеүҙә министр урынбаҫары В.В.Дерягин ышаныслы терәк була.

1970 йылда Башҡортостан мәктәптәрҙең уҡытыусы кадрҙары менән тәьмин ителеүе йәһәтенән дә Рәсәйҙә арттағы урындарҙың береһендә торҙо. Эшлекле саралар күреү республиканы был күрһәткес буйынса ла алдынғы урынға күтәрә. Был эштә Сабир Шәйәхмәт улы Йыһаншинға уның урынбаҫары И.И.Ғөбәйҙуллин ҙур ярҙам күрһәтә.

70 – 80-се йылдарҙа Башҡортостан мәктәптәрендә уҡыусыларҙы хеҙмәткә өйрәтеү һәм хеҙмәт тәрбиәһе биреү киң йәйелдерелә. Күп ҡалаларҙа, район үҙәктәрендә уҡытыу комбинаттары асыла, уҡытыу-хеҙмәт бригадалары эшләй. Өфө ҡалаһы районлары, Октябрьский ҡалаһы, Илеш районының Үрге Йәркәй комбинаттары, Тәтешле, Яңауыл, Стәрлетамаҡ, Ғафури, Дүртөйлө районлары мәктәптәренең уҡытыу-хеҙмәт бригадалары яҡшы күрһәткестәргә ирешә.

Һуңға табан, 80-се йылдар аҙаҡтарында, Рәсәй өлкә һәм республикаларының халыҡ мәғарифы буйынса биләгән урынын билдәләү туҡтатыла. Сағыштырыу өсөн төбәктәр алына һәм Башҡортостан Урал төбәгендә (Свердловск, Силәбе, Пермь, Ырымбур өлкәләре, Удмурт республикаһы һ.б.) бер нисә йыл рәттән беренсе урын яулай.

Республикала уҡыусы балаларҙың енәйәт эшләү осраҡтары элеккесә кимәлдә ҡала (600-ҙән артманы), ә Рәсәйҙә был күрһәткес бермә-бер күтәрелде (13 000-дән 27 000-гә барып етте).

Башҡортостан мәктәптәре башланғыс хәрби әҙерлек буйынса юғары күрһәткестәргә өлгәшә. Был йәһәттән республика Куйбышев хәрби округында ун өс тапҡыр беренсе урын биләй. Республика урта мәктәптәрен тамамлаған егеттәр хәрби хеҙмәттә тейешле белемгә һәм күнекмәләргә эйә булыуҙарын күрһәтә, күп осраҡта юғары һөҙөмтәләргә ирешә.

Был йылдарҙа Башҡортостан Рәсәй Министрҙар Советының һәм профсоюздарҙың күсмә Ҡыҙыл байрағына ике тапҡыр лайыҡ була, Саҡмағош, Илеш, Дүртөйлө, Стәрлетамаҡ, Борай, Мәләүез райондарында мәғариф эше шундай байраҡтар менән билдәләнә.

Быларҙың бөтәһе лә – халыҡ мәғарифы министры С.Ш.Йыһаншиндың туранан-тура етәкселеге һәм ныҡышмалы эш һөҙөмтәләре. Ул бер төркөм ышаныслы, эште яҡшы белгән район, ҡала халыҡ мәғарифы бүлектәре мөдирҙәренә таянып эш итә.

1985 йылда педагогия фәндәре кандидаты С.Ш.Йыһаншин Башҡорт дәүләт педагогия институтында доцент вазифаһын башҡара, мәктәпкә идара итеүҙе фәнни ойоштороу кафедраһында эшләй.

Республикабыҙҙың күренекле мәғариф хеҙмәткәре, дәүләт эшмәкәре Сабир Шәйәхмәт улы Йыһаншин педагогик хеҙмәттә ирешкән уңыштары өсөн «Октябрь Революцияһы», Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, «Почет Билдәһе» ордендары, миҙалдар менән бүләкләнә. Былар бөтәһе лә – тынғыһыҙ һәм тырыш хеҙмәт билдәләре.

## ЗӘЙТҮНӘ ҺӘЙБӘН ҡыҙы ЙӘНБАРИСОВА

*(1931)*



Республикабыҙҙың баш ҡалаһы Өфөлә Зәйтүнә Һәйбән ҡыҙы Йәнбарисованы белмәгән кеше юҡтыр, моғайын. Ул – оҙаҡ йылдар ҡала халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире урынбаҫары вазифаһын намыҫлы башҡарған педагог, орден һәм миҙалдар кавалеры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Зәйтүнә Һәйбән ҡыҙы Йәнбарисова 1931 йылдың 25 декабрендә Өфөлә тыуған. Әсәһе уны киләсәктә табибә итеп күрергә теләй. Баш ҡаланың 3-сө урта мәктәбендә уҡыу йылдарында уға тарих уҡытыусыһы, мәктәп директоры Елена Михайловна Короткова көслө йоғонто яһай. Зәйтүнә тарих уҡытыусыһы булыу, балаларға тарихты дөрөҫ аңларға өйрәтеү тураһында хыяллана.

1950 йылда Зәйтүнә Йәнбарисова К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының тарих факультетына уҡырға инә, унда бик яҡшы уҡып, институтты ҡыҙыл диплом менән тамамлай. Яҙмыш ҡушыуы буйынса, юғары белемле уҡытыусы Пермь өлкәһе Чусовка районы Скальный эшселәр ҡасабаһы мәктәбенә эшкә бара, унда алдынғы уҡытыусылар тәжрибәһен ҡыҙыҡһынып өйрәнә.

1957 йылда Өфөгә ҡайтҡас, 12-се киске (сменалы) эшсе йәштәр мәктәбендә Зәйтүнә Йәнбарисованың педагогик таланты тиҙ арала сағыу күренә. Һәләтле педагог мәктәп директорының уҡытыу эше буйынса урынбаҫары итеп күсерелә, тиҙҙән 29-сы урта мәктәп директоры итеп тәғәйенләнә. Был вазифаға Зәйтүнә Һәйбән ҡыҙы Йәнбарисова тулы әҙерлек менән килә. Уҡытыусылар коллективына етәкселек итеү, уларҙың методик эштәрен ойоштороу, һәр педагогты ижади эшләргә өйрәтеү, уның бәләкәй генә уңыштарын да күрә белеү һәм дәртләндереү кеүек сифаттар, уҡытыусыларҙың һәм балаларҙың һәр береһен даими иғтибарҙа тотоу, улар хаҡында әсәләрсә хәстәрлек күреү уны баш ҡала мәктәптәре етәкселәренән айырып тора.

1973 йылда Зәйтүнә Һәйбән ҡыҙы Йәнбарисова 47-се урта мәктәп директоры итеп ҡуйыла. Уҡытыусылар коллективының һәр ағзаһын яҡын күреү, алдынғы педагогтарҙың тәжрибәһен өйрәнеү һәм таратыу тураһында ҡайғыртыу, йәки уҡытыусыларҙы үҫтереү мәктәп директорына ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ҙур уңыштар яуларға мөмкинлек бирә.

Талантлы педагог, оҫта етәксе Зәйтүнә Һәйбән ҡыҙы Йәнбарисова 1983 йылда Өфө ҡала халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире урынбаҫары итеп үрләтелә. Ул яуаплы һәм ҡатмарлы вазифаны күп йылдар намыҫлы башҡара. Был ваҡытта үҙгәртеп ҡороу, яңы иҡтисад шарттарында мәғариф системаһы кисергән хәл-ваҡиғаларҙы көйләүҙә, уның һәйбәт уңыштарын ишәйтеүҙә һәм иң яҡшыларын һаҡлап алып ҡалыуҙа бүлек мөдире урынбаҫарының башҡарған эштәре бихисап.

Уҡытыусы, мәктәп директоры, ҡала халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире урынбаҫары булып эшләгән 43 йыл дәүерендә өлгәшкән уңыштары өсөн Зәйтүнә Һәйбән ҡыҙы Йәнбарисова илебеҙҙең оло

баһаларына лайыҡ була. Ул «Почет Билдәһе» ордены, күп миҙалдар һәм Маҡтау грамоталары менән бүләкләнә. Педагог шулай уҡ Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исемдәрҙе алыуға ирешә.

1997 йылда хаҡлы ялға сыҡһа ла, Зәйтүнә Һәйбән ҡыҙы Йәнбарисова баш ҡаланың мәғариф эштәренән, мәғариф органдары һәм йәштәр менән эшләү комиссияһы ағзаһы буларак, айырылмай. 2001 йылда, ул мәғариф хеҙмәткәрҙәренең ҡала советы ағзаһы, мәғариф органдары һәм йәштәр менән эшләү комиссияһы ағзаһы буларак, барлыҡ уҡыу йорттары музейҙары смотрын үткәреүгә ҙур өлөш индерә. Ғәмәлдә был эштең ойоштороусыһы һәм башҡарыусыһы була.

З.Һ.Йәнбарисова баш ҡаланың Орджоникидзе районында эшҡыуарҙар менән педагогик «ҡунаҡ йорттары», «май шәме яҡтыһында» осрашыуҙар ойоштора, уларҙың уҡытыусыларға ярҙам күрһәтеүенә өлгәшә. Педагог республика халыҡ мәғарифын үҫтереү музейы эштәрендә лә әүҙем ҡатнаша.

## ЛИРА ШӘРИФ ҡыҙы КАМАЛОВА

*(1935)*



Башҡортостандың арҙаҡлы мәктәп директорҙарынан Лира Шәриф ҡыҙы Камалова – Хәйбулла районында үҙе етәкселек иткән мәктәпте яңы баҫкысҡа күтәргән талантлы педагог, Социалистик Хеҙмәт Геройы, орден һәм миҙалдар кавалеры.

Лира Шәриф ҡыҙы Камалова 1935 йылдың 7 ноябрендә Башҡортостандың Күгәрсен районы Сәйетҡол ауылында уҡытыусы ғаиләһендә донъяға килә. 1944 йылда ҡыҙ бала Беренсе Эткол мәктәбенә уҡыуға төшә һәм VII синыфты тамамлай, шунан 1951 – 1955 йылдарҙа Темәс педагогия училищеһында белем ала. Юғары белемгә эйә

булыу теләге йәш белгесте 1955 йылда К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтына алып бара. Был уҡыу йорто Башҡорт дәүләт университеты тип үҙгәртелгәндән һуң, уның тарих-филология факультетын 1960 йылда ҡыҙыл дипломға бөтөрөп сыға. Лира Камалова Хәйбулла районы Бүребай урта мәктәбенә урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы итеп ебәрелә. Тәүге мәлдән үк ул эштә уңғанлыҡ, һәләтлек һәм ысын педагог сифаттары күрһәтә.

Тәжрибәле уҡытыусыны мәктәп директорының уҡытыу-тәрбиә эше буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләйҙәр. Уның ижад ҡомары арта, коллегаларының эшен дә ижади ойоштора. Шуға ла 1971 йылдың сентябрендә Лира Шәриф ҡыҙы урта мәктәп директоры вазифаһына тәҡдим ителә.

Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Л.Ш.Камалова уҡытыусылар коллективына оҫта етәксе булып танылға. Уның үҙенең дәрестәре идея-теоретик һәм методик яҡтан юғары кимәлдә үтә, дәрестә уҡыусыларҙың үҙ аллы эштәренә ҙур урын бирелә. Мәктәптә методик эш уҡытыу программалары талаптары нигеҙендә юғары кимәлдә ойошторола, уҡытыусыларҙың бер-береһенә ярҙамы ғәмәлгә ашырыла.

Бүребай урта мәктәбе Хәйбулла районында тәүгеләрҙән булып балаларҙың тулы өлгәшенә ирешә. Уҡытыу кабинеттары хәҙерге талаптарҙан сығып йыһазландырыла: техник саралар, күргәҙмә әсбаптар уҡыусыларға юғары сифатлы белем бирергә, уларҙы халыҡтың һуғышсан һәм хеҙмәт батырлыҡтары рухында тәрбиәләргә булышлыҡ итә.

Мәктәптең уҡытыу-тәжрибә участкаһы башҡаларға өлгө булырлыҡ. Ауыл хужалығы культуралары, йәшелсә баҡсаһында, география майҙансыҡтарында тәжрибә-күҙәтеү эштәре алып барыла. Оҙайлы көн төркөмөнөң матди базаһы йылдан-йыл ныгый.

Уҡытыу-тәрбиә эшендә өлгәшкән уңыштары өсөн Лира Шәриф ҡыҙы Камалова 1975 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исемгә лайыҡ була, Бүребай ҡасаба, Хәйбулла район Советтарына депутат итеп һайлана.

Уҡытыусылар коллективының юғары сифатлы хеҙмәтен ойоштороғаны, намыҫлы һәм фиҙакәр эштәре өсөн талантлы педагог Л.Ш.Камаловаға 1978 йылда Ленин ордены, «Ураҡ һәм Сүкеш» алтын миҙалы тапшырып, Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән иң юғары исем бирелә, ул шулай уҡ Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән дә бүләкләнә.

Артабан Лира Шәриф ҡыҙы Камалова Башҡортостан мәғарифын үҫтереү институтында эшләй, республикала мәғарифты үҫтереүгә лайыҡлы өлөш индерә. Башҡорт дәүләт педагогия университетында эшләгән ваҡытта ла фиҙакәр хеҙмәт өлгөләре күрһәтә.



# МӨҘӘРИС КАРАМ улы КАРАМОВ

*(1927)*

Асҡын районында Мөҙәрис Карам улы Карамов уҡытыусы, мәктәп директоры булған дәүерҙә күп эштәр тәүге тапҡыр ғәмәлгә ашырыла. Шуға ла уның тырыш, намыҫлы хеҙмәте орден һәм маҡтаулы исемдәр менән билдәләнә.

Мөҙәрис Карам улы Карамов 1927 йылдың 21 ноябрендә Башҡортостандың Асҡын районы Үрмияз ауылында ҡул эштәре оҫтаһы ғаиләһендә һигеҙенсе бала булып донъяға килә. 1943 йылда урта мәктәптең IX синыфын тамамлағас, ул колхозда хисапсы булып хеҙмәт юлын башлай. Әммә егеттең күңелендә балалар уҡытыу теләге күптән уяна. Был хыял уға тынғылыҡ бирмәй. 1945 йылдың февралендә Мөҙәрис Карамов балалар йортонда түңәрәк етәксеһе булып эш башлай. Бөрө педагогия училищеһының ситтән тороп уҡыу бүлеген 1950 йылда бөтөрөп сыға. 1947 йылдың сентябрендә ул мәктәпкә эшкә күсә, башланғыс синыфтарҙа уҡыта, бер үк ваҡытта V – VIII синыфтарҙа математика дәрестәрен алып бара. Армия хеҙмәтен үтәп ҡайтҡас, уҡытыусы йәнә тыуған ауылы мәктәбенә эшкә урынлаша. 1964 йылда Бөрө дәүләт педагогия институтының физика-математика факультетын ситтән тороп тамамлай.

Инициативалы йәш белгесте мәктәп директорының уҡытыу-тәрбиә эше буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләйҙәр. Уҡытыусылар коллективының эшен ижади ойошторғаны өсөн М.К.Карамов 1967 йылда Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы исеменә лайыҡ була. 1971 йылда «Почет Билдәһе» ордены менән бүләкләнә. Бер аҙҙан, ойоштороу һәләтен иҫәпкә алып, Мөҙәрис Карам улы мәктәп директоры итеп тәғәйенләнә. Был вазифаны ул 1988 йылға ҡәҙәр, хаҡлы ялға киткәнсе, башҡара.

Мөҙәрис Карам улы Карамов директор булып эшләгән йылдар Үрмияз мәктәбенең ҙур уңыштар ҡаҙаныу осоро була. Барлыҡ алдынғы башланғыстар шунда тамыр йәйә. Уҡытыуҙың кабинет системаһы районда беренсе булып уның синыфында ойошторола. Районда тәүге тыуған яҡты өйрәнеү музейы Үрмияз мәктәбендә асыла, тәүге хоккей майҙансығы төҙөлә. 1968 йылдан 1988 йылға ҡәҙәр 20 йыл буйы Үрмияз урта мәктәбе балалар ижады күргәҙмәләрендә беренсе урын яулай, мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әҙерләү буйынса район ярышында һәр ваҡыт беренсе урынға сыға, бының өсөн йыл һайын күсмә Ҡыҙыл байраҡ менән бүләкләнә.

Һәр синыф уҡыусылары тулы өлгәшкә ирешә. Хоҡуҡ боҙоу осраҡтары булмай. Мәктәп базаһында районды мәктәп директорҙары, уларҙың урынбаҫарҙары кәңәшмәләре, методик берекмә ултырыштары үткәрелә, алдынғы уҡытыусыларҙың эш тәжрибәһе өйрәнелә һәм таратыла.

Директор Мөҙәрис Карам улы Карамов йәмәғәт эштәрендә ҡатнашырға ла ваҡыт таба һәм көсөн йәлләмәй, совхозда партияның цех ойошмаһы сәркәтибе, пропагандист була, ауыл һәм район Советтарына депутат итеп һайлана.

1979 йылда уҡытыу-тәрбиә эшен ойоштороуҙа өлгәшкән ҙур уңыштары өсөн Мөҙәрис Карам улы Карамовҡа Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исем бирелә. Ул мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыуҙы индереүгә ҙур тырышлыҡ һала. 1978 йылдан бирле балалар башҡорт телен һәм әҙәбиәтен яратып өйрәнә. Быны өсөн матди база ныҡлы, дәреслектәр һәм уҡыу әсбаптары етерлек. Талантлы педагог М.К.Карамов уҡыусылары, коллегалары һәм ауылдаштарының тәрән ихтирамы менән файҙалана. Уны олоһо ла, кесеһе лә хөрмәт итә, ҙурлай.

# ҒАЙСА КӨНӘФИӘ улы КӘРИМОВ

*(1925 – 2000)*



Һәр ойошманың – бәләкәйме ул, ҙур коллективмы – ҡамыҫы, йөҙө, ышанысы, таянысы булған бер ағзаһы барлыҡ коллегаларына юл күрһәтеүсе яҡты маяҡҡа әйләнә. Бындай ышанысты ул тәүге көндәрҙән үк эшкә үтә яуаплы һәм талапсан ҡарашы менән яулай. Ишембай районы Ғүмәр тулы булмаған урта мәктәбе уҡытыусыһы Ғайса Көнәфиә улы Кәримов – шундай арҙаҡлы шәхестәрҙең береһе, ауылдың йөҙөк ҡашына тиң уланы, абруйлы педагог, йәмәғәт хеҙмәткәре.

Ғайса Көнәфиә улы Кәримов 1925 йылдың 29 ноябрендә Башҡортостандың Ишембай районы Ғүмәр ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Кесе йәштән зирәк, тырыш бала үҙ ауылындағы башланғыс мәктәпте ваҡытында тамамлай һәм һигеҙ саҡрым алыҫлыҡтағы Маҡар урта мәктәбенә алты йыл буйы көн дә йөрөп уҡый, синыфтан синыфҡа күсә килеп, урта белем алып сыға. 1943 йылдың февралендә ҡайнар дәрте тынғылыҡ бирмәгән йәш егет Тыуған илебеҙҙе ҡанға батырып айҡалашҡан фашист илбаҫарҙарына ҡаршы Бөйөк Ватан һуғышына китә. Яуыз һәм ҡәһәрле дошман менән алышты ул изге бурыс күреп ҡабул итә, рота радисы булып хәрби хеҙмәт юлын башлай. Фашист илбаҫарҙарын Тыуған илебеҙҙән ҡыуып сығарғас, гвардия ефрейторы, батыр һуғышсы Ғайса Кәримов Венгрия, Австрия һәм Чехословакияны дошман тырнағынан азат итеүҙә ҡатнаша. Ауыр алыштарҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн ул Ватан һуғышы ордены, ике тапҡыр «Батырлыҡ өсөн» миҙалы, тағы бер нисә миҙал менән бүләкләнә. Һуғыш тамамланһа ла, Ғайса Кәримов байтаҡ ваҡыт хәрби хеҙмәттә ҡала, тик 1948 йылдың ғинуарында ғына берҙән-бер иң ҡәҙерле кешеһе – әсәһе янына ҡайта. Ул көндө яугир Ғайса Кәримовтың ҡайтыуын белгән бөтә Ғүмәр ауылы кешеләре, көн сатлама һалҡын булыуға ҡара-

маҫтан, Вазифа апайҙың бәләкәй генә өйөнә хәл белешергә, батыр һалдатты күрергә бер-бер артлы килә. Айырыуса йәш егет һәм ҡыҙҙар күп инеп сыға шатлыҡлы әсә һәм унын алсаҡ улы янына.

Тыныс хеҙмәт юлын ниҙән башларға? Өйгә ҡайтҡан тәүге көндән үк был һорау Ғайса Кәримовҡа тынғылыҡ бирмәй. Әсәгә ҡарап ҡына ултырып булмай ҙа баһа! Ул районның «Алға» гәзите редакцияһына эшкә урынлаша. Мәктәптә уҡыған йылдарҙа уҡ мәҡәлә, хәбәрҙәр яҙыу, әҙәби ижад менән шөғөлләнеү уны был юлға алып бара ла инде. Бер үк ваҡытта Стәрлетамаҡ педагогия техникумына ситтән тороп уҡырға инә һәм уны уңышлы бөтөрөп сыға. Редакцияла йыл ярым эшләүгә, Ғүмәрҙә ете йыллыҡ мәктәп асыла. Бар булмышы, уй-хыялдары менән педагог Ғайса Кәримов уҡытыу-тәрбиә эшенә ең һыҙғанып тотона. Тәүге ваҡыттан уҡ уны педагогик хеҙмәт тәрән ҡыҙыҡһындыра. Йәш, арыу-талыуҙы белмәгән, ғәйрәтле егет барлыҡ көсөн, ваҡытын биреп, илһамланып эшләй. Унын тырышып, рухланып эшләүен башҡа уҡытыусылар ҙа күреп шатлана, ышаныслы терәк өҫтәлде, тип ҡыуана. Яугир уҡытыусы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәренән тыш, йә ауырып киткән, йә декрет отпускыһына сыҡҡан уҡытыусыларҙың да дәрестәрен үткәрә, күпме ҡушһалар, барыһына ла өлгөрә. Бер үк ваҡытта йоҡоһоҙ төндәрен ауыл тормошо, уңған кешеләр тураһында һүрәтләмә, очерктар яҙып үткәрә, шиғыр һәм поэмалар ижад итә. Уҙған быуаттың 50-се йылдарында районның «Алға», республиканың «Совет Башҡортостаны» (хәҙер «Башҡортостан»), «Ҡыҙыл таң» гәзиттәрендә Ғайса Кәримовтың яҙмалары йыш донъя күрә. Шул осорҙа ул райондашы, буласаҡ халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусин, Өфөлә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәти менән таныша, күп йылдар буйы бәйләнеш тота. Һуғышҡа тиклем Маҡар мәктәбендә бергә уҡыған, буласаҡ ғалим-филолог Нур Зарипов менән дә ғүмер буйы яҡын мөнәсәбәттә була, улар бер-береһенә хат яҙышып тора.

Юғары педагогик белем алыу теләге Ғайса Көнәфиә улы Кәримовты К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтына уҡырға алып бара. Уҡыу йорто Башҡорт дәүләт университеты тип үҙгәртелгәс, уны уңышлы тамамлай, ауылда тәүге юғары белемле уҡытыусы дипломына эйә була.

Был үҙенә талапсан, хеҙмәтенә һәр ваҡыт яуаплы ҡараған Ғайса Көнәфиә улында яңы ҡеүәт, дәрт һәм илһам тыуҙыра. Ул Ғүмәр мәктәбенең барлыҡ уҡытыусыларына ла өлгөлө педагог булып таныла. Барыһын да юғары кимәлдә, бөхтә башҡарған уҡытыусыға йәмәғәт эштәре ышанып тапшырыла. Ул оҙаҡ йылдар мәктәптең профсоюз ойошмаһы рәйесе, бригада партия ойошмаһы рәйесе, агитатор, пропагандист вазифаларын үтәй. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте

уҡытыусыларының методик берекмәһе етәксеһе Ғайса Кәримовтың хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ ҙур. Был эште ул мәктәптәге үҙенең төп эше һымаҡ үтә яуаплы башҡара, сөнки ижади эшләгән алдынғы педагогты ғына коллегалары үҙҙәренең методик берекмәһе етәксеһе итеп ҡуйыуҙарын, был вазифаны ышанып тапшырыуҙарын яҡшы аңлай. Был ышанысты Ғ.К.Кәримов намыҫлы хеҙмәте менән аҡлай.

1991 йылдың апрель аҙаҡтарында беҙгә Ишембай районының талантлы уҡытыусыһы, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Ғайса ағай Кәримов, уның ҡатыны Латифа апай һәм балалары менән яҡындан танышырға насип булды, шуның һөҙөмтәһендә «Башҡортостан» гәзитенең 1991 йылғы 8, 9 май һандарында «Ышаныслы ынтылыштар» исемле очерк баҫылып сыҡты. Беҙ унда яугирҙың һуғыш юлдарын һүрәтләүгә күберәк иғтибар биргәйнек.

Ә педагогик хеҙмәткә оҫталығы, маһирлығы Ғайса Көнәфиә улында, тәүге мәлдән үк йөрәк йылыһын тулыһынса биреп, көн һайын илһамланып, оҙаҡ йылдар эшләү һөҙөмтәһендә арта, шымара бара. Уға мәктәп дәреслектәренә әҫәрҙәре ингән шағир, яҙыусыларҙың үҙҙәрен Өфөгә сессияларға барған саҡтарында күреп, йыш ҡына әңгәмәләш булырға тура килә. Быға уның республика ваҡытлы матбуғатында шиғри әҫәрҙәрен, көнүҙәк темаларға мәҡәләләрен сығарыуы булышлыҡ итә. Ҡайтҡас, балалар менән әҙәби әҫәрҙәрҙе өйрәнгәндә уҡытыусы уларҙың авторҙары менән осрашыуҙары хаҡында мауыҡтырғыс итеп һөйләй. Был уларҙа яҙыусы шәхесе, уның әле өйрәнелгән әҫәре менән ҡыҙыҡһыныу тойғолары тыуҙыра.

Ғ.К.Кәримовтың уҡыусылары күп йылдар буйы тулы өлгәш бирә. Уларҙың күбеһе уҡытыусы һөнәрен һайлай. Әҙәби ижад түңәрәгендә ҡатнашҡан уҡыусыларҙың шиғыр, хикәйә, әкиәттәре стена гәзитендә яҙыла, һүрәттәре яһала. Уларҙың әҫәрҙәре китап итеп төпләнә һәм күргәҙмә материал итеп файҙаланыла. Ғайса Көнәфиә улының синыфында уҡыған Вафа Әхмәҙиев – талантлы ғалим һәм шағир, Рауил Ниғмәтуллин күренекле шағир булып танылды. Ғайса ағайҙың улы Салауатты ла Яҙыусылар союзына алдылар. Ул балалар өсөн дә, өлкәндәр өсөн дә хикәйәләр яҙа. Уҡытыусы балаларҙы дәрес материалы менән ҡыҙыҡтыра ла, ҡыҙыҡһындыра ла белә. Уның уҡыусыларҙы әүҙемләштереү, уларҙың аң-белем даирәһен үҫтереү, донъяға ҡарашын киңәйтеү тураһындағы докладтарын, ваҡытлы матбуғатта баҫылып сыҡҡан мәҡәләләрен мәктәп, район уҡытыусылары тәрән өйрәнеп, үҙ эштәрендә файҙалана. Ғайса Көнәфиә улы Кәримов үҙенең уҡытыу-тәрбиә эшендә ҡулланылған ысул һәм алымдарын йылдан-йыл камиллаштыра, педагогик тәжрибәһен байыта, уны район уҡытыусылары менән төрлө йыйындарҙа ихлас уртаҡлаша.

1999 йылда Ғайса Көнәфиә улы менән Латифа Әхмәҙулла ҡыҙы Кәримовтарҙың тормош ҡороп йәшәүҙәренә 50 йыл тулды. Атаәсәнең алтын туйына балалары Юлай, Ғәтифә, Светлана, Нәсимә, Салауат, Нәзимә, Сафа үҙ ғаиләләре менән ҡайтып төштө. Район, ауыл, колхоз етәкселәре, ауылдаштары юбилярҙарҙы ихлас ҡотланы. Ата йорто кинйә улдары Сафа Кәримовҡа мираҫ булып ҡалды. Уның нигеҙе ныҡ, йорт-ҡура ышаныслы ҡулдарҙа.

## ЙӘҮҺӘРӘ САНБАШ ҡыҙы ҠАЗЫЕВА

*(1929)*



Йәүһәрә Санбаш ҡыҙы Ҡазыева 1929 йылдың 30 октябрендә Башҡортостандың иҫ киткес матур тәбиғәтле төбәгендә – Мәсетле районының Әй йылғаһы буйында урынлашҡан Ләмәҙтамаҡ ауылында колхозсы ғаиләһендә донъяға килә. 1948 йылда үҙ ауылында урта мәктәпте тамамлағандан һуң, ул Әбдрәхим ете йыллыҡ мәктәбендә уҡытыусы булып хеҙмәт юлын башлай. Белеме етерлек булмауын тиҙ аңлаған йәш белгес К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының филология факультетына ситтән тороп уҡырға инә һәм уны 1954 йылда уңышлы бөтөрөп сыға.

Тырыш һәм һәләтле уҡытыусы 1950 йылдан 1961 йылға тиклем Әбдрәхим ете йыллыҡ, Мәсетле, Ләмәҙтамаҡ урта мәктәптәрендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, директор урынбаҫары вазифаларын башҡара. 1961 йылдан 1986 йылға тиклем Йонос урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй ҙә шунда хаҡлы ялға сыға.

Уҡытыусы Й.С.Ҡазыеваның бөтә педагогик хеҙмәте уҡытыу предметтарын яҡшы белеүе, ныҡлы теоретик әҙерлеге, юғары мәҙәни кимәле, уҡытыу-тәрбиә эшен оҫта ойоштороуы, уҡыусы балаларға кешелекле мөнәсәбәте менән айырылып тора. Уҡыусыларҙың ижа-

ди әүҙемлеген, үҙ аллы фекерләү һәләтен үҫтереү уҡытыусының методик системаһында төп үҙенсәлек булып иҫәпләнә.

Талантлы уҡытыусы күп йылдар башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының район методик берекмәһенә етәкселек итә. Ул бай тәжрибәһен коллегалары менән ихлас уртаҡлаша, йәш уҡытыусыларға кәңәштәре менән ярҙам итә. Район-ара кәңәшмә, семинарҙарҙа лекция, докладтар менән даими сығыш яһай. Уның сығыштарын, кәңәштәрен яратып ҡабул итәләр, сөнки уларҙың предметты уҡытыу өсөн файҙаһы ҙур була.

Й.С.Ҡазыева башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу, тәрбиә эштәре тураһында район гәзитендә, республика гәзит-журналдарында күп мәҡәләләр баҫтырып сығара, унда үҙ тәжрибәһен уртаҡлаша. «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналында уның дәрес өлгөләре, методик күрһәтмәләре, кәңәштәре даими баҫылып тора.

Уҡытыусы мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинетын матур, фәһемле материалдар менән йыһазлай. 1984 йылда Йонос урта мәктәбендә уның башланғысында тыуған яҡты өйрәнеү музейы асыла.

Үҙ һөнәренә мөкиббән бирелгән уҡытыусы Йәүһәрә Санбаш ҡыҙы Ҡазыева һәр саҡта ла коллегалары өсөн өлгө була, уларҙы ижади эшләргә рухландыра. Уның дәрестәре юғары кимәлдә үтә, синыфтан тыш сараларға барлыҡ тәрбиәләнеүселәре лә атлығып тора, уҡыусылары юғары өлгәше һәм тәртипле булыуҙары менән айырыла. Уҡытыусы балаларҙа туған телгә һәм әҙәбиәткә, халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәренә, тарихына һөйөү тәрбиәләй.

Й.С.Ҡазыева – республикабыҙҙа милли кадрҙар әҙерләүгә тос өлөш индергән кеше. Уның күп кенә уҡыусылары район, республика мәктәптәрендә уҡыта, халыҡ хужалығында етәксе урындарҙа эшләй. Улар бөгөн дә осрашыу кисәләренә уға рәхмәт әйтер өсөн илебеҙҙең төрлө яғынан киләләр.

Йәүһәрә Санбаш ҡыҙы тырыш, кешеләргә ярҙамсыл, белемле булыуы менән дә халыҡ араһында ихтирам яулай. Ул ата-әсәләр менән дә күп төрлө эштәр ойоштора, педагогик темаларға лекциялар уҡый, докладтар һөйләй, ауыл, район сараларында әүҙем ҡатнаша. Абруйлы уҡытыусыны ауыл, Мәсетле район Советтарына бер нисә тапҡыр депутат итеп һайлайҙар, суд заседателе булып та эшләй ул.

Утыҙ йылдан ашыу Йәүһәрә Санбаш ҡыҙы үҙенә генә хас дәрт, әүҙемлек менән йәш быуынды уҡытыу һәм тәрбиәләү эштәре менән ихлас шөғөлләнә.

Тормош иптәше – Мәсетле районы Айып ауылы егете, математика уҡытыусыһы Иҙелман Ҡазыев менән дүрт ҡыҙ тәрбиәләп

үҫтерәләр. Ике ҡыҙы ата-әсәһе юлынан китә – уҡытыусы һөнәрен һайлай, ә ике ҡыҙы табип һөнәренә эйә була.

Бөтә ғүмерен бағышлаған һөнәре ауыр ҙа, ҡатмарлы ла булыуға ҡарамаҫтан, ул үҙен мәктәптән тыш күҙ алдына килтермәй. Хаҡлы ялда булһа ла, һаман да уҡыусылары менән аралашып, уларҙың тормошо менән ҡайнап, аҡыллы кәңәштәрен биреп, улар өсөн борсолоп, шатлыҡ-ҡайғыларын уртаҡлашып йәшәй.

Балаларҙы ихлас яратыу, уларҙы тиң шәхес күреп ихтирам итеү һәм үҙ эшенә ныҡ бирелгәнлек Йәүһәрә Санбаш ҡыҙын уҡытыусы һөнәренең иң юғары кимәленә күтәрҙе. Уның фиҙакәр хеҙмәте хөкүмәтебеҙ тарафынан юғары баһаланды. Ул РСФСР һәм СССР Мәғариф министрлыҡтарының Маҡтау грамоталары менән бүләкләнде, миҙалдарға лайыҡ булды. Уға Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исемдәр бирелде.

## НӘЗИФӘ ФӘРРӘХ ҡыҙы ЛОҠМАНОВА

*(1930)*



Илеш төйәгенең алдынғы уҡытыусылары сафында химия һәм биология уҡытыусыһы Нәзифә Фәррәх ҡыҙы Лоҡманова педагогик хеҙмәтен оҫта башҡарып, ҙур уңыштар яулауы менән айырылып тора. Уны тырыштарҙың да тырышы, уңғандарҙың да уңғаны тип баһалайҙар. Үҙенең фиҙакәр хеҙмәте менән уҡытыусы районның барлыҡ педагогтарына яҡшы өлгө күрһәтә. Уның алдынғы тәжрибәһен өйрәнеүселәр һәр йыл һайын арта, уҡыусылары ла ишәйә бара.

Абруйлы педагог Нәзифә Фәррәх ҡыҙы Лоҡманова 1930 йылдың 30 апрелендә колхозсы ғаиләһендә донъяға килә. Йәше етеү менән, үҙ ауылының ете йыллыҡ мәктәбенә уҡырға бара, уны бөтөргәндән һуң, Үрге Йәркәй урта мәктәбендә белем ала. Өлгөргәнлек

аттестаты тотоп, ул 1948 йылда Бөрөгә юллана һәм унда уҡытыусылар институтының химия-биология факультетына уҡырға инә. Үҙенә талапсан һәм уҡытыусы һөнәренең яуаплылығын яҡшы аңлаған ҡыҙ институтта төплө белем ала, тәүге мәлдән үк үҙен буласаҡ профессияһына ныҡлап әҙерләй.

Юғары белемле һәм яҡшы әҙерлекле белгес Нәзифә Фәррәх ҡыҙы Лоҡманова педагогик хеҙмәт юлын 1950 йылда үҙ районының Ҡарабаш ете йыллыҡ мәктәбендә башлай. Ул замандағы тәртип буйынса, мәктәптән мәктәпкә күсерелә. Ҡайҙа ебәрһәләр ҙә, Нәзифә Фәррәх ҡыҙы күңел биреп эшләй, мәктәп һәм райондың алдынғы уҡытыусылары менән ихлас аралаша, тәжрибәләрен ентекле өйрәнә. Ҡарабаштан һуң ул Аҡкүҙ, Иштирәк, Үрмәт ете йыллыҡ мәктәптәрендә химия һәм биология уҡытыусыһы булып бер-ике йыл ғына эшләй, һәр береһендә тырыш хеҙмәт өлгөһө күрһәтә, сөнки яңы урында эш башлау һәр кеше өсөн дә, моғайын, яуаплы аҙым булып һаналалыр.

1957 йылда К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтын ситтән тороп тамамлаған Нәзифә Фәррәх ҡыҙы Лоҡманова 1958 йылда район үҙәге Үрге Йәркәй урта мәктәбенә күсерелә. Район үҙәгендә ҙур мәктәп коллективының абруйын күтәреү өсөн, уны алдынғы педагогтар менән даими тулыландырыу талап ителә, бер үк ваҡытта йәштәрҙе үҫтереү тураһында ла хәстәрлек күрелә. Нәзифә Фәррәх ҡыҙы һымаҡ тәжрибәле уҡытыусылар уларға матур өлгө күрһәтә.

Н.Ф.Лоҡманова коллективтың әйҙәүсе ағзаһына әүерелә. Уның дәрестә, синыфтан тыш саралар ҙа файҙаланған ысул һәм алымдары һәр ваҡыт «асыҡ», уларҙы ҡараған уҡытыусылар иң файҙалыларын яҙып алып, артабан үҙ эштәрендә ҡуллана.

Химия һәм биология уҡытыусыһы Н.Ф.Лоҡманова, быға ҡәҙәр эшләгән мәктәптәрҙәге кеүек үк, Үрге Йәркәйҙә лә уҡыусыларҙы дәрестә әүҙемләштереү, үҙ аллы эштәрҙе күп һәм һайланма файҙаланыу алымдарын ҡуллана, балалар менән уҡытыу-тәжрибә участкаһын өлгөлө итә. Килегеҙ, өйрәнегеҙ тип, ул коллегаларының һәр береһе менән ихлас эшләй, тәжрибәһен уртаҡлаша, уларҙың да алдынғы булып танылыуы өсөн тырыша.

Оҙайлы һәм уңышлы педагогик хеҙмәте өсөн Нәзифә Фәррәх ҡыҙы Лоҡманова 1968 йылда Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, шул йылда уҡ Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исемдәргә лайыҡ була. Уның Маҡтау грамоталары ла байтаҡ, педагог коллегаларының оло ихтирамы менән файҙалана.

# МӨХӘМӘТ ИБРАҺИМ улы МОСТАФИН

*(1926)*



Мөхәмәт Ибраһим улы Мостафин 1926 йылдың 1 февралендә Башҡортостандың Саҡмағош районы Ҡарғалы ауылында крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. 1935 йылда ул башланғыс мәктәпте тамамлай, 1941 йылда Ҡарайерек ете йыллыҡ мәктәбен Маҡтау ҡағыҙы менән бөтөрөп сыға.

1942 йылдың ноябрендә М.И.Мостафин Бөйөк Ватан һуғышына китә. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн офицер II дәрәжә Ватан һуғышы ордены һәм миҙалдар менән бүләкләнә.

1946 йылдың ноябрендә яугир Таҫҡаҡлы балалар йорто директоры итеп тәғәйенләнә. Бында ул 1960 йылдың авгусына ҡәҙәр, балалар йорто Иҫке Ҡалмаш ауылына күсеп киткәнсе, эшләй. Шунан һуң ул төрлө эштәрҙә намыҫлы хеҙмәт өлгөһө күрһәтә, «Почет Билдәһе» ордены һәм миҙалдар менән бүләкләнә, ҡатыны менән биш бала тәрбиәләп үҫтерә.

Ул эш башлағанда, балалар йортонда тәрбиәләнеүселәр 70-тән артыҡ була. Ҡайҙа ҡарама, нимәгә генә тотонма – мохтажлыҡ хөкөм һөрә. Балалар аслы-туҡлы йәшәй, кейем-һалым етешмәй. Бүлмәләр ҡыуыҡһыҙ шәм менән яҡтыртыла.

Мөхәмәт Мостафин тиҙ арала педагогик хеҙмәткә, ойоштороуға һәләтле булыуын күрһәтә. Тәүәккәллеге, талапсанлығы уға балалар йортона байтаҡ ыңғай үҙгәрештәр индерергә ярҙам итә. Тәрбиәләнеүселәр һәм тәрбиәселәр өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыуҙан башлана бөтә саралар ҙа. Йәш етәксе көндө төнгә ялғап, ваҡыт менән иҫәпләшмәйенсә эшләй. Уға йыш йөрөргә, эҙләнергә тура килә.

Балалар йорто етәксеһенең тынғыһыҙ көндәре, йоҡоһоҙ төндәре бушҡа китмәй. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә балалар өсөн күп кенә әйберҙәр: йыһаздар, бүлмә кәрәк-яраҡтары, өҫ-баш һәм аяҡ кейемдәре алына. Шулай итеп, хәлдәр яйлана башлай, әммә етәксе өсөн былар эштең башы ғына ине әле.

Балалар йортон ысын мәғәнәһендә аяҡҡа баҫтырыу, уның матди базаһын нығытыу өсөн, күп көс һалырға тура килә. Тиҙҙән ашхана, йәшелсә һаҡлағыс, икмәк бешереү урыны, мунса, ат аҙбары төҙөлә. Тәүге йылда балалар йортоноң аҙыҡ-түлек ташыу өсөн бер үгеҙе генә булһа, артабан ике ат, 1953 йылда Башҡортостан Халыҡ мәғарифы министрлығы аша ЗИЛ–150 автомашинаһы алына.

50-се йылдар уртаһында балалар йорто электр энергияһын файҙалана башлай (күсмә электр станцияһы урынлаштырыла), ә ауылда электр лампочкалары 60-сы йылдар башында ғына тоҡана.

Оҙаҡ та үтмәй, балалар йортоноң ярҙамсы хужалығы ойошторола. Унда сусҡа үрсетеү менән шөғөлләнәләр, һыйыр аҫрайҙар.

Баҡсала төрлө йәшелсә үҫтерәләр. Тиҙҙән картуф үҫтереү өсөн колхоздан айырым ер майҙаны алына. Балалар йортоноң хатта иген баҫыуы ла була. Шулай итеп, кескәйҙәрҙең туҡланыуы өсөн мөмкинлектәр арта. Иң мөһиме – бында балалар эш һөйөп, уны башҡарырға өйрәнеп үҫәләр – хеҙмәт күнекмәләре алалар.

Педагогик коллективтың төп бурыстарының береһе – етем балаларҙы тормошҡа әҙерләү, унда үҙ урындарын табырлыҡ итеп тәрбиәләү. Бының нигеҙе хеҙмәт яратыуҙа, хеҙмәт кешеләрен хөрмәтләүҙә булыуын аңлап эш итә етәксе һәм тәрбиәселәр. Балаларға хеҙмәт тәрбиәһе биреү коллективтың төп иғтибар үҙәгендә тора. Кескәйҙәр үҙ-үҙҙәрен хеҙмәтләндерә, бүлмәлә, ашханала дежурлыҡ итә. Малайҙар сүкеш, балта тотоп эшләргә, ҡыҙҙар аш-һыу әҙерләргә, тегергә, бәйләргә өйрәнә.

Мөхәмәт Ибраһим улы Мостафин балалар йорто коллективын сабыйҙарға әхлаҡ тәрбиәһе биреүгә, уларҙы кешелекле итеп тәрбиәләүгә илһамландыра. Бергәләп, ҡулға-ҡул тотоношоп эшләүҙең һөҙөмтәләре, әлбиттә, күҙгә күренеп арта бара. Балалар берҙәм, татыу ғаилә булып туплана, үҙ-ара дуҫ, бер-береһенә иғтибарлы, ауыр саҡта ярҙам ҡулы һуҙырға, олоно – оло, кесене кесе итергә, дөрөҫлөктө яратырға, ғәҙел булырға өйрәнәләр.

Был сифаттарҙың барыһында ла тип әйтерлек, моғайын, балалар үҙ аталарын алмаштырған, гел бөхтә кейенеп йөрөгән, һәр кешегә иғтибарлы, тәрбиәләнеүселәргә һәм тәрбиәселәргә ихтирам менән ҡараған, тупаҫлыҡты, ялҡаулыҡты яратмаған директорҙан өлгө алғандарҙыр.

Мөхәмәт Ибраһим улы тәрбиә эшендә бер-береһенә, айырым балаларға коллектив аша йоғонто яһауҙың өҫтөнлөктәрен күп тапҡыр күрә, уны йыш файҙалана. Тәрбиәләнеүселәрҙең үҙидара органдары ойошторола, уларға ярҙам күрһәтелә.

Коллектив ныҡлы белем һәм тәрбиә биреүгә етди ҡарай. Китап менән ҡыҙыҡһыныу, уны яратыу һыҙаттары уҡыусыларға Мөхәмәт ағайҙарынан бирелгәндер, сөнки директор балалар өсөн китапхана фонды булдырыуға ҙур иғтибар бирә, буш ваҡыттарында улар

менән әллә күпме китап уҡый, ә сабыйҙар ҡыҙыҡһынып тыңлай. Шунан һуң балалар китапханаға йөрөргә күнегеп китә. Уларҙың был ғәҙәте тормош һәм йәшәү талабына әйләнеп, ғүмер буйы дауам итә.

Балалар йорто директоры сабыйҙарҙың сәләмәтлеген нығытыу, ауырыуҙарҙы һауыҡтырыу өсөн күп саралар күрә. Ул санитария-гигиена талаптарының үтәлешен даими контролдә тота. Балалар йортонда тәрбиә саралары – байрамдар, кисәләр, осрашыуҙар, ярыштар, экскурсиялар, походтар йыш үткәрелә, кескәйҙәрҙең тыуған көндәре күңелле байрам итеп уҙғарыла, уға бай йөкмәтке бирелә, һәр кемдең күңелендә онотолмаҫлыҡ тәьҫир ҡалдыра.

Мөхәмәт Ибраһим улы Мостафин күп уҡый, педагогик әҙәбиәт һәм алдынғы тәжрибә яңылыҡтары өйрәнә, белемен арттыра. Ул тәрбиәселәрҙең дә үҙ белемен күтәреү өҫтөндә эшләүҙәрен талап итә.

Тасҡаҡлы балалар йорто бик күп етемдәрҙе аяҡҡа баҫтырып, үҙ аллы тормош юлына сығара. Был коллектив алдынғылар сафында бара. Уның эш тәжрибәһе бер нисә тапҡыр дөйөмләштереп таратыла.

Мөхәмәт Ибраһим улы Мостафин коллегалары, тәрбиәләнеүселәре һәм райондаштарының оло абруйы менән файҙалана. Уға районның почетлы гражданины тигән хөрмәтле исем бирелә, бер нисә миҙал һәм Маҡтау грамоталары менән бүләкләнә.

## ФАТИМА ХӘМИТ ҡыҙы МОСТАФИНА

*(1913 – 1998)*



Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафинаның исем-шәрифтәрен телгә алыу менән, беҙҙең күҙ алдыбыҙға башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан беренсе фәлсәфә фәндәре кандидаты дәрәжәһенә күтәрелгән, оҙаҡ йылдар буйы халыҡ мәғарифы министры булып уңышлы эшләгән һәм республикала мәғарифты яңы үрҙәргә күтәрергә булышлыҡ иткән дәүләт эшмәкәренең олпат һыны һүрәтләнә, оло ихтирамға лайыҡлы шәхестең сағыу образы килеп баҫа.

Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафина 1913 йылдың 26 декабрендә Һамар губернаһының Диңгеҙбай ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Унын бала сағы һәм үҫмер йылдары Өфөлә етем балалар өсөн асылған Ленин мәктәбендә үтә.

1933 йылда Фатима Мостафина К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының химия-биология факультетын бөтөрөп сыға ла Белорет ҡалаһының совет-партия мәктәбе уҡытыусыһы булып хеҙмәт юлын башлай, шунан һуң металлургия техникумында уҡыта. Өс йыл эсендә ул үҙен оҫта педагог һәм ойоштороусы итеп күрһәтә. 1936 йылда Фатима Мостафина комсомолдың Башҡортостан өлкә комитетына пионерҙар менән эшләү бүлеге мөдире итеп эшкә алына.

Бөйөк Ватан һуғышы алдынан һәм ауыр һуғыш йылдарында Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафинаның йәштәргә етәкселек итеү һәләте айырыуса асыҡ күренә. Илебеҙ иң ҡатмарлы һынауҙар кисергән осорҙа – 1942 һәм 1943 йылдарҙа – ул Өфө ҡалаһы Совет район комсомол комитеты сәркәтибе, шунан һуң ВЛКСМ-дың Башҡортостан өлкә комитеты сәркәтибе вазифаларын башҡара.

1944 йылда Ф.Х.Мостафина партия эшенә үрләтелә – партия Үҙәк Комитеты эргәһендәге партия контроле комиссияһының Башҡортостан буйынса яуаплы хеҙмәткәре, шунан өлкә комитетының халыҡ мәғарифы һәм һаулыҡ һаҡлау кадрҙары секторы мөдире булып эшләй.

Етәксе вазифаларҙа үҙен бөтә яҡтан да һәләтле хеҙмәткәр итеп күрһәткән Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафина 1947 йылда конкурс тәртибендә һынауҙар тапшырып, партия Үҙәк Комитеты эргәһендәге Ижтимағи фәндәр академияһына уҡырға ҡабул ителә. Бында ул ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара, йәштәрҙе яңы рухта тәрбиәләү тураһында диссертация яҙып, уны уңышлы яҡлай. Уға башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан беренсе булып фәлсәфә фәндәре кандидаты тигән ғилми дәрәжә бирелә.

Фәлсәфә фәндәре кандидаты Ф.Х.Мостафина партия Үҙәк Комитеты аппаратында эшләй, өс йыл Үҙәк Комитеттың пропаганда һәм агитация бүлегендә инструктор вазифаһын башҡара.

Башҡортостан партия ойошмаһының юллауы буйынса, Ф.Х.Мостафина 1953 йылда Өфөгә ҡайта, тәүҙә партия өлкә комитетының фән һәм уҡыу йорттары бүлеге мөдире булып эшләй, был бүлек үҙгәртелгәндән һуң, өлкә комитетының мәктәптәр бүлеге мөдире була.

1955 йылда Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафина Башҡортостан халыҡ мәғарифы министры итеп үрләтелә, был вазифаны оҙаҡ йылдар, 1971 йылға ҡәҙәр, башҡара, үҙен яҡшы ойоштороусы, инициативалы хеҙмәткәр, хәстәрлекле һәм талапсан етәксе, дәүләт эшмәкәре итеп таныта.

Ф.Х.Мостафина мәктәп тураһындағы ҡарарҙарҙы, күрһәтмәләрҙе тормошҡа ашырыуға, республикала мәғарифты үҫтереүгә ғәйәт күп көс һала. Был ваҡытта дөйөм халыҡ хужалығы фонында мәғариф ҙур күтәрелеш осорон кисерә, бейек үрҙәр яулай, яңынан-яңы уңыштарға ирешә.

Халыҡ мәғарифы системаһын үҙгәртеп ҡороу, уҡытыусы кадрҙары әҙерләү, мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә эшенең сифатын яҡшыртыу, бер синыфта ике йыл ултырыуҙы бөтөрөү өсөн көрәш, мәктәп-интернаттар селтәрен киңәйтеү кеүек мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә министр Ф.Х.Мостафина ныҡышмалылыҡ һәм принципиаллек күрһәтә. Был эштәрҙе уңышлы үтәп сығыу республика өсөн айырыуса мөһим була.

Уҙған быуаттың 50 – 60-сы йылдарында йәштәргә дөйөм ете йыллыҡ, һигеҙ йыллыҡ белем биреүҙән дөйөм урта белем биреүгә күсеү киң үҫеш ала. Мәктәптәрҙең һәм балалар ойошмаларының матди базаһын нығытыу буйынса байтаҡ эштәр башҡарыла. Етенсе биш йыллыҡта ғына дәүләт, кооператив предприятиелары һәм ойошмалары тарафынан 130 мең урынлыҡ мәктәп биналары төҙөлә, колхоз, совхоз һәм сәнәғәт предприятиелары аҡсаһына инициатив ысул менән төҙөлөш эштәре киң йәйелдерелә.

Рәсәй Федерацияһы өлкәләре, республикалары һәм крайҙарының социалистик ярыш йомғаҡтары, мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әҙерләү, уларҙың матди базаһын нығытыу буйынса өлгәшкән уңыштары өсөн Башҡортостан юғары ойошмаларҙың күсмә Ҡыҙыл байрағы менән ике тапҡыр, 1958 һәм 1959 йылдарҙа, бүләкләнә, һигеҙенсе биш йыллыҡта биш тапҡыр Маҡтау грамоталарына лайыҡ була.

Быларҙың барыһын да ойоштороуҙа һәм ҙур уңыштарға ирешеүҙә халыҡ мәғарифы министры Ф.Х.Мостафинаның хеҙмәте айырыуса һиҙелерлек. Ул мәғариф эштәрен дөйөмләштереүгә ныҡ иғтибар бирә, шул турала биш монография яҙа. Хаҡлы ялға сыҡҡандан һуң, мәғариф эшмәкәре Милли мәктәптәр ғилми-тикшеренеү институтының Башҡортостан филиалында өлкән ғилми хеҙмәткәр була, йәмәғәт эштәрендә ҡатнаша.

Хеҙмәттә өлгәшкән уңыштары өсөн Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафина Ленин ордены, ике тапҡыр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә, уға Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған уҡытыусыһы исемдәре бирелә. Министр булған йылдарҙа халкыбыҙҙың арҙаҡлы ҡыҙы Рәсәй Федерацияһы Юғары Советына, Башҡортостан Юғары Советына бер нисә тапҡыр депутат итеп һайлана. Ул үҙенең халыҡ хеҙмәтсеһе бурыстарын – юғары органдарҙа хеҙмәтсәндәрҙең хоҡуҡтарын яҡлау, мәнфәғәттәрен күҙәтеү, наказдарын үтәү һәм башҡа бик күп эштәрҙе намыҫлы башҡара.

Министр Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафина етәксе урындарға кадрҙар һайлап алыуға, уларҙы үҫтереүгә ныҡлы иғтибар бирә. Байтаҡ мәктәп директорҙары, халыҡ мәғарифы бүлектәре мөдирҙәре, республика мәғариф органдары етәкселәре, хатта уҡытыусыларҙан ҡайһы бер кешеләр уның туранан-тура һәм көндәлек ярҙамы һөҙөмтәһендә күтәрелделәр, ҙур уңыштарға ирешеүҙәре менән министрҙың ышанысын аҡланылар.

Республиканың мәғариф министры Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафина уҡытыусы кадрҙары, башҡа хужалыҡ тармаҡтары белгестәре әҙерләү, уларҙы Мәскәү юғары уҡыу йорттарын тамамлағандан һуң, Башҡортостанға ҡайтарыу тураһында оло хәстәрлек күрә. Өфө ҡалаһының 1-се мәктәп-интернаты (хәҙер Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика гимназия-интернаты) уҡытыусыһы, сит ил телдәре белгесе Ф.Ә.Аҡманованың һүҙҙәренә ҡарағанда, Фатима Хәмит ҡыҙы Мәскәүгә командировкаға барған саҡтарында Башҡортостандан студент ҡыҙҙар һәм егеттәр йәшәгән дөйөм ятаҡтарҙа булып, уларҙы, уҡыуҙарын тамамлағас, Башҡортостанға ҡайтырға өндәй, эш һәм фатир менән шунда уҡ тәьмин итергә вәғәҙә бирә. Ул үҙ һүҙендә тора.

Был ябай ғына миҫал, әммә мәғариф министрының эш өсөн, халыҡ өсөн янып йәшәүен асыҡ күрһәтә. Күптәрҙең йөрәгендә ул хәстәрлекле, ярҙамсыл, талапсан кеше булып һаҡлана.

## ЯХИЯ НОҒОМАН улы МӨНИРОВ

*(1932)*



Яхия Ноғоман улы Мөниров 1932 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостандың Балтас районы Түбәнге Ҡарыш ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған. Урта мәктәпте тамамлағас, ул Бөрө дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына урыҫ теле һәм әҙәбиәте бүлегенә уҡырға инә, ике йыл уҡығас, тыуған ауылына ҡайта ла мәктәптә урыҫ теле һәм биология уҡыта.

Түбәнге Ҡарыш һәм Имән ете йыллыҡ мәктәптәрендә бер аҙ эшләгәс, йәш егет армия сафына алынып, Сахалин утрауҙарында хеҙмәт итә. Унан әйләнеп ҡайтҡан егетте Штәнде урта мәктәбенә урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы итеп ебәрәләр. Бында Яхия Ноғоман улы бик тырыша, йәмәғәт эштәрендә әүҙемлек күрһәтә. Бер үк ваҡытта Бөрө педагогия институтында ситтән тороп уҡыуын дауам итә һәм уны уңышлы тамамлай.

Зиләзекүл ете йыллыҡ мәктәбендә бер йыл урыҫ теле һәм әҙәбиәтен уҡытҡас, Яхия Ноғоман улын директор итеп үрләтәләр. Бына шунда уның педагогик таланты һәм ойоштороу һәләте асыла башлай, әҙерлекле һәм талапсан педагог булып танылa. Мәктәп директоры уҡытыусыларҙың уҡытыу-тәрбиә эштәрен уңышлы ойоштора алыуҙары өсөн бөтәһен дә эшләй, дәрестәрҙә була, методик ярҙам күрһәтә. Директор үҙе лә күп уҡый, алдынғы тәжрибәне һәм махсус әҙәбиәтте өйрәнә, уҡытыусыларҙан да шуны талап итә.

Тиҙ арала Зиләзекүл мәктәбе алдынғылар сафына сыға. Унда уҡытыу-тәрбиә эшенең күп мәсьәләләре буйынса фәнни-ғәмәли конференциялар үткәрелә, педагогик уҡыуҙар ойошторола. Алдынғы тәжрибә уртаҡ хазинаға әйләнә.

Мәктәп директоры Я.Н.Мөниров бер үк ваҡытта бригада парторгы, пропагандист, лектор вазифаларын да башҡара.

1962 йылдың башында талантлы педагог, ойоштороусы Яхия Ноғоман улы Мөниров Балтас район мәғарифы бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. Эште үҙләштереп, ҙур пландар ҡороп йәшәгәндә генә, райондар эреләтелә, район үҙәге Борай ауылына күсә. Иҫке Балтас урта мәктәбендә урыҫ теле һәм әҙәбиәтен бер аҙ уҡытҡандан һуң, Я.Н.Мөниров Шауъяҙы һигеҙ йыллыҡ мәктәбенә директор итеп күсерелә. Быға ул йәнә киң ҡолас йәйеп тотона. Уҡытыусылар коллективы яңы директор етәкселегендә уҡытыу-тәрбиә эшендә быға са булмаған бейеклектәрҙе яулай. Шауъяҙы мәктәбенең күркәм үрҙәре гәзит-журналдарҙа, радио һәм телевидение тапшырыуҙарында яҡтыртыла, мәктәп коллективы менән урындағы «Сигнал» колхозы идараһының берлектәге саралары плакаттарҙа дөйөмләштерелә.

Шауъяҙы мәктәбендә «Алдынғы тәжрибәне өйрән һәм ҡуллан!» темаһына асыҡ дәрестәр, конкурстар үткәрелә. Уҡытыусылар «Педагогик хеҙмәт оҫтаһы» кенәгәһен алыу өсөн көрәшә. Шул осорҙа уҡытыусыларҙың күбеһе талантлы педагог булып танылa, уларға маҡтаулы исемдәр, бүләктәр бирелә.

Түбәнге Ҡарыш һигеҙ йыллыҡ мәктәбе директоры булып йыл ярым эшләгәс, 1969 йылда Яхия Ноғоман улы Мөниров йәнә

район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп ҡуйыла. Бында ул ойоштороу һәләтен, педагог оҫталыҡтарын асыҡ күрһәтә. Ул оҙаҡ йылдар, 1997 йылға ҡәҙәр, бүлек мөдире була.

Яхия Ноғоман улы Мөниров етәкселегендә мәктәптәрҙең һәм балалар ойошмаларының уҡытыу-матди базаһы йылдан-йыл нығый. Бер биш йыллыҡта ғына алты мәктәп, бер төкәтмә, ике интернат, ике ашхана, ете балалар баҡсаһы файҙаланыуға тапшырыла.

Халыҡ мәғарифы бүлеге Я.Н.Мөниров мәктәптәргә база предприятиеларын беркетеүгә, уларҙың ярҙамын ойоштороуға һәр ваҡыт етди ҡарай. База предприятиелары ярҙамында тракторсылар, шоферҙар, малсылар, төҙөүселәр әҙерләү кабинеттары яңыртыла.

Яхия Ноғоман улы уҡытыусылар һайлап алыуға, тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирә. Уларҙың күбеһе тейешле белем алған. Мәктәп директорҙары һәм уларҙың урынбаҫарҙары юғары белемле.

Һәр йыл һайын мәктәптәр һәм башҡа балалар ойошмалары яңы уҡыу йылына өлгөлө әҙерләнә. 1983/84 уҡыу йылына әҙерләнеү йомғаҡтары буйынса Балтас районы СССР Халыҡ мәғарифы министрлығының һәм мәғариф, юғары мәктәп һәм ғилми учреждениелар хеҙмәткәрҙәре профсоюзы Үҙәк Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағы менән бүләкләнә.

Бүлек мөдиренең оҫта етәкселеге һәм даими контроле һөҙөмтәһендә, мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә эше яҡшырғандан-яҡшыра бара. Өлгәш бер нисә йыл буйы 99,9 процент тәшкил итә. Уҡыусыларҙың фәнни йәмғиәттәре, клубтары, смотр-конкурстар, олимпиадалар предметтарҙы тәрән үҙләштерергә булышлыҡ итә.

Район мәктәптәрендә уҡыусыларға хеҙмәт тәрбиәһе һәм һөнәр йүнәлеше биреү буйынса байтаҡ саралар күрелә. 15 урта мәктәптә трактор, ике мәктәптә автоэш, һигеҙ мәктәптә малсылыҡ нигеҙҙәре, бер мәктәптә төҙөлөш эштәре өйрәнелә. Урта мәктәпте тамамлаусыларҙың артабан уҡырға бармағандары тиҙ арала ауыл хужалығында үҙ урындарын таба.

Мәктәптәрҙең тарих, тыуған яҡты өйрәнеү, дан музейҙары тәрбиә үҙәгенә әйләнә. Балтас балалары һәр урында тәртипле, әҙәпле, кешеләргә иғтибарлы булыуҙары менән айырылып тора.

Мәктәптәрҙең уҡытыу-тәрбиә эштәрендә, район буйынса педагогик хеҙмәттә өлгәшкән уңыштары өсөн Яхия Ноғоман улы Мөнировҡа 1974 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исем бирелә. Ул 1976 йылда «Почет Билдәһе» ордены менән бүләкләнә, башҡа йылдарҙа миҙалдарға һәм Маҡтау грамоталарына лайыҡ була.

# ӘКРӘМ ИСКӘНДӘР улы МУЛДАШЕВ

*(1924)*



Мулдашевтар – Башҡортостан бәҫен һәм ҡотон тотҡан күренекле шәхестәр. Атҡаҙанған уҡытыусылар һәм атаҡлы табиптар – был аҫыл заттар менән халҡыбыҙ хаҡлы ғорурлана. Уларҙың береһе Әкрәм Искәндәр улы Мулдашев – заманыбыҙҙың тел тейҙергеһеҙ шәп педагогы, орден һәм миҙалдар кавалеры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Әкрәм Искәндәр улы Мулдашев 1924 йылдың 5 февралендә Башҡортостандың Стәрлетамаҡ районы Аллағыуат ауылында урман белгесе ғаиләһендә тыуған. 1929 йылда уның ата-әсәһе Белорет районының данлыҡлы Сермән ауылына күсә. Бында Искәндәр ағай Мулдашевты урман белгесе булараҡ эшкә ебәрәләр.

1938 йылда Әкрәм Мулдашев Сермән мәктәбенең VII синыфын бөтөрөп сыға һәм ауылда урынлашҡан педагогия училищеһына уҡырға инә. Киләсәктә яҡшы уҡытыусы булыу теләге уны бөтә предметтарҙан да тик «4» һәм «5» билдәләренә уҡыуға дәртләндерә.

Педагогия училищеһында уҡыуҙы бөтөр-бөтмәҫтән, 1941 йылда Бөйөк Ватан һуғышы башланып китә. Сәләмәтлеге насар булыу сәбәпле, Әкрәм Мулдашев хәрби хеҙмәткә алынмай, шунда уҡ мәктәпкә уҡытыусы итеп тәғәйенләнә. Ул фронтҡа киткән уҡытыусыларҙы алмаштыра, балаларға бер нисә предмет буйынса белем бирә, артабан физика, математика, химия, астрономия фәндәрен яҡын күреп, шул фәндәр буйынса белемен күтәрә.

1954 йылда Магнитогорск дәүләт педагогия институтын ситтән тороп тамамлағандан һуң, Ә.И.Мулдашев Сермән урта мәктәбендә уҡыусыларға физика һәм математика буйынса тәрән белем биреүҙе маҡсат итеп ҡуя, шулай ҙа уға ҡайһы ваҡыт химия һәм астрономияны ла уҡытырға тура килә. Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында

мәктәптең физика һәм математика кабинеттары районда иң яҡшылары булғандыр, моғайын. Ә.И.Мулдашев физика һәм математика кабинеттарын автоматлаштыра. Идара итеү пульты барыһын да эшләргә мөмкинлек бирә, дәрес материалдарынан тыш, өҫтәмә әсбаптар күрһәтелә. Йыһаздары һәм хеҙмәтләндереү саралары менән физика кабинеты айырыуса уңышлы. Бында бөтөн эштәрҙе лә техника хәл итә.

Математика кабинеты ла һәйбәт йыһазландырыла. Төрлө замандың күренекле математиктары портреттары, уларҙың ҡыҫҡаса биографиялары, иң мөһим математик теоремалар, схемалар – барыһы ла тотош белем «һандығы» булып тора.

Әкрәм Искәндәр улы кесе йәштән техника менән ҡыҙыҡһына. Бындай осраҡта, ғәҙәттә, кешегә техника «ене» ҡағылған, тиҙәр. Ә.И.Мулдашев 11 йәшендә радио ҡороп ала, электр гитараһында уйнарға өйрәнә. Тормош ҡороп йәшәй башлағас, ул йорт-ҡура кәрәк-яраҡтарын үҙе яһай ҙа ҡуя. Уның уҡытыу кабинеттары һәм йорт хужалығы әҙер деталдәр, запас частар һәм башҡа ҡорамалдарға бай.

Мәктәптә уҡытыу-тәрбиә эшен өлгөлө алып барыуын, йорт хужалығын һыр бирмәҫлек көтөүен уҡытыусылар һәм башҡа кешеләр күрәләр ҙә, Әкрәм Искәндәр улы нисек барыһына ла өлгөрә ала икән, тип аптырайҙар. Бындай һорауҙарға хеҙмәт ветераны, уйларға кәрәк, ял иткәндә лә мейене эшләтеү файҙалы, тип яуап бирә.

Уҡытыу-тәрбиә эшендә өлгәшкән ҙур уңыштары өсөн Әкрәм Искәндәр улы Мулдашевҡа 1970 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исем бирелә. Ул «Халыҡтар дуҫлығы» ордены, төрлө йылдарҙа күп миҙалдар һәм Маҡтау грамоталары менән бүләкләнә.

Уҡытыусы Ә.И.Мулдашев мәктәп һәм ауылдың йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша, коллегалары менән ауылдаштарының оло һөйөүен яулай.

# МУЛЛЫЙ ФАКАЕТДИН улы МӘҒЗҮМОВ

*(1927)*



Аңлы ғүмеренең 47 йылын мәғариф өлкәһендә, шуның 40 йылын бер мәктәптә директор булып эшләгән хеҙмәткәрҙәр республикала бик аҙ, хатта берәү генәлер, моғайын. Муллый Факаетдин улы Мәғзүмов – шундай арҙаҡлы шәхестәрҙең береһе, талантлы уҡытыусы, мәктәптә уҡытыу-тәрбиә эштәрен юғары кимәлдә ойоштороусы педагог.

Муллый Факаетдин улы Мәғзүмов 1927 йылдың 27 мартында Башҡортостандың Балтас районы үҙәге Иҫке Балтас ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Уға өс йәш тулғанда, атаһы вафат була, әсәһе Миңневафа апайҙың ҡарамағында дүрт бала ҡала, уларҙың иң бәләкәсенә бер йәш тә тулмаған. Ниндәй ауырлыҡтар күрһә лә, әсә балаларын тәрбиәләп, ҡурсалап үҫтерә. Бөйөк Ватан һуғышы ауылда ҡалған төп эшсе көстәр – ҡатын-ҡыҙҙар, бал-сағаларға күтәрә алмаҫлыҡ ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Муллый йәйҙәрен колхоз баҫыуында эшләй, ҡыштарын уҡый. 1946 йылда урта мәктәпте тамамлай. Бик әҙәпле, зирәк һәм зиһенле егетте Соҡалы ауылына уҡытыусы итеп ебәрәләр. Унда Муллый Мәғзүмов бик тырышып тәжрибә туплай. Ике йылдан һуң уны Штәнде ете йыллыҡ мәктәбенә тарих уҡытыусыһы итеп ҡуялар. Артабан йәш егет Ҡомъяҙы мәктәбе директоры булып эшләй.

Эш өсөн йәнен-тәнен биргән, янып йәшәгән йәш директорға уҡытыусылар бик теләп ярҙам итәләр. Муллый Мәғзүмов Бөрө уҡытыусылар институтының ситтән тороп уҡыу бүлеген тамамлай. Шунан Башҡорт дәүләт университетының ситтән тороп уҡыу бүлеген, Өфөлә марксизм-ленинизм университетын уңышлы бөтөрөп сыға.

Уҡытыу-тәрбиә эшендә бер аҙ тәжрибә туплаған Муллый Мәғзүмов 1952 йылда Тутағас ете йыллыҡ мәктәбе директоры итеп ҡуйыла

һәм 40 йыл ошо мәктәптең уҡытыусылар коллективына етәкселек итә. Ул эш башлағанда, мәктәп иҫке, емерек була. 300-ҙән ашыу бала өс сменала уҡый. Йәш директор быны менән килешә алмай. Ата-әсәләр менән һөйләшкәндән һуң, ул район Советы башҡарма комитеты, колхоз идараһы, ауыл Советы юлдарын тапай башлай. Мәктәп һалыу өсөн 120 кубометр ағас сығарыла, 300 кубометр бүрәнә һәм таҡта әҙерләнә. Көсөргәнешле хеҙмәт һөҙөмтәһендә 1962 йылда 260 урынлыҡ яңы мәктәп ҡалҡып сыға.

1964 йылда иркен спорт залы, хеҙмәт оҫтаханаһы һәм башҡа бүлмәләре булған яңы мәктәп һалына, 1970 йылда тағы бер бина төҙөлә. Районда беренсе булып спорт залы һәм спорт майҙансығы сафҡа индерелә, тәжрибә баҡсаһы булдырыла. Алғы ҡапҡа матур итеп эшләнә.

Мәктәптең тирә-йүнендә ағастар ултыртыла, бер яғында парк асыла. Тутағас мәктәбе районда эстетик йәһәттән оҫта йыһазландырылған мәктәпкә әйләнә. Оло юлдан үтеп барған дәрәжәле етәкселәр был мәктәпкә туҡтамай китә алмайҙар. Заманында бында Башҡортостан етәкселәре М.З.Шакиров, З.Ш.Аҡназаров, Ф.В.Солтанов, хатта Мәскәү ҡунаҡтары туҡталып уҙа.

Мәктәп уҡытыуҙың кабинет системаһына күсерелә. Быны өсөн кәрәкле йыһаздар алына. Барлыҡ уҡытыусылар ҙа уҡытыу-тәрбиә эшен юғары кимәлдә, ижади ойоштора, алдынғы тәжрибәне өйрәнә, методик эште киң йәйелдерә.

Мәктәп баҡсаһында уҡыусылар төрлө үҫемлектәр үҫтерә, сорт һынау буйынса тәжрибәләр үткәрә. Хеҙмәт звеноһы колхоз баҫыуында уңышлы эшләй. Фән нигеҙҙәрен тәрән үҙләштереү менән бергә уҡыусылар хеҙмәт һөйөргә, йәшелсә, емеш-еләк үҫтерергә, иген игергә өйрәнә.

Муллый Факаетдин улы уҡытыусылар һайлап алыуға, уларҙы педагогик хеҙмәткә өйрәтеүгә ҙур иғтибар бирә. Тынғыһыҙ хеҙмәт Тутағас мәктәбен районда алдынғылар сафына алып сығырға булышлыҡ итә. Ул терәк мәктәпкә әйләнә. Мәктәп базаһында башҡа мәктәп директорҙары, синыф етәкселәре, уҡытыусылар өсөн йыш ҡына семинарҙар үткәрелә, тәжрибә уртаҡлашыу уҡыуҙары ойошторола.

1959 йылда Тутағас һигеҙ йыллыҡ мәктәбе эргәһендә Муллый Мәғзүмов башланғысында районда беренсе халыҡ университеты асыла һәм үҙе уның ректоры итеп һайлана. Университетта ата-әсәләр өсөн төрлө түңәрәктәр ойошторола, уҡыуҙар үткәрелә. Ата-әсәләргә педагогик белем биреү буйынса ойошторолған смотр-конкурста мәктәп университеты республикала икенсе урын яулай һәм ҡиммәтле бүләктәргә лайыҡ була.

1950 йылдан 1990 йылға ҡәҙәр Муллый Факаетдин улы Мәғзүмов партия уҡыуҙары системаһында пропагандист була. Ул үҙ тәжрибәһе тураһында гәзит-журналдарға мәҡәләләр яҙа, радио, телевидение тапшырыуҙары аша һөйләй, кешеләр менән уртаҡлаша. Ауыл Советы депутаты булараҡ, ул мәҙәниәт йорто төҙөүгә ирешә.

М.Ф.Мәғзүмовтың мәғариф өлкәһендә башҡарған эштәре бихисап. Ул уҡытыусылар, балалар, ата-әсәләр һәм райондаштарының оло ихтирамы менән файҙалана. Талантлы педагог республикала киң таныла, уның тәжрибәһен өйрәнеүселәр, педагогик хазинаһы менән танышырға теләүселәр ныҡ арта. Мәктәп директоры, уның арыу-талыу белмәҫ эштәре тураһында район һәм республика ваҡытлы матбуғатында заманында күп яҙалар. Ул – бер нисә быуын йәштәренең ятраҡан педагогы.

Уҡытыу-тәрбиә эшендә өлгәшкән ҙур уңыштары өсөн Муллый Факаетдин улы Мәғзүмов 1962 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исемгә, миҙал һәм Маҡтау грамоталарына лайыҡ була. Ул йыш ҡына уҡытыусылар съездарында делегат булып ҡатнаша. Бәхетле булыу өсөн намыҫың пак, эштәрең изге, выжданың тыныс булырға тейеш, ти хеҙмәт ветераны.

## МАРАТ АБДРАФИҠ улы НАФИҠОВ

*(1928 – 1996)*



Педагогия училищеларының дан ҡаҙанған уҡытыусылары когортаһында Марат Абдрафиҡ улы Нафиҡовтың исем-шәрифтәре һәр ваҡыт оло ихтирам менән телгә алына. Ул – талантлы педагог, мәрхәмәтле һәм ярҙамсыл коллега, әҙәпле, айырыуса йомшаҡ күңелле иптәш, урыҫ теле буйынса дәреслектәр авторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Марат Абдрафиҡ улы Нафиҡов 1928 йылдың 18 апрелендә Башҡортостандың Дыуан районы Мөлкәт ауылында донъяға килә.

Ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, ул Мәсәғүт тарафтарына юллана. Алыҫта ятҡан ауыл ниндәйҙер яҡтылыҡ сығанағы, бәхет нуры булып сағыла, сөнки унда педагогия училищеһы – уҡытыусылар әҙерләүсе белем усағы урынлашҡан. Марат Нафиҡовтың хыялы томошҡа аша – ул уҡырға ҡабул ителә. Училищела уҡыу йылдары тиҙ үтеп китә. Йәш белгес хеҙмәт юлын 1945 йылда Ҡыйғы районы Абзай башланғыс мәктәбе уҡытыусыһы булып башлай.

Һәләтле, уйлап эш иткән уҡытыусыны 1948 йылда Ҡыйғы район мәғариф бүлегенә инспектор итеп күсерәләр. Тап шул осорҙа, 1948 – 1951 йылдарҙа, уның педагог таланты асыла. Марат Нафиҡов башланғыс синыфтарға ысын ярҙам күрһәтә, уҡытыусыларҙың тәжрибә уртаҡлашыуҙарын ойоштора. Алдынғыларҙың уҡытыу-тәрбиә эштәрендә өлгәшкән уңыштары тиҙ арала барыһының да уртаҡ хазинаһына әйләнә. Педагогика өлкәһендә лә Марат Нафиҡов көсөргәнешле эҙләнеүҙәр алып бара, Мәсәғүт уҡытыусылар институтынан һуң Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Уны бөтөрөп сыҡҡас, М.А.Нафиҡов 1961 йылда Дыуан районы Арый һәм Иҫке Хәлил тулы булмаған урта мәктәптәрендә уҡытыусы, директор урынбаҫары һәм директор вазифаларын башҡара. 1964 йылда эреләтелгән Салауат районының мәғариф бүлеге инспекторы булып эшләй.

1965 йылда һәләтле уҡытыусы Марат Абдрафиҡ улы Нафиҡовты Мәсәғүт педагогия училищеһына эшкә саҡыралар. Бында ул студенттар менән күп яҡлы эш алып бара, уларға педагогика, урыҫ теле һәм әҙәбиәте буйынса йөкмәткеле лекциялар уҡый, дәрестәр үткәрә, киләсәктә намыҫлы, тырыш уҡытыусылар булырға өйрәтә. Марат Нафиҡов училищела уҡытыусы, директор урынбаҫары, педагогик практика бүлеге мөдире вазифаларын бөтөн йәшлек дәртен, йөрәк ҡайнарлығын биреп башҡара. Күренекле мәғариф хеҙмәткәре 1985 йылда Башҡортостан Халыҡ мәғарифы министрлығында инспектор булып эшләй, шунан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтына педагогия училищелары кабинеты мөдире итеп тәғәйенләнә.

Педагогия училищеһында, артабан да уҡытыу-тәрбиә өлкәһендә ғилми-тикшеренеү эштәре менән шөғөлләнеү Марат Абдрафиҡ улын башланғыс синыфтар өсөн урыҫ теле буйынса дәреслектәр һәм методик ҡулланмалар яҙыуға алып бара. 1984 йылдан ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем ул башланғыс синыфтарҙың урыҫ теле дәреслектәре һәм башҡа уҡытыу әсбаптары өҫтөндә эшләгән авторҙар коллективының етәксеһе була. Уның «Букварь» китабы һәм матур яҙыу өлгөләре 2002 йылда ун алтынсы тапҡыр баҫылып сыға.

Уҡытыу-тәрбиә һәм ғилми-тикшеренеү эштәрендә өлгәшкән уңыштары өсөн 1986 йылда Марат Абдрафиҡ улы Нафиҡовҡа Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән ҙур исем бирелә. Эҙләнеү һәм уңышҡа өлгәшеү шатлыҡтарын тәрән кисерә белгән педагог үҙе артынан уҡыусылары йөҙөндә сағыу эҙ ҡалдыра. Уның меңәрләгән тәрбиәләнеүселәре яратҡан уҡытыусыһының данлы эштәрен дауам итә, һәр ерҙә уға оҡшарға, уның һымаҡ яҡшы хеҙмәт итергә ынтыла.



## НАИЛӘ СӘЙФЕТДИН ҡыҙы НИЯЗҒОЛОВА

*(1932)*

Шундай уҡытыусылар була: улар коллегаларының уҡытыу-тәрбиә эшенә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә яңы һулыш биреп кенә ҡалмай, ә тотош коллективтың маҡсатҡа ынтылышлы эшмәкәрлегенә көслө йоғонто яһай, үҙ предметы буйынса уҡыусыларҙың һәр береһендә белем алыуға аңлы ҡараш тыуҙыра. Наилә Сәйфетдин ҡыҙы Ниязғолова – шундай уҡытыусыларҙың береһе, дәрестәре һәм синыфтан тыш эштәре менән уҡыусылар тәртибенә ыңғай тәьҫир яһаған оҫта педагог-тәрбиәсе, ата-әсәләрҙең ышаныслы кәңәшсеһе, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, уҡытыусы-методист.

Наилә Сәйфетдин ҡыҙы Ниязғолова 1932 йылдың 1 декабрендә Башҡортостан Республикаһының Ейәнсура районы Абзан ауылында колхозсы ғаиләһендә донъяға килә. Сәйфетдин ағай Бөйөк Ватан һуғышында Тыуған илебеҙҙе дошмандан һаҡлап башын һала, Ғәйниямал еңгәй барлыҡ хәстәрлеген берҙән-бер ҡыҙы Наиләне тәрбиәләүгә, үҙе әйтмешләй, кеше итеүгә бирә. Урта мәктәпте тамамлағандан һуң, 1951 – 1954 йылдарҙа, Наилә Ниязғолова Мөхәмәтйән (Серекәй) мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡыта, байтаҡ тәжрибә туплай.

Юғары белем алыу зарурлығы Наилә Ниязғолованы 1954 йылда К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтына алып бара. Ни өсөн уны тел һәм әҙәбиәт нығыраҡ ҡыҙыҡһындыра һуң? Был һорауға Наилә Сәйфетдин ҡыҙы былай яуап бирә:

– Абзан урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса беҙҙе Асия Мәжит ҡыҙы Ваһапова уҡытты. Бик һәйбәт уҡытыусы ине ул, беҙҙә телгә, уҡытыусы һөнәренә һөйөү тәрбиәләне.

Педагогия институтында, 1957 йылдан һуң Башҡорт дәүләт университетында, Наилә Ниязғолова республикаға киң билдәле уҡытыусыларҙан төплө белем ала, үҙен педагог һөнәренә әҙерләй.

1959 йылда юғары белемле уҡытыусы Наилә Ниязғолова ҙур дәрт һәм теләк менән тыуған районына ҡайта. Уны Үтәғол һигеҙ йыллыҡ мәктәбенә ебәрәләр. Бында ул тәүге мәлдән үк илһамланып эшкә тотона. Материалды яҡшы белһә лә, йәш уҡытыусы һәр көн дәреслек, методик ҡулланмаларҙы ҡарап ала, өҫтәмә әсбаптар әҙерләй, алдан уҡ ҡайһы уҡыусыларҙан һорарға уйлап ҡуя. Һәр ваҡыт шундай әҙерлек уның эш нормаһына әйләнә.

Тырыш хеҙмәт, эшкә намыҫлы ҡараш матур һөҙөмтәләр бирә. Н.С.Ниязғолова тиҙ арала Үтәғол мәктәбенең алдынғы уҡытыусыһы булып танылa. Мәктәп директоры, уның урынбаҫары уҡытыусыларға уның менән яҡындан танышырға, дәрестәрендә булырға, унан өйрәнергә саҡыралар. Уҡытыусы үҙ предметы буйынса уҡытыу-тәрбиә эшенә яңы алымдар индерә. Уларҙың асылы дәрестә лә, синыфтан тыш эштәрҙә лә уҡыусыларҙы туҡтауһыҙ эҙләнергә мәжбүр иткән әүҙем эш төрҙәре файҙаланыуға ҡайтып ҡала.

Уҡытыусы Үтәғол ауылында ата-әсәләр менән танышыуҙы тәүҙән үк маҡсат итеп ҡуя. Был уға уҡыусыларҙың көнкүрешен, дәрес әҙерләү шарттарын, уҡыуға ҡарашын асыҡларға ярҙам итә. Наилә Сәйфетдин ҡыҙының тырыш, намыҫлы уҡытыусы икәнен беләләр ҙә ауыл Советына депутат итеп һайлайҙар. Был бурысты ул өс саҡырылыш буйына үтәй. Ун алты йыл ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе була, агитколлективты етәкләй, халыҡ суды заседателе, пропагандист кеүек вазифаларҙы ла башҡара.

Наилә Сәйфетдин ҡыҙы Ниязғолова һәм башҡа алдынғы уҡытыусыларҙың тәжрибәләре Үтәғол урта мәктәбен өлгөлө мәктәп итеп күтәрергә мөмкинлек бирә.

Уҡытыу-тәрбиә эшендә өлгәшкән уңыштары өсөн Наилә Сәйфетдин ҡыҙы Ниязғоловаға 1981 йылда Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, 1984 йылда Башҡортостан Республикаһының

атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исемдәр бирелә, «Хеҙмәт ветераны» миҙалы, күп тапҡыр Маҡтау грамоталары менән бүләкләнә. Иң мөһиме – ул тотош бер быуын кешеләренең күңелендә яҡшы уҡытыусы булараҡ һаҡлана.

## СӘЛИМӘ МӨХӘМӘТСАФА ҡыҙы ӨМӨТБАЕВА

*(1931)*



Уҡытыусы, ғәҙәттә, үҙенең эшен дауам итеүсе уҡыусылары менән ҡыуана. Яҙыусы, табип, артист, журналист, хатта юғары дәрәжәләргә өлгәшкән ғалим, күренекле һөнәрмәндәр булып киткән уҡыусылары, уларҙың уңыштары менән дә ысын күңелдән шатлана – шундай бәхетле кеше ул Сәлимә Мәхәмәтсафа ҡыҙы Өмөтбаева. Ул – талантлы педагог, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Баймаҡ районы, Сибай ҡалаһы кешеләренең барыһына ла билдәле Сәлимә Мөхәмәтсафа ҡыҙы Өмөтбаева 1931 йылдың 2 авгусында Башҡортостандың Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылында тыуған. Ауылдың ете йыллыҡ мәктәбен тамамлағас, ул Темәс педагогия училищеһында белем ала. Йәш белгес хеҙмәт юлын Әбйәлил районы үҙәге Асҡарҙағы урта мәктәптә башлап ебәрә, унда бер йыл эшләй. Юғары белем алыу теләге һәләтле йәш уҡытыусыны Стәрлетамаҡ дәүләт уҡытыусылар институтына алып бара. Ул был уҡыу йортоноң филология факультетында яҡшы уҡый, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша.

1954 йылда уҡытыусылар институтын тамамлағас, тулы булмаған юғары белемле уҡытыусы дипломы алып, Сәлимә Мөхәмәтсафа ҡыҙы Өмөтбаева яҡты уй-хыялдар менән Сибай ҡасабаһының Алтын мәктәбенә барып инә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы баштан уҡ методик әҙәбиәт менән таныша, алдынғы уҡытыусыларҙың эш тәжрибәһен ентекләп өйрәнә, үҙ эшендә һынап

ҡарай, алдынғы методтарҙы һәм алымдарҙы артабан ҡыйыу файҙалана.

Алдынғы уҡытыусы С.М.Өмөтбаева 1961 йылда Сибай мәктәп-интернатына эшкә күсә, унда талантлы педагог булып таныла. Ул үҙенең барлыҡ дәрестәрен һәм синыфтан тыш эштәрен – кисәләрен, тәрбиә сараларын, походтарын һәм экскурсияларын асыҡ тип иғлан итә. Унда Сәлимә Мөхәмәтсафа ҡыҙының алымдары барлыҡ уҡытыусыларға ла оҡшай. Улар үҙҙәренә файҙалы ысулдарҙы ныҡлап өйрәнә, уҡытыу-тәрбиә эшендә ҡуллана.

Тынғыһыҙ, эҙләнеүсән, һәр ваҡыт ижади эшләргә ғәҙәтләнгән уҡытыусы Сәлимә Мөхәмәтсафа ҡыҙы Өмөтбаева ун алты йыл буйы Сибай ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының методик берекмәһе рәйесе вазифаһын башҡара, үҙенең һәм алдынғы уҡытыусыларҙың тәжрибәләре тураһында «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналында мәҡәләләр яҙып баҫтыра.

Үҙ хеҙмәтенә яуаплы ҡараған педагог йәмәғәт эштәрен үтәүгә лә намыҫлы ҡараш өлгөләре күрһәтә. С.М.Өмөтбаева мәктәп-интернаттың партия ойошмаһы сәркәтибе, халыҡ контроле, профсоюз ойошмаһы рәйесе вазифаларын әүҙем башҡара. Уның был эштәрҙе теүәл үтәүенән барыһы ла ҡәнәғәт ҡала.

Абруйлы педагогтың һүҙе һәр ерҙә үтемле, Сәлимә Мөхәмәтсафа ҡыҙы Өмөтбаева юғары ойошмаларҙа мәктәп-интернаттың мәнфәғәттәрен яҡлап сығыш яһай. Яуаплы вазифа башҡарған етәкселәр, кәрәкле эштәр өсөн янып йөрөүен күреп, уның фекерҙәре менән ризалаша.

Уҡытыу-тәрбиә эшендә өлгәшкән ҙур уңыштары өсөн Сәлимә Мөхәмәтсафа ҡыҙы Өмөтбаева юғары исемдәргә, Маҡтау грамоталарына һәм башҡа бүләктәргә лайыҡ булды. Ул – Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Хаҡлы ялға сыҡҡас, хөрмәтле педагог С.М.Өмөтбаева Сибай ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы, «Атайсал» гәзите эштәрендә әүҙем ҡатнаша, республика һәм Сибай ҡалаһы гәзиттәрендә педагогик хеҙмәт серҙәре, йәмәғәт эштәре һәм башҡа темаларға мәҡәләләр яҙып сығара. Ул үҙенең көн һайын башҡарған ҙур эштәренән ҡәнәғәт.

# ВӘЛИ ШӘҒӘЛИ улы ПСӘНЧИН

*(1930)*



Ғилми-педагогик эшмәкәрлеге, мәктәп дәреслектәре, уларҙы файҙаланыу тураһында ҡулланмалары менән уҡытыусыларға ҙур ярҙам һәм теләктәшлек күрһәткән ғалим-педагогтар араһында Вәли Шәғәли улы Псәнчин айырыуса мөһим урын биләй.

Вәли Шәғәли улы Псәнчин 1930 йылдың 22 апрелендә Башҡортостандың Күгәрсен районы Беренсе Дәүләтҡол ауылында уҡытыусы ғаиләһендә донъяға килә. Башланғыс белемде үҙ ауылында, шунан һуң Санъяп тулы булмаған урта мәктәбендә (атаһы шунда мәктәп директоры булып эшләй) ала. Бөйөк Ватан һуғышының икенсе йылында тыуған ауылына күсеп ҡайтҡас, Күгәрсен ете йыллыҡ мәктәбендә уҡыуын дауам итә, уны 1944 йылда бөтөрөп сыға. Артабан Вәли Псәнчин Мораҡ урта мәктәбендә, педагогия училищеһында белем ала. 1948 йылда уҡытыусы дипломы алғас, ул үҙ районы Сапыҡ башланғыс, шунан Айһай-Мөрсәләй ете йыллыҡ мәктәптәрендә уҡытыусы булып эшләй. 1950 йылда хәрби хеҙмәткә алына. Унан ҡайтҡас, районның Саратов ете йыллыҡ мәктәбендә балалар уҡыта, тәжрибәһен байыта, күп уҡый.

1954 йылда Вәли Псәнчин Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына уҡырға инә. Ул Башҡорт дәүләт университеты тип үҙгәртелгәс, 1959 йылда тамамлай.

Вәли Псәнчин мәктәптә, педагогия училищеһында уҡыған йылдарҙа уҡ яҙыу-һыҙыу менән шөғөлләнә. Шул ваҡытта уның тәүге мәҡәләләре матбуғат биттәрендә донъя күрә. Был бәләкәй генә эшмәкәрлек уның ғалим булып китеү яҙмышына ниндәйҙер дәрәжәлә булышлыҡ итә. Университеттан һуң Вәли Шәғәли улы Псәнчин Башҡортостан Халыҡ мәғарифы министрлығында дәреслектәр бүлеге мөдире булып эшләй. Бында дәреслектәрҙең йөкмәткеһен яҡшыртыу

буйынса һөҙөмтәле ойоштороу саралары ғәмәлгә ашырыла, дәреслек һәм методик ҡулланмалар төҙөүгә алдынғы уҡытыусылар, күренекле ғалимдар йәлеп ителә.

Вәли Псәнчин студент сағынан уҡ ғилми эшкә һәләтлеген күрһәтә. II курста уҡыған саҡта уның «Башҡорт телендә фразеологик берәмектәр» тигән беренсе ғилми хеҙмәте тейешенсә баһалана. 1961 йылда Вәли Шәғәли улы Псәнчин Башҡорт дәүләт университеты эргәһендәге аспирантураға ҡабул ителә. Башҡорт тел ғилеменең атаҡлы белгесе, профессор Ж.Ғ.Кейекбаев етәкселегендә аспирант «Башҡорт әҙәби яҙма теленең формалашыу тарихы» темаһына диссертация яҙып, уңышлы яҡлай.

1964 йылдан башлап Вәли Шәғәли улы Псәнчин университеттың башҡорт тел ғилеме кафедраһында ассистент, өлкән уҡытыусы, доцент вазифаларын башҡара. Филология фәндәре кандидаты, доцент В.Ш.Псәнчин оҙаҡ йылдар буйы башҡорт теленең лексикаһы, әҙәби тел тарихы, төрки телдәрҙең сағыштырма грамматикаһы буйынса тәрән йөкмәткеле лекциялар уҡый, башҡорт теленән ғәмәли курс алып бара, художестволы телмәр стилистикаһы махсус курсының етәксеһе була.

Ғалим Вәли Шәғәли улы Псәнчин Халыҡ мәғарифы министрлығында, Башҡорт дәүләт университетында педагогик һәм ғилми эшмәкәрлеге менән республикала мәғарифты үҫтереүгә күп көс һала. Ул – IV синыф өсөн «Башҡорт теле» дәреслеге, «Башланғыс синыфтар өсөн изложениелар йыйынтығы» һәм башҡа методик әсбаптар авторы. Ғалим башҡорт теле һәм уны мәктәптә уҡытыу тураһындағы мәҡәләләре менән матбуғат биттәрендә йыш сығыш яһай. Уларҙы файҙаланып, уҡытыусылар балаларға ныҡлы белем һәм тәрбиә бирә.

В.Ш.Псәнчин оҙаҡ йылдар Рәсәй Федерацияһы Халыҡ мәғарифы министрлығы белем биреүҙең милли мәсьәләләре институтының Башҡортостан филиалына етәкселек итә. Уның емешле ижади хеҙмәте шунда эшләгән йылдарҙа айырыуса асыҡ күренә. Ул төрлө йыйындарҙа мәғариф хеҙмәткәрҙәре өсөн фәһемле докладтар уҡый, йәмәғәт эштәрендә ҡатнаша.

В.Ш.Псәнчиндың фәнни эшмәкәрлеге күп яҡлы. Ул башҡорт теленең стилистикаһы, морфология һәм лексикаһына, яҙыусыларҙың телен өйрәнеү мәсьәләләренә ҡараған, уларҙы хәҙерге талаптар нигеҙендә яҡтыртҡан байтаҡ ғилми хеҙмәттәр яҙҙы. Ғалим башҡорт теленең тарихи грамматикаһы өҫтөндә һөҙөмтәле күҙәтеүҙәр алып бара. Ул башҡорт тел белемендә атаҡлы телсе-ғалим, профессор Ж.Ғ.Кейекбаевтың фәнни мәктәбен артабан үҫтереүҙә арымай-талмай эшләй, уҡыусыларын үҫтереүгә күп көс һала.

Мәктәп әсбаптарынан тыш, ғалим В.Ш.Псәнчин башҡорт теле һәм уның тарихын күҙәтеүҙәре нигеҙендә «Башҡорт теленең тарихи морфологияһы. Сағыштырыу – тарихи тикшеренеү тәжрибәһе» китабын (авторҙашы Ә.М.Аҙнабаев менән бергә), «Мостай Кәрим – һүҙ оҫтаһы» исемле популяр очерктар йыйынтығын баҫтырып сығарҙы. Улар бөтәһе лә – уҡытыусыларҙың эшендә һиҙелерлек ярҙам булырҙай ҡулланмалар.

Доцент, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Рәсәй Федерацияһы Педагогия һәм социология фәндәре академияһының ағза-корреспонденты Вәли Шәғәли улы Псәнчин – халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдарының береһе, заманыбыҙҙың күренекле педагогы, ғалимы кимәленә күтәрелгән оло шәхес. Уның мәғариф, фән өлкәләрендә күрһәткән хеҙмәте ғәйәт ҙур.

## РӘЙСӘ МИРФӘЙЕЗ ҡыҙы РӘМОВА

*(1937)*



Рәйсә Мирфәйез ҡыҙы Рәмова 1937 йылдың 30 майында Башҡортостандың Белорет ҡалаһында донъяға килә. Урта мәктәпте тамамлағандан һуң, ул Дыуан ауыл хужалығы техникумына уҡырға инә. 1958 йылда махсус урта белемле һөнәрмән Йылайыр районына эшкә ебәрелә. Унда ҡыҙыл дипломлы агроном үҙ эшен күңел биреп башҡара.

1962 йылдың сентябрендә Рәйсә Мирфәйез ҡыҙы Юлдыбай урта мәктәбенә директорҙың хеҙмәткә өйрәтеү буйынса урынбаҫары итеп күсерелә һәм яңы вазифала үҙен оҫта педагог итеп күрһәтә. Көтмәгәндә һөнәрҙе алыштырыу уның алдына педагогик белем алыу ихтыяжын тыуҙыра. Уҡытыусы Башҡорт дәүләт университетының химия-биология факультетына ситтән тороп уҡырға инә һәм уны 1973 йылда уңышлы бөтөрөп сыға.

Булыр бала биләүҙән тигәндәре дөрөҫ икән. Рәйсә Мирфәйез ҡыҙы агроном эшен ниндәй бирелгәнлек менән башҡарһа, педаго-

гик хеҙмәтен дә шулай уҡ тырышып үтәй. Нисектер уға барыһы ла еңел генә бирелгән кеүек. Юҡ, был тәүге ҡарашҡа ғына шулай күренә. Ғәмәлдә иһә Рәйсә Мирфәйез ҡыҙы тәрән уйлап эш итә, методик әҙәбиәт менән төндәр буйы ентекле таныша, алдынғы уҡытыусыларҙың тәжрибәһен сағыштыра, ныҡлап өйрәнә. Был уға уҡытыусыларҙың методик эшен юғары кимәлдә ойошторорға, һәр береһенең тәжрибәһен өйрәнергә, алдынғы методтарҙы һәм алымдарҙы үҙләштерергә мөмкинлек бирә.

Тиҙҙән, 1974 йылда, юғары педагогик белемле уҡытыусы мәктәп директорының уҡытыу-тәрбиә эше буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. Был вазифаны ла Рәйсә Мирфәйез ҡыҙы Рәмова намыҫлы башҡара, бер үк ваҡытта йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша: художестволы үҙешмәкәрлек түңәрәге ойоштора, халыҡ араһында пропагандист эштәрен алып бара, мәктәптең профсоюз ойошмаһы рәйесе, партия ойошмаһы сәркәтибе була. Рәйсә Мирфәйез ҡыҙы оҙаҡ йылдар мәктәп һәм районның биология, химия уҡытыусылары методик берекмәһе етәксеһе йөгөн дә тарта.

Быларҙың бөтәһенә лә уҡытыусы нисек өлгөрә икән? Рәйсә Мирфәйез ҡыҙы үҙе был турала: «Күңел биреп эшләһәң, барыһына ла өлгөрөп була», – тип аңлата. Өҫтәүенә, һәр ышанып тапшырылған йөкләмәне ул илке-һалҡы түгел, ә ысын эш булһын, уҡытыусыларға ла, балаларға ла файҙалы булһын, тип башҡара.

Күп йыллыҡ уңышлы педагогик хеҙмәте өсөн Рәйсә Мирфәйез ҡыҙы Рәмова 1980 йылда Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, 1982 йылда уҡытыусы-методист, 1990 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исемдәргә лайыҡ була. Ул шулай уҡ ике миҙал һәм байтаҡ Маҡтау грамоталары менән бүләкләнә. Уҡытыусының барлыҡ педагогик хеҙмәт стажы – 42 йыл, уның 36 йылы Юлдыбай урта мәктәбендә эшләп үткән.

Рәйсә Мирфәйез ҡыҙы менән тормош иптәше – уҡытыусы Фәрит Абдулла улы өс ул тәрбиәләп үҫтерә, уларҙы оло тормош юлына сығара. Улар бөгөн барыһы ла – педагогтар.

# РАФИҠ ШӘРӘФЕТДИН улы СЫРТЛАНОВ

*(1927 – 2001)*



Уңышлы уҡытыу-тәрбиә эше, маҡтауға лайыҡлы шөғөлдәре менән коллегалары, ауылдаштары, район һәм бөтөн республика халҡының оло һөйөүен яулаған замандашыбыҙ, күренекле мәғариф хеҙмәткәре ул – Рафиҡ Шәрәфетдин улы Сыртланов. Ул – талантлы педагог, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Рафиҡ Шәрәфетдин улы Сыртланов 1927 йылдың 16 ноябрендә Башҡортостандың Дәүләкән районы Иҫке Яппар ауылында тыуған. 1943 йылда ул Дәүләкән педагогия училищеһына уҡырға инә. Уны тамамлағас, 1947 йылда К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының география факультетына ҡабул ителә. Ҡайнап торған дәртле, юғары белемле педагог 1951 йылда Көйөргәҙе районы Морапталь урта мәктәбе директорының уҡытыу-тәрбиә эше буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. Бер йылда ул үҙен һәләтле ойоштороусы итеп күрһәтә, уҡытыу-тәрбиә эштәрен юғары кимәлгә күтәрергә ярҙам итә.

Ул ваҡытта юғары белемле уҡытыусылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ була. Р.Ш.Сыртлановты морапталдар белеме, аҡылы өсөн генә түгел, ә олоно – оло, кесене кесе итә белгәне өсөн дә ярата. 1952 йылда Р.Ш.Сыртланов Таймаҫ урта мәктәбе директоры итеп тәғәйенләнә һәм унда ҡолас йәйеп эшләй. Уның һигеҙ йыл Таймаҫта йәшәүе – боронғо башҡорт ауылы өсөн тотош бер дәүер. Мәктәптә балалар уҡытыу һәм тәрбиәләүгә оҫта етәкселек итеү, коллективты һәр уҡыу йылы күрһәткестәре буйынса алдынғылар сафына сығарыу менән бергә, ул ауыл һәм районның йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнаша.

1960 йылда Рафиҡ Шәрәфетдин улы Сыртланов Мораптал урта мәктәбе директоры итеп күсерелә. Уның бында эшләү йылдары иң юғары баһаға лайыҡ. Мәшһүр педагогтың хеҙмәте, тормошо, йәмәғәт эштәре, республика гәзит-журналдарына уҡытыусыларҙың һәм үҙенең тәжрибәһе, замандаштарының уңыштары, хәҙерге осорҙоң көнүҙәк проблемалары тураһында бар халыҡ яратып, ҡыҙыҡһынып уҡыр-

лыҡ мәҡәләләр яҙыуы Мораптал ауылы һәм мәктәбенә бәйле. Улар был шәхескә бейек осорға ҡанат ҡуя.

Яңы директор иң тәүҙә йөрөп уҡыған балалар өсөн интернат төҙөүгә, унда уңайлы шарттар тыуҙырыуға ҙур иғтибар бирә һәм быға өлгәшә. Урта мәктәпкә төкәтмә яһала, синыф бүлмәләре арттырыла. Бер аҙҙан төҙөлгән яңы мәктәп балаларҙың барыһын да һыйҙыра. Мәктәптә уҡытыу кабинеттары тулыһынса йыһазландырыла.

Мәктәп директоры Р.Ш.Сыртланов йәш уҡытыусыларҙы үҫтереү, уларҙың уҡытыу-тәрбиә эшен юғары кимәлгә күтәреү тураһында даими хәстәрлек күрә, бының өсөн уларға һиҙелерлек методик ярҙам күрһәтә. Ҙур уңышҡа өлгәшкән уҡытыусыларға үҙ тәжрибәһе тураһында төрлө йыйындарҙа сығыш яһарға, матбуғатҡа яҙырға тәҡдим итә, уларҙы шуға күндерә Рафиҡ Шәрәфетдин улы.

Мораптал урта мәктәбе район, төбәк уҡытыусылары, синыф етәкселәре, мәктәп директорҙары һәм уларҙың урынбаҫарҙары өсөн семинар, кәңәшмәләр үткәреү буйынса методик үҙәккә әйләнә. Бындай саралар уҡытыусыларға файҙалы булһын өсөн, Р.Ш.Сыртланов барыһын да эшләй. Педагогик хеҙмәттә өлгәшкән уңыштары өсөн уға Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исем бирелә.

Арҙаҡлы ил ағаһы ҡатыны, уҡытыусы Мәҙинә Ғайса ҡыҙы менән өс бала тәрбиәләп үҫтереп, оло тормош юлына сығара.

## МӨСЛИМӘ МӘХМҮТДИН ҡыҙы СӨЙӘРҒОЛОВА

*(1934)*



Донъяла шундай кешеләр була: улар менән бер ултырып һөйләшеү ҙә тормошҡа, кешеләргә ҡараштарыңды яҡтыртып ебәрә, күҙҙәреңде ҡапыл ғына аса ла ҡуя, аң-белем даирәңде байыта. Мөслимә Мәхмүтдин ҡыҙы Сөйәрғолова – шундайҙарҙың береһе, талантлы педагог, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, эскерһеҙ һәм һөйләп һүҙҙәре бөтмәҫ әңгәмәсе.

Мөслимә Мәхмүтдин ҡыҙы Сөйәрғолова Башҡортостандың Бөрйән районы Байназар ауылында 1934 йылдың 14 апрелендә донъяға килә. Уның ата-әсәһе – «Алға» колхозының алдынғы, һыр бирмәҫ ағзалары. Улар яратҡан ҡыҙҙары Мөслимәне эшкә өйрәтеп, егәрле һәм үҙ аллы кеше итеп үҫтерә. Был сифаты менән ул барыһын да ҡыуандыра.

Уҡыу йәшенә еткәс, Мөслимә Сөйәрғолова ете йыллыҡ мәктәпкә ҙур теләк менән бара, ҡушылған йомоштарҙы йүгереп йөрөп башҡара, өйгә бирелгән эштәрҙе күңел биреп, ихлас үтәй. Кесе йәштән тәрбиәләнгән был күнекмә һәм оҫталыҡтар уға артабан да еңел уҡырға, мәктәп курсын рәхәтләнеп үтергә мөмкинлек бирә. Уҡыуын район үҙәге Иҫке Собханғол урта мәктәбендә дауам итеп, уны 1952 йылда уңышлы бөтөрөп сыға.

Донъя ауырлыҡтары, тормош мәшәҡәттәре уңған ҡыҙҙың урта мәктәптән һуң шунда уҡ юғары белем алыу теләген бойомға ашырыуҙы тотҡарлап тора. Өҫ-башты бер аҙ бөтәйтеп, уҡыуҙы дауам итеү өсөн байтаҡ аҡса кәрәк була. 1952/53 уҡыу йылында Мөслимә Мәхмүтдин ҡыҙы Сөйәрғолова Байназар мәктәбендә пионер вожатыйы булып хеҙмәт юлын башлай. Бер үк ваҡытта уға башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы вазифаһы ла ышанып тапшырыла. Йәш ҡыҙ ҡанатланып эшкә тотона, барыһына ла өлгөрөргә тырыша.

1953 йылдың көҙөндә Мөслимә Сөйәрғолова Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтына уҡырға инеп, уны 1955 йылда тамамлағас, Бөрйән районына эшкә ҡайта. Ул – Байназар ауылынан институт тамамлаған беренсе уҡытыусы. Тәүҙә йәш белгес Әтек ете йыллыҡ мәктәбендә уҡыта. Ауылдарҙы «перспективаһыҙ» тип, ете йыллыҡ мәктәптәрҙе бөтөргәс, институт белемле йәш уҡытыусыларҙы башланғыс синыфтарға тәғәйенләйҙәр. Мөслимә Сөйәрғолова Мораҙым мәктәбе директоры һәм уҡытыусыһы итеп ебәрелә. Унда бер генә йыл эшләй ҙә Байназар урта мәктәбенә ҡайта. Ҙур тәжрибә туплаған оҫта педагог 1959 йылда Иҫке Собханғол урта мәктәбенә урынлашып, унда 1974 йылға тиклем балалар уҡытыу һәм тәрбиәләү менән шөғөлләнә. Бында ул һәләтле уҡытыусы һәм синыф етәксеһе булып танылa, ата-әсәләр менән дә күп төрлө саралар үткәрә. Мөслимә Мәхмүтдин ҡыҙы уҡытыу-тәрбиә эшенең матур өлгөләрен үҙҙәрендә һәм башҡа мәктәп уҡытыусыларына асыҡ дәрестәр итеп күрһәтә, уларҙы синыфтан тыш эш тәжрибәһе менән байыта.

1976 йылда Мөслимә Мәхмүтдин ҡыҙы Сөйәрғолова йәнә Байназар урта мәктәбенә ҡайтып, бар булмышы менән эшкә сума. Юғары белем алыу хыялы уны бер ҡасан да ташламай – 1973 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтының ситтән тороп уҡыу

бүлегенә инеп, 1976 йылда бөтөрөп сыға. Урыҫ теле һәм әҙәбиәте, башҡорт теле һәм әҙәбиәте, башланғыс синыфтар уҡытыусыһы М.М.Сөйәрғолова һәр ваҡыт фиҙакәр хеҙмәт өлгөләре күрһәтә, башланғыс синыф уҡытыусыларының методик берекмәһенә етәксе-лек итә, уларҙы ижади эштәргә рухландыра. Уға 1979 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исем бирелә, төрлө йылдарҙа бик күп Маҡтау грамоталарына лайыҡ була, бүләктәр ала.

## ХӘЙҘӘР СӘЙФУЛЛА улы СӘҒИҘУЛЛИН

*(1928)*



Хәйҙәр Сәйфулла улы Сәғиҙуллин 1928 йылдың 23 февралендә Стәрлебаш районының Йәшергән ауылында хәлле генә крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Ул заманда бындай ғаиләлә тыуған кешенең тормош юлы билдәле: уның бәхетле бала сағы булмай, «кеше хоҡуҡтарынан мәхрүм ителде» тигән төшөнсәне тулыһынса кисерә.

Уҡырға төшкәнсе, Хәйҙәр оло йәштәге ауырыу атаһы менән Айтуған ауылы көтөүен көтә. Шуға күрә мәктәпкә 1937 йылдың ноябрь аҙағында ғына бара, яҡшы уҡый. Пионер галстугын өйҙә бер кемгә лә күрһәтмәй, пионер гәзитен алып ҡайтмай. Үҙенең отряд вожатыйы булыуын, һуңыраҡ ВЛКСМ сафына алыныуын сер итеп һаҡлай.

1937 йылдың аҙаҡтарында Сәғиҙуллиндар ғаиләһен колхозға ҡабул итеп, уның быҙауҙарын һәм тоҡом һарыҡтарын көтөүҙе шарт итеп ҡуялар. Шулай итеп, Хәйҙәргә «тәкә көтөүсеһе» ҡушаматы тағыла, уны 1944 йылға тиклем, йәғни алыҫта ятҡан Тәтер-Арыҫлан урта мәктәбенә уҡырға ингәнгә ҡәҙәр, йөрөтә.

Урта мәктәпте тамамлағас, Хәйҙәр Сәғиҙуллин ауыл хужалығы институтына уҡырға инә, ләкин ауырыу сәбәпле уны ташларға

мәжбүр була. Армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡас, йәш егет Һарайса урта мәктәбендә военрук булып эшләй, Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтында уҡый. Артабан Куйбышев педагогия институтын ситтән тороп тамамлай, тарих уҡытыусыһы дипломы ала. Тырыш һәм һәләтле уҡытыусының эшен тиҙ күрәләр. Ул 1958 – 1962 йылдарҙа Айҙарәле һигеҙ йыллыҡ мәктәбе директоры, 1962 – 1965 йылдарҙа Тәтер-Арыҫлан урта мәктәбе директоры урынбаҫары булып эшләй. Һәр ерҙә үҙен дәртле ойоштороусы, ижади хеҙмәткәр итеп күрһәтә. Талантлы педагог барлыҡ уҡытыусыларҙы ла ижади эшләргә рухландыра, коллективтың ялҡынлы трибуны булып күтәрелә.

Партияның элекке Стәрлебаш район комитетында пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире булып бер аҙ эшләгәс, Хәйҙәр Сәйфулла улы Сәғиҙуллинды район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп ҡуялар. Был вазифала уның барлыҡ ойоштороу, кешеләр менән аралашыу һәләте асыҡ күренә.

Тәүге мәлдә, үткән быуаттың 60-сы йылдарында, мәктәп эшен ойоштороуҙа проблемалар күп була. Уларҙың береһе – юғары белемле уҡытыусылар әҙерләү. Ул осорҙа V – X синыф уҡытыусыларының 26 – 27 проценты ғына юғары белемле. Мәктәптәрҙең һәм башҡа балалар учреждениеларының уҡытыу-матди базаһы насар. Бер нисә мәктәптең генә кирбестән һалынған типовой бинаһы бар.

Район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире Х.С.Сәғиҙуллиндың башланғысында дәүләт капитал һалыуҙары иҫәбенә урта һәм һигеҙ йыллыҡ мәктәптәр төҙөлә, матди базаны нығытыуға ҙур иғтибар бирелә. Мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә эшенең сифатын күтәреүгә барлыҡ педагогик коллективтарҙың көсө йүнәлтелә.

Кабинет системаһына күсеү ойошҡан төҫ ала, уҡыусыларҙы хеҙмәткә өйрәтеү, мәктәптәрҙә спорт майҙансыҡтары төҙөү, башланғыс хәрби әҙерлек тирҙәры асыу киң ҡолас ала. Уҡытыуҙың башланғыс курсын өс йыллыҡҡа күсереү күп иғтибар биреүҙе талап итә.

Был эштәрҙең барыһы ла мәғариф бүлеге мөдире Х.С.Сәғиҙуллиндың тырышлығы менән үҙ ваҡытында үтәлә, ҡыҫҡа ғына арала ул уҡытыусыларҙың уҡытыусыһына әүерелә.

**ИРЕК**
**ХАММАТ улы**
**СӘҒИТОВ**

*(1932 – 1996)*



Бөрйән төйәгенең алдынғы мәғариф һәм йәмәғәт хеҙмәткәре булып ҡыҫҡа ваҡыт эсендә танылған Ирек Хаммат улы Сәғитов фиҙакәр эше һөҙөмтәһендә коллегалары, уҡыусылар һәм башҡа кешеләр араһында ҙур хөрмәт ҡаҙана. Белорет ҡалаһы һәм районы халҡының да оло һөйөүен яулай ашҡынып йәшәгән педагог, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Ирек Хаммат улы Сәғитов 1932 йылдың 1 майында Башҡортостандың Бөрйән районы Ғәлиәкбәр ауылында урмансы ғаиләһендә донъяға килә. Тыуған ауылында тулы булмаған урта мәктәпте һәм Иҫке Собханғол урта мәктәбен тамамлағандан һуң, 1950 йылда йәш егет V – VII синыфтарҙа математика, физика һәм физик культура уҡытыусыһы булып хеҙмәт юлын башлай. Намыҫлы һәм ҡыйыу педагогты, эшһөйәр, һәләтле булараҡ, төрлө йыйындарҙа йыш телгә алалар, өлгө итеп күрһәтәләр. Юғары белем алыу теләге менән янған егет, ике йыл эшләп өҫ-башын бөтәйткәс, 1952 йылда Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтына инеп, унда үҙе яратҡан математиканы, уның иҫәпһеҙ серҙәрен, уҡытыу методтарын һәм алымдарын өйрәнә.

1954 йылдың авгусында И.Х.Сәғитов Иҫке Собханғол урта мәктәбенә ҡайтып, илһамланып балалар уҡытыуға тотона, бер юлы барыһына ла өлгөрөргә тырыша, ысын хеҙмәт күрһәтергә ынтыла.

Математика уҡытыу, ата-әсәләрҙе мәктәп эшенә йәлеп итеү, күп төрлө тәрбиә сараларын алып барыу Ирек Сәғитовҡа бик оҡшай. Ул үҙенең ысынлап та талантлы педагог булыуын раҫлай, бер үк ваҡытта Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтын ситтән тороп тамамлай.

1962 йылда И.Х.Сәғитов район халыҡ мәғарифы бүлегенә инспектор итеп алына. Тиҙҙән ул партияның район комитетына пропагандист итеп ҡуйыла, халыҡ араһында йыш була, уның тормош һәм көнкүреш шарттарын яҡындан өйрәнә.

Уҙған быуаттың 60-сы йылдары башында донъялар үҙгәреп китә. Райондар эреләтелә. И.Х.Сәғитов Бөрйән төйәгенең бер төркөм ир-азаматтары менән Белорет колхоз-совхоз идаралығы парткомының идеология бүлегенә инструктор итеп эшкә алына. 1965 йылда райондар ҡабаттан тергеҙелгәс, ул Белорет район партия ойошмаһының идеология бүлеге инструкторы булып ҡала.

Был ваҡытта И.Х.Сәғитов яңынан мәктәпкә ҡайтыу тураһында уйлана. Әмәле тура килгәндә, 1966 йылдың ғинуарында, 1-се эшсе йәштәр мәктәбенә математика уҡытыусыһы булып күсә, яратҡан һөнәренә тотона. Талантлы педагогты тиҙ күрәләр һәм март айында уҡ Белорет педагогия училищеһына математика уҡытыусыһы итеп ҡабул итәләр. Ирек Хаммат улы унда бөтөн йәшлек дәртен биреп эшләй.

1978 йылдың августында И.Х.Сәғитов педагогия училищеһының мәктәп бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. Эш арта, мәшәҡәттәр күбәйә. Ләкин педагог бер ҡасан да зарланмай.

Уҡытыу-тәрбиә эшенең серҙәрен тәрән үҙләштергән тәжрибәле педагог И.Х.Сәғитов 1986 йылдың августында училище директоры итеп билдәләнә. Бында уның киң ҡоласлыҡ, алдан күрә белеүсәнлек сифаттары асыҡ сағыла, ҡыҫҡа арала оҫта етәксе булып таныла. Иң тәүҙә ул алдынғы уҡытыусыларға таяна, ышаныслы теләктәштәр әҙерләй: Х.Х.Вәлиева, А.Д.Окользина, В.И.Ғайсарова, Л.А.Пухова уға эскерһеҙ ярҙам итәләр.

И.Х.Сәғитов методик комиссияларҙың эшен йәнләндереүгә ҙур иғтибар бирә, сөнки улар буласаҡ йәш уҡытыусыларҙы педагогик хеҙмәткә әҙерләү оҫтаханаһына әйләнә.

Мәғариф өлкәһендә ирешкән уңыштары өсөн Ирек Хаммат улы Сәғитовҡа 1981 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исем бирелә. Миҙал һәм Маҡтау грамоталарына ла лайыҡ була талантлы педагог.

## ХӘМЗӘ КАМАЛЕТДИН улы СӘЛИМОВ

*(1930)*



Башҡортостандың талантлы педагогтары сафын Стәрлебаш районы Тәтер-Арыҫлан урта мәктәбе директоры Хәмзә Камалетдин улы Сәлимов тулыландыра. Ул халыҡ һөйөүен яулаған мәғариф хеҙмәткәре, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Хәмзә Камалетдин улы Сәлимов 1930 йылдың 1 декабрендә Башҡортостандың Стәрлебаш районы Тәтер-Арыҫлан ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. 1932 йылда атаһы вафат булғас, әсәһе тәрбиәһендә үҫә. Бөйөк Ватан һуғышы һәм унан һуңғы ауыр йылдарҙа үҫмер колхозда төрлө эштәр башҡара.

1951 йылдың ғинуарында Стәрлебаш район халыҡ мәғарифы бүлегенең бойороғо нигеҙендә урта белемле Хәмзә Сәлимов Буҙат ете йыллыҡ мәктәбенә математика уҡытырға ебәрелә. Бер аҙ тәжрибә туплаған тырыш егет 1955 йылдың авгусында Йәшергән ете йыллыҡ мәктәбенә уҡытыусы һәм бер үк ваҡытта колхоздың тәүге партия ойошмаһы секретары итеп күсерелә. Педагог ал-ял белмәй, уның уйында тик эш кенә, коллегалары, колхозсылар, ҡарттар һәм йәштәр булһынмы – һәр береһе менән осрашырға, һөйләшергә, кәңәш бирергә ваҡыт таба. Ижади эшләүсе уҡытыусы 1957 йылдың апрелендә Буҙат мәктәбе директоры итеп тәғәйенләнә. Бына шунда уның педагогик коллектив, ата-әсәләр, балалар менән эшләү һәләте күренә, тәжрибәһе арта.

1965 йылда Хәмзә Камалетдин улы Сәлимов Тәтер-Арыҫлан урта мәктәбе директоры итеп күсерелә. Бында ул етәксе вазифаһын 30 йыл башҡара. Уның педагогик хеҙмәт стажы 44 йылға яҡын.

Х.К.Сәлимов үҙенең идея-теоретик белем кимәлен даими күтәрә. 1974 йылда Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының математика бүлеген тамамлай, гәзит-журналдар һәм методик әҙәбиәтте күп уҡый.

Хәмзә Сәлимовҡа Буҙат ете йыллыҡ мәктәбендә лә, Тәтер-Арыҫлан урта мәктәбендә лә уңған педагогик коллективҡа етәкселек итергә насип

була. Ул уҡытыусыларҙы ижади хеҙмәткә, алдынғы тәжрибә һәм фән яңылыҡтарын уҡытыу-тәрбиә эшендә киң файҙаланырға рухландыра.

1959 – 1960 йылдарҙа директорҙың башланғысында Буҙатта яңы мәктәп һәм интернат төҙөлә, уҡытыу-тәжрибә участкаһы, спорт майҙансығы булдырыла. Былар бөтәһе лә районда беренселәрҙән булып башҡарыла.

1965 йылда Тәтер-Арыҫланда яңы мәктәп һәм уҡытыусылар өсөн фатирҙар, йөрөп уҡыған балалар өсөн интернат һалына. Тәүгеләрҙән булып унда кабинет системаһына күсәләр, уҡыусыларҙың хеҙмәт бригадаһын ойошторалар, туризм буйынса районда һәм республикала алдынғы урынға сығалар. Мәктәп музейы асыла, уны экспонаттар менән байытыу йылдың-йылы дауам итә. Уҡыусылар район, республикала үткәрелгән химия, физика, математика, урыҫ теле олимпиадаларында призлы урындар яулай.

Хәмзә Камалетдин улы Сәлимов етәкселегендә Тәтер-Арыҫлан урта мәктәбе ижади тормошта йәшәй. Уҡытыу-тәрбиә эшенең сифаты яҡшыра, түңәрәктәр гөрләй. Юғары һәм махсус урта уҡыу йорттарына уҡырға инеүселәр арта. Йәш белгестәр, уҡыуҙарын бөтөргәс, туған мәктәбенә күпләп ҡайта, ауылда нығынып ҡала. Хәҙер Тәтер-Арыҫлан урта мәктәбендә тәрбиәләнгән кешеләрҙән фән кандидаттары һәм докторҙары, хужалыҡ етәкселәре, Башҡортостан парламенты депутаттары бар. Былар бөтәһе лә – мәктәп директорының фиҙакәр хеҙмәт һөҙөмтәләре.

## МӨСЛИМӘ ТӨХВӘТ ҡыҙы СӘЛИХОВА

*(1928)*



Уҡытыусылар, педагог-ғалимдар, ғөмүмән, барлыҡ зыялылар араһында Мөслимә Төхвәт ҡыҙы Сәлихованы белмәгән кеше юҡтыр. Ул – киң танылған методист, айырыуса башланғыс белем биреү системаһын камиллаштырыуға күп көс һалған һәм ҙур уңыштар яулаған мәғариф хеҙмәткәре, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Мөслимә Төхвәт ҡыҙы Сәлихова 1928 йылдың 15 октябрендә Башҡортостандың Шишмә районы Суҡраҡлы ауылында крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Өс йәштә саҡта – атаһы, алты йәштә саҡта әсәһе үлеп, ул башта балалар йортонда, шунан әсәһенең бер туған һеңлеһе – апаһы менән еҙнәһендә тәрбиәләнә. Башланғыс синыфтарҙа Мөслимәне бик егәрле, балаларҙы ныҡ яратҡан уҡытыусы Ғәлим Ноғманов уҡыта. V – VI синыфтарҙа урыҫ теленән Ҡасим Еникеев белем бирә. Уның күп әҫәрҙәрҙе яттан һөйләүе уҡыусыларҙа А.С.Пушкин, М.Ю.Лермонтов ижады менән тәрән ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Балалар уҡытыусынан байтаҡ әҫәрҙәр ятлап алалар.

1943 йылда мәктәптең VII синыфын тамамлағас, Мөслимә Сәлихова Дәүләкән педагогия училищеһына уҡырға инә. Бында һәр уҡыусыны училище директоры Харис Кәбиров ҡаршылай. Бөйөк Ватан һуғышының ауыр йылдарында эшсе көстәр етешмәү сәбәпле, Мөслимә Сәлихова башҡа уҡыусылар менән бергә ер һөрөү, тырматыу, мал көтөү, йәшелсә үҫтереү, ашлыҡ утау, көлтә бәйләү, шыбағас менән иген һуғыу кеүек эштәрҙең барыһын да татый. Училищела күп дәрестәрҙе Украинанан эвакуацияланған ғилми хеҙмәткәрҙәр алып бара. Бында Мөслимә Сәлихова бик яҡшы уҡый.

Училищены тамамлағанда дәүләт имтихандары рәйесе булып Өфөнән Зәки Закир улы Вәлиев килә. Ул һәр имтихандан һуң һығымта яһап, яҡшы уҡыусыларҙы Башҡорт дәүләт педагогия институтына уҡырға барырға өндәй. Мөслимә Сәлихова, уның саҡырыуы буйынса, Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына уҡырға инә. Бында ла ул бик һәйбәт уҡый. Ғөмүмән, уның төркөмөндә тик яҡшы уҡыған студенттар йыйыла. Уларҙың күбеһе һуңынан күренекле кешеләр булып танылa. Филология фәндәре докторы, профессор Ғ.Ғ.Сәйетбатталов, билдәле яҙыусылар һәм шағирҙар А.Ғирфанов, А.Игебаев, К. Хәбиб, данлыҡлы мәғариф хеҙмәткәрҙәре – Мөслимә Сәлихованың курсташтары. Уларҙы заманының алдынғы педагогтары һәм методистары З.Ш.Шакиров, Ә.М.Әхмәрова, Г.М.Пизов, В.С.Синенко уҡыта, профессор Н.К.Дмитриев лекциялар уҡырға саҡырыла.

1950 йылда педагогия институтын ҡыҙыл диплом менән тамамлағандан һуң, Мөслимә Сәлихова мәктәптә уҡытырға китә, бер аҙ ваҡыт Бөрө педагогия училищеһында, уҡытыусылар институтында эшләй. Шунан ул Дәүләкән педагогия училищеһында педагогика һәм психология уҡыта, 3-сө урта мәктәптә психология һәм логика буйынса (ул саҡта шундай фәндәр өйрәнелә ине) белем бирә. 1952

йылда талантлы йәш педагогты мәктәп директорының уҡытыу эше буйынса урынбаҫары итеп ҡуялар. Мәктәптә көслө уҡытыусылар байтаҡ була. 1951 – 1955 йылдарҙа 3-сө урта мәктәпте тамамлаусыларҙан күптәр билдәле кешеләр булып китте.

1954 – 1956 йылдарҙа Мөслимә Төхвәт ҡыҙы Сәлихова Салауат районы Нәсибаш урта мәктәбендә, 1956 – 1960 йылдарҙа Баҡалы районы Мостафа урта мәктәбендә директор урынбаҫары, юғары синыфтарҙа урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй. Һәр ерҙә педагог фиҙакәр хеҙмәт өлгөһө күрһәтә.

1960 йылда М.Т.Сәлихова Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтының башланғыс мәктәптәр методисы итеп алына. Яҡшы әҙерлекле, хеҙмәт һөйгән методист республикала мәғарифты үҫтереүгә, айырыуса башланғыс мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә эшенең сифатын яҡшыртыуға бөтә көсөн бирә. Башланғыс мәктәп директорҙарының һәм уҡытыусыларының район семинарҙары үткәрелә, һәр урында уларға эшлекле ярҙам ойошторола. Алдынғыларҙың район, республика слеттарын уҙғарыу педагогик тәжрибәне мәктәптәрҙә киң файҙаланыуға юл аса. Республика уҡытыусылары «Башланғыс синыфтарҙа өлгәшмәгән балалар булырға тейеш түгел!» девизы аҫтында эшләй башлай. 60 – 70-се йылдарҙа күпселек башланғыс синыф һәм мәктәп уҡытыусылары балаларҙың тулы өлгәшенә ирешә икән – бында уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институты һәм уның башланғыс мәктәп кабинеты мөдире Мөслимә Төхвәт ҡыҙы Сәлихованың да хеҙмәт өлөшө бар, тип әйтә алабыҙ.

Бер үк ваҡытта тәжрибәле методист башланғыс синыфтарҙа урыҫ теле дәреслектәре төҙөү менән дә етди шөғөлләнә. Был – бик мәшәҡәтле һәм ҡатмарлы эш. Ул һәр синыфта балаларҙың белем кимәлен дә, йәш һәм психологик үҙенсәлектәрен дә иҫәпкә алыуҙы талап итә. Мөслимә Төхвәт ҡыҙы күп фактик материалдар нигеҙендә дәреслектәрҙе юғары кимәлдә әҙерләп сығарыуға ҙур иғтибар бирә.

Башланғыс мәктәп – Мөслимә Төхвәт ҡыҙы Сәлихованың яратып башҡарған хеҙмәт өлкәһе. Төрлө яҡлы эш башҡарыуы һәм республика уҡытыусыларына тейешле ярҙам күрһәтә алыуы менән ул үҙен бәхетле һанай.

Педагогик һәм методик эштә өлгәшкән уңыштары өсөн Мөслимә Төхвәт ҡыҙы Сәлиховаға Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исем бирелә, төрлө йылдарҙа ул миҙал, Маҡтау грамотаһы һәм бүләктәргә лайыҡ була.

## РАМАҘАН ИСМӘҒИЛ улы ҮТӘҒОЛОВ

*(1930)*



Баймаҡ, Сибай яҡтарында, бөтөн Башҡортостанда Рамаҙан Исмәғил улы Үтәғоловтың исемен оло ихтирам менән телгә алалар. Ул – талантлы педагог, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, тыуған яҡты өйрәнгән тарихсы, бик күп хеҙмәттәр авторы, орден һәм миҙалдар кавалеры.

Рамаҙан Исмәғил улы Үтәғолов хәҙерге Башҡортостандың Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылында 1930 йылдың 15 ноябрендә донъяға килә. 1934 йылда Үтәғоловтар ғаиләһе Баймаҡҡа күсә. Урта мәктәпте бөтөрөп сыҡҡандан һуң, егет Магнитогорск педагогия институтының тарих факультетына уҡырға инә һәм уны 1953 йылда тамамлап ҡайтҡас та, Баймаҡ 2-се урта мәктәбендә тарих уҡытыусыһы булып хеҙмәт юлын башлай. Үткер, күҙәтеүсән һәм һығымталар яһарға һәләтле уҡытыусыны 1-се урта мәктәп директорының уҡытыу эше буйынса урынбаҫары итеп үрләтәләр. Был 1955 йылдың яҙында була. Ике йыл да эшләп өлгөрмәй, ҡала мәктәптәрендә уҡытыу-тәрбиә эшен тейешле кимәлгә күтәрергә булышлыҡ иткәне һәм яҡшы методист булғаны өсөн, уны Баймаҡ район халыҡ мәғарифы бүлегенә инспектор итеп күсерәләр. Ул мәктәптәрҙә күп йөрөй, педагогик коллективтарға ысын күңелдән ярҙам күрһәтә, тәжрибәһен байыта.

1960 йылда Р.И.Үтәғоловҡа үтә лә яуаплы бурыс йөкмәтелә – уны эреләтелгән Баймаҡ район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп тәғәйенләйҙәр. Уның тырыш, фиҙакәр хеҙмәте көттөрмәйенсә матур һөҙөмтәләр бирә. Мәктәптәрҙең матди базаһы нығый, уҡытыу-тәрбиә эшенең барлыҡ күрһәткестәре буйынса һиҙелерлек уңыштар яулана. Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында Баймаҡ районы мәктәп һәм балалар учреждениеларын күпләп төҙөүгә башланғыс һала. 1965 йылға уларҙың 60 проценттан ашыуы яңы биналарға күсә. Районның

барлыҡ башланғыс мәктәп һәм синыф уҡыусылары республикала тәүгеләрҙән булып бер сменала уҡый башлай, урта мәктәпте тамамлаусыларҙың 35 проценты юғары уҡыу йорттарына уҡырға инә.

1963 йылда Мәскәүҙә Бөтә Союз Педагогик уҡыуҙарында һөйләгән телмәрендә Баймаҡ район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире Р.И.Үтәғолов мәктәптә балаларҙы бер синыфтан икенсеһенә мотлаҡ күсереп, икенсе йылға ултыртып ҡалдырмау тәжрибәһе менән уртаҡлаша. Тәжрибә киң таратыуға лайыҡ була. Р.И.Үтәғолов шулай уҡ урындағы кешеләрҙән кадрҙар әҙерләүгә ҙур иғтибар бирә. Юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүселәр өсөн ҡалала курстар ойошторола һәм ҡабул итеү имтихандары үткәрелә, ситтән тороп белем алыусылар өсөн уҡыу йорттарының консультация һәм имтихан ҡабул итеү бүлеге асыла.

Баймаҡ район халыҡ мәғарифы бүлеге яңы мәктәптәр төҙөү буйынса республикала еңеүсе булып, ике тапҡыр күсмә Ҡыҙыл Байраҡ менән бүләкләнә. Бүлек мөдире Рамаҙан Исмәғил улы Үтәғоловтың тырыш хеҙмәте лайыҡлы баһалана. 1965 йылда уға Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исем, Рәсәй Фәндәр академияһының «Педагогия фәне өлкәһендәге новаторлығы өсөн» Маҡтау грамотаһы бирелә. 1966 йылда ул Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була, күп тапҡыр Маҡтау грамоталары менән бүләкләнә.

1967 йылда күренекле мәғариф хеҙмәткәре, тәжрибәле педагог һәм ойоштороусы Р.И.Үтәғолов Сибай ҡалаһына күсә, тәүге ваҡытта ҡала партия комитетының сәйәси мәғариф кабинеты мөдире була. Әммә уны мәктәп үҙенә тарта, һәм ул 1970 йылда мәктәп-интернат директоры вазифаһына билдәләнә. Педагог ҡолас йәйеп эшкә тотона. Шунан уны ярҙамсы мәктәп директоры итеп күсерәләр. Әйҙәгеҙ, уны ла алдынғылар сафына сығарығыҙ, йәнәһе. Ә Рамаҙан Исмәғил улы ярҙамсы мәктәпте ысынлап та өлгөлө итә. 1973 йылда уға Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы тигән маҡтаулы исем бирелә.

1989 йылдан бирле Р.И.Үтәғолов Баймаҡ районы һәм ҡалаһы тарихын, арҙаҡлы кешеләрен өйрәнеү, асыҡлау буйынса күп яҡлы эш алып бара. Уның был өлкәләге хеҙмәттәре мәктәптә балалар уҡытыу һәм тәрбиәләүҙе яҡшыртырға бай материалдар бирә. Тарихи темаларға арналған хәтер кисәләре, китапхана, мәктәп, клубтарҙа үткәрелгән осрашыуҙар Рамаҙан Исмәғил улы етәкселегендә ойошторола. Уның йырсы, ҡурайсы, сәсән Буранбайҙың 175 йыллығына – Буранбай ауылында, ике Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры Ш.Ғафаровтың 100 йыллығына – Ҡолсора ауылында, атаҡлы мәғрифәтсе, дин әһеле Хәлил Рәхимовтың 135 йыллығына – Таулыҡай ауылында, публицист Мөхтәр Байымовтың 100 йыллығына Байым ауылында яһаған сығыш-

тары, төрлө гәзиттәрҙә баҫылып сыҡкан мәкәләләре, ғилми-тикшеренеү эштәре йәштәрҙе тәрбиәләүҙә ҙур әһәмиәткә эйә.

1998 йылда Баймаҡ кала Советы ҡарары нигеҙендә Р.И. Үтәғоловҡа тыуған ер-һыу тарихы, күренекле кешеләр тураһындағы очерктары өсөн районды шағир Батыр Вәлид исемендәге премияһы лауреаты исеме бирелде. Ул Сибай ҡалаһы, Баймаҡ ҡалаһы һәм районының йәмәғәт тормошонда ҡулынан килгәнсә ихлас ҡатнаша. 2000 йылда уның «Белем һуҡмаҡтары» тигән китабы сыҡты. Ижад эшенән ул ҙур ҡәнәғәтләнеү таба, йәштәрҙе лә шуға өйрәтә.

## ХӘБИР САЛАУАТ улы ФӘРИТОВ

*(1913 – 1997)*



Хәбир Салауат улы Фәритовты белгән кешеләр уны үҙ эшенә сикһеҙ бирелгән, тапшырылған бурысты намыҫлы башҡарған хеҙмәткәр, эскерһеҙ ярҙамсыл шәхес күреп хәтерләйҙәр. Ул – мәктәптәрҙә, педагогия училищеларында уҡытыу-тәрбиә эшен яҡшыртыуға байтаҡ өлөш индергән педагог, башҡорт теле дәреслектәре һәм методик ҡулланмалар авторы, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.

Хәбир Салауат улы Фәритов 1913 йылдың 12 апрелендә Башҡортостандың хәҙерге Миәкә районы Кәңгер-Мәнәүез ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Беренсе донъя һуғышынан атаһы ауыр яраланып ҡайтып, тиҙҙән вафат була. Кескәй Хәбир тормош ҡыйынлыҡтарын мул күреп үҫә. Барлы-юҡлы йәшәүгә ҡарамаҫтан, Хәбир белем алыуға ихлас ынтыла, беренсе баҫҡыс мәктәптә яҡшы уҡый, үҙендә бөхтәлек, тырышлыҡ сифаттары тәрбиәләй.

Көтмәгәндә Хәбир Фәритов Бәләбәй педагогия училищеһына барып эләгә. Был уҡыу йортон бөтөрөп сыҡкас, 1930 йылда ул Бишбүләк кантоны Бикҡол башланғыс мәктәбе директоры һәм уҡытыусыһы итеп эшкә ебәрелә. Килеү менән, йәш белгес эшкә сума, дәрестән буш

ваҡытта балалар өсөн төрлө уйындар, түңәрәктәр, тәрбиә саралары ойоштора, ата-әсәләргә мәҙәни-ағартыу сараларына йәлеп итә, наҙанлыҡты бөтөрөү мәктәбе эшендә әүҙем ҡатнаша, йәштәр кисәләре үткәрә.

1932 йылда социалистик ярышта Бикҡол мәктәбе беренсе урын яулап, бүләк ала. Уҡытыусыларҙың август конференцияһында директор Х.С.Фәритовҡа беренсе аҡсалата бүләк тапшырыла. Йәш белгес эшкә яңы дәрт менән тотона, үҙ белемен артабан күтәреү тураһында уйлана. Был хыялын ғәмәлгә ашырыу теләге уны 1933 йылда К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтына алып килә. Унда уҡырға инеү ҙур шатлыҡ һәм рухи күтәренкелек тойғолары тыуҙыра. Уҡыу дәүерендә Хәбир Фәритов студенттарҙың ғилми эштәрендә ҡатнаша, Тарих, тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институтында «Урыҫса-башҡортса һүҙлек» төҙөүгә йәлеп ителә. Был эшкә уны Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, педагогия институтының халыҡ ижады буйынса уҡытыусыһы, әҙип һәм ғалим Ғабдулла Амантай ылыҡтыра. Тел һәм методика уҡытыусыһы Ғәббәс Дәүләтшин дә студент Хәбир Фәритовтың туған телгә иғтибарлы булыуын, күҙәтеү һәм һығымталар яһау һәләтен билдәләй. Педагогика уҡытыусыһы Николай Дмитриевич Чижов унда фән менән тәрән ҡыҙыҡһыныусанлыҡ сифаты тәрбиәләй.

1937 йылда, педагогия институтын тамамлағас, Хәбир Фәритов педагогик ғилми-тикшеренеү институтында эшкә ҡалдырыла. Әммә ул ауыл мәктәбенә китергә ынтыла, 1937 – 1939 йылдарҙа Темәс педагогия училищеһында тел, әҙәбиәт һәм методика уҡыта. Бында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ғәли Харис улы Ғүмәров менән ижади бәйләнешкә инә. Улар педагогия училищелары өсөн башҡорт теле уҡытыу программаһы төҙөй. Мәғариф Халыҡ Комиссариаты программаны раҫлай һәм баҫтырып сығара. Шунан Х.С.Фәритов менән Ғ.Х.Ғүмәров педагогия училищелары өсөн башҡорт теле (синтаксис, фонетика, морфология) дәреслеге яҙа. Был – 1940 йылда донъя күргән тәүге грамматика китабы. Ул күп йылдар буйы һәйбәт дәреслек булып һанала һәм бер нисә тапҡыр баҫылып сыға.

1939 йылдан Х.С.Фәритов Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә, шунан Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. Һуғышта ике тапҡыр яралана, ләкин тиҙ арала сафҡа баҫа, батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, миҙалдар менән бүләкләнә.

Һуғыштан ҡайтҡас, Хәбир Фәритов Дәүләкән педагогия училищеһында уҡытыусы булып эшләй. 1946 йылда училище Күгәрсен районы үҙәге Мораҡҡа күсерелгәс, Х.С.Фәритов унда директорҙың уҡытыу эше буйынса урынбаҫары итеп ҡуйыла, уҡытыу-тәрбиә эшен яҡшыртыуға күп көс һала, башҡорт теле грамматикаһын, уны уҡытыу методикаһын камиллаштырыу мәсьәләләре менән шөғөлләнә. 1952

йылда бер йыл Темәс педагогия училищеһында эшләгәс, ул Моракка кире ҡайтып, башҡорт урта мәктәбе директоры вазифаһын башҡара. Уның етәкселегендә уҡытыусылар коллективы яңынан-яңы уңыштар яулай, мәктәп алдынғылар сафына баҫа, терәк мәктәпкә әйләнә.

1957 йылда Хәбир Салауат улы Фәритов Башҡортостан «Китап» нәшриәтенә дәреслектәр һәм методик әҙәбиәт редакцияһы мөдире итеп күсерелә, 1963 йылда нәшриәттең баш мөхәррире итеп үрләтелә. Бында ул мәктәптәрҙе дәреслек һәм башҡа уҡытыу әсбаптары менән ваҡытында тәьмин итеүгә ҙур иғтибар бирә.

1966 йылда миңә Х.С.Фәритов менән яҡындан аралашырға тура килде. Минең «Мәктәп байрамдары» тигән беренсе китабымдың мөхәррире булырға ул бик теләп ризалашҡан, сөнки мәктәптә тәрбиә саралары үткәреү алымдарын яҡшы белә ине. Ул миңә китаптың ҡулъяҙмаһын камиллаштырыуҙа ҙур ярҙам күрһәтте.

Х.С.Фәритов педагогия училищелары өсөн дәреслектән тыш, урта мәктәптең III, V – VI синыфтары өсөн башҡорт теле дәреслектәре, синыфтан тыш уҡыу китаптары, дидактик материал йыйынтыктары төҙөүҙә яҡындан ҡатнаша, авторҙаштары Ғ.Х.Ғүмәров, Ф.Ф.Абдуллина, Ж.Ғ.Кейекбаев, А.Ә.Ғәлләмов, Ә.М.Аҙнабаев, Ғ.Ғ.Сәйетбатталов, Х.А.Толомбаев менән ҡулға-ҡул тотоношоп эшләй.

Ғилми-педагогик һәм матбуғат өлкәһендә ирешкән уңыштары өсөн Хәбир Салауат улы Фәритовҡа Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре тигән юғары исем бирелә.

## ҒАБДУЛЛА НАФИҠ улы ФӘТИХОВ

*(1914 – 1998)*



Беҙ Ғабдулла Нафиҡ улы Фәтиховты республиканың киң танылған педагогы, мәктәптәр өсөн юғары белемле уҡытыусылар әҙерләүгә үҙ өлөшөн индергән мәғариф хеҙмәткәре булараҡ иҫкә алабыҙ. Ул – талантлы уҡытыусы, педагогия фәндәре кандидаты, доцент.

Ғабдулла Нафиҡ улы Фәтихов 1914 йылдың 20 июлендә Башҡортостандың Благовещен районы Яңы Турбаслы ауылында крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Бөрө педагогия техникумында уҡыған сағында уҡ ул мәктәптә уҡытыусы булып эшләп йөрөй, 40 йыл буйы был маҡтаулы, шул уҡ ваҡытта яуаплы һөнәргә тоғро ҡала.

Юғары белем алыу маҡсатында Ғ.Н.Фәтихов Өфө уҡытыусылар институтына уҡырға инә, уны 1940 йылда тамамлай, шунан Өфө ҡалаһының 52-се мәктәбенә директор итеп тәғәйенләнә. Байтаҡ педагогик тәжрибә туплаған белгес Өфө ҡалаһының Калинин район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире, Өфө ҡала халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире булып эшләй, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында мәғариф хеҙмәткәрҙәрен алда торған бурыстарҙы намыҫлы үтәргә, тырыш хеҙмәт өлгөләре күрһәтергә саҡыра.

Мәғариф өлкәһендә оҙаҡ йылдар эшләү дәүерендә Ғабдулла Фәтихов педагогика мәсьәләләре буйынса ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара. Был шөғөл уны шул ҡәҙәр мауыҡтыра, ул хатта үҙ тәжрибәһен дөйөмләштергән ҙур ғына ғилми хеҙмәт яҙа. 1951 – 1953 йылдарҙа Ғ.Н.Фәтихов Мәскәүҙә аспирантурала уҡый, халыҡтар араһында педагогик фекерҙең үҫеш проблемаларын өйрәнә, күренекле башҡорт яҙыусыларының педагогик ҡараштары мәсьәләһе өҫтөндә тәрән тикшеренеү эштәре менән шөғөлләнә. 1953 йылдың ноябрендә ул «Башҡорт әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың педагогик ҡараштары» темаһына диссертация яҡлай.

Ғалим Өфөгә ҡайтыу менән, башкөллө эшкә күмелә. Тиҙҙән педагогия фәндәре кандидаты Ғабдулла Нафиҡ улы Фәтиховты Бөрө дәүләт уҡытыусылар институты директоры итеп тәғәйенләйҙәр. Бында эшләгән осорҙа уны дәүләт педагогия институты итеп үҙгәртеүгә өлгәшә, уның уҡытыу-матди базаһын нығытыуҙа яңылыҡтар индерә, юғары уҡыу йортона әҙерлекле белгестәр саҡыра. Улар ярҙамында директор республика мәктәптәре өсөн юғары белемле уҡытыусылар әҙерләүҙе юлға һала.

Педагогия институтында яңы оҫтахана, китапхана, уҡытыу кабинеттары булдырыла, ғилми-тикшеренеү эштәре киң йәйелдерелә. Бөрө педагогия институты республиканың төньяҡ райондары өсөн мәҙәниәт усағына әйләнә.

1958 – 1959 йылдарҙа Ғ.Н.Фәтихов Рәсәй Федерацияһы Халыҡ мәғарифы министрлығы Милли мәктәптәр ғилми-тикшеренеү институтының Башҡортостан филиалы мөдире булып эшләй. Бында ла ул үҙен һәләтле ғилми хеҙмәткәр, етәксе итеп күрһәтә, филиалдың ижади эштәрен ойоштороуға барлыҡ көсөн бирә. Мәктәптәр өсөн төрлө предметтарҙан уҡытыу пландары төҙөлә, дәреслектәр һәм методик әсбаптар яҙыла.

Ғ.Н.Фәтихов РСФСР Педагогия йәмғиәтенең Башҡортостан бүлеген ойоштороусы булып сығыш яһай һәм уның беренсе рәйесе була, республика мәктәптәренә методик ярҙам күрһәтеүгә лайыҡлы өлөш индерә, алдынғы тәжрибәне пропагандалап, уҡытыусы коллективтарына тарата.

Талантлы педагог Башҡорт дәүләт университетында, Башҡорт дәүләт педагогия институтында педагогика һәм психология кафедралары доценты вазифаһын башҡара, 1974 йылда «Башҡорт мәғрифәтселәренең һәм яҙыусыларының педагогик ҡараштары» тигән китап баҫтырып сығара. Ул – күп төрлө мәҡәләләр, брошюралар, китаптар авторы.

## ГӘРӘЙ
## ГӘРӘЙ улы
## ШӘФИЕВ

*(1920 – 1996)*



Ейәнсура, Күгәрсен райондары уҡытыусылары, мәғариф хеҙмәткәрҙәре Гәрәй Гәрәй улы Шәфиевте яҡшы уҡытыусы, оҫта етәксе тип беләләр. Ул – мәғарифты үҫтереүгә лайыҡлы өлөш индергән талантлы педагог, күренекле ойоштороусы.

Гәрәй Гәрәй улы Шәфиев 1920 йылдың 10 июнендә Ырымбур өлкәһенең Октябрь районы Беренсе Иманғол ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ул туғыҙ йәштән хеҙмәт юлын башлай, йәйен ауыл халҡының быҙауҙарын көтә, ҡышын башланғыс мәктәптә уҡый. Уны тамамлағас, Гәрәй Шәфиев Башҡортостандың Ейәнсура районы Абзан мәктәбендә уҡытыусы булып эшләгән апаһына күсеп килә. 1936 йылда Абзан колхоз йәштәре мәктәбен тамамлағандан һуң, ул Ырымбур педагогия рабфагына уҡырға инә. 1939 йылда йәш белгес Аҡтүбә ҡалаһының тулы булмаған урта мәктәбенә математика уҡытыусыһы итеп ебәрелә, бер үк ваҡытта Аҡтүбә уҡытыусылар институтында уҡый.

1940 йылда Г.Г.Шәфиев армия сафына алына, Бөйөк Ватан һуғышында баштан уҡ ҡатнашып, батырлыҡтар күрһәтә. 1945 йыл-

дың сентябрендә армиянан ҡайтҡас, Гәрәй Шәфиев Абзан районы Юлдыбай башланғыс мәктәбе директоры итеп эшкә ебәрелә, шунан район халыҡ мәғарифы бүлеге инспекторы, педагогия кабинеты мөдире итеп тәғәйенләнә, һәр урында намыҫлы хеҙмәт өлгөләре күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта Абзан урта мәктәбендә математика уҡыта, талантлы педагог булараҡ өлгөрөп етә.

1947 – 1951 йылдарҙа Г.Г.Шәфиев Ырымбур педагогия институтының ситтән тороп уҡыу бүлегендә белемен күтәрә, Абзан урта мәктәбенең юғары синыфтарында физика, математика уҡыта, эштә алдынғы ысул һәм алымдарҙы оҫта файҙаланыу һөҙөмтәһендә ҙур уңыштарға ирешә. Уҡытыусы бай тәжрибә туплай, уны фәнни-ғәмәли конференцияларҙа, педагогик уҡыуҙарҙа, төрлө йыйындарҙа йәш уҡытыусылар менән уртаҡлаша.

1953 йылда Г.Г.Шәфиев Күгәрсен районы Мораҡ педагогия училищеһына математика уҡытыусыһы итеп күсерелә. Бында ул уҡытыу-тәрбиә эшен камиллаштырыуға үҙ өлөшөн индерә.

1957 йылда Гәрәй Гәрәй улы Шәфиев Мораҡ урта мәктәбе директоры итеп тәғәйенләнә. Ул коллективты балалар уҡытыу һәм тәрбиәләүҙең яуаплы бурыстарын үтәүгә рухландыра, иң тәүҙә үҙе өлгө күрһәтә.

Мәктәп директоры булыу, шулай уҡ 1959 йылдан физика һәм математика уҡытыу дәүерендә Г.Г.Шәфиев йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша, айырыуса тыуған яҡты өйрәнеүгә ныҡлы иғтибар бирә. Ул башҡорт революционеры Бәхтегәрәй Әғзәм улы Шәфиевтең (Гәрәй Гәрәй улы – уның ике туған ҡустыһы, уларҙың аталары Әғзәм менән Гәрәй – бер туғандар) тормошон, революцион эшмәкәрлеген өйрәнеү буйынса ҙур эш алып бара. Шуның һөҙөмтәһендә Башҡортостанда һәм Ырымбур өлкәһендә яңы тормош өсөн көрәштә Б.Ә.Шәфиевтең тотҡан урыны асыҡлана. Мораҡта бер урамға Б.Шәфиев исеме бирелә, Өфөлә элекке Курск урамы Б.Шәфиев урамы тип исемләнә (бында Р.У.Ҡузыев менән яҙыусы Ә.Мирзаһитовтың хеҙмәте ҙур).

1972 йылдың октябрендә Гәрәй Гәрәй улы Шәфиев Күгәрсен район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп үрләтелә. Ул мәктәптәр селтәрен яҡшыртыу, уларҙың матди базаһын нығытыу, уҡытыусылар әҙерләү, методик эште юғары кимәлдә ойоштороу буйынса һөҙөмтәле хеҙмәт күрһәтә. Өлгәшкән уңыштары өсөн Гәрәй Гәрәй улы Шәфиевкә Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы исеме бирелә, төрлө йылдарҙа ул башҡа бүләктәргә лайыҡ була, халыҡтың тәрән һөйөүе менән файҙалана. Уның кешеләргә кәрәкле оло эштәрен уҡыусылары дауам итә.

## САЛАУАТ ХӨСӘЙЕН улы ӘБДЕЛМӘНОВ

*(1937 – 2002)*



Беҙ Салауат Әбделмәнов менән Башҡорт дәүләт университетында бер осорҙа уҡыныҡ. Ул математика факультетында юғары белем алды. Уны тамамлағандан һуң, ҡайҙа ғына эшләһә лә, үҙ хеҙмәтенә намыҫлы ҡараш өлгөһө күрһәтте, шуға ла уны яҡты йөҙ менән ҡаршылаған, иң тәүҙә хәл-әхүәлдәрен һорашҡан дуҫтары күп булды.

Ысынлап та, Салауат Хөсәйен улы Әбделмәнов фиҙакәр хеҙмәт юлы үтте. Ул 1937 йылдың 10 октябрендә Башҡортостандың Хәйбулла районы Байғусҡар ауылында донъяға килә. 1961 йылда университет тамамлағас, уны үҙ районының Целинный һигеҙ йыллыҡ мәктәбенә эшкә ебәрәләр. Бында ул математика уҡыта һәм директор урынбаҫары була. Тырыш хеҙмәт кешеһен һәр ҡайҙа ла тиҙ күреп ҡалалар. Салауат Әбделмәнов менән дә шулай була: йәш белгесте район комсомол комитетының икенсе сәркәтибе, бер аҙҙан беренсе сәркәтибе итеп һайлайҙар.

Был йылдарҙа мәктәптә белем биреүҙең йөкмәткеһен яңыртыу, уның сифатын яҡшыртыу буйынса ҙур үҙгәртеүҙәр башлана. Яңы программалар, дәреслектәр ғәмәлгә индерелә, методтар һәм алымдар яңыртыла. Яҡшы әҙерлек алған, дәртле һәм һәр ваҡыт яңылыҡҡа ынтылған йәш белгес С.Х.Әбделмәнов мәктәп эшенә ҡайтырға уйлай. Тиҙҙән уның был хыялы тормошҡа аша. Әбеш, Аҡъяр мәктәптәрендә Салауат Әбделмәнов, директорҙың уҡытыу-тәрбиә эше буйынса урынбаҫары булараҡ, уҡытыусыларҙың методик эшен яҡшыртыу, уларға алдынғы тәжрибә яңылыҡтарын күрһәтеү, таратыу буйынса ҙур хеҙмәт башҡарып, оҫта етәкселек итә.

Һәләтле педагогтың һөҙөмтәле хеҙмәтен күреп, 1966 йылда Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтына

методист, 1967 йылда Халыҡ мәғарифы министрлығына мәктәптәр инспекторы итеп күсерәләр. Шул йылдарҙа Салауат Әбделмәнов үҙен инициативалы, талапсан һәм үҙ эшен яҡшы белгән методист, инспектор итеп күрһәтә. Мәктәптәр эшен өйрәнгәндә ул уҡытыусыларҙың белем сифатын күтәреүгә, матди базаны нығытыуға, уҡытыу-тәрбиә эшен яҡшыртыуға, мәктәп, ғаилә һәм йәмәғәтселек хеҙмәттәшлеген үҫтереүгә ҙур иғтибар бирә.

1970 йылда Салауат Хөсәйен улы Әбделмәнов уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институты директоры итеп тәғәйенләнә. Ул институттың барлыҡ коллективы эшен республика мәктәптәре уҡытыусыларын һәм етәксе кадрҙарын яңынан әҙерләүгә, был эште методик яҡтан тәьмин итеүгә, алдынғы педагогик тәжрибәне, уҡыусыларҙы ғаиләлә тәрбиәләү һәм уларға мәктәптә профессия йүнәлеше биреү буйынса яҡшы тәжрибәләрҙе өйрәнеп таратыуға йүнәлтә. Уның оҫта етәкселегендә был йылдарҙа институт айырыуса һәйбәт эшләй, уҡытыусыларҙың белемен, методик оҫталығын юғары кимәлгә күтәреүсе ойошмаға, педагогик үҙәккә әйләнә. Институттың күп кенә кабинет мөдирҙәре, методистар үҙ эштәре буйынса уҡытыусыларҙың абруйлы етәкселәре, кәңәшсе-тәрбиәселәре булып өлгөрөп етте. Уларҙың бер нисәһе педагог ғалимдар менән бергә дәреслектәр, методик ҡулланмалар баҫтырып сығарҙы, мәктәптәргә ҙур ярҙам күрһәтте.

Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институты коллективы республикала йәштәргә дөйөм урта белем биреүгә күсеүҙе методик яҡтан уңышлы хәл итә, педагогик кадрҙарҙың белем сифаты яҡшыра.

1976 йылда Салауат Хөсәйен улы Әбделмәнов Башҡортостан һөнәрселек-техник белем биреү идаралығы башлығы урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. Бында ул яңы эш – һөнәрселек-техник белем биреү системаһына дөйөм урта белем биреүҙе индереү мәсьәләләре менән шөғөлләнә. Уның эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә республикала урта һөнәрселек-техник белем биреү училищелары селтәре киңәйә, унда урта белем алыу өсөн тейешле шарттар – дөйөм белем биреү предметтарын уҡытыу өсөн яҡшы йыһазландырылған уҡытыу кабинеттары, лабораториялар булдырыла, уҡытыусылар өсөн методик эш, алдынғы педагогик тәжрибә уртаҡлашыу ойошторола.

Һөнәрселек-техник белем биреү идаралығында С.Х.Әбделмәнов эшләгән йылдарҙа был уҡыу йорттарында 93 меңдән күберәк квалификациялы эшсе урта белем ала. Һөнәрселек-техник училищеларын тамамлаусыларҙы юғары уҡыу йорттарының инженер-педагогия факультетарына уҡырға ебәреү планы йыл һайын уңышлы үтәлә.

1984 йылдың июненән Өфө ҡала Советы башҡарма комитетының халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире, һуңғараҡ идаралыҡ башлығы булараҡ, Салауат Хөсәйен улы Әбделмәнов баш ҡаланың мәғариф эштәренә уңышлы етәкселек итә, уның селтәрен үҫтереүгә, матди-техник базаһын нығытыуға, мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә эшен яҡшыртыуға күп көс һала, уҡытыусыларға методик ярҙам ойоштороу, уларҙың алдынғы тәжрибәһен өйрәнеү һәм таратыу буйынса тейешле саралар күрә.

1990 йылда Салауат Хөсәйен улы Әбделмәнов республика Халыҡ мәғарифы министрлығына эшкә күсерелә, уның милли мәктәптәр бүлеге башлығы, кадрҙар бүлегенең педагогия училищелары буйынса баш белгесе вазифаларын башҡара.

1996 йылдың февралендә С.Х.Әбделмәнов республиканың «Салют» балалар санаторийы эргәһендәге урта мәктәп директоры итеп тәғәйенләнә. Һәр урындағы кеүек, был уҡыу йортонда ла етәксе педагогик коллективтың хеҙмәтенә йүнәлеш бирә, уҡытыусыларҙың һәм тәрбиәселәрҙең ижади эштәрен ойоштора.

Салауат Хөсәйен улы Әбделмәнов Башҡортостан Халыҡ мәғарифы министрлығы, уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институты, заманында РСФСР Педагогия йәмғиәтенең Башҡортостан бүлеге тарафынан ойошторолған фәнни-ғәмәли конференцияларҙы, педагогик уҡыуҙарҙы үткәреүҙә әүҙем ҡатнаша, төрлө темаларға сығыш яһай.

Салауат Хөсәйен улы Әбделмәнов хеҙмәттә өлгәшкән уңыштары өсөн миҙалдар, Маҡтау грамоталары менән бүләкләнә, 1980 йылда уға Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, 1985 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исемдәр бирелә. Ул республика уҡытыусылары һәм мәғариф етәкселәренең оло ихтирамы менән файҙалана.

Һуңғы ваҡытҡа ҡәҙәр педагог, тынғыһыҙ етәксе С.Х.Әбделмәнов республиканың йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша, мәғариф хеҙмәткәрҙәренә ҡулынан килгән тиклем ярҙам күрһәтә.

## РӘЙЕС ӘХМӘҘУЛЛА улы ӘХМӘҘУЛЛИН

*(1934)*



Рәйес Әхмәҙулла улы Әхмәҙуллин 1934 йылдың 22 февралендә Башҡортостандың Илеш районы Иҫке Сереккүл ауылында тыуған. Урта мәктәптән һуң, 1953 йылда, Бөрө уҡытыусылар институтын тамамлап, хеҙмәт юлын Дәүләкән районында уҡытыусы булып башлап ебәрә. Тиҙҙән хәрби хеҙмәткә алына, унан ҡайтҡас, 1955 йылда, Илеш районы Иғмәт ете йыллыҡ мәктәбендә балалар уҡыта һәм шул ваҡытта уҡ үҙен тырыш, ижади уҡытыусы итеп күрһәтә. Уның ойоштороу һәләтен күреп, 1958 йылда Һүлте ете йыллыҡ мәктәбе директоры итеп ҡуялар. Шунан һуң яҡшы педагог, талантлы директор Илеш районы Ульянов исемендәге колхоз партия ойошмаһы сәркәтибе итеп һайлана.

Әммә Рәйес Әхмәҙуллин уҡытыу-тәрбиә эшенә, шау-шыулы мәктәп тормошона ҡайтырға ынтыла. 1964 йылда уның теләге тормошҡа аша – Иғмәт һигеҙ йыллыҡ мәктәбе директоры итеп күсерелә, 1971 йылдан Базытамаҡ урта мәктәбе директоры вазифаһын башҡара. Был йылдарҙа ул айырыуса күп эшләй, Бөрө дәүләт педагогия институтын тамамлап белемен күтәрә, уҡытыусыларҙың уҡытыу-тәрбиә һәм методик эштәренә оҫта етәкселек итеүе менән башҡа мәктәп директорҙарынан айырылып тора. Уҡытыусылар һәм уҡыусылар коллективтары менән арымай-талмай эшләү тәжрибәһе уға һиҙелерлек уңыштар яуларға мөмкинлек бирә – Иғмәт, Базытамаҡ мәктәптәре уның етәкселегендә алдынғылар булып танылa.

1975 йылдың июнендә Рәйес Әхмәҙулла улы Әхмәҙуллин Илеш район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп үрләтелә. Бына шунда уның оҫта ойоштороусы, талантлы етәксе сифаттары тулыраҡ асыла. Үҙенә ышанып тапшырылған вазифаны оло яуаплылыҡ тойоп башҡарыу уға илһамланып эшләргә, көн һайын билдәләп

ҡуйылған бурыстарҙы теүәл үтәргә мөмкинлек бирә. Районда мәктәп һәм балалар ойошмалары өсөн биналар төҙөү киң ҡолас ала, айырыуса колхоз аҡсаһына инициатив ысул менән төҙөүгә ҙур иғтибар бирелә.

Мәктәптәрҙә уҡытыусыларҙың методик эштәре киң йәйелдерелә, алдынғы педагогик коллективтарҙың тәжрибәһен өйрәнеү һәм таратыу дөйөм эште яҡшыртырға, уға яңы һулыш бирергә булышлыҡ итә. Район етәкселеге мәғариф бүлеге мөдире алдына район хужалыҡ эштәре буйынса ғына түгел, шулай уҡ мәғариф буйынса ла алдынғы булырға тейеш тигән бурыс ҡуя. Бүлек мөдире Р.Ә.Әхмәҙуллин уны намыҫлы үтәй. Илеш районы мәғариф эшенең төп күрһәткестәре буйынса республикала алдынғы урынға сыға, бер нисә тапҡыр юғары бүләктәргә лайыҡ була.

Район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире Рәйес Әхмәҙулла улы Әхмәҙуллиндың намыҫлы хеҙмәте юғары баһалана. 1978 йылда ул Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. 1974 йылда уға Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, 1986 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исемдәр бирелә.

Мәғариф бүлеге мөдире вазифаһын Р.Ә.Әхмәҙуллин 1987 йылға тиклем башҡара. Ярты йыл Үрге Йәркәй 2-се урта мәктәбе директоры булып эшләгәс, уны 86-сы һөнәрселек-техник училище директоры итеп күсерәләр. Бында униң ойоштороу һәләте һәм булдыҡлылығы айырыуса кәрәк була ла инде. Эшкә бирелгәнлек, уҡытыусылар һәм мастерҙар хеҙмәтен заман талаптарына ярашлы ойоштороу Р.Ә.Әхмәҙуллинға яңы уңыштар яуларға мөмкинлек бирә. Барлыҡ көс уҡыусыларҙы ауыл эшсәндәрснә лайыҡлы алмашсылар итеп тәрбиәләүгә йүнәлтелә.

86-сы һөнәрселек-техник училище базаһында республика училищелары етәкселәре, уҡытыусылары һәм мастерҙарының ғилми-ғәмәли конференциялары уҙғарыла, коллективтың тәжрибәһе, эш алымдары һәм ысулдары өйрәнеп таратыла. Төрлө йыйындарҙа ғына түгел, башҡа көндәрҙә лә училищела кеше күп була.

Рәйес Әхмәҙулла улы Әхмәҙуллиндың тырышлығы һөҙөмтәһендә 86-сы һөнәрселек-техник училищеһы һөнәрселек лицейы тип үҙгәртелә. Униң профиле киңәйә, матди-техник базаһы нығый. Педагогия коллективы йәш кадрҙар – уҡытыусылар, мастерҙар менән тулыландырыла. Униң ауыл эшсәндәренә йәш алмашсылар тәрбиәләүҙәге ҙур һәм кәрәкле хеҙмәте ата-әсәләрҙең ихтирамына лайыҡ була.

Мәғариф өлкәһендә арымай-талмай эшләгәне, ҙур уңыштар яулағаны өсөн Рәйес Әхмәҙулла улы Әхмәҙуллинды райондаштары бик

ярата. Ул бер нисә тапкыр ауыл һәм район Советтарына депутат итеп һайлана, етәкселәр һәм коллегаларының оло һөйөүе менән файҙалана.

Һуңғы йылдарҙа район хужалыктарында 86-сы һөнәрселек-техник училищела укып сығып һөнәр алған кешеләр төп урындарҙы киңерәк биләй, үҙҙәрен хеҙмәт һөйгән һәм алдынғы эшсәндәр итеп күрһәтә.



## МӘЙСӘРӘ СӘЛӘХИ кыҙы ӘХТӘМОВА

*(1930)*

Кайһы бер укытыусыларҙың исеме балалар күңелендә мәңгегә уйылып кала. Мәйсәрә Сәләхи кыҙы Әхтәмова – шундай һоклангыс кешеләрҙең береһе, оҙак йылдар Өфө калаһының 1-се мәктәп-интернатында (хәҙерге Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика гимназия-интернаты) математика укыткан дәүерендә үҙен талантлы педагог итеп таныта. Ул – бер нисә китап авторы, Башкортостан Республикаһының атказанған укытыусыһы.

Мәйсәрә Сәләхи кыҙы Әхтәмова 1930 йылдың 28 декабрендә Башкортостандың Көйөргәҙе районы Таймаҫ ауылында донъяға килә. Хеҙмәт юлын 1948 йылда, тыуған ауылы мәктәбен тамамлағандан һуң, Якшымбәттә математика укытыусыһы булып башлай, 1951 – 1956 йылдарҙа Таймаҫ урта мәктәбендә балаларға белем бирә.

Педагогик хеҙмәт Мәйсәрә Сәләхи кыҙының үҙ белемен күтәреү ихтыяжын көн тәртибенә куя. Ул 1949 – 1951 йылдарҙа Стәрлетамак укытыусылар институтының математика факультетында укый, 1956 – 1961 йылдарҙа Стәрлетамак дәүләт педагогия институтында белем ала. Шунан юғары белемле укытыусы Өфөнөң 1-се мәктәп-интернатына эшкә урынлаша. Бында ул 25 йыл буйы, 1986 йылда хаклы ялға киткәнсе, математика укыта.

Мәйсәрә Сәләхи ҡыҙы Әхтәмова мәктәп-интернатҡа байтаҡ тәжрибә туплап, педагог эшенең серҙәрен ныҡлы төшөнөп килә, өҫтәүенә, юғары белемле. Уны коллектив йылы ҡаршылай, иң мөһиме – тәүге көндәрҙән үк балалар ҙа яҡын күрә. Уҡытыусы IV синыфта уҡыусыларҙың дәрес материалын аңлап үҙләштереүҙәренә ҙур иғтибар бирә, сөнки математиканы системалы өйрәнеү һәм артабан уны яҡшы үҙләштереү ошо осорҙа башлана.

Мәйсәрә Сәләхи ҡыҙы Әхтәмованың төп принцибы – уҡыусыларҙы белем алыуға әүҙемләштереү. Уҡытыусы дәрестең төрлө формаларын, айырыуса балаларҙың иғтибарын йәлеп иткән, уларҙы уйларға, эшләргә өйрәткән дәрес-әңгәмә, дәрес-диспут кеүек алымдарҙы йыш файҙалана, һәр теманы аңлатыуға уҡыусыларҙың үҙҙәрен күберәк ылыҡтырырға тырыша. Был уға ҡыҫҡа ваҡыт эсендә балаларҙың белемен юғарыраҡ кимәлгә күтәрергә мөмкинлек бирә.

Мәйсәрә Сәләхи ҡыҙы Әхтәмованың эш тәжрибәһе Рәсәй Халыҡ мәғарифы министрлығы вәкилдәре тарафынан өйрәнелә һәм министрлыҡтың 1967 йылдың авгусындағы хатында дөйөмләштереләп таратыуға тәҡдим ителә.

М.С.Әхтәмова башҡорт мәктәптәре өсөн математика терминдарын камиллаштырыуға күп көс һала. Уның «Математика терминдары һүҙлеге» – 1982 йылда, «Математика терминдары» китабы 1993 йылда баҫылып сыға. Ул урта мәктәптең байтаҡ математика дәреслектәрен башҡорт теленә тәржемә итә.

Талантлы уҡытыусы М.С.Әхтәмова үҙенең бай тәжрибәһе тураһында район, ҡала, республика фәнни-ғәмәли конференцияларында, методик кәңәшмәләрҙә докладтар һөйләй, уны коллегалары менән уртаҡлаша. Ваҡытлы матбуғат биттәрендә мәҡәләләр баҫтырып сығара.

Алдынғы уҡытыусы киң йәмәғәт эше алып бара. Ул ун биш йылдан ашыу математика уҡытыусыларының методик берекмәһенә етәкселек итә, профсоюз өлкә комитеты президиумы ағзаһы, 1974 – 1986 йылдарҙа «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналының редколлегия ағзаһы була, уҡытыусылар съездарында ҡатнаша.

Тәжрибәле уҡытыусының педагогик хеҙмәте юғары баһалана. Мәйсәрә Сәләхи ҡыҙы Әхтәмова 1971 йылда «Почет Билдәһе» ордены менән бүләкләнә, уға 1982 йылда уҡытыусы-методист, 1984 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исемдәр бирелә. Иң мөһиме – уны уҡыусылары бер ҡасан да онотмай.

## ӘХИӘР
## МОЗАФАР улы
## ЮЛАМАНОВ

*(1929 – 1970)*



Баймаҡ районының күренекле мәғариф хеҙмәткәре Әхиәр Мозафар улы Юламанов – ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ябай уҡытыусынан район кимәлендәге абруйлы етәксегә әйләнеп, был өлкәлә байтаҡ эштәр башҡарып өлгөргән талантлы педагог, һәләтле ойоштороусы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы. Ул 1929 йылдың 15 декабрендә Башҡортостандың Баймаҡ районы Түбә ҡасабаһында тау эшсеһе ғаиләһендә тыуа. 1946 йылда Түбә урта мәктәбен тамамлағандан һуң, уҡытыу эшенә тотона. 1947 йылда Учалы районы Мулдаш башланғыс мәктәбендә эшләй. Шунан Темәс педагогия училищеһының II курсына алына. 1950 йылда уны бөтөрөп сыҡҡас, Әхиәр Юламанов Учалы районы Иманғол ете йыллыҡ мәктәбе директорының уҡытыу эше буйынса урынбаҫары итеп ебәрелә. Шул осорҙа ул педагогик хеҙмәт серҙәрен ныҡлы үҙләштерә. Әммә уны юғары белем алыу теләге бер ҡасан да ташламай. 1952 йылда тәжрибәле уҡытыусы Бохара педагогия институтының химия-биология факультетына уҡырға инеп, уны 1956 йылда тамамлай.

Йәш белгес Ә.М.Юламанов Баймаҡ районына ҡайта һәм ҡаланың 2-се урта мәктәбенә химия уҡытыусыһы итеп тәғәйенләнә, 1961 йылда мәктәп директорының хеҙмәткә өйрәтеү буйынса урынбаҫары итеп ҡуйыла. Был йылдарҙа ул арымай-талмай эшләй, үҙен ижади ҡарашлы педагог һәм етәксе итеп күрһәтә. Уның ойоштороу һәләтен иҫәпкә алып, 1966 йылда тыуған ауылы Түбә урта мәктәбе директоры итеп күсерәләр. Талантлы педагог, уңған директор етәкселегендә мәктәптә уҡытыусылар менән методик эш алып барылыу, уҡытыуҙың кабинет системаһы индерелеү һөҙөмтәһендә тәүге уңыштар яулана. Уҡыусыларҙың өлгәше күтәрелә, йәмәғәт эштәрендә әүҙемлеге күҙгә күренеп арта.

Һәләтле етәксе һәм ойоштороусы Әхиәр Мозафар улы Юламановҡа 1968 йылда Баймаҡ район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире вазифаһы

ышанып тапшырыла. Был өлкәлә ул иң тәүге сиратта ниндәй эштәр башҡарырға кәрәклеген яҡшы белеүен, районды мәғариф күрһәткестәре буйынса күтәрергә һәләтле булыуын иҫбатлай. Педагогик хеҙмәттең барлыҡ баҫкыстарын үтеү уға бүлек мөдиренең бөткөһөҙ мәшәкәттәрен уңышлы үтәп сығырға ярҙам итә.

Район мәктәптәре селтәрен дөрөҫ урынлаштырыу, уҡытыусыларҙың педагогик эшен яҡшыртыу өсөн бүлек мөдире район етәкселәре, төрлө ойошма һәм хужалыҡ етәкселәре иғтибарын мәғариф мәсьәләләренә, уларҙы ваҡытында һәм кисектергеһеҙ хәл итеүгә йүнәлтә. Әхиәр Мозафар улы барлыҡ мәғариф хеҙмәткәрҙәрен ижади эшләргә илһамландырыу маҡсатында дәртләндереү саралары уңышлы файҙалана.

Район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире үҙенең төп эше менән бер рәттән лектор, пропагандист вазифаларын үтәүгә лә ҙур иғтибар бирә, бер нисә тапҡыр ҡасаба, район Советтарына депутат итеп һайлана.

Ә.М.Юламанов етәкселегендә мәғариф эштәре ныҡ алға китә, район уның төп күрһәткестәре буйынса алдынғылар сафына сыға, күсмә байраҡтар һәм башҡа бүләктәргә лайыҡ була. 1969 йылда Әхиәр Мозафар улы Юламановҡа Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исем бирелә.

## ҒИФФӘТ ХӘНИФ ҡыҙы ЯҠУПОВА

*(1923)*



Заманында Кушнаренко районы мәғариф хеҙмәткәрҙәренең алдынғы сафында Ғиффәт Хәниф ҡыҙы Яҡупова айырыуса тырыш хеҙмәте, уңғандарҙың уңғаны булырға яратҡан сәмсел ғәҙәте менән айырылып тора. Фиҙакәрлеге уға ҡайтауаз һымаҡ әйләнеп ҡайта – уҡытыусы илебеҙҙең юғары бүләктәренә лайыҡ була, халыҡтың оло ихтирамын яулай.

Абруйлы педагог Ғиффәт Хәниф ҡыҙы Яҡупова Башҡортостан Республикаһының Кушнаренко районы Ғүмәр ауылында 1923 йылдың 15 декабрендә тыуа. Үҙ ауылының башланғыс мәктәбен тамамлағас, ул 1936 йылда Талбазы ете йыллыҡ мәктәбендә уҡыуын дауам итә. Кесе йәштән уҡытыусы булырға хыялланған ҡыҙ Кушнаренко педагогия училищеһына китә һәм уны 1942 йылда бөтөрөп сыға. Йәш педагог хеҙмәт юлын Нуриман районының башланғыс мәктәбендә башлай, унда һәләтле, тәжрибәле уҡытыусы булып танылa.

Ғиффәт Хәниф ҡыҙы Яҡупованың бәхет йондоҙо йәнтөйәгендә баҙыҡ балҡып ҡаршылай. Ул 1962 йылда үҙе уҡып киткән Талбазы мәктәбенә ҡайта, унда урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эш башлай. Бейеклек артынан бейеклек яулап, үрҙәргә үрләгән уҡытыусы үҙ бәхетен намыҫлы хеҙмәттә таба. Уның эш тәжрибәһе тураһында ваҡытында «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы түбәндәгеләрҙе яҙа: «Уның һәр дәресе – бала өсөн яңылыҡ. Быға уҡытыусы методты оҫта һайлай белеү, программа материалын тормош менән бәйләп биреү, дәрестә техник саралар, күргәҙмә, дидактик материалдарҙы урынлы файҙаланыу аша ирешә. Урыҫ теле уҡытыусыһы булараҡ, Ғ.Х.Яҡупова уҡыусыларҙы ижади яҙма эштәргә өйрәтеүгә, дәрестә балаларҙың фекерләү һәләтлектәрен үҫтереүгә ҙур иғтибар бирә, уҡытыуҙы тәрбиә менән тығыҙ берлектә алып бара» (журналдың 1978 йылғы 11-се һаны, 21-се бит).

Әҙәбиәт дәрестәрендә Ғ.Х.Яҡупова һәр синыфта программа буйынса төплө белем бирә, балаларҙың һәр теманы ваҡытында ныҡлы үҙләштереүенә ирешә, уларҙа белем алыуға, хеҙмәткә аңлы ҡараш, Тыуған илгә һөйөү тәрбиәләй. Маҡсатҡа ынтылышлы тырышлыҡ матур һөҙөмтәләр килтерә. Йылдың-йылы Ғиффәт Хәниф ҡыҙы тулы өлгәш биреп эшләй. Балаларҙың белем сифаты ла юғары: уның уҡыусыларының 45 проценты тик «4» һәм «5» билдәләренә генә уҡый.

1973 – 1978 йылдарҙа Ғ.Х.Яҡупова уҡытҡан йәштәрҙең 50-һе юғары уҡыу йорттарына инә, 13-ө хужалыҡ етәксеһе, агроном, инженер булып эшләй, күптәре – хеҙмәт алдынғылары. «Шундай һөнәрмәндәр тәрбиәләүҙә минең дә өлөшөм булыуға сикһеҙ шатмын», – ти Ғиффәт Хәниф ҡыҙы.

Ал-ял белмәйенсә эшләгән йылдарҙа Ғ.Х.Яҡупова бер аҙ мәктәп директоры урынбаҫары, директор булып та ала, иң ҙур хеҙмәт уңыштарын яулауы урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булған дәүергә тура килә. Уның педагогик хеҙмәт стажы 50 йылдан ашыу, шуның 33 йылы Талбазы мәктәбендә үтә.

Ғиффәт Хәниф ҡыҙы Яҡупова йәмәғәт эштәрен күңел биреп башҡара. Ул оҙаҡ йылдар урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары-

ның мәктәп-ара методик берекмәһе етәксеһе, мәктәп партия ойошмаһы сәркәтибе, мәғариф селтәрендә пропагандист булып эшләй.

Тынғыһыҙ педагог, оҫта методист, әүҙем йәмәғәт хеҙмәткәре Ғ.Х.Яҡупованың алдынғы тәжрибәһе дөйөмләштерелеп, мәғариф бүлеге методистары, уҡытыусылар тарафынан район мәктәптәрендә таратыла.

Уҡытыу-тәрбиә эшендә өлгәшкән ҙур уңыштары өсөн Ғиффәт Хәниф ҡыҙы Яҡупова 1976 йылда илебеҙҙең ул замандағы иң ҙур наградаһы – Ленин ордены, төрлө осорҙа миҙалдар менән бүләкләнә.

## МИҘХӘТ ЗӘЙЛӘҒИ улы ЯППАРОВ

*(1931)*



Ишембай районының эшһөйәр һәм хөрмәтле уҡытыусылары араһында Миҙхәт Зәйләғи улы Яппаров абруйлы урын биләй. Ул – 50 йыл ғүмерен уҡытыу-тәрбиә эшенә бағышлаған арҙаҡлы педагог, ихтирамлы ил ағаһы.

Күренекле мәғариф хеҙмәткәре Миҙхәт Зәйләғи улы Яппаров 1931 йылдың 22 декабрендә Башҡортостандың Ишембай районы Әптек ауылында уҡытыусы ғаиләһендә донъяға килә. Уның атаһы егерме йәшендә мәҙрәсәлә алған белем менән мөғәллим булып китә. 1920 йылда Стәрлетамаҡ кантон халыҡ мәғарифы бүлеге уға мәктәп уҡытыусыһы танытмаһы бирә. Уны Миҙхәт Яппаров атаһынан ҡалған ҡәҙерле ҡомартҡы күреп әле лә һаҡлай. Әптек һәм Йәнырыҫ мәктәптәрендә Зәйләғи Яппаров 1918 йылдан 1942 йылға тиклем эшләй, шунан Бөйөк Ватан һуғышына китә, Ленинград янында барған ҡаты алышта һәләк була. Миҙхәт мәктәптә уҡыған йылдарҙа әсәһе һәр ваҡыт: «Уҡы, улым, тырыш, атайың кеүек уҡытыусы булырһың», – тип иҫенә төшөрөп кенә тора. Урта мәктәпте тамамлағандан һуң, педагог булыу хыялы Миҙхәт Яппаровты Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтына алып бара. Уны бөтөрөп сыҡҡас, 19 йәшлек белгес 1950 йылдың 1 сентябрендә Күгәрсен районы Мәксүт мәктәбендә тәүге һынауҙы уңышлы үтә.

Миҙхәт Зәйләғи улы Яппаровтың ысын педагог таланты Ишембай районының Урманбишҡаҙаҡ урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте, директор урынбаҫары булып эшләгән йылдарҙа тулыһынса асыла.

Һәр көн ентекле әҙерләнеү уға материалды балаларға тәрән аңлатырға, өҫтәмә сығанаҡтар файҙаланырға, дәресте төрләндерергә, уны әңгәмә, лекция, диспут, сәйәхәт һәм башҡа формаларҙа үткәрергә, уға уҡыусыларҙы тотош йәлеп итергә мөмкинлек бирә. Заман талабы буйынса М.З.Яппаров мәктәптә район уҡытыусыларынан беренсе булып башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинетын йыһазлай. Ул конкурс комиссиялары, республика мәғариф министры тарафынан күп тапҡыр билдәләп үтелә, дәртләндереү бүләктәренә лайыҡ була.

М.З.Яппаров тел һәм әҙәбиәт буйынса синыфтан тыш эштәр үткәреүгә ҙур иғтибар бирә. Уҡытыусы уларҙың хужалары итеп һәр ваҡыт уҡыусыларҙы билдәләй. Ул һорауҙарға яуаптар кисәһе, олимпиада, аукцион, ярыш, стена гәзите сығарыу кеүек сараларҙың темаһын ғына әйтә. Шунан һәр уҡыусы ижади эшкә сума: тема буйынса ҡыҙыҡлы материалдар йыя, өҫтәмә әҙәбиәт уҡый, махсус китаптар менән таныша. Был уларҙы тикшеренеү эштәре алып барырға өйрәтә. Ныҡлы әҙерлек һәр кисәне тәрән йөкмәткеле итеп уҙғарырға ярҙам итә.

Бындай сараларҙың уҡыусыларға белем һәм тәрбиә биреү мөмкинлектәре ҙур. Улар балаларҙың танып белеү эшмәкәрлеген арттыра, әүҙемлеген күтәрә.

М.З.Яппаров директор урынбаҫары булараҡ, барлыҡ уҡытыусыларҙың да методик эштәрҙә ҡатнашыуын, үҙҙәренең ыңғай тәжрибәләрен йәш коллегалары менән уртаҡлашыуын күҙәтә, уларға һәр төрлө ярҙам күрһәтә.

Урманбишҡаҙаҡ урта мәктәбенең егәрле уҡытыусыһы Миҙхәт Яппаров бер нисә йыл буйы колхоз партия комитеты сәркәтибенең идеология эше буйынса урынбаҫары, бригада партия ойошмаһы сәркәтибе, халыҡ суды заседателе, иптәштәр суды рәйесе, ауыл Советы депутаты, партия уҡыу селтәрендә пропагандист, агитатор, лектор, колхоздың стена гәзите мөхәррире, художестволы үҙешмәкәр түңәрәге баянсыһы була, ваҡытлы матбуғат баҫмаларына мәҡәләләр яҙа, уҡытыусыларҙың район, республика ғилми-ғәмәли конференцияларында сығыш яһай, уҡытыу-тәрбиә өлкәһендәге оло тәжрибәһе менән уртаҡлаша.

М.З.Яппаров уҡытыусыларҙың, хәбәрселәрҙең республика съездарында делегат булып ҡатнаша, башҡарған эштәрен күрһәтә һәм Маҡтау грамоталары менән бүләкләнә.

80-се йылдар башында Миҙхәт Зәйләғи улы Яппаров Ишембай район халыҡ мәғарифы бүлегенә инспектор итеп эшкә алына. Бында район мәктәптәре етәкселәренә, уҡытыусыларға тейешле ярҙам күрһәтеү, үҙенең бай тәжрибәһе менән уртаҡлашыу өсөн киң мөмкинлектәр

асыла. Талантлы уҡытыусы мәктәптәрҙә йыш булырға өлгөрә, яҡшыһын да, насарын да күрә, яҡшыһын хуплай, насарын тиҙ арала бөтөрөргә, төҙәтергә, дөрөҫ юл һайларға йүнәлеш бирә.

Юғары педагогик белем алыу теләге менән М.З.Яппаров Башҡорт дәүләт университетының ситтән тороп уҡыу бүлегенә инә. 1966 йылда тамамлағанда төркөмдә бер үҙе генә тел буйынса «Ябай һөйләм синтаксисын уҡытыу методикаһы» темаһына диплом эшен уңышлы яҡлай.

М.З.Яппаровтың мәктәптә балалар уҡытыу һәм тәрбиәләүҙе юғары кимәлдә алып барыуы, йәмәғәт башланғысында иҫәпһеҙ-хисапһыҙ вазифалар башҡарыуы иҫ китмәле! Нисек өлгөрә, нисек арыу-талыуҙы белмәй ул? Уҡытыусы тигән маҡтаулы һөнәр, атаһының аманаты, намыҫлы хеҙмәт һөҙөмтәһендә яулап алған шөһрәт уға ташып торған көс-дәрт биргәндер, моғайын.

2000 йылдың апрелендә М.З.Яппаров хаҡлы ялға сыға. Педагогик хеҙмәттә ярты быуат арымай-талмай, башҡарылғандар файҙалы булһын тип, йән атып эшләү дәүерендә ул төрлө ойошмаларҙың егермегә яҡын Маҡтау грамотаһы, өс миҙал менән бүләкләнә. 1977 йылда ул уҡытыусы-методист, 1982 йылда Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, 1995 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре тигән юғары исемдәргә лайыҡ була.

Иң мөһиме – уҡытыусы Миҙхәт Зәйләғи улы Яппаровты бөтә Ишембай халҡы яҡшы белә, уны хөрмәтләп ололай.

## НӘЖИБ ҒӘФҮР улы ЯРЫШЕВ

*(1931)*



Башҡортостан педагогия училищелары һәм колледждарының һәләтле директорҙары плеядаһында Нәжиб Ғәфүр улы Ярышев күркәм урын алып тора. Ул – Салауат педагогия колледжы директоры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Нәжиб Ғәфүр улы Ярышев 1931 йылдың 22 февралендә Башҡортостандың Мәләүез районы Һапаш ауылында колхозсы ғаиләһендә донъяға килә. Ул 1945 йылда урта мәктәпте тамамлай. Артабан белем алырға матди хәле мөмкинлек бирмәгән үҫмер бер йыл ауылда төрлө эштәрҙә йөрөй. Мәктәп директоры Насир Лотфулла улы Бакиров уны Өфө ҡалаһының етем балалар өсөн асылған 9-сы мәктәбенә уҡырға урынлаштыра. Ул һуғыш йылдарында ауыл мәктәбендә уҡытҡан, директор булып эшләгән Рәхилә апай Тажиеваны, һуғыштан һуң директор итеп тәғәйенләнгән Насир Бакировты, күп йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан, оло рәхмәт тойғоһо менән иҫкә ала. «Өфөлә 9-сы мәктәптә директор С.Зайлалова, тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы М.Ғималова беҙҙең турала әсәләрсә хәстәрлек күрҙеләр, уларға ла ҙур рәхмәтлемен», – ти ул.

1951 йылда Нәжиб Ярышев К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының химия-биология факультетына уҡырға инә, уны тамамлағас, өс йыл Йомағужа районы Волостновка урта мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй, 1958 йылда мәктәп директоры итеп тәғәйенләнә. Уның оҫта ойоштороусы, һәләтле педагог сифаттары был вазифаны юғары кимәлдә башҡарырға мөмкинлек бирә. 1962 йылда уны Йомағужа район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп үрләтәләр. Тиҙҙән райондар эреләтелә, Йомағужа районы Күгәрсен районына ҡушыла. Н.Ғ.Ярышев 1963 йылдан Йомағужа һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә уҡыта, директор вазифаһын башҡара.

1964 йылдың авгусында Башҡортостан Халыҡ мәғарифы министрлығы Нәжиб Ғәфүр улы Ярышевты Салауат ҡалаһының педагогия училищеһы директоры итеп билдәләй. Бында йәш, һәләтле етәксе ең һыҙғанып эшкә тотона. Иң тәүҙә ул уҡыу йортон талантлы педагогтар менән тәьмин итеү тураһында хәстәрлек күрә. Шуларҙан Рәфҡәт Искәндәр улы Мулдашев фиҙакәр хеҙмәте өсөн Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы булып танылa, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы Сәлисә Сафый ҡыҙы Кәримова директор урынбаҫары булып эшләй. Шулай уҡ Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы Ләлә Талип ҡыҙы Иҫәнғолова бүлек мөдире һәм директор урынбаҫары була. Фәниә Ғизетдин ҡыҙы Бикҡолова эшкә намыҫлы ҡарашы, педагогик оҫталығы менән айырылып тора. Училищеның ун бер уҡытыусыһы Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, унауһы халыҡ мәғарифы отличнигы исемдәренә лайыҡ була. Улар – директорҙың беренсе ярҙамсылары, коллективтың һәләтле ойоштороусылары.

Училище директоры уҡытыу-тәрбиә эшен юғары кимәлдә ойоштороуға коллективтың бөтөн көсөн йүнәлтә. Бының өсөн иң башта тейешле шарттар кәрәк була. Техник саралар менән йыһазландырылған 26 уҡыу кабинеты һәр дәресте юғары кимәлдә үткәрергә мөмкинлек бирә. Төрлө райондарҙан килгән уҡыусылар өсөн 632 урынлы ятаҡ бар.

1992 йылда Салауат педагогия училищеһы инновацион эш режимына күсеү өсөн экспериментҡа ҡушыла. Стәрлетамаҡ педагогия институты менән бәйләнеш көсәйә: өҙлөкһөҙ белем биреү системаһында башланғыс синыфтарҙы уҡытыу планы эшләнә, уҡытыуҙа күсәгилешлелек тураһында килешеү төҙөлә.

Нәжиб Ғәфүр улы Ярышев педагогия училищеһын колледж итеп үҙгәртеүгә күп көс һала. Был заман талабы уҡыу йортоноң статусын күтәрергә, уҡытыусыларҙың һәм уҡыусыларҙың яуаплылығын арттырырға мөмкинлек бирә. Педагогия колледжының үҫеш концепцияһы төп аспекттарын «лицей – педколледж – вуз» системаһында урта быуын итеп аса. Ул хәҙер 1-се башҡорт лицейы, 24-се мәктәптең педагогия синыфы һәм Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты системаһына инә.

Н.Ғ.Ярышев үҙе етәкләгән уҡыу йорто структураһына байтаҡ үҙгәрештәр индереүгә ирешә: педагогия колледжы директорының ғилми-методик эш буйынса урынбаҫары вазифаһы булдырыла, уҡытыу эшенә кафедралар етәкселек итә.

Колледждың алдынғы уҡытыусылары үҙ тәжрибәһе менән уртаҡлаша. Улар ҡала, республика педагогтары, Ырымбур педагогия училищеһы уҡытыусылары менән тығыҙ бәйләнеш тота.

Нәжиб Ғәфүр улы Ярышев педагогия училищеһы (колледжы) директоры булып 33 йыл эшләй. Был осорҙа колледж ике тапҡыр Башҡортостан Юғары Советы Президиумының Маҡтау грамотаһына, СССР Юғары белем биреү министрлығы, СССР Халыҡ мәғарифы министрлығы, РСФСР Халыҡ мәғарифы министрлығы грамоталарына лайыҡ була, бик күп уҡытыусыларға маҡтаулы исемдәр бирелә.

Н.Ғ.Ярышев республика училищелары һәм колледждары директорҙары советы рәйесе итеп һайлана, улар менән бай тәжрибәһен ихлас уртаҡлаша, кәңәштәре менән ярҙам итә.

Мәғариф өлкәһендә оҙаҡ йылдар намыҫлы эшләгәне өсөн Нәжиб Ғәфүр улы Ярышев 1986 йылда «Почет Билдәһе» ордены, башҡа йылдарҙа миҙалдар һәм Маҡтау грамоталары менән бүләкләнә, 1967 йылда уға Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, 1978 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исемдәр бирелә. Хаҡлы ялға сыҡҡас та, ул

педагогия колледжы менән бәйләнеш тота, ҡулынан килгән тиклем ярҙам күрһәтә, коллегаларының һәм уҡыусыларҙың оло ихтирамы менән файҙалана.

## ХӨСӘЙЕН ХӘСӘН улы ЯУБАҪАРОВ

*(1925 – 1997)*



Уҙған быуаттың 50–60-сы йылдарында Башҡортостан Республикаһы Халыҡ мәғарифы министрлығы аппаратының эште бар яҡтан да яҡшы ойошторған етәкселәре когортаһында министр урынбаҫары Хөсәйен Хәсән улы Яубаҫаров мәғарифты үҫтереүгә ҙур өлөш индергән министр Ф.Х.Мостафина, уның урынбаҫарҙары В.В.Дерягин, И.И.Ғөбәйҙуллин менән бергә үҙенә йөкмәтелгән эш тармағында иң уртаға егелеп, йөк аты һымаҡ һәлмәк тартты, урынбаҫар булып эшләгән ун ике йылдан ашыу ваҡыт эсендә үҙен бөтөн яҡтан һәләтле ойоштороусы, оҫта етәксе һәм талантлы педагог итеп күрһәтте.

Хөсәйен Хәсән улы Яубаҫаров 1925 йылдың 19 ғинуарында Башҡортостан Республикаһының Ейәнсура районы Әбүләис ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуып үҫә. Ете йәше тулыуға, ул үҙ ауылы мәктәбенә уҡыуға төшә, шунан Абзан урта мәктәбенә бара, уны 1942 йылда тамамлай.

Был осорҙа илебеҙ халыҡтарының Гитлер Германияһына ҡаршы Бөйөк Ватан һуғышы бара. Күҙҙәре насар күреү сәбәпле, Хөсәйен Яубаҫаровты һуғышҡа алмайҙар. 1942 йылда уның хеҙмәт юлы башлана. Барлыҡ ир-ат уҡытыусылар ҙа фронтҡа китеп бөткәнгә күрә, уҡыуын яҡшы тамамлаған һәләтле йәш егетте Абзан урта мәктәбенә география, тарих, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы итеп тәғәйенләйҙәр. Унда эшләгән йылдарҙа Х.Х.Яубаҫаров Ырымбур дәүләт педагогия институтының ситтән тороп уҡыу бүлеген тамамлап, юғары белемле география уҡытыу-

сыһы дипломына эйә була. Киң эрудициялы, талантлы педагогты тиҙ күрәләр һәм Абзан район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп күтәрәләр. Бер үк ваҡытта ул уҡытыу-тәрбиә эшенән дә айырылмай.

Хөсәйен Хәсән улы Яубаҫаров 1952 йылда Мораҡ педагогия училищеһы директоры итеп тәғәйенләнә. Х.Х.Яубаҫаров директор булып эшләгән дәүерҙә Мораҡ педагогия училищеһы был типтағы уҡыу йорттары араһында алдынғылар сафына сыға, уҡытыу-тәрбиә эшенең барлыҡ күрһәткестәре буйынса яңы бейеклектәр яулай. Быны унда уҡып сыҡҡан кешеләрҙең киләсәктә абруйлы белгестәр булып китеүе миҫалында ла асыҡ күрергә мөмкин. Шул йылдарҙа Мораҡ педагогия училищеһында белем алған, хәҙер республиканың ҙур ғалимдары булып танылған З.Ғ.Ураҡсин, И.Ғ.Вәлитов һәм башҡа күптәр Хөсәйен Хәсән улын, унда эшләгән уҡытыусыларҙы ысын педагогтар күреп иҫкә алалар.

1956 йылда Хөсәйен Хәсән улы Яубаҫаров Башҡортостан Республикаһы халыҡ мәғарифы министры урынбаҫары итеп эшкә саҡырыла. Унда Х.Х.Яубаҫаровтың ойоштороу һәләте бигерәк тә асыҡ күренә. Иң тәүҙә министр урынбаҫары республика мәктәптәрендә уҡытыу-тәрбиә эшенең сифатын яҡшыртыуға бөтөн иғтибарын йүнәлтә. Быының өсөн уҡытыусыларҙың дөйөм белем кимәлен күтәреү, уларҙы яңыса, ижади эшләргә өйрәтеү, дәреслек һәм башҡа уҡытыу әсбаптары менән ваҡытында тәьмин итеү мәсьәләләрен кисектермәй хәл итеү көн тәртибенә ҡуйыла. Был проблемаларҙы уңышлы үтәү айырыуса мөһим, сөнки 60-сы йылдар башында мәктәптә уҡытыуҙың яңы йөкмәткеһенә күсеү башлана, яңы программалар һәм дәреслектәр индерелә. Уҡытыусыларға методик ярҙам күрһәтеү, яңы уҡытыу әсбаптарының йөкмәткеһен һәм мөмкинлектәрен аңлатыу маҡсатында райондарҙа, республика күләмендә ғилми-ғәмәли конференциялар, төрлө йыйындар үткәрелә, уҡытыусыларҙың республика съездарын уҙғарыу традицияға әйләнә.

50 – 60-сы йылдарҙа Башҡортостанда алдынғы мәктәптәр, ижади эшләгән уҡытыусылар ныҡ арта. Өлгө мәктәптәрҙә алдынғы уҡытыусыларҙың тәжрибәһе көллө педагогтарға ла еткерелә.

Ошо осорҙа республикала мәғариф системаһы төп күрһәткестәр буйынса, уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр уҡытыу-тәрбиә эшенең барлыҡ йүнәлештәре өлкәһендә ҙур уңыштарға өлгәшкән икән – бында министр урынбаҫары Хөсәйен Хәсән улы Яубаҫаровтың да хеҙмәте баһалап бөтөргөһөҙ ҙур тип уйларға кәрәк.

1969 йылда Х.Х.Яубаҫаров Өфө ҡалаһының 1-се мәктәп-интернаты (хәҙер Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика гимназия-интернаты) директоры итеп тәғәйенләнә. «Ватандаш» журналының 1997 йылғы 8-се һанында баҫылып сыҡҡан «Милли кадрҙар мәктәбе» исемле мәҡәләлә әйтелеүенсә, Х.Х.Яубаҫаров директор булған саҡта төрлө предметтарҙың лабораторияларын булдырыу, уҡыу барышын техник саралар менән тәьмин итеү, тәрбиәләнеүселәрҙең туҡланыуын яҡшыртыу һәм өҫ-башын бөтәйтеү, кабинет системаһын камиллаштырыу кеүек бик ҙур эштәр башҡарыла. Уҡытыу-тәрбиә эшендә өлгәшкән уңыштары өсөн Хөсәйен Хәсән улы Яубаҫаровҡа Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исем бирелә.

Хаҡлы ялға сыҡҡас, киң белемле педагог Х.Х.Яубаҫаров башҡорт теле, уны мәктәптә уҡытыу мәсьәләләрен яҡтыртҡан мәҡәләләр яҙа, унда күп йыллыҡ күҙәтеүҙәрен дөйөмләштерә.

## БАҘАР ИҠТИСАДЫ ШАРТТАРЫНДА

*(90-сы йылдар – өс меңенсе быуат башы)*

Уҙған быуаттың 90-сы йылдары башында илебеҙҙең баҙар иҡтисады шарттарына күсеүе сәбәпле, халыҡ мәғарифы быға ҡәҙәр булмаған һәм аңлашылып етмәгән хәл-ваҡиғалар алдына баҫты. Күп ауыл һәм ҡалаларҙа тәүге мәлдә мәктәптәр һәм башҡа балалар ойошмалары һан яғынан кәмене, матди база нығ ҡына йомшарҙы. Бәхеткә күрә, был хәл оҙаҡҡа барманы. Республика Президенты һәм хөкүмәттең көндәлек хәстәрлеге һөҙөмтәһендә, мәғариф системаһына иғтибар күбәйҙе.

Педагогия институттарына һәм колледждарына студенттар ҡабул итеү, уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр әҙерләү йылдан-йыл арта бара.

Яңы шарттарҙа мәғариф учреждениеларының бурыстары, бөтөн педагогтарҙың да хеҙмәте уҡытыу-тәрбиә эшен модернизациялау талаптары, яңы технологияларҙы киң ҡулланыу менән бәйле.

Мәғариф өлкәһендә мәғлүмәтле, инициативалы һәм мәҙәниәтле педагогтарҙың артыуы тәбиғи. Хәҙер район, ҡала мәктәптәрендә һәм башҡа балалар ойошмаларында, мәғариф идаралыҡтарында, республика Мәғариф министрлығында шундай кадрҙар бөтөн маҡсаттарҙы уңышлы тормошҡа ашыра, барлыҡ эштәрҙе лә контролдә тота, тотош мәғариф эшенә йүнәлеш бирә һәм етәкселек итә.

**РАФАИЛ**
**ҒӘЙНЕТДИН улы**
**АҪНАҒОЛОВ**

*(1941)*



Башҡортостандың халыҡ мәғарифы тарихы уҡытыусыларға, тәрбиәселәргә ысын педагогик, методик ярҙам күрһәткән методистарға, дәреслек һәм башҡа әсбаптар төҙөгән эшһөйәр ғалимдарға бай. Шундай методист-ғалимдар араһында Рафаил Ғәйнетдин улы Аҙнағоловтың исем-шәрифтәре абруйлы, мәртәбәле. Ул – күренекле методист, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре, филология фәндәре кандидаты.

Буласаҡ халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре Рафаил Ғәйнетдин улы Аҙнағолов 1941 йылдың 13 февралендә Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районының Үрге Үтәғол ауылында уҡытыусы ғаиләһендә донъяға килә. Октябрь урта мәктәбен (Сурай ауылы) тамамлағандан һуң, ул Совет Армияһы сафында хеҙмәт итә. Унан ҡайтҡас, йәш егетте ҡайҙа барырға тигән һорау борсомай. Уҡытыусы улы уҡытыусы булырға тейеш, тип уйлай ул. Бала саҡ хыялына тоғро уҙаман егет Өфөгә юллана һәм Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инә.

Башҡорт филологияһы буйынса төплө белем алған Р.Ғ.Аҙнағолов аспирантураға уҡырға алына, 1972 йылда уны тамамлай ҙа Өфөгә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына филология фәндәре кандидаты булып эшкә ҡайта. Бында йәш ғалим башҡорт теленең диалектология атласын төҙөү менән шөғөлләнә. Төрлө яҡтарға фәнни экспедициялар ойоштора, башҡорт теленең төбәк карталарын төҙөй, үҙенең ғилми һәләттәрен күтәрә.

1978 йылда Р.Ғ.Аҙнағолов Рәсәй Халыҡ мәғарифы министрлығы белем биреүҙең милли мәсьәләләре институтының Башҡортостан филиалына эшкә саҡырыла. Бында сирек быуатҡа яҡын эшләү дәүерендә ғалим мәктәптә башҡорт телен уҡытыу методикаһын

фән булараҡ үҫтереүҙә, уның теоретик һәм лингво-дидактик нигеҙҙәрен, принциптарын, методтарын асыҡлауҙа ҙур хеҙмәт күрһәтә. Р.Ғ.Аҙнағоловтың ғилми етәкселегендә авторҙар ҡоро тарафынан башҡорт теле методикаһының тәүге тапҡыр тулы һәм фәнни кимәлдә эшләнгән китабы донъя күрә. Уның ике баҫмаһы баҫылып сыға.

Билдәле булыуынса, баланың әсә теле теге йәки был һөйләш үҙенсәлектәрен сағылдыра. Тимәк, уҡыусының телмәре диалект шарттарында формалаша. Уға әҙәби тел нормаларын өйрәткәндә, нығынған телмәр ҡанундары иҫәпкә алынмай. Был күренеште ентекле өйрәнеп, Р.Ғ.Аҙнағолов 1991 йылда «Диалект шарттарында башҡорт телен уҡытыу методикаһы» тигән төплө хеҙмәт яҙа. 2000 йылда уның «Уҡыусы шәхесен үҫтереүҙең лингво-дидактик нигеҙҙәре» тигән ҙур монографияһы донъя күрә. Был хеҙмәт башҡорт теле методикаһында оло ҡаҙаныш тип баһаланырға хаҡлы.

Тынғыһыҙ ғалим Р.Ғ.Аҙнағолов – республикала танылған лексикографтарҙың береһе. Уның урта мәктәп уҡыусылары өсөн «Башҡорт теленең орфография һүҙлеге», «Башҡортса-русса мәктәп һүҙлеге», уҡытыусылар һәм юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн «Башҡорт теленең орфография һүҙлеге» һәм башҡа әсбаптары уҡыу йорттарында киң файҙаланыла.

Р.Ғ.Аҙнағолов мәктәп дәреслектәре яҙыуға ҙур иғтибар бирә. Уның ғилми етәкселегендә V – VI синыфтар өсөн яҙылған «Культура Башкортостана» исемле дәреслектәре урыҫ һәм татар телдәрендә нәшер ителә. Ул башҡорт теле конференциялары өсөн ойошторолған курстарҙа, ғилми-ғәмәли конференцияларҙа йөкмәткеле лекциялары, докладтары менән әүҙем ҡатнаша.

Р.Ғ.Аҙнағолов – киң профилле ғалим. Ул үҙенең уҡытыусыһы, мәшһүр ғалим Ж.Ғ.Кейекбаевтың лекцияларын баҫтырып сығарыу буйынса ла ҙур эш алып бара. Ғалимдың «Төрки телдәрҙең сағыштырма грамматикаһы» тигән хеҙмәтенең ҙур ғына бүлеге донъя күрҙе, дөйөм Урал-Алтай телдәренең сағыштырма грамматикаһы проблемаларына арналған лекциялар циклы ла айырым китап итеп әҙерләнә.

Р.Ғ.Аҙнағолов – уҡытыусылар өсөн эшләгән мәғариф хеҙмәткәре. Уның был өлкәләге хеҙмәттәре баһалап бөткөһөҙ ҙур.

## СВЕТЛАНА ВӘЛИ ҡыҙы АТНАҒОЛОВА

*(1940)*



Мәктәп дәреслектәре, уҡытыу-күргәҙмә әсбаптары әҙерләп сығарыуҙа, авторҙарҙың уҡытыусылар һәм уҡыусылар өсөн тәғәйенләнгән китаптарын нәшер итеүҙә мөхәррир Светлана Вәли ҡыҙы Атнағолованың хеҙмәте ифрат ҙур. Ул – күп кенә дәреслек һәм ҡулланмалар авторы, талапсан һәм абруйлы мөхәррир.

Светлана Вәли ҡыҙы Атнағолова (үҙ фамилияһы Судурова) 1940 йылдың 23 июнендә Башҡортостандың Ейәнсура районы Абзан ауылында уҡытыусылар ғаиләһендә донъяға килә. Атаһы Вәли Сабир улы Судуров Бөйөк Ватан һуғышына тиклем Абзан урта мәктәбендә урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡыта, әсәһе Гөлсөм Хәбибрахман ҡыҙы Әхмәтшина башланғыс синыфтар уҡытыусыһы булып эшләй.

Светлананың атаһы һуғышҡа киткәс, әсәһен ошо уҡ райондың Яңыбай мәктәбенә эшкә ебәрәләр. Ул хаҡлы ялға киткәнсе ошо мәктәптә башланғыс синыфтар уҡытыусыһы вазифаһын башҡара.

Светлана Вәли ҡыҙы Атнағолова ете йыллыҡ мәктәпте Яңыбайҙа тамамлай, шунан һуң Хәйбулла районының Әбеш урта мәктәбендә VIII синыфта уҡый, артабан Ейәнсура районының Байыш урта мәктәбендә IX – X синыфтарҙы уҡып сыға. 1957 йылда Мораҡ педагогия училищеһына уҡырға инә лә өс йыллыҡ уҡыу программаһын ике семестрҙа тамамлай. Шунан Ейәнсура районы Биштирәк ауылында башланғыс синыфтар уҡытыусыһы булып эшләй. 1959 йылда Башҡорт дәүләт университетының филология факультеты башҡорт-урыҫ бүлегенә уҡырға ҡабул ителә.

1964 йылда университетты бөтөрөп сыҡҡас, йәш белгес Ейәнсура районы Өмбәт һигеҙ йыллыҡ мәктәбенә урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы итеп ебәрелә.

Светлана Вәли ҡыҙы 1966 йылдан бирле Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә эшләй. Бер йыл корректор, шунан һуң дәреслектәр

редакцияһында мөхәррир була, әле өлкән мөхәррир вазифаһын башҡара. Шул ваҡыттан алып 36 йыл үтеп тә киткән.

Башҡорт һәм урыҫ мәктәптәре уҡыусылары өсөн башҡорт теле буйынса барлыҡ дәреслектәрҙе һәм уҡыу-уҡытыу ҡулланмаларын нәшриәт редакцияһы әҙерләп донъяға сығара. Бының өсөн редакция хеҙмәткәрҙәре күп көс һала. Бында эшләгән осорҙа Светлана Вәли ҡыҙы Атнағолова күпме китапты үҙ ҡулдары аша үткәргән дә күпме күҙ нурҙарын түккән?! Дәреслектәрҙе баҫып сығарырға әҙерләгәндә бик күпте: предметтың үҙен дә, уҡыусы балаларҙың йәш һәм психологик үҙенсәлектәрен дә, китапҡа ҡуйылған талап, норматив һәм стандарттарҙы ла – бөтәһен дә белеү талап ителә. Авторҙар менән эшләгәндә мөхәррир оҫта дипломат та булырға тейеш. Оҙаҡ йылдар эшләү дәүерендә Светлана Атнағолова был сифаттарҙың барыһын да үҙләштерә, талапсан һәм абруйлы мөхәррир булып таныла.

Светлана Атнағолова үҙ көсөн тәржемә өлкәһендә лә һынап ҡарай. Башҡорт мәктәптәре уҡыусылары уның тәржемәһендә донъя күргән ҡайһы бер дәреслектәр буйынса уҡый (IX синыф өсөн «Биология (Кеше һәм уның сәләмәтлеге)», VI синыф өсөн «Боронғо донъя тарихы», V синыф өсөн «Ватан тарихынан хикәйәләр», башҡа дәреслек һәм дидактик материалдар).

Дәреслек һәм ҡулланмалар яҙыуға Светлана Вәли ҡыҙы Атнағолованы башҡорт мәғарифын үҫтереүгә тос өлөш индергән күренекле ғалим-методист Төхфәт Аслаев йәлеп итә. Яңы ҡулъяҙма өҫтөндә эшләгәндә, авторҙар менән компетентлы һөйләшеү өсөн, нәшриәт мөхәррире автор күтәргән тема буйынса урыҫ, төрки һәм татар ғалимдарының хеҙмәттәрен байҡап сығыуҙы ғәҙәтенә күптән индергәйне инде. Шуның һөҙөмтәһендә улар менән «тиң баҫып» һөйләшә ала. Бер мәлде Төхфәт Аслаев менән уртаҡ фекергә килә алмағас, ул Светлана Атнағоловаға: «Улай күп белгәс, үҙең яңыртып яҙ, минең ваҡытым юҡ, бер айға командировкаға китәм», – ти. Ул ҡайтыуға «IV класта туған тел уҡытыу методикаһы» исемле ҡулланма өҫтәлдә ята ине инде. Был – Светлана Атнағолованың сәмләнеп эшләгән тәүге китабы. Артабан уның Төхфәт Аслаев менән берлектә I, II, III, IV синыфтар өсөн яҙған туған тел дәреслектәре, синыфтан тыш уҡыу китаптары, уларға методик күрһәтмәләр, телмәр үҫтереү буйынса әсбаптары, изложение һәм диктант йыйынтыҡтары, программалар, башланғыс мәктәптә инша яҙырға өйрәтеү ҡулланмаһы, телмәр үҫтереүгә бағышланған «Телмәр мәҙәниәте» китаптары бер-бер артлы донъя күрә.

Һуңғы ваҡытта Светлана Вәли ҡыҙы Атнағолова атҡарып сыҡҡан ҙур хеҙмәттәрҙең береһе – «Әлифба» китабы (авторҙа-

шы – филология фәндәре докторы, профессор Ф.Ғ.Хисамитдинова). Илдә барған сәйәси система, фекерләү йүнәлеше үҙгәреү сәбәпле, күренекле әлифбасы Абдрахман Ғәлләмовтың 30 йылдан ашыу халҡыбыҙға хеҙмәт иткән «Әлифба» китабын яңыртыу зарурлығы килеп тыуғайны. Шуға ла был дәреслек яңынан эшләнде.

Нәшриәт эшендә өлгәшкән ҙур уңыштары өсөн «Китап» нәшриәтенең өлкән мөхәррире Светлана Вәли ҡыҙы Атнағолованың хеҙмәте юғары баһаланды. 1974 йылда уға Рәсәй Федерацияһының матбуғат отличнигы, 1991 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, 1995 йылда Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы тигән ҙур исемдәр бирелде. Ул байтаҡ Маҡтау грамоталары менән бүләкләнгән, СССР Халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһенең Көмөш миҙалына лайыҡ булған.

## МИҢНЕХАНА ИШМӨХӘМӘТ ҡыҙы БАҺАУЕТДИНОВА

*(1953)*



Алдынғы мәктәп директорҙарынан Стәрлебаш районында иң тәүҙә Стәрлебаш 1-се урта мәктәбе директорын телгә алалар, өлгө итеп күрһәтәләр. Ул – уҡытыусыларҙың оҫта етәксеһе, талантлы педагог, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидаты, яҡташтарының оло һөйөүен яулаған шәхес.

Миңнехана Ишмөхәмәт ҡыҙы Баһауетдинова Ғафури районы Юлыҡ ауылында колхозсы ғаиләһендә 1953 йылдың 10 сентябрендә донъяға килә. Ул 1969 йылда һигеҙ йыллыҡ мәктәпте тамамлағандан һуң, Ишембай ҡалаһының 2-се мәктәп-интернатына уҡырға инә, уны 1971 йылда бөтөрөп сыға ла 1971 – 1976 йылдарҙа Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт фа-

культетында уҡып, башҡорт теле һәм әҙәбиәте, урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы дипломын ала.

Юғары белемле уҡытыусы М.И.Баһауетдинова 1976 йылда Ҡалҡаш урта мәктәбендә хеҙмәт юлын башлағанда, баштан уҡ үҙ алдына шундай девиз ҡуя: ижади эшләргә, бөтә көстө бирергә! Шунан һуң ҡайҙа эшләһә лә, Миңнехана Ишмөхәмәт ҡыҙы үҙ девизына тоғро ҡала. Тәүге йылда уҡ ул үҙен яҡшы әҙерлекле, уҡытыу методикаһын тәрән үҙләштергән белгес итеп күрһәтә. Уҡытыусы синыфта балалар менән ижади эшләүгә, уларҙың һәләттәрен үҫтереүгә ҙур иғтибар бирә. Шуға күрә коллектив уны мәктәптән һәм синыфтан тыш эштәрҙе ойоштороусы итеп күтәрергә тәҡдим итә. Был эшкә лә ул барлыҡ көсөн, белемен бирә, ваҡытын йәлләмәй.

1980 йылдан бирле Миңнехана Ишмөхәмәт ҡыҙы Баһауетдинова район үҙәге Стәрлебашта 1-се урта мәктәптә эшләй, урыҫ теле һәм әҙәбиәте, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен алып бара. «Алып бара» тигән һүҙбәйләнеш был уҡытыусының эшен тулыһынса асып еткермәй, ул дәрестәрҙе һәр ваҡыт юғары кимәлдә үткәрә, балаларҙы фекерләргә, ижади асыштар яһарға өйрәтә, тип әйтергә кәрәк.

Тәүге мәлдән үк М.И.Баһауетдинова уҡытыусылар коллективына еңел инеп китте, унда үҫте. Ниндәй эшкә тотонһа ла, ул эште еренә еткереп башҡара, уға күңел йылыһын бирә. Уның дәрестәре һәм синыфтан тыш эштәре барлыҡ уҡытыусыларға ла өлгө булып тора. Дәрескә һәм шундай сараларға башҡа мәктәптәрҙән дә уҡытыусылар саҡырыла. Улар күнекмәләр алып, оҫталыҡҡа өйрәнеп тарала. Талантлы уҡытыусы 1986 йылда мәктәп директорының уҡытыу эше буйынса урынбаҫары итеп билдәләнә. Шунда Миңнехана Ишмөхәмәт ҡыҙының уҡытыусылар менән эшләү, уларҙың ижади эштәрен ойоштороу сифаттары асыҡ күренә.

1993 йылдың апрелендә М.И.Баһауетдинова Стәрлебаш 1-се урта мәктәбенең директоры итеп тәғәйенләнә. Был эшкә ул үҙен әҙер, һәләтле итеп тоя. Уҡытыусылар коллективы һуңғы йылдарҙа уның етәкселегендә уҡытыу-тәрбиә эшендә яңы бейеклектәр яулай, ҙур уңыштарға өлгәшә. Коллективтың ижади эш шарттары был уңыштарҙың нигеҙен тәшкил итә. 42 уҡытыусының барыһы ла юғары белемле, алты уҡытыусы юғары категориялы, күптәр беренсе һәм икенсе категориялы, ике урынбаҫары аспирантурала уҡый.

Бындай коллектив менән тауҙар аҡтарырға була, тип иҫәпләй мәктәп директоры. Эштә өлгәшкән уңыштары өсөн ул күп кенә Маҡтау грамоталары менән бүләкләнгән, 1992 йылда уға Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исем бирелә.

Директор М.И.Баһауетдинова йыш ҡына башҡа мәктәп вәкилдәрен саҡырып, уҡытыусыларҙың бай тәжрибәһен күрһәтә, үҙенең эш алымдарын барыһы менән дә ихлас уртаҡлаша.

Миңнехана Ишмөхәмәт ҡыҙының эш стиле – ойошҡанлыҡ, үҙенә һәм башҡаларға талапсанлыҡ, уҡытыусылар һәм уҡыусылар коллективтарының эшендә төп йүнәлештәрҙе ваҡытында дөрөҫ билдәләү. Ул үҙенең эш һәм ғилми квалификацияһын даими күтәреү тураһында хәстәрлек күрә. 1997 йылда М.И.Баһауетдинова «Башҡорт теленең этнографик лексикаһы» темаһына диссертация яҡлап, филология фәндәре кандидаты тигән ғилми дәрәжәгә эйә була.

Һуңғы ваҡытта Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы, район, ҡала мәғариф идаралыҡтары һәм мәктәп етәкселәренең байтағы, алдынғы тәжрибә һәм ғилми тикшеренеү эштәрен дөйөмләштереп, фән кандидаты, фән докторы тигән юғары дәрәжәләр алыуға ирешә. Был – ҡыуаныслы күренеш. Миңнехана Ишмөхәмәт ҡыҙы Баһауетдинова, ауылда йәшәп һәм ҙур коллектив менән етәкселек итеп тә, ғилми-тикшеренеү эше алып барыу өсөн ваҡыт таба һәм ғилми дәрәжәгә эйә булған абруйлы педагогтарҙың береһе булып танылды. Уның педагогик хеҙмәте һәм ғилми тикшеренеүҙәре көн һайын файҙа килтерә.

## МӘРЙӘМ САБИРЙӘН ҡыҙы БУРАҠАЕВА

*(1943)*



Яҙыусы, педагог һәм йәмәғәт эшмәкәре Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы Бураҡаеваның исеме республикала киң билдәле. Уны башҡорт мәктәптәре уҡыусылары «Тормош һабаҡтары» («Башҡорт мәҙәниәте») дәреслектәре аша ғына түгел, ә балалар өсөн яҙылған, нигеҙҙә, тәбиғәтте һаҡлауға арналған «Аҫылташтар бәйгеһе», «Һүнмәҫ нурҙар», «Шишмә», «Һылыуҡай», «Йәнтөйәк», «Күҙгө ысыҡ», «Аҡ балыҡ» китаптары аша ла яҡшы беләә.

Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы Бураҡаева Башҡортостандың Ейәнсура районы үҙәге Иҫәнғол ауылында хеҙмәткәр ғаиләһендә 1943 йылдың 27 мартында тыуған. 1960 йылда тыуған ауылында урта мәктәпте, 1965 йылда Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Хеҙмәт юлын Күмертау ҡалаһының Маяҡ ҡасабаһында уҡытыусы булып башлай. Аҙаҡ Башҡортостан телевидение һәм радио тапшырыуҙары комитетында, «Башҡортостан ҡыҙы» журналы, «Башҡортостан» гәзите редакцияларында, БР Мәғариф министрлығында, «Урал» башҡорт халыҡ үҙәгендә эшләй.

Журналистика өлкәһендә эшләгән саҡта ул «перспективаһыҙ» («киләсәкһеҙ») тип мөһөр һалынған, әммә тарихи яҡтан әһәмиәтле ауылдарҙы ҡурсалаған мәҡәләләр менән сығыш яһай. Һөҙөмтәлә был башланғысҡа хөкүмәт етәкселәре иғтибар итә, халыҡ та күтәреп ала. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның тыуған ауылы Туйымбәт (Күгәрсен районы), Советтар Союзы Геройы Ҡотләхмәт Хәйбуллиндың тыуған ауылы Сөләймән (Алабайтал, Ейәнсура районы), башҡорттарҙан беренсе Советтар Союзы Геройы Ғәфиәтулла Арыҫлановтың тыуған ауылы Кинйәбыҙ (Көйөргәҙе районы) һаҡланып ҡала.

М.С.Бураҡаева Өфөлә, республикабыҙҙың башҡа ҡалаларында башҡорт мәктәптәре, балалар баҡсалары астырыуҙа әүҙем ҡатнашты.

Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы Бураҡаева мәғариф системаһында эште фәҡәт белем биреүгә генә ҡайтарып ҡалдырып, тәрбиә мәсьәләһенең икенсе планға күсеүенә, педагогик хеҙмәттең тик юғары уҡыу йорттарына инеүселәр һаны буйынса ғына баһаланыуына иғтибар итә һәм һәр халыҡтың быуаттар буйы тупланған тәжрибәһе нигеҙендә тәрбиә эше алып барыу хаҡында уйлана башлай. Күгәрсен районының Сәйетҡол, Белорет районының Йөйәк, Ейәнсура районының Иҫәнғол урта мәктәптәрендә эшләгән саҡтарында халыҡтың тәрбиәүи ҡанундары нигеҙендә тәжрибә дәрестәре үткәрә, түңәрәктәр ойоштора.

Ошо хыял-ынтылыш уны Ейәнсураға алып ҡайта һәм халыҡ педагогикаһы нигеҙендә гимназия асыуға килтерә. Гимназияла үҙенең улы – яҙыусы Илгиҙәр Бураҡаев менән бергә тәжрибә дәрестәре үткәрә, программа төҙөй. Артабан тәжрибәле педагог һәм ғалим Миндебай Бәхтиәр улы Юлмөхәмәтов менән берлектә «Тормош һабаҡтары» буйынса дәреслектәр яҙа. Бөгөнгө көндә республиканың һәм башҡорттар йәшәгән күрше өлкәләрҙең башҡорт мәктәптәрендә беренсенән унынсы синыфҡа саҡлы «Тормош һабаҡтары» («Башҡорт мәҙәниәте») предметы индерелә. Ул – уҡыусыларҙың ғына түгел, атай-әсәйҙәрҙең дә иң яратҡан предметына әйләнә. Уның аша уҡыусылар үҙ халҡының мәҙәни ҡаҙаныштары, ғилем нигеҙҙәре, тәрбиә ҡанундары, халыҡ фәлсәфәһе, йолалары менән таныша.

Тәрбиә эшендә был предметтың файҙаһы бәхәсһеҙ: ауылдарҙа шәжәрә байрамдары, балалар һабантуйҙары, мәктәптәрҙә «Өләсәйҙәр һабағы», «Олатайҙар менән осрашыу», «Атайҙар көнө», «Абруйлы ғаиләләр көнө», «Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ», «Ҡыҙ булһаң, тыйнаҡ бул» кисәләре, Нардуған, Наурыз байрамдары үткәрелә башланы. Бындай сараларҙың тәрбиәүи әһәмиәте әйтеп бөткөһөҙ.

М.С.Бураҡаеваға, «Башҡорт мәҙәниәте» («Тормош һабаҡтары») программаһын һәм предметын әҙерләүгә тос өлөш индергәне өсөн, Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү буйынса почетлы хеҙмәткәре тигән маҡтаулы исем бирелде. Уны Күгәрсен район хакимиәте Зәйнәб Биишева исемендәге премияһы менән бүләкләне.



## САЛАУАТ ӘХМӘҘИ улы ГАЛИН

*(1934)*

Башҡорт филологияһы өлкәһендә эшләгән һәр ғалим – тел ҡатламдарын аҡтарған белгесме ул, әллә әҙәбиәт тарихына инеп киткән һәм асыштар яһаған әҙипме, йәки халыҡтың ауыҙ-тел ижадын күтәргән фольклорсымы – һәр ваҡыт мәктәптә уҡытыу-тәрбиә эшен яҡтыртырға мәжбүр. Салауат Әхмәҙи улы Галин да үҙенең ғилми-педагогик эшмәкәрлеге менән йәштәрҙе уҡытыу һәм тәрбиәләү эшенә лайыҡлы өлөш индерә. Уның һуңғы йылдарҙағы хеҙмәте республикала мәғариф эшен үҫтереүҙә мөһим урын биләй.

Салауат Әхмәҙи улы Галин 1934 йылдың 3 мартында Башҡортостандың Баймаҡ районы Ғәҙелбай ауылында колхозсы ғаиләһендә донъяға килә. 1948 йылда Беренсе Эткол ете йыллыҡ мәктәбен тамамлағандан һуң, ул Темәс башҡорт педагогия училищеһына уҡырға бара. Уны бөтөрөп сыҡҡас, йәш белгес райондың Таулыҡай мәктәбендә уҡыусы балаларға урыҫ теле һәм әҙәбиәте буйынса белем бирә.

Юғары белем алыу теләге Салауат Галинды Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтына алып бара, унда башҡорт теле һәм әҙәбиәте

буйынса төплө белем ала. Педагогия институтында яҡшы уҡыуын иҫәпкә алып, уны шунда эшкә ҡалдыралар. Әммә ул артабан уҡыу, нигеҙле белем алыу, фән донъяһына инеп китеү дәрте менән хыяллана. Салауат Галиндың был теләге лә тормошҡа аша – элекке СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аспирантураһына уҡырға инә, танылған ғалим-фольклорсы, профессор Кирәй Мәргән етәкселегендә йәш белгес башҡорт халҡының тарихи йырҙары тураһында диссертация яҙып, Ҡазан дәүләт университетының ғилми советында уңышлы яҡлай, шунан һуң Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми-тикшеренеү эштәрен дауам итә.

1970 йылда филология фәндәре кандидаты Салауат Әхмәҙи улы Галин Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтына эшкә саҡырыла, унда башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире, институттың ғилми эштәр буйынса проректоры вазифаларын башҡара.

Ғалим халыҡ ижады буйынса ғилми-тикшеренеү эштәрен дауам итә, был өлкәлә ҙур асыштар яһай. Ул халыҡ ижады өлгөләрен – ҡобайыр, йыр, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ һәм әйтемдәрҙе өйрәнеүгә ҙур өлөш индерҙе, уларҙы уҡыусы балаларға өйрәтеү юлдарын күрһәтте.

Салауат Әхмәҙи улы һәр ваҡыт илһамланып ижад итә, уның халыҡ ижадына һәм әҙәбиәткә, уларҙы уҡытыу мәсьәләләренә бағышланған ике тиҫтәгә яҡын китаптары, уҡытыу әсбаптары һәм йөҙәрләгән мәҡәләләре бар. Уларҙан башҡа хәҙерге филология фәненең торошон күҙ алдына килтереп тә булмай. Ғалимдың юғары кимәлдәге ғилми хеҙмәттәре халҡыбыҙҙың рухи байлығын тәшкил итә.

С.Ә.Галиндың педагогик эшмәкәрлеге тотош бер коллективтың уңышлы хеҙмәтенә бәрәбәр. Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтында ун ете йыл эшләү дәүерендә ул башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһын ғилми яҡтан үҫтереүгә, институтта фәнни эштәрҙе юлға һалыуға, мәктәптәр өсөн юғары белемле уҡытыусылар әҙерләүгә ҙур өлөш индерҙе.

1987 йылдан бирле Салауат Әхмәҙи улы Галин Башҡортостан мәғарифын үҫтереү институтында туған телдәр һәм әҙәбиәттәр кафедраһы мөдире вазифаһын башҡара. Кафедра уҡытыусылары – ғилми хеҙмәткәрҙәре республика мәктәптәре уҡытыусыларына уҡытыу-тәрбиә эштәрен юғары кимәлдә алып барыуҙа ҙур ярҙам күрһәтә. Кафедра үҙ ваҡытында пландарын төҙөй, мәктәп дәреслектәре яҙыуҙа, мөхәррирләүҙә, рецензиялауҙа әүҙем ҡатнаша. Салауат Әхмәҙи улы кафедраның эшенә, ғилми хеҙмәткәрҙәрҙең ижади эшмәкәрлегенә дөрөҫ йүнәлеш бирә. Бында уға, һис шикһеҙ, эске тойомлау ҡеүәһе, юғары уҡыу йортонда эшләү тәжрибәһе ярҙам итәлер.

Уҙған быуаттың 90-сы йылдары урталарында ғалим С.Ә.Галин республикабыҙҙың балалар-үҫмерҙәр журналы «Аманат» редакция-

һына башҡорт халыҡ ижадында йыш осраған һүҙҙәр, исемдәр, атамалар һүҙлегенең бер өлөшөн баҫтырып сығарыу өсөн килтерҙе. Был һүҙлекте редакция «Фольклор донъяһына сәйәхәт» исеме аҫтында бер нисә һанда баҫып сығарҙы. Шунан һуң журнал редакцияһына уҡыусыларҙан һүҙлектең дауамы, ҡайһы бер һүҙҙәргә тулыраҡ аңлатма биреүҙе һораған күп хаттар килде. Уҡытыусыларҙың хаттарындағы һәм һөйләшеүҙәрҙәге фекерҙәренә ҡарағанда, Салауат Әхмәҙи улы Галиндың был хеҙмәте мәктәптә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра, иң мөһиме – уҡытыу-тәрбиә эшен яҡшыртыуға көслө йоғонто яһай. Тикшеренеүсенең ошо эштәренең һөҙөмтәһе булып, 1993 йылда «Тел асҡысы – халыҡта» китабы донъя күрҙе.

Ғилми-тикшеренеү хеҙмәттәренән башҡа ла ғалимдың уҡытыусылар һәм уҡыусылар өсөн яҙған дәреслектәре, уҡытыу әсбаптары ҙур исемлек тәшкил итә. Уларҙың барыһы ла ғалимдың мәктәп эшенә ярҙам күрһәтеү теләге менән ижад ителгән. Салауат Әхмәҙи улы республикала уҡытыу-тәрбиә эше, уҡытыусылар коллективтарының хеҙмәте тураһында гәзит-журналдарҙа мәҡәләләр менән йыш сығыш яһай. Улар һәр ваҡыт мауыҡтырғыс, фәһемле, уҡымлы килеп сыға. Был ғалимдың яҙыу оҫталығына, фактик материалдарҙы үтемле файҙалана белеүенә бәйләнгән, әлбиттә.

Халыҡтың ауыҙ-тел ижады өлгөләрен йыйыу һәм өйрәнеү маҡсатында ғалим Башҡортостан Республикаһы райондарын арҡырыға ла, буйға ла йөрөп сыҡҡан. Хәҙер уның был эшенә күрше Пермь, Силәбе, Ырымбур, шулай уҡ Һарытау, Ҡурған өлкәләре уҡытыусыларына фольклор, тел һәм әҙәбиәт уҡытыуҙа методик ярҙам күрһәтеү хәстәрлектәре лә өҫтәлде.

Уҙған быуаттың 90-сы йылдары фольклорсы ғалим С.Ә.Галин өсөн айырыуса емешле ижад осоро була. 1994 йылда ул «Башҡорт фольклорында эпик традициялар» темаһына яҙған докторлыҡ диссертацияһын уңышлы яҡлай. Филология фәндәре докторы, профессор тигән юғары дәрәжәләрҙе күптәр йылдар буйы көтөп алһа, Салауат Әхмәҙи улына был исемдәр ай ярым эсендә бирелә. 1998 йылда С.Ә.Галин Гуманитар фәндәр академияһының академигы итеп һайланды. Була бит үҙ эше өлкәһендә «аяғы еңел», даланлы шундай кешеләр!

2001 йылдың авгусында Мәскәүҙән шатлыҡлы хәбәр килеп төштә: «Рәсәй Федерацияһы хөкүмәтенең 2001 йылдың 20 авгусындағы ҡарары менән дөйөм белем биреү учреждениелары һәм юғары педагогия уҡыу йорттары өсөн «Тел асҡысы – халыҡта» тигән башҡорт фольклоры өлкәһендәге тикшеренеүҙәр циклы өсөн филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан мәғарифын үҫтереү институтының кафедра мөдире Салауат Галин 2000 йылғы белем биреү өлкәһендә Рәсәй Федерацияһы хөкүмәте премияһына лайыҡ булды».

Ғалим абруйлы комиссия ҡарамағына халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады буйынса яҙған уҡыу әсбаптарын тәҡдим итә. Уларҙан ғалимдың «Башҡорт фольклоры» (1975, 1999), «Тел асҡысы – халыҡта» (1993, 1999), «Тарих һәм халыҡ поэзияһы» (1996) тигән күләмле китаптарын күрһәтергә мөмкин.

Халыҡ ижады өлкәһендә ғилми-тикшеренеү хеҙмәттәре, фольклор өлгөләрен өйрәнеү һәм уҡытыу тураһындағы фәнни китаптары өсөн Салауат Әхмәҙи улы Галин 1968 йылда республика йәштәренең Ғ.Сәләм исемендәге премияһына, 1980 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре тигән исемгә лайыҡ була.

С.Ә.Галин күп томлы «Башҡорт халыҡ ижады»н төҙөүҙә, нәшер итеүҙә әүҙем ҡатнаша. Ул – шулай уҡ мәктәптәр өсөн «Башҡортостан мәҙәниәте» дәреслеге авторҙарының береһе. Бер нисә синыфҡа тәғәйенләнгән был дәреслектәрҙе уҡытыусылар үҙ эшендә уңышлы файҙаланалар.

## СӘЛИМЙӘН ЙӘЛӘЛ улы ҒҮМӘРОВ

*(1933)*



Сәлимйән Йәләл улы Ғүмәров 1933 йылдың 8 мартында Башҡортостандың Ейәнсура районы Сәғит ауылында крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Сәғит башланғыс, Байыш ете йыллыҡ мәктәптәрен тамамлағас, ул 1953 йылда Абзан урта мәктәбенә уҡырға инә, уны уңышлы бөтөрөп сыҡҡандан һуң, Байыш мәктәбендә география һәм ботаника уҡыта. 1954 – 1957 йылдарҙа армия хеҙмәтен үтәгәс, Сәлимйән Ғүмәров бер йыл комсомолдың район комитеты инструкторы булып эшләй. Заман талабы һәм шәхси ихтыяжы унда юғары белем алыу теләге тыуҙыра. Ошо хыял менән Сәлимйән Ғүмәров 1958 йылда Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының филология факультетына уҡырға инә, үҙе кеүек юғары белем алырға һыуһап килгән йәштәр менән ярышып, сәмләнеп

уҡый, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша. 1963 йылда йәш белгес Байыш мәктәбенә эшкә ҡайта, унда директор урынбаҫары һәм директор булып эшләй, уҡытыусылар коллективы хеҙмәтенә етәксселек итеү, уны юғары кимәлдә ойоштороу серҙәрен өйрәнә, алдынғы эш методтарын һәм алымдарын көндәлек ғәмәли хеҙмәт күнекмәләре аша үҙләштерә. Шулай итеп, педагогик тәжрибә һәм тормош һабаҡтары даими арта, Сәлимйән Ғүмәровты республика кимәлендә эштәргә алып сыға.

1968 йылда С.Й.Ғүмәров Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтына – хәҙер Башҡортостан мәғарифын үҫтереү институты – эшкә алына, унда методист булып бер аҙ эшләгәндән һуң, дәреслектәр һәм уҡытыу-күргәҙмә әсбаптар кабинеты мөдире итеп тәғәйенләнә. Сәлимйән Йәләл улы был вазифаны ҡолас йәйеп, үҙенә хас талапсанлыҡ һәм яуаплылыҡ тойоп башҡара.

1971 йылдың йәйендә Сәлимйән Йәләл улы Ғүмәров, һәләтле ойоштороусы, педагог һәм журналист, «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналының баш мөхәррире итеп билдәләнә. Бына ошо вазифала уның барлыҡ сифаттары – педагогик оҫталығы, ойоштороусы ҡеүәһе һәм журналист ҡәләме тулыһынса асыла. Яңы баш мөхәррир иң тәүҙә редакция коллективының һәм редколлегияның эшен хәҙерге заман талаптары нигеҙендә, мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә бурыстарын иҫәпкә алып, планлы, перспективалы ойоштороуға ҙур иғтибар бирә. Бына шунда уның айлыҡ, йыллыҡ эш һөҙөмтәләрен алдан күрә белеү, алға ҡарап йәшәү, ике-өс йыллыҡ эштәрҙе күҙаллау һәләте сағыу күренә.

С.Й.Ғүмәров баш мөхәррир булып эш башлаған тәүге йылдарҙа «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы, нигеҙҙә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте, урыҫ теле һәм әҙәбиәте, башланғыс мәктәп, математика, физика, химия, сит ил телдәре уҡытыусылары өсөн генә сығарыла. Артабан уның даирәһе Башҡортостан мәктәптәрендә уҡытылған бөтә предметтарҙы ла үҙ эсенә ала. Журнал барлыҡ уҡытыусылар һәм тәрбиәселәрҙе хәҙмәтләндерә, мәғариф хеҙмәткәрҙәренең өҫтәл китабына әйләнә. Уны көтөп алалар, эштә көндәлек ҡулланма күреп файҙаланалар.

1971 йылда «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналының тиражы 8000 дана тәшкил итһә, С.Й.Ғүмәровтың һәм редакция коллективының ойоштороу, ғәмәли саралар күреүе һөҙөмтәһендә, 2002 йыл башына был һан 27000-гә барып етә. Үҫеш 3,3 тапҡырҙан да ҙурыраҡ!

С.Й.Ғүмәров Башҡортостан халыҡ мәғарифын үҫтереү, мәктәптә уҡыу-тәрбиә эшен яҡшыртыу мәсьәләләре менән даими шөғөлләнә. Педагогик хеҙмәттә өлгәшкән уңыштары өсөн Сәлимйән Йәләл улы

Ғүмәровҡа 1974 йылда Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, 1979 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән юғары исемдәр бирелә, 1973 йылда ул Башҡортостан Юғары Советы Президиумының Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнә.

Сәлимйән Йәләл улы Ғүмәров «Башҡортостан уҡытыусыһы» методик, педагогик, ғилми журналы коллективы эшен хәҙерге юғары талаптар нигеҙендә ойоштороу өсөн фәнни-тикшеренеү эштәре менән тәрән шөғөлләнә, профессор К.Мәргән етәкселегендә «20 – 30-сы йылдарҙа башҡорт совет әҙәбиәтендә тарихи-революцион проза» темаһына диссертация яҙа, уны 1979 йылда Башҡорт дәүләт университетының ғилми советында уңышлы яҡлай.

Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидаты Сәлимйән Йәләл улы Ғүмәровтың «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналында 30 йылдан ашыу хеҙмәт иткән тормош баҫҡыстары юғарынан-юғарыға үрләй. Хәҙер ғалим-педагогты, ғалим-баш мөхәррирҙе республиканың барлыҡ мәғариф хеҙмәткәрҙәре лә яҡшы белә, ихтирам итә.

## ФӘНЗИЛ НӘҒИМ улы ҒӘБИҘУЛЛИН

*(1939)*



Үткән быуаттың 70-се йылдарынан яңы, өс меңенсе, быуат башына тиклем Шишмә район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире булып эшләгән Фәнзил Нәғим улы Ғәбиҙуллин – ҙур уңыштар яулаған һәм тыуған яғын был өлкәлә яңы үрҙәргә күтәргән күренекле хеҙмәткәр, абруйлы һәм арҙаҡлы етәкселәрҙең береһе.

Фәнзил Нәғим улы Ғәбиҙуллиндың тыуған төйәге – Башҡортостан Республикаһының Шишмә районы Сыуалкип ауылы (ул шунда 1939 йылдың 26 февралендә колхозсы ғаиләһендә тыуып үҫә). Тыуған ауылында урта мәктәпте тамамлағандан һуң, 1956 йылда

Өфө статистика техникумына уҡырға инә. Уны бөтөрөп сыҡҡас, 1958 йылда йәш белгес Татарстан Республикаһының Апас районына статистика идаралығының разъезд инспекторы итеп ебәрелә.

Совет Армияһы сафында хеҙмәт итеп ҡайтҡас, 1961 йылдан Фәнзил Ғәбиҙуллин Ҡалмаш урта мәктәбендә йыл ярым химия һәм биология уҡытыусыһы булып эшләй. Ул үҙенең хеҙмәт юлы уҡытыусы эшендә икәнен аңлай һәм ҡалған тотош ғүмерен халыҡ мәғарифына бағышларға ҡарар итә. Был теләген тормошҡа ашырыу маҡсатында, йәш егет 1962 йылда Башҡорт дәүләт университетының химия факультетына уҡырға инә.

1967 йылда юғары белемле химия һәм биология уҡытыусыһы Фәнзил Нәғим улы Ғәбиҙуллин, Шишмәгә ҡайтыу менән, Ҡалмаш мәктәбе директоры итеп тәғәйенләнә. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ул район етәкселәренә һәм мәғариф хеҙмәткәрҙәренә оҫта етәксе, инициативалы хеҙмәткәр булып танылa. Мәғариф эшен һәм унда ҡатнашҡан кешеләрҙе, уҡыусы балаларҙы һәм уларҙың ата-әсәләрен яратҡан, бар халыҡҡа иғтибарлы һәм улар менән тиҙ арала уртаҡ тел таба белгән хеҙмәткәрҙе 1972 йылда Шишмә район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп үрләтәләр.

Был эштә – район уҡытыусыларының ижади хеҙмәтен ойоштороуҙа һәм уға йүнәлеш биреүҙә Фәнзил Нәғим улы Ғәбиҙуллиндың бөтөн педагог булмышы, ойоштороу һәләте һәм етәкселек итеү стиле асыҡ күренә. Ул ике-өс йылдан республикала абруйлы халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире булып танылa. Уның оҫта етәкселегендә Шишмә районы мәктәп һәм башҡа балалар ойошмалары өсөн биналар төҙөү, яңы уҡыу йылына әҙерләнеү, мәктәптәрҙе техник йыһаздар һәм дидактик материалдар менән тәьмин итеү буйынса райондарҙың ярышында бер нисә тапҡыр еңеүсе була һәм бүләктәр ала.

Фәнзил Ғәбиҙуллин район уҡытыусылары, мәктәп етәкселәре эштәрен ныҡлап өйрәнә, уларҙың алдынғы тәжрибәләрен киң таратыу маҡсатында, республика ваҡытлы матбуғатында күп мәҡәләләр яҙып баҫтыра. Уҡыусыларҙың методик эшен ойоштороуға ул ҙур иғтибар бирә.

Янып йәшәгән һәм барлыҡ көсөн биреп эшләгән мәғариф хеҙмәткәре Фәнзил Нәғим улы Ғәбиҙуллиндың педагогик эшмәкәрлеге күптәр өсөн өлгө булып тора. Оҙаҡ йылдар уңышлы хеҙмәте өсөн ул «Почет Билдәһе» ордены һәм бер нисә миҙал менән бүләкләнә. 1985 йылдың 4 сентябрендә арҙаҡлы педагог һәм абруйлы ил ағаһы Фәнзил Нәғим улы Ғәбиҙуллинға Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исем бирелә. Хәҙер ул Бөтөн Рәсәй иҡтисад университетының Шишмә район вәкиллеге мөдире булып эшләй.

# МАРИЯ МИХАЙЛОВНА КАЛУЦКАЯ

*(1950)*



«Етем балаларҙың әсәһе. Ул булған саҡта, ата-әсәһеҙ балалар үҙҙәрен етем тоймай». Шулай тиҙәр Мария Михайловна Калуцкая тураһында Белорет төйәгендә. Ул – Үҙән балалар йорто директоры, «Почет Билдәһе» ордены кавалеры, В.А.Луначарский исемендәге премия лауреаты.

Мария Михайловна Калуцкая 1950 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан Республикаһының Белорет районы Үҙән ауылында донъяға килә. Үҙ ауылы мәктәбенең VII синыфын тамамлағас, ул Белорет педагогия училищеһында уҡып сыға, шунан Башҡорт дәүләт педагогия институтында белем ала. Юғары белемле уҡытыусы тәүҙә балалар йортонда пионер вожатыйы булып эшләй, 1982 йылдан бирле балалар йорто директоры вазифаһын башҡара.

М.М.Калуцкая етәкләй башлағандан һуң, Үҙән балалар йорто танымаҫлыҡ булып үҙгәрә. Урамдан тура – йоҡо бүлмәһе, ашхана – айырым йортта, бәҙрәф – урам аша... Мария Михайловна бындай шарттар менән ризалашмай, ҡайҙа ғына булмай, ниҙәр генә эшләмәй. Балалар йорто директоры Мәскәүгә алты тапҡыр барып ҡайта, яңы бина төҙөү тураһында хыяллана. Тәүҙә типовой проект таба алмай аҙапланалар. Ниһайәт, баш ҡаланан бина өсөн ике проект килеп төшә, ләкин унда тамаша залы ҡаралмаған, өҫтәүенә, йәйге верандалы. Төҙөлөш башланғас, күп эште үҙгәртергә, яңылыҡтар индерергә тура килә. М.М.Калуцкая «Белореттөҙөлөш» идаралығы башлығы менән осраша, уны бына шулай төҙөргә, шундай яңылыҡтар индерергә кәрәк, тип ышандыра. Балалар йорто директоры үҙе планлаштырыусы һәм төҙөүсе була, үҙе төҙөлөш материалдары һәм йыһаздар таба.

1990 йылда ике ҡатлы, барлыҡ ярҙамсы бүлмәләре булған балалар йорто бинаһы сафҡа индерелә. Ауыр шарттарҙа ярҙамсы хужалыҡ киңәйтелә, суска фермаһы тотола, артыҡ суска ите һатыуға сығарыла. 20 гектар майҙанда йәшелсә үҫтерелә. Унда үҫтерелгән уңыштың да артығы һатыла.

М.М.Калуцкая балалар йортона иғәнәселәр йәлеп итә. Педагогик тәжрибәһен күтәреү маҡсатында, ул Бийск ҡалаһы балалар йорто директоры, Социалистик Хеҙмәт Геройы Е.А.Клименко, Сыктывкар ҡалаһы балалар йорто директоры А.А.Католиков менән осраша, уларҙың яҡшы тәжрибәләрен Үҙән балалар йортонда файҙаланыуға индерә.

М.М.Калуцкая балалар йортоноң үҫеш программаһын эшләй. Уның маҡсаты илебеҙҙең яңы граждандарын тәрбиәләүҙән тора. Программала матди-техник базаны нығытыу, кадрҙар, тәрбиә һәм белем биреү эштәре ҡаралған.

Балалар йорто ҡунаҡтар ҡаршыларға ярата. Республиканың балалар йорттары һәм мәктәп-интернат директорҙары урынбаҫарҙары, ҡала һәм район хакимиәт башлыҡтары урынбаҫарҙары, мәғариф идаралығы башлыҡтары, мәктәп етәкселәре уның тәжрибәһен өйрәнде.

Балалар йортонда Башҡортостан Республикаһы Президенты М.Ғ.Рәхимов, хөкүмәт башлығы Р.И.Байдәүләтов, уның урынбаҫары Х.Х.Ишморатов, шағир Мостай Кәрим булып китте. Президент М.Ғ.Рәхимов балалар йорто директоры М.М.Калуцкаяны үҙенең эш кабинетына саҡырҙы. Президент менән әңгәмәлә балалар йортоноң проблемалары ентекләп ҡаралды һәм уны үҫтереү саралары күрелде.

Төп эшенән тыш, Мария Михайловна Калуцкая ҙур йәмғиәт эштәре алып бара. Ул – хәүефле йәшәгән ғаиләләр менән эшләү комиссияһы рәйесе, Башҡортостан Республикаһы ҡатын-ҡыҙҙар советы ағзаһы. Уға ауыл кешеләре йыш мөрәжәғәт итә, үҙҙәре өсөн файҙалы кәңәштәр һәм һорауҙарына яуаптар ала.

Мария Михайловна Калуцкаяның барлыҡ уй-хыялдары, хәстәрлектәре балалар йортоноң эшен яҡшыртыуға йүнәлтелгән. Хәҙер унда 90 бала тәрбиәләнә. Мария Михайловна – коллективтың оҫта етәксеһе, балаларҙың яратҡан әсәһе.



# ҒӘЛИӘ МӨХТӘР ҡыҙы МӨХӘМӘТЙӘНОВА

*(1950)*

Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы Мөхәмәтйәнова – Башҡортостанда киң билдәле педагог, Өфө ҡала мәғариф идаралығында, республика Мәғариф министрлығында эшләгән йылдарҙа танылған һәм күтәрелгән етәксе, Башҡортостан Республикаһының мәғариф министры, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре.

Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы Мөхәмәтйәнова 1950 йылдың 1 декабрендә Силәбе ҡалаһында хеҙмәткәр ғаиләһендә донъяға килә. Татыу ғаиләлә өлкәндәрҙең бәләкәстәргә ҡарата хәстәрлеген тойоп үҫкәнгәлер, Ғәлиәлә бала саҡтан кешеләр менән эшләү, уларға аҙ ғына булһа ла ярҙам итеп йәшәү теләге уяна. Шуға ла урта мәктәпте тамамлауға, ул «Кем булырға?» тигән һорауға асыҡ яуап әҙерләгәйне инде: оҙаҡ уйланып торманы, уҡытыусы һөнәрен яҡын күрҙе. Ғәлиә Мөхәмәтйәнова Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтын һайлай.

Филология факультетының урыҫ теле һәм әҙәбиәте бүлегенә ҡабул итеү имтихандарын еңел генә тапшырғандан һуң, дүрт йылға һуҙылған студент тормошо башланып та китә. Уға ауыҙ-тел ижадын өйрәнеү, сит ил әҙәбиәттәренең арҙаҡлы вәкилдәре әҫәрҙәрен уҡыу, фәлсәфәүи уйланыуҙарға ҡоролған дәрестәр айырыуса оҡшай.

1972 йылдың август айында йәш белгес Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы Мөхәмәтйәнова үҙ теләге менән Баймаҡ районына эшкә китә.

Түбә 2-се урта мәктәбе коллективының уҡытыу-тәрбиә эштәре ул ваҡытта Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы һымаҡ йәш уҡытыусыларҙың хеҙмәтенә ныҡ бәйләнгән. Улар дәрес үткәреү менән генә ҡәнәғәтләнмәйенсә, балалар менән кисәләр, ярыштар, шиғыр бәйгеләре ойошторалар, үҙешмәкәр түңәрәк эшен йәнләндереп, уға ҡасаба йәштәрен дә йәлеп итәләр, өлкән синыф уҡыусылары менән оҙайлы сәйәхәттәргә йөрөйҙәр. Йыр-бейеү һәләттәрен уҡытыусылар,

балалар һәм ҡасаба йәштәре, Түбә халҡынан тыш, йәнә яҡынтирәләге Темәс, Ҡолсора ауылдары кешеләренә лә күрһәтәләр.

Йәш уҡытыусының ойоштороу һәләте ҙур булыуын, коллегаларының да уға тартылыуын, уҡыусы балаларҙың барлыҡ серҙәре менән уға килеүен, эйәләшеүен күреп йөрөгән мәктәп директоры, тәрбиә эштәрен ойоштороусы урынбаҫар вазифаһы бушағас, уны башҡарырға Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙына тәҡдим итә. Ҡыҙ һис тә икеләнеп тормай, шунда уҡ ең һыҙғанып эшкә тотона.

1974 йылда, Ҡолсора ауылы егетенә кейәүгә сыҡҡандан һуң, Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы урындағы мәктәптә бер аҙ ваҡыт урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡыта ла шул уҡ йылды ғаиләһе менән Сибай ҡалаһына күсә. Бында ул мәктәп-интернатта урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй башлай. Мәктәп-интернатта эшләү йылдарын Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы өсөн уҡытыусы һөнәренең серҙәрен төшөнөү осоро булды, тип әйтһәк, һис арттырыу булмаҫ.

Биш-алты районДан йыйылған башҡорт балаларына урыҫ телен өйрәтеү еңел булмай тәүге мәлдә нығынып етмәгән мөғәллимәгә. Күп балалы ғаиләнән сыҡҡан, етем йәки ҡараусыһыҙ ҡалған, төпкөл ауылдарҙан килгән балаларҙың урыҫ теле буйынса белеме бик һай икәнлеге хаҡында әйтеп тораһы ла юҡтыр. Хәйер, IV синыфҡа килгән балалар араһында хәреф танып бөтөрмәгән балаларҙың да осрауы белем кимәленең ниндәй дәрәжәлә булыуын үҙе үк һөйләп тора. Әммә Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы был эшенә лә ихлас, бөтә күңелен биреп, йөрәк ҡайнарлығын йәлләмәй тотона. Ҡалыплашҡан алым, ысулдар менән эшләгән уҡытыусыларҙың урынһыҙ ғәйепләүҙәрен ишетергә тура килһә лә, уҡытыусы ҡырҡлаған баланың дәфтәрҙәрен тикшереп, дәрестәргә әҙерләнеү өсөн китаптар аҡтарып, йоҡоһоҙ төндәрен үткәрһә лә, үҙ юлынан атларға тырыша. Ул тышҡы талаптарҙан, мәктәп етәкселәренең әйткәндәренән генә сығып эш итмәй, беренсе сиратта уҡыусыларҙың мөмкинлектәрен, ихтыяждарын иҫәпкә ала. Һәр баланың ыңғай яҡтарын күрергә, табырға, уларҙың тырышлыҡтарын баһаларға өйрәнә Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы был йылдарҙа. Предметының серҙәрен төшөнөп кенә ҡалмай, ә балаларҙы урыҫ теленең асылын, ҡанундарын аңларға, телде үҙләштереү юлдарын һайларға өйрәтә. Әммә үҙенең иң ҙур ҡаҙанышы итеп Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы шуны иҫәпләй: балалар уны дуҫы, яратҡан кешеһе күреп ҡабул итә башлай.

1983 йылда Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы Мөхәмәтйәноваға мәктәп-интернатта уҡыған балалар менән айырылышырға тура килә, сөнки уны Сибай ҡала партия комитетына эшкә саҡыралар.

Был ауыр, әммә шул уҡ ваҡытта кәрәкле үҙгәреш була: киң даирәлә, юғары белемле һәм тәжрибәле кешеләр менән аралашырға өйрәнеүҙең тәүге аҙымдары була яңы урында эшләү. Иҡтисади һәм

сәйәси уҡыуҙар ойоштороу, хеҙмәт кешеләре менән осрашыуҙар, юғары кимәлдәге етәкселәр менән аралашыу – былар барыһы ла Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙының тормош тәжрибәһен байыта, йәмғиәттә барған үҙгәрештәргә иғтибарлыраҡ булырға һәм, иң мөһиме – төрлө холоҡ-фиғелле кешеләр менән аралашыу серҙәрен төшөнөргә ярҙам итә.

1987 йылда ире – журналист Самат Мөхәмәтйәновты «Башҡортостан» гәзите (ул саҡта «Совет Башҡортостаны») редакцияһына эшкә күсереүҙәре сәбәпле, Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы Башҡортостан Халыҡ мәғарифы министрлығына эшкә урынлаша. Испектор булараҡ, ул мәктәптәрҙә урыҫ теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу мәсьәләләре менән шөғөлләнә, уҡыу йорттарында яңылыҡтар индереүгә, алтын һәм көмөш миҙалдар менән бәйле эштәргә етәкселек итә. Был йылдарҙа Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы Мөхәмәтйәнова ғилми эштәргә лә тотоноп китә: төрлө типтағы урта мәктәптәрҙә уҡытыу йөкмәткеһенең асылын, төҙөлөшөн һәм ҡапма-ҡаршылыҡтарын өйрәнә, ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара. Шуның һөҙөмтәһендә ул бер нисә ғилми хеҙмәт яҙа, «Башҡортостан Республикаһында педагогик инновация» исемле китап яҙыуға үҙ өлөшөн индерә. Был хеҙмәт 1994 йылда баҫылып сыға. Ғилми-тикшеренеү эштәрен йомғаҡлап, ғалимә «Дөйөм белем биреү мәктәптәренең төрлө типтарында белем биреү йөкмәткеһендә күсәгилешлелектең педагогик шарттары (Башҡортостан Республикаһы мәктәптәре миҫалында)» темаһына кандидатлыҡ диссертацияһы яҙа һәм уны 1996 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтының ғилми советында уңышлы яҡлай.

Халыҡ мәғарифы министрлығы аппаратында эшләгән һуңғы йылдарҙа Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы Мөхәмәтйәнова Дәүләт инспекцияһы начальнигы вазифаһын башҡара, был ойошманы ҡайтанан тергеҙеүгә ҙур өлөш индерә. Ул Мәскәү, Санкт-Петербург, Новороссийск ҡалаларында үткәрелгән кәңәшмәләрҙә ҡатнаша, Башҡортостандың был йүнәлештә нисек эшләүен башҡа өлкә, республикалар вәкилдәренә еткерә, үҙе етәкләгән белгестәр менән берлектә «Халыҡ мәғарифы системаһында инспектор тикшеренеүҙәре: Башҡортостан Республикаһы Халыҡ мәғарифы министрлығы Дәүләт инспекцияһының эш тәжрибәһенән» тигән китап баҫтырып сығарыуға өлгәшә.

Өфө ҡала халыҡ мәғарифы бүлегенә етәксе кәрәк булғас, 1996 йылда был яуаплы вазифаға педагогия фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы Мөхәмәтйәнованы тәҡдим итәләр. Ике йылдан да кәмерәк ваҡыт эсендә баш ҡала халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире идара итеү структураһын, уҡытыусыларҙың белем кимәлен камиллаштырыу системаһын тамырынан үҙгәртеп ҡора, заман талаптарына ярашлы йыһазландырылған ғилми-тикшеренеү һәм методик үҙәк булдырыуға

ирешә, 1996 – 2000 йылдарға иҫәпләнгән «Баш ҡалала халыҡ мәғарифы – 2000» программаһын төҙөүҙә яҡындан ҡатнаша, Мәскәү ҡалаһының атаҡлы ғалим-педагогтары менән бәйләнештәр булдыра.

1998 йылдың 4 февраленән бирле Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы Мөхәмәтйәнова Башҡортостан Республикаһы мәғариф министры вазифаһын башҡара. Был яуаплы урында ла уның уңышлы эшләүен, мәғарифты артабан үҫтереү йәһәтенән яңы үрҙәр яулауын, республиканы мәғариф эштәре буйынса күтәреүен күреү бәхетенә ирештек.

Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы Мөхәмәтйәнова – Рәсәй Педагогия һәм социология фәндәре академияһы академигы. Был – республика мәғарифы етәксеһенә бирелгән оло баһа, ҙур ышаныс.

Хәҙер Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы Мөхәмәтйәнованың туранан-тура ҡатнашлығында Башҡортостанда мәғарифты үҫтереүҙең яҡын йылдарға перспективалы программалары эшләнде. Министр республиканың барлыҡ мәғариф хеҙмәткәрҙәрен был программаларҙы уңышлы үтәүгә, Башҡортостан Республикаһы Президентының йәш граждандарҙы тәрбиәләү, һәләтле балалар программаларын, мәғариф буйынса республика өсөн айырыуса мөһим күрһәтмәләрен тормошҡа ашырыуға барлыҡ һәләтен биреп рухландыра. Был тәңгәлдә яулайһы үрҙәр, күтәреләһе бейеклектәр алда әле.

## МАРС МАРАТ улы НАФИҠОВ

*(1948 – 1999)*



Уҙған быуаттың һуңғы сирек йылдарында Башҡортостандың ауыл райондарында мәғариф бүлеге мөдире, һуңға табан мәғариф идаралығы башлығы вазифаһын башҡарған абруйлы һәм халыҡ һөйөүен яулаған хеҙмәткәрҙәрҙең күркәм плеяҙаһында Марс Марат улы Нафиҡовтың исем-шәрифтәре мәртәбәле урын алып тора. Ул – тырыш хеҙмәте, барыһына ла иғтибарлы, ярҙамсыл етәксе, кеше бауырына үтеп ингән ихлас әңгәмәсе, талантлы

педагог булыуы менән уҡытыусыларҙың ғына түгел, башҡа хеҙмәтсәндәрҙең дә оло ихтирамын һәм хөрмәтен ҡаҙанған һоҡланғыс шәхес, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре.

1948 йылдың 6 авгусында Ҡыйғы районының Абзай ауылында данлыҡлы уҡытыусы ғаиләһендә тыуып үҫкән Марс Нафиҡов алдында кем булырға тигән һорау тормай. Ул атаһы кеүек уҡытыусы булырға әҙерләнә. Һигеҙ йыллыҡ мәктәпте һәм педагогия училищеһын тамамлағас, 1967 йылда ул Башҡорт дәүләт педагогия институтына уҡырға инә һәм физика буйынса ныҡлы белем алып сыға. Миңә уның менән Салауат район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире булып эшләгән йылдарында йыш аралашырға тура килде. Тәүге тапҡыр мин уны 1968 йылдың 1 октябрендә күрҙем. Мәғариф бүлегендә мине ҡаҡса оҙон буйлы, мөләйем кеше ҡаршыланы. Мин, «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналының хеҙмәткәре, районда журналға яҙылыу эшен ойоштororға барғайным. Марс Марат улы мине мәктәптәргә алып сыҡты, уҡытыусылар менән осраштырҙы. Һәр мәктәптәге осрашыуҙа бүлек мөдире минең һүҙҙәремде ҡәүәтләп, барыһын да журналға яҙылырға саҡырҙы. 1969 йылда Салауат районында «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналын алдырыусылар ике тапҡырға артты һәм 280 кешегә етте. Был – мәғариф бүлеге мөдиренең уҡытыусылар менән даими эшләү һөҙөмтәһе. Артабан да Марс Марат улының ярҙамы, иғтибары ҙур булды.

Бер аҙ район Советы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары булып эшләгәс, үҙенең һорауы буйынса Марс Марат улы Нафиҡов 1978 йылдың февралендә йәнә халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. Был эштә уның ойоштороу һәләте, етәксе сифаттары асыҡ күренә. Ул һәр көндө файҙалы эш менән үткәрергә, уҡытыусы коллективтарына, үҙе депутат булған йәки вәкил булып барған ауылдарға ярҙам итергә тырыша.

Мәғариф бүлегенең М.М.Нафиҡов етәкселегендә эшләгән стратегик эш планында мәктәптәрҙең район тормошо, хужалыҡтар менән бәйләнешен көсәйтеү күрһәтелгән. Район мәғариф буйынса республикала тәүҙә 12-се, шунан 4-се урынға сыға.

Марс Марат улы Нафиҡов мәктәптә һәм башҡа балалар учреждениеларында уҡытыу-тәрбиә эшенең сифатын күтәреүгә даими иғтибар бирә. 200-ҙән ашыу уҡытыусы асыҡ дәрестәр иғлан итә. «Эҙләнеү» тигән ижади клуб уңышлы эшләне. Районда 389 уҡытыусыға квалификация категориялары бирелә.

М.М.Нафиҡов яғымлы шәхес, арыу-талыу белмәгән, һүҙе үткер хеҙмәткәр булыуы менән мәктәптәрҙә һәм балалар учреждениела-

рында ижади эш шарттары тыуҙыра ала. Алдынғы уҡытыусылар етәксе вазифаларға үрләтелә, инспектор һәм методистар итеп тәғәйенләнә.

М.М.Нафиҡовтың башланғысында районда үҫмерҙәр спорт мәктәптәре, мәктәп-ара фильмотека, логопед пункты, атыу тирҙары асыла, мәктәп биналары төҙөлә. Мәғариф учреждениеларының уҡытыу-матди базаһы нығый.

...Марс Марат улы Нафиҡовтың ауыр хәлдә булыуын ишеткәс, мин Малаяҙға ашыҡтым. Ул ысынлап та ҡаты ауырый ине. Бәхилләшеп ҡайтып киттем. Өс көндән һуң уның вафат булыуы хәбәре килеп етте. Уны бик ауыр кисерҙем...

## ВАЛЕРИЙ СӘЛИМ улы НАГАЕВ

*(1949)*



Валерий Сәлим улы Нагаев 1949 йылдың 28 ғинуарында Башҡортостандың Ауырғазы районы Исмәғил ауылында механизатор ғаиләһендә донъяға килә. 1966 йылда Ишле урта мәктәбен тамамлағас, ул Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының физика-математика факультетына уҡырға инә. 1971 йылда уны бөтөрөп сығыуға, үҙ районы Ибрай урта мәктәбенә физика уҡытыусыһы итеп ебәрелә. 1974 йылда Исмәғил урта мәктәбендә уҡыта. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Валерий Нагаев үҙен ижади эшләүсе педагог итеп күрһәтә. Шуға ла уны 1975 йылдың июлендә Исмәғил урта мәктәбе директоры итеп үрләтәләр. Был вазифаны йәш педагог оло яуаплылыҡ тойоп башҡара, уҡытыусылар, балалар коллективтарына оҫта етәкселек итә.

1984 йылдың авгусында Валерий Сәлим улы Нагаев Ауырғазы район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. Шунан бирле ул республика һәм районда хеҙмәт һөйөүсе, талапсан, инициативалы етәксе булып танылa. Уға мәғариф эшендә яңылыҡҡа

ынтылыу, яңыса фекерләү хас. Был сифаттарҙы бүлек мөдире барлыҡ педагогтарҙа ла тәрбиәләргә тырыша.

Һуңғы йылдарҙа мәғариф идаралығы етәкселегендә туғыҙ урта һәм тулы булмаған урта, алты башланғыс мәктәп төҙөлә. Ун ике төкәтмәлә уҡытыу оҫтаханалары, ашханалар, спорт залдары, алты йәшлек балалар өсөн бүлмәләр урынлашҡан.

Мәғариф идаралығы башлығы В.С.Нагаев мәктәпкәсә тәрбиә ойошмалары селтәрен киңәйтеүгә ҙур иғтибар бирә. 1984 йылдан 1994 йылға тиклем айырым йоҡо һәм уйын бүлмәләре булған 27 балалар баҡсаһы сафҡа инә.

Валерий Сәлим улы районда мәғариф системаһын яңы сифатҡа күтәреү өсөн күп саралар күрә. Арыу-талыу белмәҫ дәрте, ихтыяр көсө, мәктәп проблемаларына системалы ҡарауы менән ул уҡытыусыларҙың һәм мәктәп етәкселәренең ижади һәләтен асыуға булышлыҡ итә. Ижади уҡытыусыларҙың «Эврика» клубы эшләй. Унда уҡытыу-тәрбиә эшен камиллаштырыу буйынса әүҙем эҙләнеү ысулдарын табып, киң файҙаланалар, шулай уҡ яңы тәжрибә алымдарын да ҡулланалар.

1992 йылдан бирле «Йыл уҡытыусыһы» конкурсы үткәрелә, хәҙер ул матур йолаға әйләнде инде. Район ярышында еңеүсе уҡытыусылар республика этабында ҡатнашып, йыл һайын призлы урындарҙы яулай. 1992 йылда Талбазы 1-се урта мәктәбе уҡытыусыһы Р.В.Йәнгирова республика конкурсында еңеүсе булып сыҡты. 1995 йылда Балыҡлыкүл урта мәктәбе уҡытыусыһы А.Ф.Иҡсанова республика бәйгеһендә беренсе урын яуланы һәм Бөтә Рәсәй конкурсында ҡатнашып, призлы урын алды.

Валерий Сәлим улы Нагаев мәктәп директорҙарының даими эшләүсе семинарына етәкселек итә. Семинар ултырыштарында хәҙерге шарттарҙа мәктәпкә идара итеүҙе камиллаштырыу мәсьәләләре тикшерелә. Йәш директорҙар Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы исеменә лайыҡ булған директорҙарҙың терәк мәктәптәрендә шөғөлләнәләр. Унда эш алымдары, экскурсиялар, консультациялар, проблемалы дискуссиялар, педагогик мәсьәләләрҙе хәл итеү кеүек формалар ғәмәлгә ашырылды. Районда «Йыл мәктәбе» смотр-конкурсын үткәреү матур традицияға әйләнде. Был бәйге барышында иң яҡшы кабинет, уҡытыу-тәжрибә участкаһы, оҫтахана, ашхана, методик кабинет конкурстары ла үткәрелә.

Башҡортостан мәғарифын үҫтереү институты методистары, Мәғариф министрлығы хеҙмәткәрҙәре, юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары менән берлектә семинарҙар, курстар уҙғарыу яҡшы һөҙөмтә бирә. Ике-өс йыл эсендә район мәктәптәрендә уларҙың ҡатнашлығында бөтөн предмет уҡытыусыларының да курстары үткәрелде, унда барлыҡ уҡытыусылар ҙа ҡатнашты.

Район мәғариф идаралығы башлығы В.С.Нагаев етәкселегендә мәктәптәрҙә предметтарҙы тәрән һәм профилле өйрәнеү синыфтары булдырыу буйынса маҡсатҡа йүнәлешле эш башҡарыла, альтернатив программалар буйынса уҡытыу ғәмәлгә индерелә. Идаралыҡ башлығы шулай уҡ мәктәптәрҙә эксперимент үткәреүгә һәм уны һөҙөмтәле ойоштороуға етди ҡарай.

Һәләтле уҡыусыларҙың «Эрудит» клубы һәйбәт эшләй. Ул юғары уҡыу йорттарына уҡырға инергә ярҙам итә. Идаралыҡ башлығының инициативаһы буйынса уҡыу алдынғылары йыл һайын район хакимиәте стипендияһына тәҡдим ителә. Милли мәктәпте үҫтереүҙең төбәк программаһы ғәмәлгә ашырыла.

Уҡытыу-тәрбиә, мәғариф эшенә етәкселек итеүҙә өлгәшкән уңыштары өсөн Валерий Сәлим улы Нагаевҡа 1984 йылда халыҡ мәғарифы отличнигы, 1992 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, 1997 йылда Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исемдәр бирелә.

Бер үк ваҡытта район мәғариф идаралығы башлығы В.С.Нагаев мәктәптәргә идара итеү мәсьәләләре буйынса ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара. Шуның һөҙөмтәһендә ул 1998 йылда диссертация яҡлап, педагогия фәндәре кандидаты ғилми дәрәжәһенә лайыҡ була. Валерий Сәлим улы 1997 йылда Рәсәй Педагогия һәм социология фәндәре академияһының ағза-корреспонденты итеп һайлана.

## ХӘСӘН АБДУЛЛА улы ТОЛОМБАЕВ

*(1935)*



Башҡортостан уҡытыусыларына күп яҡлы ярҙам күрһәткән методистар рәтендә Хәсән Абдулла улы Толомбаев үҙенең ғилми-педагогик хеҙмәте менән күренекле урын биләй. Ул – байтаҡ дәреслектәр, ҡулланмалар авторы, педагогия фәндәре кандидаты.

Хәсән Абдулла улы Толомбаев 1935 йылдың 16 майында Башҡортостандың Ейәнсура районы Байдәүләт ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған. Үҙ ауылы мәктәбен, Үрген урта мәктәбен тамамлағандан һуң, ул К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына уҡырға инә. Был уҡыу йорто Башҡорт дәүләт университеты тип үҙгәртелгәс, 1958 йылда уның филология факультетын бөтөрөп сыға.

Юғары белемле йәш егет Хәсән Толомбаев Бишбүләк районы Бикҡол мәктәбенә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы итеп ебәрелә. Бында ул тәүҙән үк тырыш хеҙмәт өлгөләре күрһәтә, дәреслек һәм методик ҡулланмалар буйынса дәрес биреү менән генә сикләнмәй, һәр тема буйынса күҙәтеүҙәр яһай, ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара. Һәләтле йәш белгес дәрес һәм синыфтан тыш эштәрҙе ныҡлы әҙерлек менән, балаларҙың әүҙем ҡатнашлығында үткәрә. Хәсән Абдулла улы талантлы педагог булып таныла. Уны тиҙҙән Бикҡол урта мәктәбе директоры итеп күтәрәләр, шул уҡ ваҡытта ул башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуын дауам итә, яңы дөйөмләштереүҙәр яһай, оҫталығын арттыра. Мәктәп директоры алдынғы уҡытыусыларҙың тәжрибәһен тәрән өйрәнә, уларҙың өлгөһө һәм үҙ тәжрибәһе нигеҙендә ғилми хеҙмәттәр яҙа.

1971 йылда Хәсән Абдулла улы Толомбаев Рәсәй Федерацияһы Халыҡ мәғарифы министрлығы Милли мәктәптәр ғилми-тикшеренеү институтының Башҡортостан филиалына эшкә саҡырыла, унда ғилми хеҙмәткәр вазифаһын башҡара, республика уҡытыусыларына ҙур методик ярҙам күрһәтә.

Бай тәжрибә һәм ғилми эшкә һәләтлек Хәсән Абдулла улы Толомбаевҡа туған телде уҡытыу методикаһы буйынса кандидатлыҡ диссертацияһы яҡларға мөмкинлек бирә. Педагогия фәндәре кандидаты, методик эштең оҫта ойоштороусыһы Х.А.Толомбаевтың ғилми-педагогик хеҙмәт майҙаны киңәйә. Уның үҙен һәр мәктәптә көтөп алалар, ғилми хеҙмәттәрен яратып ҡабул итәләр.

1988 йылдан бирле Хәсән Абдулла улы Толомбаев Башҡортостан мәғарифын үҫтереү институтының милли телдәр һәм әҙәбиәттәр кафедраһында эшләй. Ул уҡытыусыларҙың белемен күтәреү, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса уҡыу комплекттары төҙөүҙә әүҙемлек күрһәтә. Уның башланғыс синыфтарҙа башҡорт телен уҡытыу программаһы, уҡытыусы М.М.Нәбиуллина менән бергә яҙған «Бүләк», ғилми хеҙмәткәр М.С.Дәүләтшина авторҙашлығында төҙөлгән «Әсә теле» дәреслектәре, методик ҡулланмалары, Башҡортостандан тыш, Ҡурған, Һамар, Силәбе, Һарытау, Ырымбур өлкәләре мәктәптәрендә лә файҙаланыла.

Ғалим-методист Х.А.Толомбаев республика мәктәптәренең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары тәжрибәһен өйрәнеүен дауам итә, уларға күп яҡлы методик ярҙам ойоштора. Уның ғилми етәкселегендә өс аспирант диссертация яҡланы.

Х.А.Толомбаев авторҙар коллективы менән башҡорт телен уҡытыу методикаһын яҙҙы, уның VI синыф өсөн «Башҡорт теле» дәреслеге конкурста еңеүсе булды.

Хәсән Абдулла улы Толомбаевтың ғилми-педагогик эшмәкәрлеге Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре тигән ҙур исемдәр менән билдәләнде.

## РӘСИМӘ МИҢЛЕБУЛАТ ҡыҙы УРАҠСИНА

*(1950)*



Һуңғы ун-ун биш йыл эсендә мәктәп, педагогия училищелары һәм колледждарында күтәрелеп сыҡҡан талантлы уҡытыусылар араһында Рәсимә Миңлебулат ҡыҙы Ураҡсина айырым урын алып тора. Ғәжәп оҫта педагог булыу менән бергә ул үҙенсәлекле балалар шағирәһе, башҡорт фольклоры буйынса эшләгән ғалимә булып танылды, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, Яҙыусылар союзы ағзаһы.

Рәсимә Миңлебулат ҡыҙы Ураҡсина 1950 йылдың 19 октябрендә Башҡортостандың Дәүләкән районы Яңы Яппар ауылында сәсән телле аҡ килен, аш-һыу оҫтаһы Нәфисә Ахун ҡыҙы менән 35 йыл механизатор булып эшләгән Миңлебулат Тимербулат улы Әхмәтйәновтар ғаиләһендә донъяға килә. Кесе йәштән бик теремек, зирәк булып үҫә. Ул Өфө ҡалаһының 1-се мәктәп-интернаты (хәҙерге 1-се республика гимназияһы) тураһында ишетеп ҡала ла шунда уҡырға китергә ашҡына. Күренекле педагог Т.Х.Аслаев етәкләгән коллективтың балаларға ныҡлы белем һәм

тәрбиә биреү өлгөһө, уҡыу һәм йәшәү шарттары Рәсимә Ураҡсина менән уның тиҫтерҙәренең донъяға ҡарашын киңәйтә, һәләттәрен асырға ярҙам итә.

Рәсимә Ураҡсина Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Юғары белемле уҡытыусы Сибай педагогия колледжында башҡорт теле һәм әҙәбиәте, урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡыта. Тырыш һәм фиҙакәр хеҙмәт, үҙ һөнәрен яратыу, һәр саҡ уҡыусылар менән булыу, алдынғы педагогтарҙың тәжрибәһен хазиналай күреп өйрәнеү Рәсимә Миңлебулат ҡыҙына уҡытыу-тәрбиә эшенең серҙәрен тулыһынса төшөнөп алырға, тәрән үҙләштерергә булышлыҡ итә, уны талантлы уҡытыусы итеп күтәрә. Бер үк ваҡытта Рәсимә Ураҡсина балалар күңелен арбай алырлыҡ шиғырҙар, әкиәттәр яҙа, «Тәтәй ҡалаҡ баҙарҙа» (1992), «Тәмле-тәмле тәмлекәс» (1996) тигән китаптар сығара. Уның «Йомро-йомро Ер шарым», «Бүре башы ун ике» исемле пьесалары Сибай ҡалаһының «Сулпан» балалар театрында уңышлы бара.

Рәсимә Ураҡсина уҡытыу-тәрбиә һәм ижад менән шөғөлләнеү өҫтөнә ғилми-тикшеренеү эше лә алып бара. Ул 1995 йылда «Балалар әҙәбиәтенең формалашыуында фольклорҙың әһәмиәте» темаһына диссертация яҙып, филология фәндәре кандидаты дәрәжәһенә лайыҡ була. Әлеге көндә ул Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультетында башҡорт телен уҡытыу методикаһы тураһында лекциялар уҡый, ғәмәли дәрестәр алып бара. Шулай уҡ 2-се педагогия колледжында башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡыта.

Уҙған быуаттың 90-сы йылдарынан башлап Башҡортостанда йыл уҡытыусыһы исеменә бәйгеләр үткәрелеп тора. Рәсимә Ураҡсина Башҡортостандың «1991 йыл уҡытыусыһы» конкурсы лауреаты булыуға өлгәшә, СССР-ҙың «1991 йыл уҡытыусыһы» конкурсында ҡатнаша, Одессала 1991 йылда булып үткән Бөтә Союз уҡытыусылар союзы делегаты була. Был йылдарҙа ул ал-ял белмәй эшләй, ижад итә, ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара.

Рәсимә Ураҡсина республикала үҙен уҡытыусы-ижадсы итеп танытты. Ул уҡытыусылар өсөн асыҡ методик көндәр үткәрә, яңы технология менән уҡытыу мәсьәләләренә арналған ғилми-ғәмәли конференцияларҙа әүҙем ҡатнаша, матбуғат биттәрендә педагогик темаларға фәһемле мәҡәләләр менән сығыш яһай.

Рәсимә Миңлебулат ҡыҙы Ураҡсина һәр көнөн файҙалы үткәрә, эшенән ләззәт һәм ҡәнәғәтләнеү таба, бай тәжрибәһен коллегалары менән ихлас уртаҡлашырға ашҡына.

# МИННУР МИРЗАҺИТ ҡыҙы ҮЛӘМӘЕВА

*(1940)*



Белорет ҡалаһы халҡы Миннур Мирзаһит ҡыҙы Үләмәеваны алдынғы уҡытыусы, намыҫлы һәм уңған кеше тип белә. Ул – эш өсөн янып йәшәгән, йәштәрҙе уҡытыу һәм тәрбиәләүгә мөкиббән бирелгән педагог.

Миннур Мирзаһит ҡыҙы Үләмәева, ҡыҙ фамилияһы Ғәлиуллина, 1940 йылдың 24 мартында Башҡортостандың Белорет районы Ерматау ауылында эшсе ғаиләһендә донъяға килә.

1947 йылда Миннур Ғәлиуллина Ерматау ете йыллыҡ мәктәбенә уҡырға бара. Уның кесек бәләкәй балаларҙы мәктәп ихатаһында алсаҡ йөҙлө, яғымлы уҡытыусы Кәшфулла Лотфулла улы Ғәҙелшин ҡаршылай. Миннур Мирзаһит ҡыҙының күңелендә ул әле лә шулай һаҡлана. VIII синыфты Миннур Ғәлиуллина Туҡан урта мәктәбендә тамамлай. Артабан уны бөтөн Белорет районында дан ҡаҙанған билдәле педагог апаһы, математика уҡытыусыһы Флүрә Мирзаһит ҡыҙы Ғәлиуллина үҙе эшләгән Ишле урта мәктәбенә алып китә. Уларҙан башҡа ла өйҙә дүрт бала бар. Уны үҙенә терәк, атаәсәһенә ярҙам булһын, тип уйлағандыр инде. Әйткәндәй, Мирзаһит Вәлиулла улы менән Ғәлимә Ғимазетдин ҡыҙы Ғәлиуллиндар уҡытыусыны донъяла иң кәрәкле, иң изге һәм бөйөк һөнәр тип иҫәпләйҙәр, белемдең әһәмиәтен яҡшы аңлап, ул әҙәм балаларының барыһына ла тормошта тура юл күрһәтә, тип һанайҙар. Шуғалыр ҙа инде уларҙың баш балаһы Флүрә, һис икеләнеп тормайынса, уҡытыусы профессияһын һайлай һәм яңылышмай. Уның артынан Наилә Мирзаһит ҡыҙы Ғәлиуллина Татлы урта мәктәбендә урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып шөһрәт ҡаҙана. Ғәлиә Мирзаһит ҡыҙы Белорет педагогия училищеһын тамамлағандан һуң, Өфөгә балалар баҡсаһына эшкә ебәрелә, унда тәрбиәсе һәм оҙаҡ йылдар мөдир була. Фәниә Мирзаһит ҡыҙы Белорет педагогия училищеһын ҡыҙыл

диплом менән бөтөрөп, Башҡорт дәүләт университетын тамамлағас, Өфө ҡалаһы мәктәптәрендә эшләй. Миннур Мирзаһит ҡыҙы ла уҡытыусы булырға әҙерләнә, мәктәптә фән нигеҙҙәрен ныҡлап өйрәнә.

Барлыҡ ғаилә ағзаларының бер үк профессия кешеләре булып китеүендә, ғәҙәттә, атай йәки әсәйҙең һөнәре хәл иткес әһәмиәткә эйә була, ә Ғәлиуллиналарҙың уҡытыусы эшен күңел биреп ҡабул итеүҙәрендә уларҙың өгөтө генә лә мөһим роль уйнай. Өлкән апай буларaҡ, Флүрә Мирзаһит ҡыҙы бер туған һеңлеләренә матур өлгө күрһәтә. Заманында Белорет район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире И.Ҡ.Шәрипов, Флүрә менән Наилә Мирзаһит ҡыҙҙарын күҙ уңында тотоп, Ғәлиуллиналарҙы район мәктәптәренең тотҡаһы, ти торғайны.

1957 йылда Ишле урта мәктәбен алтын миҙалға тамамлағас, Миннур Ғәлиуллина Магнитогорск дәүләт педагогия институтының физика-математика факультетына уҡырға инә. Уны уңышлы бөтөрөп сыҡҡандан һуң, Силәбе өлкәһенең Верхнеурал районы Яңы Заматоша урта мәктәбендә хеҙмәт юлын башлай. Уҡытыу-тәрбиә эшенең тәүге тәжрибәләрен үҙләштереп, 1963 йылда ул, Миннур Үләмәева булып, Белоретҡа ҡайта. Ҡаланың 16-сы урта мәктәбендә математика һәм физика уҡытыусыһын ҡуш ҡуллап ҡаршылайҙар. Шулай итеп, Миннур Мирзаһит ҡыҙы башкөллө эшкә бирелә, апаһы Флүрә Мирзаһит ҡыҙы һымаҡ, методик әҙәбиәтте ныҡлап өйрәнә, дәрестә күп төрлө ысул һәм алымдар файҙалана, уҡыусыларҙы синыфтан тыш эштәргә әүҙем ылыҡтыра, ата-әсәләр менән хеҙмәттәшлек итә. Тырышлыҡ яҡшы һөҙөмтәләр бирә – балаларҙың өлгәше күтәрелә. Миннур Мирзаһит ҡыҙы талантлы уҡытыусы булып өлгөрә, коллегаларының һәм уҡыусыларҙың абруйын ҡаҙана.

Бөтөн Белорет ҡалаһы тормошон шаулатып йәшәгән педагог К.Ғ.Залалов Миннур Мирзаһит ҡыҙы Үләмәеваны 20-се мәктәпкә эшкә саҡыра. М.М.Үләмәева бында ла алдынғы уҡытыусылар сафына тиҙ арала инеп китә. Намыҫлы хеҙмәт кенә кешене күтәрә тигән хәҡиҡәт уның тормош девизына әйләнә.

К.Ғ.Залаловҡа ҡаланың 14-се урта мәктәбе өсөн яңы бина төҙөү бурысы йөкмәтелә. Мәктәп әҙер булғас, ул бер төркөм уҡытыусыларға, шул иҫәптән Миннур Мирзаһит ҡыҙына ла, яңы урынға эшкә барырға тәҡдим итә. Р.Г.Хазанкин, М.Г.Корыгина, З.Д.Сухова кеүек танылған педагогтар менән йәш уҡытыусы М.М.Үләмәева ла 14-се урта мәктәп коллективын ҡаланың алдынғылар сафына сығарыуға үҙ өлөшөн индерә, намыҫлы хеҙмәте өсөн Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ була.

1982 йылда М.М.Үләмәева Белорет 26-сы һөнәрселек-техник училищеһына физика уҡытыусыһы итеп саҡырыла. Йәштәрҙе төҙөүсе һөнәрҙәренә әҙерләгән был уҡыу һәм профессия биреү йортонда уҡытыу-тәрбиә эше урта мәктәп программаһы нигеҙендә алып барыла. Миннур Мирзаһит ҡыҙы училищела дәртләнеп уҡытырға тотона, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә педагогик хеҙмәттең ысын оҫтаһына әйләнә. М.Ф.Исхаҡова, Р.С.Фәткелисламова, Е.В.Кәбирова һымаҡ алдынғы уҡытыусылар менән бергә ул училищеның таяныһы булып таныла. Һиҙҙермәй генә 18 йыл үтеп китә. 2001 йылдың йәйендә М.М.Үләмәева хаҡлы ялға сыға. Тормош иптәше Риф Тимербай улы Үләмәев менән ике ул тәрбиәләп үҫтерә. Ҡайҙа ғына эшләһә лә, һәр урында Миннур Мирзаһит ҡыҙы уҡытыусылыҡты, апайҙары кеүек, бөйөк һөнәр күреп башҡара, йәштәргә төплө белем бирә. Ул уҡытыу-тәрбиә эшенә 40 йылдан ашыу ғүмерен бағышлай. Шулай итеп, Ғәлиуллиналар династияһының педагогик хеҙмәт стажы бөтәһе – күп тә түгел, аҙ ҙа түгел – 200 йылдан ашыу тәшкил итә!

# МИНДЕБАЙ БӘХТИӘР улы ЮЛМӨХӘМӘТОВ

*(1947)*



Миндебай Бәхтиәр улы Юлмөхәмәтовтың исем-шәрифтәре Башҡортостан зыялыларына яҡшы билдәле. Оҙаҡ йылдар мәғариф министры урынбаҫары булыу дәүерендә ул республикала был өлкәләге эште камиллаштырыуға, уны яңы баҫҡысҡа күтәреүгә күп көс һала, фиҙакәр хеҙмәт өлгөһө күрһәтә, байтаҡ дәреслектәр һәм ҡулланмалар авторы, педагогия фәндәре кандидаты булып тора.

Миндебай Бәхтиәр улы Юлмөхәмәтов 1947 йылдың 15 майында Башҡортостандың Учалы районы Ильинка ауылында эшсе ғаиләһендә донъяға килә. 1966 йылда урта мәктәпте тамамлағандан һуң, ул Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Уны уңышлы бөтөрөп сыҡҡас, йәш белгес тыуған районының

Иманғол урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй. Уның хеҙмәт юлы шулай башланып китә. Миндебай Бәхтиәр улының ойоштороу һәләтен һәм оҫта педагог булыуын күреп, Ҡунаҡбай урта мәктәбе директоры итеп тәғәйенләйҙәр.

Дәртле, талантлы директор мәктәптең уҡытыу-матди базаһын нығытыу өсөн барлыҡ сараларҙы күрә, ваҡытын да, көсөн дә йәлләмәй. Уның етәкселегендә хужалыҡ ысулы менән ҡыҫҡа арала ашхана, спорт залы, синыф бүлмәләре өр-яңынан йыһазландырыла. Белем биреү сифаты һиҙелерлек яҡшыра. Ҡунаҡбай урта мәктәбе районда алдынғы коллективтарҙың береһенә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыу буйынса методик үҙәккә әйләнә.

Был йылдарҙа Миндебай Бәхтиәр улы Юлмөхәмәтов уҡытыусыларҙың методик эшендә әүҙем ҡатнаша, йәмәғәт башланғысында район халыҡ мәғарифы бүлеге инспекторы вазифаһын башҡара. Ул башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының методик берекмәһе ултырыштарында доклад, күҙәтеү, мәғлүмәттәр менән сығыш яһай, педагогик матбуғатта, ғилми йыйынтыҡтарҙа үҙенең һәм алдынғы уҡытыусыларҙың тәжрибәләрен яҡтыртҡан мәҡәләләр баҫтырып сығара. Мәктәптә эшләгән йылдарҙа уҡ Миндебай Бәхтиәр улы Юлмөхәмәтов авторҙаш булып «Башҡорт мәктәбенең 4 – 7 кластарында кластан тыш уҡыу дәрестәре» тигән методик ҡулланма яҙыуҙа ҡатнаша һәм нәшер итеүгә өлгәшә. Уның «5 – 6 кластар өсөн туған әҙәбиәт» дәреслеге һәм башҡа методик әсбаптары уҡытыу-тәрбиә эшендә уңышлы файҙаланыла.

1986 йылда М.Б.Юлмөхәмәтов Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтының туған телдәр кабинеты мөдире итеп алына. Бында ул республика мәктәптәрендә туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыу методтарын һәм алымдарын камиллаштырыу буйынса әүҙем эшләй, туған телдәр уҡытыуҙы яҡшыртыу программаһын төҙөй, көнүҙәк мәсьәләләр буйынса ғилми-ғәмәли конференциялар үткәрә, уҡытыусыларҙың алдынғы тәжрибәләрен уртаҡлашыу буйынса сығыштарын ойоштора, имтихан билеттары һәм башҡа ҡулланмалар әҙерләй.

1987 йылда Миндебай Бәхтиәр улы Юлмөхәмәтов Башҡортостан Халыҡ мәғарифы министрлығына мәктәптәр инспекторы итеп тәғәйенләнә һәм шул уҡ йылда мәғариф министры урынбаҫары вазифаһына күсерелә.

Бына шунда М.Б.Юлмөхәмәтовтың бөтә көсөн биреп, киң ҡолас йәйеп эшләү майҙаны асыла, ғәйрәтле, талапсан һәм арымай-талмай хеҙмәт итергә яратҡан белгестең барлыҡ сифаттары асыҡ күренә. Баштан уҡ педагог етәксе эшкә ысын күңеле менән бирелә. Ул республиканың мәғариф системаһына реформа яһау, белем биреүҙең йөкмәткеһен үҙгәртеп ҡороу һәм уны артабан яҡшыртыу,

база уҡытыу пландары төҙөү, уҡытыу-тәрбиә эшенең алдынғы методтарын һәм алымдарын индереү менән ихлас шөғөлләнә.

Министр урынбаҫары М.Б.Юлмөхәмәтовтың туранан-тура етәкселегендә республикала мәғариф эшенә байтаҡ яңылыҡтар индерелә, мәктәптәрҙең уҡытыу пландары һәм дәреслектәр заман талаптары нигеҙендә ҡайтанан ҡаралып, үҙгәртеп яҙыла, уларҙы баҫтырып сығарыуға һәм мәктәптәргә үҙ ваҡытында таратыуға ҙур иғтибар бирелә.

Быларҙың һәммәһе лә Башҡортостанда уҡыусы балаларға белем һәм тәрбиә биреүҙең йөкмәткеһен байытырға, уларҙы республиканың яңы граждандары итеп тәрбиәләргә булышлыҡ итә. Хәҙер урта мәктәптәрҙе тамамлаған йәштәрҙең күбеһе юғары һәм башҡа уҡыу йорттарында белем алып, төрлө һөнәрҙәргә эйә булыуҙарын дауам итә, ҡалғандары тормош һәм хеҙмәт юлын уңышлы башлап ебәрә.

Мәғариф министры урынбаҫары М.Б.Юлмөхәмәтов, илебеҙҙә барған заман һулышын тәрән аңлап, уның талаптарын иҫәпкә алып, Башҡортостанда яңы уҡыу йорттары – гимназия, лицей, колледждар селтәрен үҫтереүгә етди ҡарай. Хәҙер республикала бындай типтағы уҡыу йорттары йылдан-йыл арта бара.

М.Б.Юлмөхәмәтов республиканың төрлө ойошма һәм учреждениеларында үткәрелгән бик күп йыйындарҙа Мәғариф министрлығы вәкиле булараҡ йыш ҡатнаша, уның позицияһын яҡлап сығыш яһай. Уҡыусы бала һәм үҫмерҙәрҙең тормошо, эше менән бәйле барлыҡ мәсьәләләргә лә урынбаҫар үҙ ҡарашын белдермәй ҡала алмай.

Миндебай Бәхтиәр улы Юлмөхәмәтов – мәғариф министрлығында эшләгән йылдарҙа ла дәреслектәр, методик ҡулланмалар яҙыуҙа һәм баҫтырып сығарыуҙа әүҙем ҡатнашҡан авторҙарҙың береһе. Уның авторҙашлығында 5-се синыф өсөн «Синыфтан тыш уҡыу китабы», 6-сы синыф өсөн «Синыфтан тыш уҡыу китабы», «Балалар баҡсалары өсөн башҡорт теле буйынса программа», «Йәйғор» уҡыу китабы, «Тормош һабаҡтары» исемле яңы предметтың һәр синыф өсөн программаһы һәм дәреслектәре төҙөлә. Был дәреслектәр, ҡулланмалар уҡытыу-тәрбиә эше алдына ҡуйылған яңы талаптарҙы иҫәпкә алып, юғары фәнни-методик кимәлдә яҙылыуы менән барлыҡ мәғариф хеҙмәткәрҙәренең иғтибарын йәлеп итә. Уларҙы уҡытыусылар, тәрбиәселәр үҙ эштәрендә көндәлек ҡулланма булараҡ файҙалана.

Шундай мәшәҡәтле, яуаплы һәм күп яҡлы хеҙмәт башҡарыуға ҡарамаҫтан, Миндебай Бәхтиәр улы Юлмөхәмәтов ғилми-тикшеренеү эштәре менән шөғөлләнергә ваҡыт таба. 1997 йылда ул Мәскәүҙә «Башҡорт мәктәбенең V – IX синыфтарында туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәре араһындағы үҙ-ара бәйләнештәрҙе тормошҡа ашырыу» темаһына диссертация яҙып, уңышлы яҡлай. Арҙаҡлы мәғариф хеҙмәткәре, педагогия фәндәре кандидаты эшкә яңы дәрт менән, ең һыҙғанып тотона.



## Автор тураһында

Башҡортостан Республикаһының халыҡ мәғарифы тарихын, күренекле мәғрифәтсе мөғәллимдәре, арҙаҡлы уҡытыусылары һәм мәғариф эшмәкәрҙәре тормошон, хеҙмәт юлын өйрәнеү, улар тураһында мәғлүмәт йыйыу – был китап авторы Камил Яҡшыгилде улы Яйыҡбаевтың күп йылдар буйы ҡыҙыҡһынып башҡарған шөғөлө. Ул – киң танылған журналист, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы.

Камил Яҡшыгилде улы Яйыҡбаев 1936 йылдың 30 ғинуарында республикабыҙҙың Ейәнсура районы Абзан ауылында колхозсы ғаиләһендә донъяға килә. Ул атаһының бер төркөм ир-азаматтар менән арбаларға ултырып, 1941 йылдың июлендә Бөйөк Ватан һуғышына ауылдан сығып китеүен яҡшы хәтерләй. Атаһы шул китеүҙән ҡайта алмай, Сталинград янында фашист илбаҫарҙары менән ҡаты алышта һәләк була. Әсәһе, бик уңған ҡатын, колхозда төрлө эштәр башҡара. 1946 йылда Камил Яйыҡбаев мәктәпкә уҡыуға төшә, яҡшы уҡый, һәр синыфты Маҡтау ҡағыҙҙары менән тамамлай. Башланғыс синыфтарҙа уны һәләтле уҡытыусы Ф.С.Усманова уҡырға-яҙырға өйрәтә, белем донъяһының тәүге серҙәрен аса. V – X синыфтарҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы А.М.Ваһапова, химиянан Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы Һ.В.Ғүмәров, урыҫ теле һәм әҙәбиәтенән Л.В.Лекарева, Л.Н.Красильникова, математиканан О.М.Үмәрғәлина, Л.Х.Хәлилова, тарихтан Г.М.Еникеева, физиканан Р.Ғ.Айҙағолов уға төплө белем бирә, донъяға ҡараштарын киңәйтә.

1956 йылдың 22 июлендә Абзан урта мәктәбен тамамлаған егерменән ашыу үҫмер Өфөләге юғары уҡыу йорттарына инеү теләге менән колхоз машинаһына ултырып юлға сыға. Камил Яйыҡбаев К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының тарих-филология факультетына уҡырға инә. Был уҡыу йорто Башҡорт дәүләт университеты тип үҙгәртелгәндән һуң, уны 1961 йылда бөтөрөп сыға. Университетта уға Ж.Ғ.Кейекбаев, Ғ.Ғ.Сәйетбатталов, Х.Ш.Зиннәтуллина, Б.М.Мәғәсүмова, Ш.Х.Чанбарисов, Ә.Ә.Еникеев кеүек күренекле ғалимдарҙан, талантлы педагогтарҙан белем алыу бәхете насип була. Университетты тамамлағанда Камил Яйыҡбаев атаҡлы ғалим Ж.Ғ. Кейекбаев етәкселегендә «Газетала очерк жанры» темаһына диплом эше яҙып, уңышлы яҡлай.

1961 йылда Камил Яйыҡбаев партия өлкә комитетының юлланмаһы буйынса Белорет районының «Ленин юлы» – «Урал» – гәзитенә эшкә ебәрелә, унда бүлек мөдире, тәржемәсе, мөхәррир урынбаҫары вазифаларын башҡара. 1963 йылда ул республика Халыҡ мәғарифы министрлығының «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналына эшкә саҡырыла, унда бүлек мөдире, яуаплы сәркәтип булып оҙаҡ йылдар, сирек быуатҡа яҡын, эшләй. Шул осорҙа Камил Яйыҡбаев «Мәктәп байрамдары» китабын (1977, 1979, 1982), «Ҡыҙыҡлы был донъя» әсбабын баҫтырып сығара, яңы программалар төҙөүҙә, география, тарих дәреслектәрен башҡорт теленә тәржемә итеүҙә ҡатнаша. Хеҙмәттә өлгәшкән уңыштары өсөн Камил Яҡшыгилде улы Яйыҡбаев республика Халыҡ мәғарифы министрлығы, Рәсәй Федерацияһы Халыҡ мәғарифы министрлығының Маҡтау грамоталары менән бүләкләнә. К.Я.Яйыҡбаевҡа 1980 йылда – Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, 1985 йылда Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре тигән маҡтаулы исемдәр бирелә.

1986 йылда К.Я.Яйыҡбаев «Пионер» журналы редакцияһына яуаплы сәркәтип булып күсә. Журнал 1992 йылда «Аманат» тип атала башлай. К.Я.Яйыҡбаев уның баш мөхәррире итеп тәғәйенләнә һәм был вазифаны намыҫлы башҡара. 1995 йылда ул Афғанстанда һәләк булып ҡалған ир-егеттәр тураһында «Төйәгенә ҡайта торналар» исемле китап баҫтырып сығара. Гәзит-журналдарҙа уның мәҡәләләре әленән-әле донъя күреп тора.

*Л.К. Ғәлинурова*

# Йөкмәткеһе

**Баш һүҙ урынына** ........ 3

**Октябрь революцияһына тиклемгә осор** ........ 15

Аҡмулла (Камалетдинов Мифтахетдин Камалетдин улы) (1831 – 1895) ... 16
Бессонов Александр Григорьевич (1848 – 1917) ........ 18
Биксурин Мирсәлих Мөрсәлим улы (1819 – 1903) ........ 20
Зәки Шәмсетдин (Ғөбәйҙуллин Шәмсетдин Йәрмөхәмәт улы) (1822 – 1865) ... 23
Камалый Зыя (Камалетдинов Зыяитдин Ямалетдин улы) (1873 – 1942) .. 26
Катаринский Василий Владимирович (1846 – 1902) ........ 29
Күкләшев Сәлихйән Әхмәтйән улы (1811 – 1878) ........ 31
Обухов Михаил Иванович (1871 – 1943) ........ 34
Өмөтбаев Мөхәмәтсәлим Ишмөхәмәт улы (1841 – 1907) ........ 35
Рәсүлев Зәйнулла Хәбибулла улы (1833 – 1917) ........ 38
Шаһиәхмәтов Мөхәмәҙинур Шаһинур улы (1879 – 1922) ........ 41
Әбделғәзизов Лотфулла Кәлимулла улы (1866 – 1913) ........ 43

**Революциянан һуңғы һәм колхозлашыу осоро (1917 йылдан башлап – 30-сы йылдар)** ........ 45

Абыҙбаев Ибраһим Хафиз улы (1901 – 1945) ........ 46
Айыуханов Закир Насир улы (1889 – 1961) ........ 48
Галанова Лидия Андреевна (1876 – 1956) ........ 50
Ғисмәтуллин Ғабдулла Төхвәт улы (1883 – 1937) ........ 52
Дәүләтшин Ғөбәйҙулла Әхмәткирәй улы (1893 – 1938) ........ 54
Иҙелғужин Кәрим Абдулла улы (1895 – 1937) ........ 56
Ҡулаев Мстислав Александрович (1873 – 1959) ........ 58
Ниязбаев Ғәбделрәүеф Хәким улы (1884 – 1920) ........ 60
Рафиҡи Ғәли (Рафиҡов Ғәли Лотфрахман улы) (1890 – 1944) ........ 62
Сүнчәләй Шәриф (Сүнчәләев Шәрифулла Хәмиҙулла улы) (1885 – 1959) ... 64
Сәғитов Абдрахман Бикмөхәмәт улы (1898 – 1943) ........ 66
Ченәкәй Төхвәт (Ченәкәев Төхвәтулла Ғиззәтулла улы) (1893 – 1959) .... 68
Әбүбәкиров Риза Вахит улы (1902 – 1938) ........ 70
Ямалиев Сәләх Ямалетдин улы (1889 – 1938) ........ 72

**Һуғыш һәм һуғыштан һуңғы осор (40 – 50-се йылдар)** ..... 74


Вәлиев Тәвҡәлүн Хаммат улы (1896 – 1960) ..... 75
Ғәниева Фатима Нуретдин ҡыҙы (1909 – 1989) ..... 77
Еникеев Мәхмүт Әхмәтйән улы (1887 – 1959) ..... 79
Исхаҡов Ибраһим Ғата улы (1892 – 1985) ..... 81
Ихсанов Ғимат Сөләймән улы (1899 – 1956) ..... 83
Ишбулатов Ғәйнулла Ғөбәйҙулла улы (1903 – 1975) ..... 85
Мамлиева Кәримә Сәлимгәрәй ҡыҙы (1887 – 1962) ..... 87
Мирсәйетов Ғабдулла Сәйет улы (1891 – 1969) ..... 88
Мәҡсүтов Шәрифйән Сәйетгәрәй улы (1897 – 1976) ..... 90
Скобелев Николай Евграфович (1910 – 1964) ..... 92
Солтанов Биктимер Солтан улы (1892 – 1966) ..... 93
Сәғәҙәтов Һиҙиәт Сәғәҙәт улы (1896 – 1968) ..... 95
Тулвинский Шәйхулла Сибәғәтулла улы (1886 – 1970) ..... 97
Хафизов Динмөхәмәт Сәмәхужа улы (1883 – 1966) ..... 99
Хәмзин Хәбибрахман Лотфрахман улы (1885 – 1976) ..... 101
Чанышев Әҙеһәм Миҙхәт улы (1902 – 1985) ..... 103


**Яңы бейеклектәр дәүере (60 – 80-се йылдар)** ..... 105


Александров Андрей Александрович (1936) ..... 106
Ардаширова Асия Миңлеғәли ҡыҙы (1923 – 1999) ..... 108
Арыҫланов Роберт Мөтиғулла улы (1934) ..... 110
Баҡаев Файзрахман Һибәтулла улы (1905 – 1984) ..... 113
Ғайсин Сулпан Абдулхаҡ улы (1935) ..... 116
Ғөбәйҙуллин Исмәғил Ибраһим улы (1924) ..... 118
Ғәлләмов Абдрахман Әбдрәхим улы (1926 – 1989) ..... 121
Дәүләтбирҙин Сәлихйән Хафиз улы (1927) ..... 123
Зайлалова Сажидә Хәмәтйәр ҡыҙы (1919) ..... 125
Залалов Карам Ғәлимйән улы (1921) ..... 128
Заһитов Ғабдулла Ғиниәтулла улы (1918) ..... 130
Зотов Виктор Никифорович (1925 – 1996) ..... 132
Еникеева Гөлкәй Мәхмүт ҡыҙы (1929) ..... 134
Искәндәрова Хәнифә Сиражи ҡыҙы (1928) ..... 136
Исламова Фәһимә Ғәббәс ҡыҙы (1925) ..... 138
Ишемғолова Аврора Булат ҡыҙы (1928 – 1990) ..... 140
Йыһаншин Сабир Шәйәхмәт улы (1924) ..... 142
Йәнбарисова Зәйтүнә Һәйбән ҡыҙы (1931) ..... 145
Камалова Лира Шәриф ҡыҙы (1935) ..... 147
Карамов Мөҙәрис Карам улы (1927) ..... 149
Кәримов Ғайса Көнәфиә улы (1925 – 2000) ..... 151
Ҡазыева Йәүһәрә Санбаш ҡыҙы (1929) ..... 154
Лоҡманова Нәзифә Фәррәх ҡыҙы (1930) ..... 156
Мостафин Мөхәмәт Ибраһим улы (1926) ..... 158
Мостафина Фатима Хәмит ҡыҙы (1913 – 1998) ..... 160
Мөниров Яхия Ноғоман улы (1932) ..... 163

Мулдашев Әкрәм Искәндәр улы (1924) ........ 166
Мәғзүмов Муллый Факаетдин улы (1927) ........ 168
Нафиҡов Марат Абдрафиҡ улы (1928 – 1996) ........ 170
Ниязғолова Наилә Сәйфетдин ҡыҙы (1932) ........ 172
Өмөтбаева Сәлимә Мөхәмәтсафа ҡыҙы (1931) ........ 174
Псәнчин Вәли Шәғәли улы (1930) ........ 176
Рәмова Рәйсә Мирфәйез ҡыҙы (1937) ........ 178
Сыртланов Рафиҡ Шәрәфетдин улы (1927 – 2001) ........ 180
Сөйәрғолова Мөслимә Мәхмүтдин ҡыҙы (1934) ........ 181
Сәғиҙуллин Хәйҙәр Сәйфулла улы (1928) ........ 183
Сәғитов Ирек Хаммат улы (1932 – 1996) ........ 185
Сәлимов Хәмзә Камалетдин улы (1930) ........ 187
Сәлихова Мөслимә Төхвәт ҡыҙы (1928) ........ 188
Үтәғолов Рамаҙан Исмәғил улы (1930) ........ 191
Фәритов Хәбир Салауат улы (1913 – 1997) ........ 193
Фәтихов Ғабдулла Нафиҡ улы (1914 – 1998) ........ 195
Шәфиев Гәрәй Гәрәй улы (1920 – 1996) ........ 197
Әбделмәнов Салауат Хөсәйен улы (1937 – 2002) ........ 199
Әхмәҙуллин Рәйес Әхмәҙулла улы (1934) ........ 202
Әхтәмова Мәйсәрә Сәләхи ҡыҙы (1930) ........ 204
Юламанов Әхиәр Мозафар улы (1929 – 1970) ........ 206
Яҡупова Ғиффәт Хәниф ҡыҙы (1923) ........ 207
Яппаров Миҙхәт Зәйләғи улы (1931) ........ 209
Ярышев Нәжиб Ғәфүр улы (1931) ........ 211
Яубаҫаров Хөсәйен Хәсән улы (1925 – 1997) ........ 214

**Баҙар иктисады шарттарында (90-сы йылдар – өс меңенсе быуат башы)** ..... 217

Аҙнағолов Рафаил Ғәйнетдин улы (1941) ........ 218
Атнағолова Светлана Вәли ҡыҙы (1940) ........ 220
Баһауетдинова Миңнехана Ишмөхәмәт ҡыҙы (1953) ........ 222
Бураҡаева Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы (1943) ........ 224
Галин Салауат Әхмәҙи улы (1934) ........ 226
Ғүмәров Сәлимйән Йәләл улы (1933) ........ 229
Ғәбиҙуллин Фәнзил Нәғим улы (1939) ........ 231
Калуцкая Мария Михайловна (1950) ........ 233
Мөхәмәтйәнова Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы (1950) ........ 235
Нафиҡов Марс Марат улы (1948 – 1999) ........ 238
Нагаев Валерий Сәлим улы (1949) ........ 240
Толомбаев Хәсән Абдулла улы (1935) ........ 242
Ураҡсина Рәсимә Миңлебулат ҡыҙы (1950) ........ 244
Үләмәева Миннур Мирзаһит ҡыҙы (1940) ........ 246
Юлмөхәмәтов Миндебай Бәхтиәр улы (1947) ........ 248

*Автор тураһында* ........ 251

Учебное издание

**ЯИКБАЕВ Камил Якшигильдеевич**

# Учителя-просветители, выдающиеся педагоги и деятели народного образования

*(на башкирском языке)*


| | |
|---|---|
| Редакция мөдире | *Т.С.Хәбибуллина-Дәүләтбирҙина* |
| Мөхәррире | *Х.З.Солтанғолова* |
| Биҙәлеш мөхәррире | *Ф.Ф.Ислахов* |
| Техник мөхәррире | *Н.Г.Пятаева* |
| Корректорҙары | *Э.М.Ниғмәтуллина, Ә.Й.Илекәева* |
| Компьютерҙа йыйыусылар | *В.Н.Баһауетдинова, Ф.Б.Суфиянова, Г.А.Раянова* |
| Нәшергә әҙерләүсе | *Р.М.Өмөтбаев* |

Нәшр. лиц. № 04380; 26.03.01. Йыйырға бирелде 23.04.03. Баҫырға ҡул ҡуйылды 28.07.03. Ҡағыҙ форматы $60 \times 90^1/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Таймс гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 16,0. Шартлы буяу отт. 16,5. Иҫәп-нәшер таб. 13,04. Өҫтәмә тираж 1000 дана. Заказ № 8280.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Өфө полиграфия комбинаты дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

КИТАП